# шоңқар



3*2011


Өйҙә – өйҙәш,
Яңғыҙ саҡта – иптәш,
Юлда – юлдаш,
Һағышлыға – моңдаш,
Йоҡоһоҙға – төндәш,
Иманлыға – диндәш,
Һәр кемгә лә тиңдәш,
Барыһына ла – яҡташ,
Ғашиҡтарға – серҙәш,
Аҡыллыға – фекерҙәш,
заңдаш, замандаш,
рухташ...
ИНДЕКС 73867
Журналға икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылыу башланды!
«Шоңҡар» журналы –
ЗАМАНСА ЗАУЫҠ,
МИЛЛИ ЙӨКМӘТКЕ

№3(128)*2011

ОС ИРЕККӘ, БАШҠОРТОСТАН!

1994 йылдың 1 ғинуарынан башлап нәшер ителә.

*Башҡортостан йәштәренең айлыҡ ижтимағи-сәйәси, әҙәби-нәфис журналы*

БАШҠОРТОСТАН ЙӘШТӘРЕ ЖУРНАЛЫ
шоңҡар

## БЫЛ ҺАНДА:


**САМАУЫРҘЫ ЙЫҠҠАНСЫ**



Ләйсән ШӘРИПОВА.
Үҙгәрермен, йә нимәләр мине үҙгәртер. 2

**СӘСМӘҮЕР**



Нияз АЛСЫНБАЕВ.
Йәйге селлә. Повесть. 9

**ВЕРНИСАЖ**
Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.
Ысынбарлыкты шулай күрәм. 39

**БЕҘҘЕҢ АШ-ҺЫУ** 41

**2011 – МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ**
Гөлгөнә МАЛИКОВА.
Рухиәт күперҙәре. 42

**БИЗМӘНГӘ ҺАЛЫП**
АЙЗИРӘК.
Ишекте асығыҙ, әммә һак булығыҙ: йәш белгес килә! 47

**ИМАН НУРЫ**
Илшат ҒӘТИӘТУЛЛИН.
Тәрбиә. 49

**БЕҘҘЕҢ ЖУРНАЛ ТЫШЫНДА**



Морат ҒАРИФУЛЛИН.
Йөҙ ҙә бер арғымакка торорлок. 52

**ЙӘШӘЙЕШ**
Милә НУРИМАНОВА.
Ғаилә бәхете – ожмахтың үҙе. 56

**ИЛҺАМ**
Гөлфиә ЮНЫСОВА.
Гөлгизәр ФӘЙЗИ.
Шиғырҙар. 60

**ӘСӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ**
Гөлсинә БАЙҒУЖИНА.
Ашамаған балаларға әкиәт. 64

**КӨҘГӨ АЛДЫНДА**
Филиә БУЛАТОВА.
Һомғол күренеүҙең еңел ысулы. 66

**ҺАУЛЫҒЫМ – БАЙЛЫҒЫМ**
Л. ҒӘЙНИТДИНОВА.
Тибет медицинаһы аҡылы. 69

**ОҪТА ҠУЛДАР**
Вәсилә ЗАРИПОВА.
Борон ирҙәр бәйләм бәйләгән. 72

**ШӘХЕС**



Азат ЮЛАН.
Аҡһаҡ Тимер. 74


шоңҡар ИНТЕРНЕТТА: WWW.SHONKAR.RU
www.video.shonkar.ru
www.music.shonkar.ru
http://vkontakte.ru/club13743478
http://www.facebook.com/#!/profile.php?id=100000936043132

# ҮҘГӘРЕРМЕН, ЙӘ НИМӘЛЕР МИНЕ ҮҘГӘРТЕР…



ГЕРОЙЫБЫҘ МЕНӘН АРАЛАШҠАН, ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ИТКӘН, ДУҪЛАШҠАН КЕШЕЛӘР УНЫҢ ҺӘР ЭШКӘ ЕТДИ ҠАРАУЫН, ЫҢҒАЙ КӨЙЛӘНЕШ БИРЕҮЕН, ЯҢЫЛЫҠТАН, ЭКСПЕРИМЕНТТАН ҠУРҠМАУЫН БИЛДӘЛӘЙ. УНЫҢ ИЖАДИ ТОРМОШО ТӨРЛӨ ЯҠЛЫ ҺӘМ БАЙ. БӨГӨНГӨ «САМАУЫР»ҘА ҠУНАҠТА – БАШҠОРТ ЭСТРАДАҺЫНДА ҮҘЕНЕҢ ИКМӘГЕН НАМЫҪЛЫ ЭШЛӘП АЛҒАН (ҺӘМ ШУНЫҢ ӨСӨН ГЕНӘ ЛӘ АЙЫРЫМ ИХТИРАМҒА ЛАЙЫҠ) ЙЫРСЫ, ҠУРАЙСЫ, АЛЫП БАРЫУСЫ, ҠЫҪҠАҺЫ, БЕРӘҮҘЕ ЛӘ БИТАРАФ ҠАЛДЫРМАҒАН ҮҘЕНСӘЛЕКЛЕ ШӘХЕС – М. ҒАФУРИ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ АКАДЕМИЯ ДРАМА ТЕАТРЫ АКТЕРЫ – СӘҒИҘУЛЛА БАЙЕГЕТ.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Сәғиҙулла кем ул: ваҡыты менән йырлап йөрөүсе актермы, әллә ваҡыты менән театрҙа уйнап йөрөргә мәжбүр булған йырсымы?*

**Сәғиҙулла.** Әллә инде. Икеһе лә бер тигеҙ минең өсөн. Эшләй башлағас та һайлау ҡуйғайнылар инде – йә театр, йә эстрада тип. Уйлармын тинем дә, әле һаман уйлап йөрөйөм *(көлә)*. Театрға был сәнғәт төрөнөң асылын татып ҡарау теләге алып килгәйне. Йәшерен-батырыны юҡ, баштараҡ аҡһай инем, үҙемде хатта зәғиф итеп тойҙом, ир булыуыма ҡарамаҫтан, ятып илар сиккә еткән саҡтар ҙа булды. Ете-һигеҙ йыл тирәһе театрҙа эшләүе, уны үҙ итеүе, ғөмүмән театр сәнғәте ауыр бирелде. Был йәһәттән ҡай берәүҙәр төрттөрә лә торғайны, әммә атҡарып сығам тигән ышаныс көслө булды. Бер башлаған эште аҙағына тиклем алып барып еткерергә тырышам. Театрҙа хеҙмәт итеүемә хәҙер ун биш йыл булып китте, күңегелде лә инде. Бөгөнгө көндә театр сәнғәтен йөҙ процентҡа беләм тип әйтә алмайым, шулай ҙа алға китеш бар. Драма актеры булып киттем тип әйтергә лә телем әйләнмәй, ә бына комедия ролдәрен килтереп сығара алам. Ҡайһы ваҡыт режиссер күрмәгәнде лә күреп ҡуяһың.

Ғөмүмән, театр – ижад булһа, ғаиләне тәьмин итерлек күберәк килемде эстрада алып килә. Әлбиттә, йыр сәнғәте шулай уҡ күберәк сығымдар ҙа талап итә. Әммә йыр, ҡурай, бейеү менән сәхнәлә ләззәт кисерәм, нисек бармын, шулай сығыш яһайым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Эстрада күберәк килем килтергәс, ниңә театрҙа эшләргә?*

**Сәғиҙулла.** Кешегә барыбер тотороҡло бер эш урыны кәрәк. Дәүләт ҡарамағында булыуың, бер яҡтан, ниндәйҙер ҡыйыҡ һымаҡ та, бер ярҙам итмәһә лә, бер ярҙам итеүе ихтимал. Икенсенән, театрҙың исеме ҙур, лайыҡлы эш урыны. Ижади кимәлем үтә юғары булмаһа ла, театрға кәрәкмендер тип уйлайым. Һәр хәлдә директор булһам, үҙем кеүек кешеләрҙе эштән ебәрергә ашыҡмаҫ инем. Сөнки фатиры бар, исеме бар, кәрәк саҡта сығып йырлап халыҡтың күңелен күтәрә ала. Шуларҙы иҫәпкә алғанда ла, файҙа килтерә. Эшкә аҙыраҡ һүңлап йөрөһә лә... *(көлә)*. Өсөнсөнән, театрҙан китһәм, филармонияла эшләргә тейеш булам. Ә унда, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, күңел тартмай.

Ҡыҫҡаһы, бер яҡтан мәжбүри булһа, икенсе яҡтан эстрада менән театрҙы айырып ҡарауы ауыр минең өсөн.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Һеҙҙең өсөн "Бер актерҙың театры" (театр одного актера) тип аталған моно-спектакль ҡуйылыуын теләр инегеҙме?*

**Сәғиҙулла.** Булды һәм бар ундай уйҙар. Хәҙер донъя бик ҡыҙыҡ бит. Заманында Ғайса пәйғәмбәр тыуған, аҙаҡ Ислам дине барлыҡҡа килгән. Бөгөнгө көндә кешелек тағы ла бер күсмә осор кисерә. Әле мин Л. Хей, М. Норбеков кеүек авторҙарҙың психологияға бәйле шундайыраҡ китаптарын уҡыйым, уларҙың системаһы буйынса көн дә күнекмәләр эшләйем. Нисәлә тороуға ҡарамаҫтан, иртән һәм ятыр алдынан уҡый торған доғаларым бар. Мейе аҫты ҡатламдары менән ҡыҙыҡһынам. Әлбиттә, ундай нәмә менән үтә мауыҡһаң, "ҡыйыҡ" китеүе лә ихтимал. Шуға ла үҙеңде контролдә тотоп ҡына эш итергә кәрәк. Был, ғөмүмән, өйрәнелмәгән өлкә, уның ярҙамында тауҙар актарырға була, кешеләр хатта яман шештән ҡотола.

Быны менән нимә әйтергә теләйем: ошондай моно-спектакль аша кешегә юл күрһәтергә, йүнәлеш бирергә була. Сөнки кеше хәҙер төшөнкөлөккә бирелгән, ышанысын юғалтҡан. Магазиндарҙа йәнең теләгән әйбер бар, әммә кешенең күңелендә нимәләр етмәгән һымаҡ. Ошондай спектаклдә үҙеңде, кешеләрҙе яратыуҙы, кисерә белеүҙе һ.б. күрһәтеп, халыҡты арбарға булалыр тип уйлайым. Сөнки күптәр үҙ күңеленә юл табырға теләй, ләкин аскыс ярата алмай. Спектаклдә кисергән тойғолар китап уҡығанда алған тәьҫораттарҙан айырыла. Ләкин уны нисек ҡуйырға? Режиссер һәм драма авторы кәрәк.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Психология менән мауығырға нимә этәргес булды?*

**Сәғиҙулла.** Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, нимә этәргес бирергә мөмкин?..*(көлә). (Етдиләнеп).* Был юлға баҫыуыма 2004-2005 йылдағы ваҡиғалар сәбәпсе булды. "Өс егет"те әҙерләп, театрға ла, эстрадаға ла өлгөрәйем тип йөрөгән ваҡытҡа тура килде ул. Өйләнеүгә лә күп ваҡыт үтмәгәйне, буйҙаҡлыҡ менән хушлашыу ҙа ауырыраҡ булғандыр инде. Концерттан һуң дискотекалар үткәрә торғайныҡ, йәшермәйем, араҡыһын да эстек, шунлыҡтан йыш ҡына йоҡо туймай ине. Хәҙер аңлайым: организм һәр бер стрестан үҙенең көсө менән еңеп сыға килгән дә, хәлдән тайған, күрәһең. Бер көндө, гастролгә китеп барғанда, юлда ҡапыл ауырый башланым. Дөрөҫөн генә әйтәм, унан алда бер нисә көн байрам иткәйнек. Бер аҙна тирәһе оло яраУ, аппетит булманы, ашай ҙа, эсә лә алманым. Һурыҡҡандан һурыға барып, бер йәй эсендә 10 кг ауырлыкты юғалттым. Бер-бер артлы әле ашҡаҙан, әле ҡолаҡ менән дауаханала ятырға тура килде. Тормошома башҡаса бағыуҙың нигеҙе тап шунда һалынғандыр.

Бер ҡолағымдан 12 көн буйы туктауһыҙ эрен аҡты. Шул ваҡыт Гөлдәр Ишкыуатованың "Сәғиҙулла, ныҡ ҡыйын булһа, әсәйеңдә иҫкә ал" тигән һүҙҙәре иҫкә төштө. Һаман туктамағас, күҙҙе йомоп, әсәйҙән ярҙам һораным. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, иртәгеһенә эрен тымды. Сыҡҡас, ҡәйнәмдән дебеттән кәпәс бәйләтеп алдым, яҙға тиклем шулай һыуыҡтан һаҡландым.

Мәскәүгә сессияға барғанда шул кәпәсте "модалырағына" алыштырғайным, тағы баш ауырта башланы. Апатияға бирелдем. Нимә эшләргә белеп булмай, Хоҙай үҙенә алһа йә

алып ҡуймай, тип аптыранып йөрөгәндә бер апайҙың "Обливайся, поможет" тигән һүҙҙәре хәтергә төштө. Дауахanala ятҡанда янымдан үтеп барышлай ғына әйткәйне ул был һүҙҙәрҙе, хәҙер йөҙөн дә хәтерләмәйем инде. Кис көнө бер тас һыуҙы бүлмәгә әҙерләп ултыртып ҡуйҙым да, таң менән ваннаға барып баш аша түңкәрҙем. Шулай 5 көн ҡабатланды. Алтынсы көнгә кәйеф күтәрелде, урамда ҡыҙҙар окшай башланы. Һыҙлау бөттө. Шунан һуң М. Норбековты ҡулға төшөрҙөм, Луиза Хейҙың китаптарын уҡыным. Тәүҙә күнекмәләр эшләнем, яйлап-яйлап визуализация, медитация серҙәренә төшөндөм. Уйҙарҙың нисек тормошҡа ашканын һәм уларҙың нисек ярҙам иткәнен аңланым.

Бер нәмәгә инандым: тәртип тигән әйбер бар. Шул тәртип боҙолһа, организмда хаос башлана. Мәҫәлән, минең ҡолаҡ ауырыуым бауырҙан башланып китте, эске ағзалар бер-береһенә бәйле, баҡһаң. Береһен дауалаһаң, икенсеһе мотлаҡ һауығасаҡ.

Медитация ваҡытында, ағзаларың менән һөйләшкәндә, үҙеңә күберәк позитив энергия бирһәң, мейе үҙенән-үҙе эшмәкәрлеген ыңғай яҡҡа бора. Сөнки мейенең йыһан менән бәйләнештә булыуын тикшереүселәр иҫбатлаған да инде. Ниндәй генә уйҙар уйлама, барыһы ла йыһанға бара һәм һиңә кире әйләнеп ҡайта. Негатив менән ауырыуҙарҙы дауалап булмай. Позитив уйҙар һәм мөхәббәт иммунитетты нығыта, көс бирә. Шулай итеп, ошо китаптар ярҙамында яйлап-яйлап тәнгә йән ингәндәй булды, йәйгә тиклем өс-дүрт килограмм йыйҙым. Бөгөнгө көндә үҙемдә һау-сәләмәт, балаларыма ризыҡ табырлыҡ атай тип әйтә алам, Аллаға шөкөр.

Һеҙгә лә һорау бирәйем әле. Ауыртыу дошманмы, әллә дуҫмы?

**"Шоңҡар"ҙар.** *Дуҫтыр. Сөнки дуҫ ҡына, нисек кенә ауыр булмаһын, һиңә яҡшылыҡ теләгәндән, тураһын әйтә. Ауыртыу аша организм сигнал бирә, иҫкәртә, тимәк.*

**Сәғиҙулла.** Эйе, ысынлап та шулай. Күп кешеләр ауыртыуҙы дошман тип ҡабул итә. Дарыу эсә башлай. Дарыу бит ул ваҡытлыса баҫа ғына. Тура дарыуханаға йүгерергә кәрәкмәй. Шундай ауырыуҙар бар: кеше ауыртыуҙы һиҙмәй. Әгәр берәй ағза ауырта икән, һин уға рәхмәт кенә әйтергә тейешһең. Иғтибарығыҙҙы ауыртҡан ерегеҙгә йүнәлтеп ҡараһағыҙ, ул хатта нығыраҡ һыҙлап киткән һымаҡ була. Һәм һин көн дә организмың менән яратып һөйләшһәң, ыңғай тойғолар ебәрһәң, уй барыһын да тәртипкә килтерә башлай.

**"Шоңҡар"ҙар** (С. Байегеттең һорауға яуап биргәндә күҙен йомоп һөйләүенә иғтибар итеп). *Һеҙ ни өсөн күҙегеҙҙе йомоп һөйләйһегеҙ?*

**Сәғиҙулла.** Сөнки фекерҙе туплауы еңелерәк, көмбәҙ асылған һымаҡ. Һорауға яуапты ситкә китмәйенсәрәк бирергә ярҙам итә. Сәхнәлә лә шулай: күҙҙе йомһаң, онотолаһың, тулыһынса иркенлек тояһың. Кешенең тәбиғәтенә хастыр инде ул, бигерәк тә халыҡ йырҙарын башҡарғанда күҙҙе йоммайынса йырлай алмайым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Сәхнәгә сығыр алдынан мотлаҡ үтәй торған ниндәй ҙә булһа ритуалдарығыҙ бармы?*

**Сәғиҙулла.** Спектакль алдынан үҙеңде көйләү тигән әйбер бар. Йәғни иртәнсәк тораһың да, көҙгөгә ҡарап, нык итеп йылмаяһың, көслөп, яһалма рәүештә көләһең, бейеп ебәрәһең. Ҡыҫҡаһы, һинең алда бер иҫәүән тора. Хәҙер балалар ҙа өйрәнеп бөттө инде, башта аптырап ҡарай торғайнылар. Минең өсөн был бигерәк тә комедия уйнағанда ярҙам итә. Үҙенә күрә таҙарыныу ул.

Концерттарҙа иһә, минең исемде иғлан итер алдынан ниндәйҙер көс килгән кеүек, дәрт уянып китә һәм сәхнәгә сығып, рәхәтләнеп күңел асаһың. Ихласлыҡ бөркөп, ыңғай энергетика менән сыҡһаң, халыҡ та һиҙеп тора бит ул.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Һеҙҙе плагиатлыкта йыш ғәйепләйҙәр. Шуға ла "Планеталар параде" һеҙгә яңылыҡ булмағандыр?*

**Сәғиҙулла.** Ысынлап та, Башҡортостанда плагиатлыҡ менән шөғөлләнгәндәрҙең иң беренсеһе миндер тип уйлайым. Төрөк, инглиз, рус йырҙарының көйөн алам, әммә һүҙҙәрен үҙем яҙам, ә тәржемә итмәйем. "Планеталар параде"на килгәндә иһә, ҡыҙыҡлы проект, дөрөҫ билдәләнегеҙ, минең өсөн артыҡ яңылыҡ булманы. Шулай ҙа унда еңеүгә өлгәшеүем шатландырҙы.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Был еңеүегеҙ өсөн нимә менән бүләкләнеләр?*

**Сәғиҙулла.** Аллаһы бойорһа, Байконур космодромына барып, космосҡа ракета осороуҙы ҡарап ҡайтыу мөмкинлеге менән. Бәлки, скафандр кейҙереп, үҙебеҙҙе лә осорорҙар. Быныһы минең бәләкәй сактағы хыялым, әлбиттә.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Үҙегеҙҙән көлөргә ратаһығыҙмы?*

**Сәғиҙулла.** Үҙеңде мәрәкәләп алыу ҡамасауламай, әлбиттә, комплексарҙан арындыра ул. Алйоттарға йәшәүе еңелерәк тиҙәр бит. Шуның кеүек, ысынлап та, әҙерәк кенә "нормаль булмауҙан" ҡурҡырға кәрәкмәй.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Ролдәр ижад иткәндә режиссерҙар импровизацияға урын ҡалдырамы?*

**Сәғиҙулла.** Режиссерҙарҙың алымдары төрлө. Шулай ҙа ҡайһы ваҡыт текста яҙылмаған берәй һүҙ тел осона килә ул, әйтмәйенсә булдыра алмайһың. Әммә уның менән мауығырға ярамай. Шаштырып ебәреү килешмәй. Ҡайһы бер пьесаларҙы актерҙар баштан уҡ үҙҙәре эшләп ала. Шулай уҡ классик әйберҙәр бар, уларға хатта өтөр ҙә өҫтәргә ярамай.

Ҡайһы берҙә тамаша халыҡҡа сыҡҡас ҡына урынына етеп ҡуя. "Гипнотизер" тигән спектакль, мәҫәлән, менталитетҡа тап килмәгәнгәме, башта ауырыраҡ бирелде. Бер нисә мәртәбә уйнағас ҡына образға инеп китә алдым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Ошоға хәтле уйнаған ролдәрегеҙ араһынан иң төп һәм иң ҡыҙыҡлы ролде атай алаһығыҙмы?*

**Сәғиҙулла.** Н. Ғәйетбаевтың "Әй әттәгенәһе, ирем ҡайтты!" пьесаһындағы ролемдән бик ҡәнәғәт ҡалдым. "Өс егет"те ҡуйғандан һуң Фидан ағай Ғафаров: "Һиҙҙеңме, ҡустым, хәҙер ҡалған ролдәрең дә шулай китәсәк", – тигәйне. Ошо тамашаға хәтлем театрҙа ниндәйҙер иркенлек етмәй ине, унан һуң инде, ысынлап та, тәмен татып алдым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Хыялығыҙҙа йөрөткән уйнарға теләгән ролегеҙ бармы?*

**Сәғиҙулла.** Миңә хас булған ниндәйҙер бер көслө драма әҫәрен уйнағы килә.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Бәлки үҙегеҙ ижад итерһегеҙ ул әҫәрҙе...*

**Сәғиҙулла.** Ысынлап та, ҡайһы ваҡыт берәй нәмә яҙырға ине тип уйлап ҡуяһың. Әммә драма әҫәре ижад итеүе ни тиклем ауыр икәнен аңлайым. Бына Зөһрә Буракаева – көслө сценарист, ул булдырыр ине. Әммә драма әҫәре тыуҙырыу оҙаҡ ваҡыт талап итә, ә уның ваҡыты юҡ. Сөнки күп артистар сценарий буйынса Зөһрәгә мөрәжәғәт итә. Шулай ҙа киләсәктә пьеса яҙыр ул тип уйлайым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Театрға ҡағылышлы үҙегеҙҙе борсоған мәсьәләләр...*

**Сәғиҙулла.** Мәскәүҙә сессияла булғанда спектаклдәргә йыш йөрөй торғайным. Шунда үҙҙәрен иркен тойоуҙары менән публика таң ҡалдырғайны. Билет хаҡы 2-3 мең булһа ла, зал шығырым тулы. Актер килеп сығыу менән алҡышлап ҡаршы алалар. Бәлки, унда менталитет икенселер. Улай тиһәң, элек, Арыҫлан Мөбәрәковтар уйнаған саҡта, беҙҙә лә шулай булған. Халыҡ үҙенең ихтирамын алҡышлау аша белдергән. Ә бөгөн улай түгел.

Тағы ла театр артистарының китап яҙмауы борсой. Китап тарихта һаҡлана торған әйбер, матур иҫтәлек булыр ине. Арыҫлан ағай Мөбәрәков тураһында китап булһа, мәҫәлән, рәхәтләнеп уҡыр инем. Үҙемдең фекерҙәремде, ҡаҙаныштарымды һирәк-һаяҡ булһа ла 2-3 битләп компьютерҙа яҙып барырға тырышам. Йәйләп йыйыла. Бәлки, киләсәктә йыйынтыҡ итеп сығарырмын.

**"Шоңҡар"ҙар.** *"Ысын талант ас булырға тейеш" тигән фекер менән килешәһегеҙме?*

**Сәғиҙулла.** Бәлки, ысынлап та шулайҙыр. Нишләптер, асыҡһам, кәйеф күтәрелә, нимәләр эшләге килә, ниндәйҙер һүҙҙәр килә башҡа. Шуға ла ас булыу сәнғәт кешеһенә кәрәктер, тип уйлайым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Һеҙҙе һуңғы тапҡыр кем һәм нимә өсөн тәнҡитләне?*

**Сәғиҙулла.** Иҫләмәйем. Күп нәмәне тәнҡит тип ҡабул итмәйем, шуғалыр, бәлки. Үпкә һүҙҙәре ишетһәм, кисерәм. Гәзиттәрҙә баҫылған мәҡәләләргә көлөп кенә ҡарайым. Психология буйынса китаптар уҡый башлағас, тәнҡит һүҙҙәрен, миңә ҡарата булған үпкәләрҙе, ҡырын ҡараштарҙы күрмәй башланым. Баҡһаң, аңламайынса үҙ-үҙеңде негатив менән ябып бөтәһең икән, һәм бар донъя һиңә ҡаршы тип хис итәһең. Күнекмәләр ярҙамында шуларҙы алып ташлайһың да, донъяға башҡасараҡ бағаһың, кешенең ыңғай яҡтарын күрә башлайһың.



**"Шоңҡар"ҙар.** *Театраль тормошоғоҙ менән ҡәнәғәтһегеҙме, ролдәр етәме?*

**Сәғиҙулла.** Етә, Аллаға шөкөр. Ғөмүмән, үткән йыл минең өсөн бик уңышлы булды. Бәлки минең йылым булғанғалыр. Ғаиләм менән Төркиәгә барып ял итеп ҡайттыҡ, президент грантын алыуға ирештем, "Хәтәр мегаполис" тигән мюзикл, башҡа проекттар эшләнем, "Планеталар парады"нда еңеп сыҡтым, "Юлдаш" каналының режиссеры булдым. Сағырыуҙар, Аллаға шөкөр, бер-бер артлы булып торҙо. Өйҙәң ҡыйығын ябып ултыртып ҡуйҙыҡ.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Мюзикл тигәндәй, "Хәтәр мегаполис" шулай уҡ яңы йүнәлештәге проект булды. Ҡабатланыуы көтөләме?*

**Сәғиҙулла.** Эйе, джаз оркестры солғанышында, тере тауышҡа сығыш яһағайныҡ. Әммә халыҡ аңлап етмәне, ахыры, антракттан һуң ярты зал, күпселек ололар, сығып китте. Ҡабатларбыҙ тип уйлайым.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Үҙегеҙҙе тулы кимәлдә шоумен тип әйтә алаһығыҙмы?*

**Сәғиҙулла.** Шоу – беҙҙең өсөн, бәлки, яңы алымдыр... Эйе, әйтә алам. Хатта ғорурланып әйтә алам, сөнки концерт алып барғанда ҡайһы бер ағайҙар пародиялай башланы үҙемде. Үҙенә күрә ул да уңыш.



**"Шоңҡар"ҙар.** *Сәхнәгә сыҡҡас, хәрәкәт-ҡылыҡтарығыҙ менән айырылаһығыҙ. Махсус рәүештә эшләнәме ул, әллә имиджмы?*

**Сәғиҙулла.** Ниндәйҙер хәрәкәттәргә иғтибар бирмәйем. Әгәр мин сәхнәгә сыҡҡанмын икән, сәхнә минеке, үҙемде унда хужа тип уйлайым һәм бар күңелемде һалып башҡарам йырҙарымды. Сәхнәлә иң мөһиме нимә? Ихласлыҡ. Ябайлыҡ. Әммә ябайлыҡтың да сиге булырға тейеш. Юғиһә, ҡайһы бер артистар популярлыҡ яулай башлаһа, шаяртҡанда кендектән аҫҡа төшә башлай. Беҙгә килешеп бөтмәй ул, шул хәтлем бысраҡ күренә.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Театр һәм сәхнәнән тыш үҙегеҙҙе ниндәй өлкәлә аса алыр инем тип уйлайһығыҙ?*

**Сәғиҙулла.** Юҡҡа ғына продюсер факультетында уҡыманым инде, унда директор, етәксе булырға өйрәтәләр. Егерменән ашыу проектым бар бөгөнгө көндә. "Байегет" тип аталған йыр студияһы эшләй. Яҡшы балта оҫтаһы булыр инем, моғайын. Ағас эшен яратам. Бәлки насар булмаған тракторсы ла сығыр ине, заманында был һөнәр буйынса ла эшләп алырға тура килде. Шәхси предприятие асып, ағас менән дә шөғөлләнеп алдым. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Шулай ҙа сәнғәтһеҙ йәшәй алмаҫ инем.

Ошоға бәйле бер миҫал. Төркиәлә ун көн буйы диңгеҙ буйында ял иттек: ашайһың, эсәһең, ҡыҙынаһың. Биш-алты көндән эс ауырта башланы, температура күтәрелде. Саҡ түҙеп, һигеҙ көн үткәс, ҡайтып киттек. Самолеттан килеп төшкәйнек, шундай рәхәт! Ожмах ҡайҙа ул тиһәләр, ул минең тыуған төйәгем тиер инем. Шуның кеүек, ниндәй генә һөнәр һайлаһам да, минең өсөн ожмах – ул сәнғәт. Сөнки мин унда һыуҙағы балыҡтай йөҙәм. Ун биш йыл эсендә ниндәйҙер тәжрибә туплағандан да түгел, сөнки ул минеке, ул минең ҡанымда, Хоҙай Тәғәләнән бирелгән. Аллаһы бойорһа, шөкөр итеп кенә йәшәп, ошо юлдан яҙҙырмаһын ине тигән теләктәмен. Хатта етәксе вазифаһын тәкдим итһәләр ҙә, баш тартам.

**"Шоңҡар"ҙар.** *Күп кенә билдәле шәхестәр, шул иҫәптән театр артистары ла, тамада ролендә сығыш яһай бөгөн. Быға ҡарашығыҙ?*

**Сәғиҙулла.** Ыңғай ҡараштамын. Беҙҙең заман кешеһе хәҙер нисегерәк акса эшләргә тип уйлай, театрҙа ла бар ундайҙар. Башҡорттар араһында иң ҡиммәтле тамадаларҙың береһе – Сәғиҙулла Байегет. Артистарҙы шул корпоративтар ҡоткара ла инде. Элек ҡайҙалыр ситтә акса эшләү мөмкинлеге булмаған. Бына болондо күҙ алдына

килтерегеҙ әле, унда сәскәләрҙең ниндәйе генә юҡ. Шуның кеүек хәҙер мөмкинлектәрҙең сиге юҡ, теләк һәм күрә белеү генә кәрәк.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Йәш йырсылар араһынан кемдәрҙең ижадтарын баһалар инегеҙ?*

**Сәғиҙулла.** Нимә генә тип әйтмәһендәр, миңә Радик Юльяҡшин оҡшай. Тауышы булмаһа ла, үҙенә генә хас моңо бар. Йәштәрҙә үҙенә ылыҡтыра, хит эшләй белә, плагиатлыҡ менән дә шөғөлләнеп ала.

Тәүҙәрәк уның миңә мөрәжәғәт итеүе оҡшап етмәй ине, “һаумы, Сәғиҙулла, хәлдәрең нисек?” тип өндәшә торғайны, яйлап өйрәтеп алдым. Мин уларҙың мәктәбенә барып сығыш яһағанда бәләкәс кенә булып, күҙҙәре янып торған, автографтар алып йөрөгән малай ине. Шул малай бер көн килеп, “Сәғиҙулла, хәлдәр нисек?” тип торһон әле.

Рәил Өмөтбаевты маҡтап үтер инем. Йырҙар ижад итә, һәйбәт аранжировкалар эшләй. Эреләнеп тә йөрөмәй.

“Гөлсәр һандуғас”тың беренсе ҡарлуғастарын – Марсель Ҡотоев, Рөстәм Шаһыбалов кеүек егеттәрҙе атап үтергә була. Уларҙы телевидение күтәрҙе, ҡыҙғаныска ҡаршы, артабан күпселеге (Марсель менән Рөстәмгә генә ҡағылмай был) ҡапыл аптырап ҡалды. Шуға күрә бер төрләләк китте. Ә йәштәрсә поп стилендәге (йәғни Радик Юльяҡшин кеүек) башҡарыусыларҙың, йырҙары мәғәнәһеҙерәк булһа ла, ынтылыштары көслө, сөнки улар үҙ көстәренә таянып эш итә.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Спорт, машина...*

**Сәғиҙулла.** Спорт элек-электән яҡын миңә. Ун алты йәштән егерме дүрт-егерме бишкә хәтлем бодибилдинг менән шөғөлләндем. Ике йыл тирәһе йүгерҙем. Бына быйыл ғына әҙерәк туҡталып тора. Волейбол уйнарға, саңғыла йөрөргә яратам. Элек хоккей уйнарға әүәҫ инем, әммә күптән инде конькиға торған юҡ. Ҡыҫҡаһы, ир кешелә мускулдар булырға тейеш, май ултырып өлгөрөр әле тигән ҡараштамын.

Әле һауыҡтырғыс күнекмәләр комплексым бар. Ҡойонам. Медитация эшләйем. Шунан ғына ашарға ултырам.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Башҡортостандың атҡаҙанған артисының иртәнге ашы нимәнән ғибәрәт икән?*

**Сәғиҙулла.** Кефир эсәм тәүҙә, шунан геркулес ашайым.

Машинаға килгәндә, руль артына һуң ултырҙым мин. 2002 йыл “девятка” алдым. Уныһы ла мәжбүри тиһәң дә була. Телевизорҙан, сәхнәнән күренә башлағас, барыбер кешеләр иғтибар итә, күҙәтә, ниндәйҙер комплекс барлыҡҡа килә. Шуға машина алырға булдым. Егеттәрҙән аҡса һорап тороп, иҫке генә машина алдым. Унының тәү ултырғанда уҡ тәкөттөм. Күп тә үтмәй уны “99”-ға алмаштырҙым. Унан уң рулле “Тоуота”ға күстем, тәүге ултырғанда уҡ үкендем инде. Бер йылдан һатырға тура килде. Ул машина бер төкөлгән булған, шуғалыр, килешмәне. Хәҙер “Nissan Almera Classik”та йөрөйөм.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Йоҡлар алдынан ниндәй ғәҙәтегеҙ бар?*

**Сәғиҙулла.** Һуңғы арала кинолар менән мауығам, йоҡлар алдынан мотлаҡ берәй фильм ҡарайым һәм ниндәйҙер мәғәнә эҙләйем. Әммә күбеһе арзанлы булып сыға, фәһем алырлыҡтары һирәк.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Яратып ҡарағандары?*

**Сәғиҙулла.** Элек ужастар ярата торғайным, хәҙер комедиялар ылыҡтыра. Совет киноларынан “Любовь и голуби”, “Курортный роман”ды яратып ҡарайым, “Глобальная сеть, “Пятый элемент”, “Город ангелов”, “Законопослушный гражданин”, “Письма к Джульетте” тигән фильмдар оҡшаны.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Мөхәббәт бармы ул?*

**Сәғиҙулла.** Әлбиттә, бар. Мөхәббәт бик мөһим әйбер. Айырылышыуҙарҙың бер сәбәбе лә шул мөхәббәт булмауҙандыр. Мөхәббәттең бер тапҡыр ғына була торған иң ҙуры – һинең киләсәгең өсөн яуаплы, балаларыңа әсәй булыр ҡатыныңа ҡарата. Уны һаҡлар өсөн ваҡыты-ваҡыты менән аңлашып торорға кәрәк. Беҙ ҙә айына, ике айға бер мәртәбә асыҡтан-асыҡ һөйләшеп алабыҙ. Сөнки бер түшәк бүлешеп, икең ике яҡҡа ҡарап ятыу эш түгел бит. Бында хыянат тураһында һүҙ ҙә йөрөтөп булмай, әммә мөнәсәбәттәрҙе һаҡларға ана шул ваҡытында ойошторолған һөйләшеү мотлаҡ.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Һеҙҙе ҡатынығыҙ менән бер көндә тыуған тиҙәр...*

**Сәғиҙулла.** Эйе, икебеҙҙең дә тыуған көндәребеҙ 3 апрель, тик ул алты йәшкә генә кесерәк. Шулай тап килде.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Тимәк, Ҡуҙылар. Ике “тәкә башы” бер ҡаҙанға һыямы һуң?*

**Сәғиҙулла.** Бер-беребеҙ менән нык тап килгәнбеҙ тип уйлайым. Элегерәк көнләшә торғайным, хәҙер ул ғәҙәтемде ташланым, Аллаға шөкөр. Ул да мине көнләшмәй. Өйләнгәндә үҙгәрәсәкмен, тип вәғәҙә итҡәйнем, йә булмаһа мине берәй нәмә үҙгәртер ул тигәйнем, ысынлап та шулай булып сыҡты. Ҡатын-ҡыҙға ирҙең ҡасан ҡарашы үҙгәрә? Гүзәл зат әсәй булып, ҡулына бәпес тотҡас, бөтөнләй икенсе төрлө ҡарай башлайһың, уға ихтирамың арта. Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы – әсә булыу. Мин үҙем әсәйемдең күкрәк һөтөн өс йәшкә хәтле имгәнмен, һәм тап ошо әсә һөтө бөгөнгө көндәге ауыр ваҡыттарҙа ла, үрҙә әйтеп үткәнемсә, нык ауырығанда, ярҙам итә. Әгәр әсәйем күкрәк һөтөн биреп еткермәгән булһа, кем белә?..

**“Шоңҡар”ҙар.** *Ҡатынығыҙ ниндәй һөнәр эйәһе?*

**Сәғиҙулла.** Айгөл – иҡтисад өлкәһендә, бухгалтер булып эшләй.

**“Шоңҡар”ҙар.** *Фатирығыҙ бармы?*

**Сәғиҙулла.** Эйе, Аллаға шөкөр. Заманында “ағайҙарҙы” урамда осратҡанда, оят булһа ла,

“Фатир юк бит әле”, – тиеберәк кинәйәләгәйнем, булыр тинеләр, һәм ике айҙан булды ла. Көҙгә, Аллаһы бойорһа, Нагаеволағы өйгә күсергә ине иҫәп. Әле төҙәләш эштәре менән ҡайнайбыҙ.

**“Шоңҡар”ҙар**. *Балаларығыҙҙың үҙегеҙҙең юлдан китеүен теләр инегеҙме?*

**Сәғиҙулла.** Минең балаларға ҡарата тәрбиәүи ысулдарым бар. Билдәле бер юлды көсләп тағыу яғында түгелмен. Бала төрлө яклап үсешергә тейеш, шуға барыһына белгән тиклем әҙләп-әҙләп булһа ла өйрәтергә тырышам: инглиз, төрөк телен, мәсәлән. Башкортсанан – руссаға, руссанан татарсаға тәржемә иттерәм. Әүһәләктә эйгәндә лә ваҡытты бушка уҙғармайбыҙ, төрлө телдә һанап булһа ла торабыҙ, йә өйрәнгәндәрен ҡабатлайбыҙ. Улым Арыҫлан, мәсәлән, дүрт йәштә укырға өйрәнде, яҙып та маташа ине. Хәҙер уның менән йөрөгәндә күберәк математика буйынса һораүҙар бирәм. Йүнәлеш бирергә кәрәк, әлбиттә. Ҡыҙым Наҙгөлгә “һин үҫкәс Жанна д'Арк кеүек ҡыйыу ҡыҙ булырһың”, улыма “ә һин президент булырһың”, тип маҡсат ҡуям. Бер көндө улым: “Атай, ә нисә йәштән президент булырға мөмкин?” – тип һорай. “38-40 йәштән”, – тип яуаплайым. “Атыу мин утыҙ һигеҙ йәшкә тиклем повар булам да, аҙаҡ президент булырмын, йәме”, – ти. “Ярай, – мин әйтәм, – үҙең ҡара”. Балаларға көн һайын ун биш-егерме минут булһа ла ваҡыт бүлергә кәрәк.

**“Шоңҡар”ҙар**. *Ныҕыраҡ кемгә оҡшағанһығыҙ: атайығыҙғамы, әсәйегеҙгәме? Атайығыҙ уҫал булды тинегеҙ, уның был сифатын үҙегеҙгә алғанһығыҙмы?*

**Сәғиҙулла**. Эйе, миндә атайҙың һыҙаттары бар, уҫаллығы ла. Уның ҡарашынан хатта эттәр ҡурка торғайны. Ҡыҙыбыҙ, бәләкәй булғанғамы, үҙһүҙле бигерәк. Шуға ир һәм атай буларак мәмәй булырға тейеш түгелмен. Ҡатын-ҡыҙ шундайыраҡ зат бит инде, йомшаҡ икәнеңде һиҙеп ҡалһа, елкәңә менергә әҙер генә тора (көлә). Атайым дәү кәүҙәле була торғайны, көрәшсе булды. Матур йырланы. Йыр-моңға һәләт унан күскән, күрәһең.

**“Шоңҡар”ҙар**. *Етешһеҙ яктарығыҙ?*

**Сәғиҙулла**. Ҡыҙыумын. Әммә мин уны еңергә тырышам, уның өҫтөндә эшләйем. Был беҙҙең токомға хас һыҙат ул. Токомобоҙҙо ла “бире” тип йөрөттөләр бит.

**“Шоңҡар”ҙар**. *Йола буйынса, “Самауыр” ҡунағы журнал укыусыларға теләктәрен дә еткерә.*

**Сәғиҙулла**. Йоклар алдынан “минең иртәге көнөм шул хәтле якшы, уңышлы үтәсәк, кәйефем якшы буласаҡ, мин көндән-көн үҙемде якшыраҡ тоям, көндән-көн шәбәйәм” тип бер ун биш мәртәбә ҡабатлайым. Иртән торғас тағы шундай теләктәр теләйем. Был “күнекмәләрҙе” сентябрь айынан башлағайным, шунан һуң бер-бер артлы уңыш килеп кенә торҙо. Шуға башкаларға ла әйтер һүҙем шул: күберәк ыңғай уйҙар менән йәшәгеҙ, сөнки улар негативка ҡарағанда әллә нисә тапкырға көслөрәк, иммунитетка вирустарға ҡаршы тororлок һәләткә эйә. Бер-береңә ихтирамлы мөнәсәбәттә булыу, ғәфү итә белеү зарур.

Үҙебеҙҙе ғорур (эре түгел) тотоп, меҫкенләнмәй генә йәшәйек. Беҙ укырға килгән осорҙа автобуста һөйләшеп китеп барһаң, “эй, перестаньте говорить на своем туземском языке” тип тыя торғайнылар. Ә хәҙер үҙеңде иркен тотоп, үҙ телеңдә рәхәтләнеп һөйләшеү мөмкинлеге бар. Донъя кимәленә сығырға кәрәк. Ҡурҡырға ярамай. Балалар үҙ телен дә, башҡаһын да белһен.

***Әңгәмәне ҡағыҙға Ләйсән ШӘРИПОВА теркәне.***



*Нияз АЛСЫНБАЕВ*

# ЙӘЙГЕ СЕЛЛӘ

Повесть

***Авторҙан.*** *Әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғалар уйлап сығарылған, тимәк авторға йәки тормоштағы башҡа шәхестәргә, уларҙың биографияһына бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы юҡ. «Шоңҡар» журналы уҡыусыларына ҡыҫҡартылған варианты тәҡдим ителә.*



## ЛЕТУЧКА

Июль. Редакцияла тын алғыһыҙ эҫе. Бүлмәгә селлә ҡояшы иртә таңдан уҡ төшә лә, көн уртаһына уны ҡыҙ-ған мунса хәленә еткерә. Шуға ла Морат, гәзиттең махсус хәбәрсеһе, төшкө аштан һуң берәй ергә сығып олағыу яғын ҡарай.

Бөгөн дүшәмбе, летучка көнө. Йыйылыштың ауыр үтәсәгенә шикләнмәй ине. Сәбәбе шунда – нишләптер уның фельетонын шәмбе һанынан алып ташланылар. Баш мөхәррир ҡушты тип кенә аңлаттылар. Ни өсөн? Ошо һорауҙы күтәрергә самалай ине Морат Ҡондоҙбаев.

Йәйге осорҙа күпселек коллективтарҙа летучкаларҙы кисектереп торалар. Морат бер заман, әле яңы эшкә урынлашкан мәле ине, шул хаҡта ниҙер әйтә башлағайны, Рафаил Ғүмәрович ауыҙын да астырманы.

– Бәлки һеҙҙә, телевидениела, дөйөм летучкалар булмай ҙа торғандыр...

Был һин әлегә беҙҙең кеше түгел, һәр хәлдә бер аяғың менән генә килеп кергәнһең. Ә икенсе аяғың иһә әллә урамда, әллә элекке эш урынында, уныһы миңә ҡыҙыҡ түгел. Оҡшамай икән, ана бара юлың тигәнде йомшартып әйтеү ине.

– ...уныһы миңә ҡараңғы. Ләкин был республика гәзите. Ответственность огромная (Ниндәйҙер мөһим фекер әйтергә теләһә, Рафаил Ғүмәрович урыҫса һүҙ-ҙәр ҡыҫтыра башлай). Беҙҙең үҙ тәртибебеҙ, уны һин дә, мин дә уйлап сығармаған.

Башҡалар өндәшмәне. Бер Азат ҡына ғәҙәтенсә ҡарашын түбәгә төбәп, мыңғырлап ҡуйҙы, әммә тауыш-тын сығарырға ҡыймады. Ҡуркты, тыңҡыш. Баш мөхәррир урынбаҫары Эльвира Вәкилевна, ҡыркты уҙған яңғыҙаҡ ҡыҙ, тиҙерәк ҡыҫыла һалды.

– Эйе, сит монастырға үҙ уставың менән инмәйҙәр. Дөрөҫ-дөрөҫ, Рафаил Ғүмәрович!

Баҡа ботон ҡыҫтырған. Монастырь, имеш. Эйе, һинең һымаҡ карт ҡыҙҙар өсөн монастырь... Хужа тынысланды, шулай ҙа киң күңеллек күрһәтеп, мин әйттем дә бөттөм рәүешендә битараф ултырған Моратка һүҙ ҡатты:

– Коллега, ә шулай ҙа фекереңде асыҡлап үт әле. Беҙ һине бик-бик иғтибарлап тыңлайбыҙ.

Рафаил Ғүмәровичтың түбәнһетә төшөп өндәшеүе Мораттың йәненә тейҙе. Ҡайҙа башҡалар? Ә Азат һуң, Азат? Бына әле генә, ун-ун биш минут элек тәмәке көйрәткәндә, алда торған йыйылышты пыр туҙҙырып ташлағайны. Рәмил Зөфәрович та ҡушылғайны. Шайтандар. Әле ауыҙҙарына һыу уртлағандар. Хәйер аңлашыла – хужа кем дә, Морат кем? Эскелек арҡаһында элекке эшенән ҡыуылған шикле бәндә...

– Ярай, асыҡлап үтәм. Минеңсә, көн һайын планерҡалар үтеп торһа, шул етә. Бүлек мөдирҙәре ҡарарәмерҙәрҙе беҙгә, ябай хеҙмәткәрҙәргә еткерә һәм вәссәләм. Ә дөйөм летучкаларҙың файҙаһы юҡ. Сөнки бер-береңде тәнкитләү, аҡыл өйрәтеп маташыу коллективты тарҡата. Төркөмдәр барлыҡҡа килә. Икенсенән, барыбер ул кәңәштәрҙе тотоусы юҡ. Өсөнсөнән, бер ижади кешенең икенсеһен тәнкитләп, уның яҙғанына баһа биреп маташыуы ахмаҡлыҡ...

– Ахмаҡлыҡ? – Баш мөхәррирҙең былай ҙа ҡыҫаланыҡы күҙҙәре быялалар аша һикереп сыға яҙҙы. Хатта пеләш түбәһенән ғәжәпләнеү оскондары сәсрәп киткәндәй булды. Мораттан быны көтмәгәйне.

– Эйе, Рафаил Ғүмәрович. Шағир булһынмы ул, яҙыусымы, журналисмы, һәр кем үҙенсә «аҡылдан ша-ша». Ул бит ижад кешеһе. Йәғни саҡ ҡына «тегеләйерәк», ненормальныйыраҡ. Шулай булғас, бер псих икенсе психҡа нисек кәңәш бирә алһын?

– Тимәк, беҙ барыбыҙ ҙа аҡылға зәғифтәр? Ярай, аңлашылды. Рәхмәт, коллега, фекерегеҙ бик ҡыҙыҡлы булды.

Шуның менән һүҙ бөттө. Баш мөхәррир бынан ары Моратка фәҡәт «һеҙ» тип өндәшеүгә күсте. Яҡшыға түгел. Аҙаҡ, шул иҫтәлекле йыйылыштан һуң, бәғзе берәүҙәр килеп теләктәшлек белдереп китте китеүгә. Һай, уҡыттың да инде ҡартты, тинеләр. Афарин. Дөрөҫ әйтәһең. Шайтаныма кәрәкме ул летучкалар. Ана, Мәскәү баҫмаларында дежур тәнҡитсе лә, бының һымаҡ дөйөм йыйылыштар ҙа юҡ. Йәшәйҙәр ҙә баһа, лутсы хеҙмәт хаҡын өҫтәһендәр ине.

Морат ишеккә яҡыныраҡ урын алды. Блокнотын тотҡан Гөлназ эргәһенә килеп ҡунды. Тәмле хушбуй еҫе аңҡып китте. Ҡыҙ әллә ниндәй сәскәләр, оҙон керпекле ҙур-ҙур күҙҙәр төшөрә башланы.

Зәбирә Хәбировна дежурный. Ул сарафа ныҡлап әҙерләнгән, таң менән матурлыҡ салонына ла инеп сыҡҡан. Күркә. Юҡ, бытбылдыҡ. Юҡ, шулай ҙа күркә. Сәсен ала-солалы итеп буяткан, өҫкә күтәртеп тарап, лаклап ҡатырған. Улары ана түбәһендә тигеҙ майҙансыҡ булып һылашып ятҡан. Тәтелдеге сығып теҙә генә, кәһәрең. Был ҡыҫҡа тотмаясаҡ, аҙна дауамында донъя күргән һәр мәкәләне уҡыған. Хәҙер барыһының да йөкмәткеһен бәйнә-бәйнә һөйләп сығасаҡ. Кемгә көсө етә, йылмайып ҡына «сағып» аласаҡ. Үҙе яҡлыларға теймәйәсәк...

Зәбирә апай, селлә ҡояшы кеүек, ҡыҙыша башланы. Тәүҙә ҡулын һелтәмәйенсә генә һөйләй ине. Хәҙер рәхәтләнеп сәбәләнә. «Әммә ләкин» дә, «әммә ләкин». Шул бер мәғәнәһеҙ һүҙбәйләнешен һөйләм һайын ҡыҫтыра башланы. Тутыйғош. Ҡайҙандыр әрһеҙ себен пәйҙә булды. Булды ла апайыбыҙҙың тәкәтен коротор-ға тотондо. Ауыр бомбардировщик кеүек геүләп осоп үтте, тәнкитсенең лаклап ҡатырылған түбәһенә ҡунырға маташты. Күрәһең, ялпаҡ «майҙансыҡ»ты – аэродром, ә сәс ҡыҫтырғысының ҡояш нурында баҙлап янған ялтырсаларын ултырыу уттары тип уйлай ине. «Аэродром» ҡабул итмәгәс, асыулы «бомбардировщик» түңәрәк яһап осорға кереште. Күрәһең, яғыулығын бөтөргәнсе йөрөргә самалай. Үәт, мөртәт. Хәҙер Зәбирә Хәбировна менән ярышып бызылдарға тотондо. Телмәр тотамы ни! Әммә тегеһенә дәғүәсе кәрәкмәй булып сыкты, көндәшенә дәфтәре менән һелтәнде. «Үлтер, улым, фашисты!» Шулай тигәнме әле бөйөк шағир эр Ниғмәти? Шап! Эх, яҙа китте... Мә һиңә, ҡәбәхәт, мә һиңә, тағы ла! Саҡ-саҡ йәлпәштерә һуҡманы, әммә себендең көнө бөтмәгән икән. Үҙенә янаған ҡот осҡос фажиғәнән ҡасып, баш мөхәррир ргә ҡарай осто. Яғаһында ҡурсаулыҡ тапты. Йәшәһен тыныслыҡ! Ура, иптәштәр!

Бына Гөлназдың тетмәһен тетергә лә сират етте. Ул балалар йортонан очерк яҙғайны. Ышандырмай, һис тә ышандырмай тине дежурный. Унан, ҡағыҙҙа ятлатҡан уҡытыусы кеүек, фекерен тағы ҡабатланы. Ышандырмай, коллегалар, һис тә ышандырмай. Ошо урында бер мәҙәк иҫенә төштө. Ниндәйҙер йомош менән театрға барып сыҡҡайны Морат. Иртәнге мәл ине. Артистар премьераға әҙерләнә. Егет менән ҡыҙ, сәхнә ситендәге фанер ҡайынға терәлеп, ялҡынлы мөхәббәт һүҙҙәрен һөйләй. Режиссер ышанмайым да ышанмайым тип сабаууллап йөрөй. Күҙҙәре аларған, кескәй генә ҡулдарын йәштәрҙең танау алдында болғай, унан йүгереп барып ултырғысына ҡунаҡлай. Ирендәре ға-

шиктарҙың һүҙҙәрен тауышһыҙ ғына ҡабатлай. Ышандырмай, ышандырмай. Ҡулъяулығы менән маңлайын һөртөп ала. Саҡ ҡына күҙәтеп ултыра ла, бесәйҙәй талпынып сәхнәгә һикереп менә. Ышанмайым, ышанмайым!

Был тәнкитсе апай үҙен бөйөк Станиславский тип хис итәме икән әллә? Ышандырмай, имеш.

– Балалар күңелен төшөнөү өсөн, йәғни уларҙың ҡайғы-хәсрәтен дә, шатлығын да, изге өмөттәрен дә яҡшыраҡ аңлау өсөн шул мөхиттә йәшәү кәрәктер ул, хөрмәтле коллегалар. Шулай бит?

«Хөрмәтле коллегалар» өндәшмәне. Һәр кем үҙ уйына сумған.

– Шулай бит?

Талапсан яңғыраған «шулай бит»те күптәр йәнә ҡолаҡ ситенән уҙғарып ебәрҙе. Тик нервылары йомшағыраҡтар ғына терт итеп ҡалды, уйһыҙ-ниһеҙ баш ҡаҡҡан булды. Зәбирә апай, элекке уҡытыусы, халыҡты уята белә. Бәлки уның «шулай бит»ен телефон уяткысына сигнал итеп яҙҙырырғалыр? Исмаһам, эшкә һуңлаусылар кәмеп ҡалыр ине.

– Һиңә бер-ике йыл приютта йәшәп алырға кәңәш итәм, – тип шыбырланы Морат күршеһенә. Гөлназ рәсем төшөрөүен ҡуйып дежурныйға төбәлеп ҡатҡайны. Күҙҙәрендә – ризаһыҙлыҡ. Аҫҡы иренен бүлтәйтеп үсегеп ултыра. Әммә, дөрөҫөрәге, «әммә ләкин», дежурный апай әйтмешләй, быныһы ла килешә үҙенә. Сибәр, барыбер сибәр, шайтан ҡыҙ.

– Нишләп, Морат ағай?

– Балалар күңелен төшөнөү өсөн! Йәғни уларҙың ҡайғы-хәсрәтен, шатлыҡтарын һәм изге өмөттәрен яҡшыраҡ аңлау өсөн...

Гөлназ пырх итеп ҡалды. Бына ирмәк, күпме акса үҙ янымда ҡаласаҡ. Юғиһә, фатир ҡуртымы өсөн генә лә тотош хеҙмәт хаҡым китә бит. Морат ҡыҙҙың уйын ишетеп торғандай өҫтәй һалды:

– Унда ашау-йәшәү бушлай, ти, ризалаш та ҡуй...

Гөлназ йәнә пырхылдап көлөп ебәрҙе. Дежур апай дауам итте.

– Ҙур ҡыҙыҡһыныу менән Морат Ҡондоҙбаевтың «Ҡандала» шәлкемендәге сираттағы фельетонын уҡыным. Оператив яҙылған, уҫал яҙылған.

Зәбирә Хәбировнаның тауышында ҡорос сыңлауы. Бындай тауыш менән хәрби енәйәтселәрҙе хөкөм итәләр, убырлы ҡарсыҡтарҙы усаҡта яндыралар. Сығыштың ҡалғаны гел «бөтөрөү»ҙән тора ине.

– Әммә, иптәштәр, был мәҡәлә донъя күрмәне. Сөнки әҙер түгел ине! Оперативлылыҡ – мәғлүмәттәрҙе тикшермәй, ярым-яртлы хәлдә номерға биреүҙе аңлатмай. Юҡ, аңлатмай, иптәштәр!

Әһә, нимәләр асыҡлана башланы. Ҡаран-Йылға районынан яҙылған «Ә күпер ҡайҙа?» мәҡәләһе тураһында бара ине һүҙ. Морат ғәҙәттәгесә хат тикшерергә барғайны. Хикмәт шунда: райүҙәктән ун биш кенә саҡрым алыҫлыҡта ятыусы Бишкәрәк ауылы күпере емерек хәлдә, ә етәкселек ҡыбырларға уйламай ҙа. Халыҡ ярты йыл инде түбәнге яҡтан паром менән йөрөй, ҡырҡ саҡрымлап урау юл үтә...

– Зәбирә апай, бына ошо урындан ентекләберәк һөйләгеҙ әле.

Морат урынынан тауыш бирҙе.

– Нимәһен һөйләйһең инде? Һинең яҙғаның, нисек әйтергә... бигүк дөрөҫ түгел.

– Бына нисек? Ә ауыл халҡының күмәк хаты? Ә фотоһүрәттәр? Уларҙы бит һауанан алып булмай.

– Нишләп булмаһын? Хәҙер компьютер заманы лаһа...

Телмәрсе артығын ыскындырғанын аңлап шып туҡтаны. Нәҡ ошо мәлдә Азат ҡул күтәрҙе лә, баш мөхәррирҙең баш ҡағыуын рөхсәт биреү тип ҡабул итеп, ярһып һөйләй башланы:

– Иптәштәр, беҙҙең бүлек тураһында бик йылы һүҙҙәр әйтелде. Рәхмәт, әлбиттә. Ләкин Ҡондоҙбаевтың фельетоны аҙнаның иң шәп, иң көнүҙәк мәҡәләһе булды! Дөрөҫөрәге, булырға тейеш ине. Был һис шикһеҙ, коллегалар! Мин уҡыным уны. Зәбирә Хәбировна, ғәфү итегеҙ, һеҙ нимә һөйләгәнегеҙҙе үҙегеҙ ҙә аңламайһығыҙ, шикелле. Морат һымаҡ эшләргә кәрәк әле...

Яңы фетнә ине был. Уны яралғыһында уҡ баҫыу фарыҙ. Һүҙгә Рафаил Ғүмәрович ҡыҫылды. Өҫтәленән ниндәйҙер ҡағыҙ күтәреп күрһәтте. Һаҡ ҡына кире һалды. Тауышы ғәҙәттәгесә сыҡһа ла, хужаның асыулы икәнен һиҙергә була ине.

– Бына сигнал! Район башлығы үҙе яҙған! Кире ҡағыу хаты! Ҡондоҙбаев күпер юҡ тип яҙа, ә глава менән бишкәрәктәр күпер төҙәк ти. Кемгә ышанырға? Йә әйтегеҙ?

Ошо урында баш мөхәррир өҫтәлгә ручкаһын ташлап ебәрҙе. Хәүефһеҙ урын таптым тип ирәүән ултырған себен тертләне, осоп китте. Уның быҙылдауында бөтә донъяға асыу, ризаһыҙлыҡ ишетелгәндәй ине. Һис кемгә лә ышанырлыҡ түгел, юҡ, түгел. Летучка ошо урында тамам булды. Ҡондоҙбаевҡа ҡалырға ҡушылды.

***

Рафаил Ғүмәрович, коллективтағы йәшертен ҡушаматы Ҡыҫалағүҙ, илле йәшенәсә дөрөҫ йәшәмәгән икән. Был хаҡта уға бер туған бажаһы асыҡтан-асыҡ ярып һалды. Эйе, ярып һалды ла ҡуйҙы, күңеленә яҡын алыр, үпкәләр тигән уй башына ла инеп сыҡманы, шикелле. Бәлки, ингәндер ҙә, ләкин әйтте лә һалды инде. Рафаилдың юбилейы ине. Шуны лайыҡлы рәүештә үткәрергә тип бисәһе ярты йыл алдан саба башланы. Фирғәт Исмәғилевичҡа, бажаға, рәхмәт. Оҫталығы бар уның ойоштороу яғынан, мөмкинселеге лә. Эш шунда – былтыр ҡыш министр урынбаҫары итеп тәғәйенләнгәйне. Вазифаһынан файҙаланып, атҡаҙанған хеҙмәткәр исеме бирҙертте. Телевидениенан егерме минутлыҡ тапшырыу эшләтте. Ҡыҫҡаһы, хәленән килгәнсе ярҙам итте, рәхмәт төшкөрө. Был шул уҡ ваҡытта үҙенең юғары вазифаһын раҫлау ҙа булды, шикелле. Йәнәһе, бына беҙ хәҙер кем! Өфөләгә байрам табындарынан һуң, аулаҡҡа, районға ҡайттылар. Ҡәйнәһененең өйөнә. Бажаһын йөрөтөүсе «мерседес» янына, ул алдараҡ килгәйне, Рафаилдың иҫке генә «жигули»һы килеп туҡтаны. Был гәлсәр бокал янына йыуылмаған стакан ултыртыуға бәрәбәр ине. Рафаилдың кәйефе тамам боҙолдо. Шәп булды мәжлес, юбиляр ҙа, туғантыумаса ла арыуыҡ иҫерҙе. Таҡмаҡ әйтеп бейеү китте. Бажаның был йәһәттән маһирлығы юҡ ине, шуға ла ситтәрәк ара-тирә ҡул сабып ултырған булды. Рафаилдың ҡыҙышып алған бисәһе еҙнәһенә яҡыныраҡ шылды, күптән әйтергә теләгән уйҙарын бәйән итә башланы. Тегеһенең кәйефе шәп ине. Шуға ла бик шәфҡәтле ҡыланды:

– Эй, балдыҙкайым-алтынҡайым! Үҫтерербеҙ Рафаилыңды, үҫтербеҙ! Ул шәп кеше, алтын кеше! Бары тик дөрөҫ йәшәмәй...

Унан йоҡомһорап ултырған бажаһының пәләшенә шаяртып сиртеп алды.

– Эй, тор, граф! Һине бөйөк эштәр көтә!

Тегенеһе ҡыҫала күҙҙәрен алан-йолан килтерҙе, бер нәмә лә төшөнмәне. Лаяҡыл иҫерек ине, әммә апасыҡ итеп һүгенергә хәле етте. Рәхмәт әйтеү юҡ, уятҡан

өсөн ризаһыҙлыҡ белдергән була. Хәстрүш. Көлөштәләр. Фирғәт Исмәғилевич һаңғырау кешегә өндәшкәндәй, ҡолағына ҡыскырҙы:

– Алтын кеше тимен! Тик йәшәй генә белмәйһең, бажаҡайым!

Был һөйләшеү булды ла бөттө. Рафаил Ғүмәрович һаман да арыҡ ҡына бер журналдың бүлек мөдире булып йөрөүен дауам итте. Иртән тора ла автобусҡа ашыға. Кәлтерләп бөткән машинаһына күҙ төшөрмәй. Өс тукталыш үткәс сыға. Йәйәү атлай. Киске алтыға тиклем ултыра. Унан йәнә автобус, йәнә өй, йәнә гәҙәти хәстәрлектәр. Ғүмеркәйе шулай бер фәтүәһеҙ, һәүетемсә генә үтеп бара. Уның һабаҡташтары ана ҡайҙарҙа ғына эшләмәй ҙә, ҡайҙарҙа ғына түрә булып ултырмай...

Бер нәмә лә үҙгәрмәне. Бисәһе йәнә ярты йыл көттө лә, ирен министрлыҡҡа ебәрҙе. Бар, һора, үтен! Оялмайһың да, нитмәйһең дә! Бараһың һәм вәссәләм! Ул бит вәғәҙә итте. Бармаһаң, үҙем барам...

Нишләһен Рафаил, барҙы. Үтенде, түбәнһенде... Бажаға, күрәһең, шул ғына кәрәк булған да инде. Тиҙҙән, Рафаил Ғүмәровичты икенсе арыҡ журналға баш мөхәррир иттеләр. Бер йыл да эшләмәне, министрлыкҡа баш белгес вазифаһына тәғәйенләнеләр. Өс йылдан һуң бына ошо гәзиткә хужа итеп ҡуйҙылар. Рәхмәт бажаға. Насар кеше, әшәке кеше. Әммә ваҡытында арттан этәреп ебәрҙе. Йәшкә кесерәк булһа ла аҡыл өйрәтергә әүәҫ:

– Бер мәҡәл бар, бажаҡайым! – Ул гел шулай шапыртып һөйләй ине. – Ишеткәнең барҙыр. Кем әйткәнен онотҡанмын, ләкин бик тәжрибәле, хатта даһи әҙәм әйткән. Былай тигән: «Аҡыллы кеше бер ваҡытта ла үҙенә ауырлыҡ тыуҙырмай. Сөнки һәр проблеманы алдан күҙаллай. Һәм мәсьәлә килеп тыумаҫ борон уҡ, яралғыһында юҡҡа сығарып ҡуя».

Был боласы Ҡондоҙбаевты үйламайынсараҡ эшкә алды, шикелле. Буйҙаҡ кеше, командировкаларға йөрөр тип тә уйлағайны. Шуға махсус хәбәрсе итеп ҡуйғайны. Юғиһә, редакцияла күпселекте тәшкил иткән бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡыркынды алыҫ юлға сығарып булмай. Ярай, егет аҙып китмәҫ борон урынына ултыртырға кәрәк. Аҡыллы ғына итеп, үҙемде ҡыҫтырмайынса ғына. Нисек? Яҡынса һиҙемләй ул нисек икәнен. Баш кәрәк бында, баш. Ҡәтғи ҡарарға килеп, Ҡаран-Йылға районы хакимының номерын йыя башланы.

## БУЙҘАҠҠА ҺУНАР АСЫЛДЫ

Ун бер тулғас, Морат буфетҡа төштө. Халыҡ күп кенә. Типография эшселәре, редакция хеҙмәткәрҙәре, ситтән килеүселәр. Кухня яғынан ҡыҙҙырылған май, сода, хлор еҫе бөркөлә. Бында ла эҫе, бөтә тәҙрәләр ҙә асыҡ. Тик елдең әҫәре лә юҡ. Ҡуй, бында интегеп торғансы... Кире сығып китте, үҙ ҡатында Гөлназды тап итте.

– Ой, Морат ағай, беҙгә инеп сыға алмаҫһығыҙмы икән...

– Нимә, йомош бармы? – тигән булды ағай кеше. Ҡыҙ бүлмәлә үҙе генә. Күршеһе Азалия БДУ-ға интервью алырға киткән. Бында ҡояш төштән һуң ғына төшә, шуға ла әлегә еләҫерәк. Еләҫерәк һәм күркәмерәк тә. Ҡыҙҙар ҡыҙҙар инде. Үҙҙәре ҡорған һатып алып, завхоздан булмай ул, тәҙрәне ҡаплап ҡуйғандар. Өйҙәгесә уңайлы, рәхәт. Компьютерҙан күңелле моң ағыла.

–Морат ағай, бер файлды таба алмайым.

– Һаҡлағайныңмы һуң компьютерҙа? Бәлки юйылғандыр?

– Юҡтыр, Морат ағай. Бына ошо урында, «эш өҫтәле»ндә һаҡлағайным.

Монитор алдына килеп ултырған Мораттың яурыны аша эйелеп, нескә бармағы менән экранға төртөп күрһәтте. Бына ошонда. Ирҙең һулышы ҡапты, йөрәге дарҫлап китте. Ҡыҙҙың ҡарҙай аҡ күлдәгенән сафлыҡ, тәненән баяғы ымһындырғыс еҫ аңҡыны... Һис ыҙалаймайынса ғына файлды табып бирҙе. Бының өсөн «кәрзин"ен аҡтарып сығыу ҙа етте. Ошо урында шик тыуҙы, ә бәлки, күршенең йомошо һылтау ғына булғандыр?

Хужабикә сәй ҡуйҙы, тамаҡ ялғап алдылар. Ҡыҙҙың йәшереп кенә үҙенә ҡарап-ҡарап алыуын һиҙҙе. Рәхәт тә, нисектер уңайһыҙ ҙа ине уға. Хәйер, бөтөнләй ят кешеләр ҙә түгел. Яңыраҡ хатта йәйге кафела күңелле генә һөйләшеп ултырғайнылар. Һис ниндәй ҙә яҡынлашыу булманы, ҡыҙ үҙен нисектер яһалмараҡ тота кеүек тойолдо. Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә. Рәмил Зөфәрович һукмышыраҡ сағында әйтә биреп тә ҡуйғайны. Ҡартлас, һиңә һунар сезоны асылған. Редакцияның бер һылыуҡайы фатирыңа ҡыҙа, имеш. Ҡайҙан алынған ул мәғлүмәт? Рәсми булмаған ышаныслы сығанаҡтарҙан. Шулай гәҙәтенсә сурытып, ләкин тураһын әйтте Зөфәрович. Ошо Гөлназды күҙ уңында тотоуы шикһеҙ. Башҡаса һис кем ымһынмай шикелле уға, ҡарт буйҙаҡҡа. Морат баяғы хәбәрҙе етдигә алманы. Көлдө лә ҡуйҙы. Мәгәр һунарсыһы сибәр булһа, мин риза. Ә фатир өсөн борсолма, уның ипотекаһы түләнеп бөтмәгән.

Гөлназ менән яҡындан бик ҡыҙыҡ танышҡайнылар. Иртә яҙ ине. Морат яңы ғына урынлашып, тәүге аҙна эшләп йөрөй. Бер көн киҫкә ҡарайыраҡ Азат менән тәмәке тартып килделәр. Унан мәҡәлә яҙырға ултырғайны ғына, иламһыраған күрше ҡыҙ килеп инде. Исемен йүнләп белмәй ҙә ине әле. Оҙон буйлы, нескә билле ҡыҙыҡай. Азатты һораны, тик уныһы яуаплы сәркәтип бүлмәһенә инеп баҡҡайны.

– Ну замучил ул мине... Сыҡмай ҙа сыҡмай. Тик ултыра! Кисә лә килде, бөгөн дә килде. Тик ултыра! Тик ултыра!

Ҡыҙ бер ниндәй бәйләнешһеҙ һүҙҙәр теҙә башланы. Морат күршеһенә эйәреп мәҙәниәт һәм мәғариф бүлеге хеҙмәткәрҙәре ултырған кабинетҡа инде.

Тәҙрә янында насар кейенгән йәш ир тора. Әйләнеп ҡараны. Бик арыған кеше күҙҙәре ине был. Киренән тәҙрәгә боролдо, кәкре бармағын тоҫҡап күрһәтте:

– Ана, ана! Күрәһегеҙме, ҡыҙыл БМВ? Улар мине аңдый! Кисәнән бирле арттан йөрөйҙәр. Сөнки улар тегенән (кәкре бармаҡ мәғәнәле рәүештә өҫкә күтәрелде), эйе-эйе, тегенән (ошо урында тауышын баҫа төштө, серле ҡиәфәткә керҙе), команда алғандар!

Морат барыһын да аңланы. Алдарында бер аҙ аҡылға еңелерәк йомошсо. Яҙлы-көҙлө осорҙа меҫкендәрҙең хәле киҫкенләшә. Һәм улар редакциянан редакцияға, хакимиәттән хакимиәткә, милициянан милицияға йөрөй башлай. Был хәл туғандары яйын күреп дауалауға һалғансы йәки киҫкенләшеү осоро үтеп киткәнсе дауам итә. Үҙҙәренән һис ниндәй ҙә зыян юҡ юҡлыҡҡа, әммә ваҡытты күп алалар. Ялыу артынан ялыу яҙалар, инмәгән инстанциялары, күрмәгән түрәләре ҡалмай. Үтенестәре, гәҙәттә, бик мөһим була. Мәсәлән, кемдер Кипрҙағы йортон ҡайтарып биреүҙе үтенә, кемдер күршеһен сит ил разведкаһына дәүләт мәғлүмәттәрен тапшырған сағында тотҡан, кемдер үҙен Паганини тип иҫәпләй. Алдында торған йәш ир, бахыр, эҙәрләнеү манияһынан ыҙалай, күрәһең. Улар гәҙәти буларак, бик аҡыллы, хатта зыялы рәүештә һөйләшә. Белмәгән нәмәләре, ишетмәгән хәбәрҙәре юҡ.

Был меҫкен дә бит, ана, аҫтағы милиция янынан бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ үтеп киткән. Тимәк, пропуск эшләткән кемдер аша.

– Миңә иң ҙур түрәгеҙ кәрәк!

Өҫтәлдә портфеле ята, шунда уҡ рөхсәт ҡағыҙы күренә. Морат уҡып өлгөрҙө. Фәттәхов. Морат йөҙөнә бик ҡәтғи, рәсми төҫ сығарҙы.

– Фәттәхов?

– Эйе!

– Һеҙҙең турала миңә хәбәр иттеләр. Нимә, һаман да дауам итәләрме?

Теге меҫкен Морат янына йүгереп тигәндәй килеп етте. Күҙҙәрендә өмөт саткылары баҙлап китте.

– Эйе, эйе! Дауам итәләр! Төндә килеп, өй янында һағалап ултыралар! Дауам итәләр!

– Тәк, Фәттәхов! Тыңлайбыҙ! Беренсенән, өй янындағылар минең команда буйынса ултыра! Һинең хәүефһеҙлекте тәьмин итә! Икенсенән...

– Юҡ. Һеҙ команда бирегеҙ, Фәттәховты башҡаса эҙәрлекләмәһендәр тип.

Морат кеҫә телефонын алып төймәләргә баҫкылаңы, унан ҡаты итеп өндәште:

– Ҡондоҙбаев был. Эҙәрләүҙе туктатырға! Эйе-эйе, Фәттәховты! Ҡарауылды ғына ҡалдырығыҙ!

Тап ошо саҡ ҡыҙыл иномарка ҡуҙғалып китте. Фәттәхов, ул яңынан тәҙрә янына барып баҫҡайны, быны ап-асыҡ күрҙе. Йөҙөндә ҡәнәғәтләнеү ғәләмәттәре сағылды. Шулай ҙа бик төпсөр кеше булып сыкты ул. Күрәһең, бюрократик ойошмалар буйлап йөрөү эҙһеҙ үтмәгәндер.

– Миңә шул турала ҡағыҙ яҙып бирегеҙ! «Эҙәрләүҙе туктатырға» тип!

Морат баҙап ҡалған Гөлназға өндәште. Тегеһе ҡабул итеү бүлмәһенән фирма бланкыһын алып килде. Тиҙ генә яҙып бирҙеләр.

– Ҡарауылды ҡалдырыу тураһында ла яҙығыҙ инде, ағай!

Уныһын да өҫтәнеләр. Хәҙер, исмаһам, һәр ят машинанан ҡото алынмаясаҡ. Морат нимә тип имза һуҙырға белмәй саҡ ҡына уйлап торҙо ла «иң ҙур түрә» тип яҙып ҡуйҙы. Канцеляриялағы ҡыҙ, Гөлназдың яҡын әхирәте, мисәт һуғып ебәрҙе. Меҫкен йомошсо бик ҡәнәғәт булып хушлашты. Уны башҡаса редакцияла күреүсе булманы. Был хәлдән һуң Гөлназ күрше ағайға көн һайын йомош табып инә торған булып китте.

Яҙ аҙағында Гөлназ бер бүлмәлә ултырған Мәстүрә апай менән фатирына килделәр. Ярҙам итешергә. Өҫкө ҡатта йәшәгәндәрҙең канализацияһы сафтан сығып, һыу баҫҡайны. Һарғайып торған түбәне аҡлап бирҙеләр.

– Ҡандай матур фатирҙа яңғыҙ йәшәп ятаһың, байғош һымаҡ, – тип тел шартлатты Мәстүрә апай. Унан уйынлы-ысынлы итеп:

– Бына бит эргәңдә генә һыу һөлөгөләй сибәр ҡыҙ йөрөй. Ал да ҡуй шуны, йөрөгән егете лә, торлағы ла юҡ, – тип Гөлназға ишараланы. Морат һүҙҙе уйынға борҙо. Гөлназ үпкәләгән булды, әммә шунан һуң күрше ағайға нисектер икенсе күҙлектән ҡарай башланы кеүек...

***

Өфө урамдарында селлә хакимлыҡ итә. Аяҡ аҫтында асфальт бәүелә, ыҫмалаһы сандалиҙарҙың табанына йәбешә. Мораттың төшкө ашка китеп барыуы. Яҡында ғына бер шәп урынды белә ул. Гел шунда йөрөй. Тәмле әҙерләйҙәр, хаҡтары ла хаттин ашмаған. Иң мөһиме, кеше аҙ була, һыу кеүек оҙон сиратка баҫыу кәрәкмәй. Машинаһын тоҡандырып торманы. Йәйәү китте. Ағастарҙың күләгәһенән атларға тырышты.

Кәйефе шәптән түгел ине. Баш мөхәррир менән иртәнге һөйләшеүҙән һуң күңелдә ниндәйҙер бушлыҡ хасил булғайны. Шул һөйләшеүҙе йәнә хәтеренән үткәрҙе.

– Ниңә халыҡ алдында минән йүләр яһарға маташаһығыҙ? – тип асыҡтан-асыҡ һораны Морат хужаның һүҙ башлағанын көтмәйенсә.

– Бына хакимиәт башлығының рәсми яуабы. Бар, яңынан тикшер! Һүҙ бит һеҙгә ышаныу-ышанмау тураһында бармай. Миңә хат килгән, тимәк, уға яуап бирергә тейешбеҙ.

– Улайһа, икенсе берәүҙе ебәрегеҙ!

– Юҡ, һеҙ бараһығыҙ. Был очень ответственный вопрос. Хаттың күсермәһен канцеляриянан алырһығыҙ.

Морат бер ингәндә отпуск мәсьәләһен дә күтәрмәксе булғайны, телефон шылтыраны. Әңгәмә бөткәнде аңлатып Ҡыҫалагүҙ ручкаһын өҫтәлгә ташлап ебәрҙе. Был ғәҙәтте лә Фирғәт Исмәғилевичтан отоп алғайны. Министрлыкта эшләгәндә бажаһы янынан сығышманы. Шапыртыу ҡатыш шәрбәтле хәбәрен тыңлап ултырырға әүәҫләнде. Күп нәмәгә өйрәнде ул. Бажаһы йомошсолар самаһыҙ ялҡыта башлаһа, ҡулындағы ручкаһын ырғытып ебәрә. Уныһын да аңламаһалар, тәмәке тоҡандырып тәҙрәгә боролоп ултыра. Йомошсо һаман ҡыбырламаһа, мин киттем, ҡаңәшмә, тип тып итеп тороп китә ине...

Ҡаран-Йылғанан килгән хатҡа Морат күҙ йүгертеп кенә сыкты. Бишкөрәк ауыл хакимиәте башлығы яҙған. Күпер төҙәлеп бөтөп бара, мәҡәләне баҫмай торорғоҙ тигән. Ғөмүмән, быйылғы эҫелә һыу кәмене, кисеүҙән сығырға ла була тип өҫтәгән. Ҡыҫҡаһы, күперһеҙ ҙә йәшәп торорға мөмкин...

*Юлдарыңа сәскә һибәм тиһең,*
*Ерҙә гөлдәр үҫкән юлдар бар.*
*Күктән йондоҙ алып бирәм тиһең,*
*Ерҙән дә нур йыйыр ҡулдар бар...*

Юлы йәйге баҡса аша үтә. Баяғы матур йыр, Мораттың йәшлек йыры, майҙан сәхнәһенә ҡуйылған радионан ишетелә.

*Кешеләргә бер йылмайыу етә,*
*Ул йылмайыу булһа йөрәктән...*

Эй, рәхәт тә һуң бында! Тыныслыҡ, сафлыҡ утрауы. Йүкә, ҡарағай, зәңгәр шыршылар үҫә. Күҙҙең яуын алырҙай сәскәләр балҡып ултыра. Хуш еҫтәре танауҙы ҡытыҡлай. Кинәт Гөлназды иҫенә төшөрҙө. Шул еҫ, уның хушбуйының еҫе. Уф, шайтан, әллә ысынлап та ғашиҡ булырға самалаймы? Юҡ, булмаҫ. Ҡатыны Аида менән айырылышҡандан һуң бисә-сәсә затын әллә ҡайҙан урап үтә, яҡын ебәрергә тырышмай.

– Мырҙам, ир кеше өсөн ҡырҡ менән илле йәш араһы иң дыуамал, иң һынылышлы осор ул. Нәк ошо мәлдә йәш айғыр кеүек үрәпсенеп, уңлы-һуллы йөрөштөрөп ала. Кемдер уңа, күптәр туңа. Тәбиғәт был, тәбиғәт. Әҙәм тормошоноң иң уртаһы. Йәйге селлә кеүек. Үткән ғүмерен ана шул бейеклектән ҡарап сыға ла, нимәнелер үҙгәртергә тырыша. Ашығып-абаланып егет сағын ҡайтарырға маташа. Йәшерәк бисә-сәсә менән сыуала башлай, – тигәйне бер таныш яҙыусы. Шулайҙыр, Морат та ана ниндәйҙер эске һағыш, оло мөхәббәт көтөү тойғоһо менән йәшәй. Һәр иртәлә яңы көндән низер өмөт итеп, талпынып уяна.

Әле баҡсала кеше юҡ тиерлек. Мораттың яратҡан эскәмйәһенә ҡыҙыл сарафан кейгән ҡыҙ ҡунаҡлаған. Егерме биш йәштәр самаһында. Күгелйем джинсыла, аяғында еңел туфлиҙар. Эргәһендә туҙанлы юл сумка-

һы ултыра. Ҡуйы ҡара сәстәре битен ҡаплаған. Ҡояш нурҙары көүҙәһендә сыбарлана. Ҡыҙыҡай шул килеш серемгә талған кеүек. Күрәһең, алыҫ юлдан килгәндәр, бик йонсоғандыр, бәлки поездан йәки автобустан төшкәндәр.

Тышҡы бәйләнештәр һәм сауҙа министрлығы. Семәрле тотҡалар менән биҙәлгән ҙур ағас ишектәр. Тамбурында аяҡ кейемен таҙартыу машинаһы тора. Ашханала кеше юҡ дәрәжәһендә. Морат үҙе яратҡан аш-һыуҙан винегрет, итле туҡмас, ҡарабойҙай бутҡаһы менән кәтлит, ике икмәк, бер сынаяҡ сәй алды. Ғәҙәттәгесә. Алтмыш ете һум да егерме тин. Тегендә, үҙҙәренең буфетында бер стакан кефир менән бер киҫәк икмәк егерме һигеҙ һумға төшә. Айырма бармы, иптәш Ҡондоҙбаев? Айырма бар, хөрмәтле гәзит уҡыусылар...

Таш диуарҙа уйылған кескәй тәҙрә янына барып ултырҙы. Бынан урам ҡырыйы, үтеп-һүтеп йөрөүселәрҙең аяҡтары ғына күренеп ҡала. Эргәлә ап-аҡ күлдәк кейгән биш-алты ир ултыра. Ниндәйҙер абруйлы сит ил ҡунаҡтарына оҡшайҙар. Уларға ҡарап, бында нисек килеп эләгеүе хәтеренә төштө. Аҡ йортта йомошо бар ине. Унда, Президент аппаратында, Мирас Шаһиевич, күптәнге дуҫы эшләй. Редакция машинаһы ошо йорт янына килтереп ташланы ла ары китте. Аҡ Йорт эргәлә генә. Морат әлеге тамбурға инеп туфлиҙарын ялтыратып сығырға теләгәйне. Ни тиһәң дә, Президент аппаратына бара бит. Ап-аҡ костюм-салбар, зәңгәр галстук таҡҡан ир ярайһы уҡ олпат күренә ине, буғай. Ниндәйҙер бер етди ҡиәфәтле әфәнде, ишектән килеп сыҡты ла, «исәнмесеҙ» тип сәләм биреп китте. Таныш түгел. Үҙен ҙур түрә тип уйлағандыр инде, күрәһең.

– Төрөкмәнстан?

Был һорау булдымы, үҙенсәлекле мөрәжәғәтме, аңламаны. Эстән ҡарһаланып килеп сыҡҡан милиционер икән. Дежур һаҡсы Мораттың ҡояшта янған йөҙөнә тексәйеп йәнә ҡабатланы:

– Төрөкмәнстан?

Морат яңыраҡ ҡыҙы, ҡатыны һәм балдыҙы менән Төркиәгә барып ял итеп ҡайтҡайны. Шуға ла аптыраған көндән:

– Юҡ, Төркиә, – тип яуапланы. Теге ауыҙын ҡыйшайтып йылмайҙы. Мораттың беләгенән алды.

– Миңә барыбер, киттек, Төркиә. Ҡайҙа йөрөйһегеҙ? Һеҙҙе бит юғалттылар.

– Ҡайҙа барабыҙ?

– Банкетка.

Морат үҙен икенсе берәү менән бутауҙарын аңлағайны. Әммә ниндәйҙер шайтан ҡоторта башланы. Ҡыҙыҡ бит, әйҙә эйәр артынан. Ошо, әле ултырған зал янындағы икенсе бүлмәгә индерҙе. Бынаһы ла ашхана, тик ВИП-шәхестәр өсөн, имеш. Ҡарағусҡыл йөҙлө йыуантыҡ ирҙәр ап-аҡ ашъяулыҡлы өҫтәлдәр артында ултыра. Моратҡа бер генә һирпелеп ҡарап ҡуйҙылар, әммә өндәшеүсе булманы. Пеләш башлы түрә, аҙаҡ белеүенсә министр үҙе, ҡунаҡтар хөрмәтенә тост әйтә. Шулай, һис уйламағанда бушлай тәмле ниғмәт ейеп сыҡты. Ошо хәлдән һуң Морат бында даими йөрөй башланы.

***

Коридорҙан уҡ телефон шылтырағаны ишетелде. Һәр аппараттың үҙ моңо, Мораттыҡы хужаһы кеүек ҡырҡыу һәм өҙөп-өҙөп өндәшә. Ҡаран-Йылғанан шылтыратыу көтә ине, тик яңылышҡан булып сыҡты. Йүгереп килеп трубканы алыуға, Фәриҙәнең ирен сәпелдәтеүе ишетелде. Ул гел шулай, нәзәкәтле генә итеп иренен супылдатып ала, унан мыйылдап ҡына хәбәрен башлай. Оҡшай уға был ҡылығы, килешеп тора. Актриса, ни тиһәң дә.

– Сәләм! Был мин, таныныңмы?

– Сәләм. Юҡ, танымаым.

– Эй, алкаш несчастный...

– Шаярам-шаярам, таныным.

– ...танымаһаң, танығанды табырбыҙ. Инәлгән юҡ...

Кис килергә саҡыра. Аңлашылыуынса, ҡунып ҡайтырға. Балаһын ауылға оҙатҡан, үҙе генә икән. Яңғыҙ йоҡларға ҡурҡа, меҫкенкәй. Эй-й, меҫкенкәй. Ярай, барырбыҙ, күңеленде күрербеҙ. Ашарға әҙерлә, берәй тауыҡмы шунда, манты-фәләнме. Морат ҡатындың тәмле бешереүен белә. Ҡыш бисәһе менән айырылышҡас, бер ай самаһы эсеп йөрөнө. Ирекһеҙҙән ирекккә сыҡҡан сей буйҙаҡ башҡаса нишләһен инде. Ҡайҙа саҡыралар, шунда бара. Мәгәр «перспективалы» күренһә, йылғыр ҡатындар ҡулына әсир төшә. Яңынан ҡамыт кейә. Фәриҙәнең мөхәббәт ояһында беҙҙең герой көтөлгән ҡунаҡ ине.

Морат үҙенә тикшертергә килтерелгән битте уҡып ҡул ҡуйҙы, яуаплы сәркәтипкә алып барҙы. Унан баш мөхәррир саҡыртты, иртәгәгә ниәтләштерелгән сәфәре тураһында белеште. Нисек инде берәү ҙә яуап бирмәй? Рафаил Ғүмәрович кеҫә телефонынан шылтыратып Ҡаран-Йылғаның хужаһы менән һөйләште. Төп түрә баҫыуҙар буйлап йөрөй, имеш. Көтәбеҙ, килһен ти. Ярай, хәйерле юл, ҡайтһағыҙ ҙа була, Ҡондоҙбаев. Водитель иртәгә өйөгөҙҙән алып китер, ғәҙәттәгесә.

## КИСКЕ МАЖАРА

Ҡаланың яңы биҫтәһендә йәшәй Морат. Бынан Ағиҙел күренеп тора, алыҫта Салауат һәйкәлен абайларға була. Супермаркет янында туҡтаны, бер ҡап ризыҡ, күстәнәскә ҡыҙыл шарап һәм шоколад алып сыҡты. Кис Фәриҙә көтә, ашарға әҙерләргә кәрәкмәй. Аҙ-маҙ тамаҡ ялғап алһа, шул етә. Фатиры ун икенсе ҡатта, лифт «һә» тигәнсе мендереп еткерҙе. Бүлмә еләҫ, балкон тәҙрәһен дә, залдыҡын да асып киткәйне. Талғын ел ҡорғандарҙы елкәндәй ҡабартып, тәҙрә уйымдарына һуҡҡылай. Бер тынала ярты ҡап кефирҙы һемереп ҡуйҙы. Һыуһыны ҡанғандай булды. Сәйнүк аҫтына ут тоҡандырҙы ла душ аҫтына баҫты. Әй донъяның ләззәте! Әй рәхәт! Һалҡын һыу көнө буйына йыйылған арыуҙы, асыу-борсолоуҙарҙы йыуып төшөрҙө.

Морат бер аҙ ял итте, унан рәхәтләнеп кирелде лә зарядкаға тотондо. Иҙәнгә ятып йоҙроҡтарында күтәрелде. Бер, ике, өс... егерме биш. Етер әлегә. Аҙаҡ гантелдәр, унан һуң бер ботлоҡ гер менән «уйнап» алды. Үҙен һәр саҡ формала тоторға тырыша тырышыуын. Тик анау ҡышлы-яҙлы бер осорҙа «ысҡынып» китте. Китте лә ай самаһы герҙәргә ҡағылманы. Эскән мәлдә уның ҡайғыһымы ни?

Сәғәт һигеҙ тулды. Фәриҙә киске ундан һуң ғына көтә. Уға тиклем ваҡыт мул. Буйҙаҡ кеше нимә эшләһен инде? Паркка барып әйләнергә ниәт ҡылды. Барыбер эшләр эше, көтөр кешеһе юҡ.

Бала-саға күгәрсендәр ҡыуып уйнай. Ҡыҙын, Айгүзәлен иҫенә төшөрөп йөрәге һулҡылдап ҡуйҙы. Теге аҙнала балаға биш йәш тулды. Телефон аша ғына ҡотланы, күршеләренә ҙур йөнтәҫ айыуҙы ҡалдырып китте. Ҡатынының да, ҡәйнә ҡарсыҡтың да күргеләре килмәй уны. Фатирҙарына яҡын да ебәрмәйҙәр. Ул тик Айгүзәлгә генә кәрәк. Ирҙең күҙҙәренә йәш тулды. Унан ҡул һелтәп ҡуйҙы. Үҙе ғәйепле. Эскелек.

Машинаһынан сығып, бер аҙ атлауға ҡолағына ҡырҡыу тауыштар, ҡатын-ҡыҙ ҡысҡырыуы салынды. Был

нимә? Күҙ алдында сәйер күренеш хасил булды. Уның эскәмйәһе янында өс бәндә баҫып тора. Баяғы, төш мәлендәрәк абайлаған ҡыҙыл сарафанлы ҡыҙҙы уратып алғандар. Ирҙәрҙең береһе, былар ниндәйҙер көньяҡ кешеләре ине, ҡыҙҙың еңенән эләктереп тупаҫ тартҡылай.

– Эй! Киттек! Әйҙә! Эй, кемгә әйтәм!

– Ебәрегеҙ... – Бисара өҙгөләнеп ҡысҡырҙы. Сумкаһын бер тыңҡышы тотоп тора ине, тартып алырға маташты. Үткенселәр ҡараштарын ситкә бороп уҙа торҙо.

Мораттың һулышы ҡапты. Ул ҡыҫылмайынса ҡала алмай ине. Тәбиғәте шул. Көсө етәме-юкмы, әммә ботон ҡыҫтырырға кәрәк. Мотлаҡ кәрәк. Ха-ха, иртәнсәк Эльвира Вәкилевнанан шулай тип көлөп ултырғайны. Иллә-мәгәр хәлдәр әле күпкә ҡурҡынысыраҡ. Бер хата аҙым һәм...

Мораттың сәйер ғәҙәте бар. Ниндәйҙер хәүефле ваҡиғаға тарыһа нисектер тынысланa. Барыһы ла уның менән түгел, дөрөҫөрәге өнөндә түгел, ә төштә барған кеүек тойола башлай. Ҡайҙалыр уҡынымы, әллә үҙе уйлап сығарҙымы, уныһын иҫләмәй. Ләкин һәр кешелә ғүмер баҡый ике булмыш көрәшә. Береһе әйҙә, алға тип өндәй, икенсеһе тукта, сабыр ит тип яр һала. Бына хәҙер Мораттың «әйҙә»һе еңеп, алға ҡыуаланы...

Теге компанияға ыңғайланы. Кеҫәһенән хәбәрсе таныклығын сығарҙы. Уны «Прокуратура РФ» тип яҙылған ҡыҙыл тышлыкка индереп ҡуйғайны. Бындай тышлыктар һәр киоскыла тиерлек һатыла, ҡасандыр сдачаға биргәйнеләр. Ҡаты тауыш менән өндәште:

– Киров районы прокуратураһы. Өлкән тәфтишсе Ҡондоҙбаев!

## ҒӘҘИЛӘ

Ғәҙилә сабый сағында өләсәһенән ғәжәйеп әкиәт ишеткәйне. Имеш, бер етем ҡыҙҙың көмрөһө булған. Уны һис кем дә яратмаған, барыһы ла үсекләйҙәр икән. Меҫкен бала көнө-төнө ҡайғыра, йәшереп кенә илай икән. Бер заман сихри тауыш ишетә.

– Төн уртаһы еткәс, урманға бар. Шырлыктың иң төпкөлөндә аҡлан булыр. Ә аҡланда абағалар үҫә. Улар күмәк, әммә берәүһе генә сәскә ата. Был хәл йылына бер тапҡыр ғына була. Ифрат та матур, сағыу сәскә икән ул, абаға сәскәһе, әммә шул төндә генә йәшәй ҙә, таң атыуға һулып ҡорой, имеш. Мәгәр, кем дә кем мөғжизәле сәскәне өҙөп сәсенә ҡаҙап ҡуя һәм теләк әйтә, шуның көмрөһө юкка сыға, ти.

Етем ҡыҙ барып тапҡан, ти, баяғы аҡланды. Сәскәне инде өҙҙөм тигәндә генә, абаға телгә килде ти.

– Өҙмә, зинһар, харап итмә мине, – тип ялбара ти, – мин бит йылына бер мәртәбә генә сәскә атам. Йәллә мине!

Етемкәй уйға ҡалған. Уның, әлбиттә, көмрөһөнән ҡотолорға теләге бик көслө булған. Ләкин меҫкен абағаны ла йәлләй икән. Нескә күңелле, гонаһһыҙ бала булған. Шуға ла үҙен еңеп, илай-илай ҡайтып киткән. Йәнә баяғы серле тауышты ишеткән.

– Һин абаға сәскәһен өҙмәнең. Үҙеңде еңдең. Шуға ла Тәңре һиңә мөғжизәле көс бүләк итә. Ни теләйһең, һәммәһе лә тормошка ашасаҡ. Фәкәт тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтергә кәрәк.

Ҡыҙ был хәбәргә ышанырға ла, ышанмаҫка ла белмәгән. Һәм теге тылсымлы һүҙҙәрҙе һамаклаған.

*Абаға, абаға,*
*Күк ҡабағы асылһын!*
*Күк ҡабағы асылһын да*
*Көм(ө)рөм юкка сыкһын!*

Һәм шул мәлдә арҡаһындағы ороһо юк булды, ти... Етем ҡыҙ әҙәм ышанмаҫлыҡ байлыктарға хужа булып, хан улына кейәүгә сығып, матур балалар үҫтереп оҙон-оҙаҡ ғүмер һөрҙө, ти. Фани доньялағы һәр бәндә үҙ теләгенә ирешә ала, ти ул. Тик быны өсөн бик-бик нык теләргә кәрәк. Һәм, әлбиттә, тылсымлы һүҙҙәрҙе онотмау, ысын күңелдән ҡабатлау ғына фарыз. Абаға-абаға...

Ғәҙилә ғаиләлә икенсе бала ине. Уларҙың өйө Иҙелдең текә ярында, бейек тирәктәр ышығында ултыра. Аталары йәшләй үлеп ҡалды, әсәләре яңынан кейәүгә сыкты ла икенсе ауылға күсте. Әнисә менән Ғәҙилә өләсәләрендә үҫте. Ҡыҙҙарҙың икеһе ике төрлө холоҡ-фиғелле ине. Ғәҙилә уйсан да, йомоғораҡ та, ә апаһы иһә шарылдаҡ, баҫҡан урынынан ут сығарып тора. Арлы-бирле һигеҙ синыфты тамамлағас, Әнисә Магнитка уҡырға китте, штукатур-биҙәүсе һөнәрен алып төҙөләшкә урынлашты. Кейәүгә сығып айырылды, йәнә кейәүгә сыкты, йәнә уңманы. Хәҙер бер ул үҫтерә. Өфөлә йәшәй, эшкыуарлыкка йәнтәслим тотоноп һәүетемсә йәшәп яткан көнө.

Ә Ғәҙилә, ул сибәр ҡыҙ булып үҫеп еткәйне, бухгалтер һөнәрен үҙ итте. Нәк шул мәл уларҙың районынан Сибайға автобус йөрөй башлағайны. Дала менән тауҙар осрашкан ошо йыйнаҡ ҡалала уҡыны ул. Колхозда эш табылды, үҙәк идараның бухгалтерияһына саҡырҙылар. Был күрше ауыл Ғәҙиләнекенән өҫ саҡрым арауыкта ғына. Йөрөп эшләргә тура килде. Йәнә бер йылдан Дамир исемле агроном егеткә кейәүгә сыкты. Тик оҙаҡ йәшәмәнеләр. Үҙен һәр саҡ кәм тойған ире ҡул күтәрә башланы. Буйға бәләкәй, саҡ ҡына ҡылыйыраҡ Дамир, ҡатынын көнләшеп, аҡылдан шашыу хәленә барып етә ине. Ҡайны-ҡәйнәһе арыу булды, ул яҡтан һүҙ юк, әммә бер бөртөк улдарын ипкә килтерә алманылар. Бер мәл бухгалтерияла һигеҙенсе мартты билдәләгәйнеләр. Бисәләр бик ҡыҫтағас, Ғәҙилә лә ярты ғына бокал шарап эсте. Ғәҙәттәгенән һуңыраҡ ҡайтты. Өйҙә ғауға башланды. Дамир тәүҙә аҡыл һата башланы, унан ҡаршыһына килеп ҡысҡырынырға кереште, аҙаҡ этеп ебәрҙе. Ҡатыны башы менән мейес тимеренә бәрелде. Ауыртыуҙан түгел, ғәрләнеүҙән иланы ул. Түҙмәне, китте. Ни бары биш ай ғына йәшәп ҡалдылар. Унан колхоз бөттө. Эш булмағас, мәктәпкә хеҙмәт һәм рәсемдән уҡытырға төштө.

– Ҡыҙым, һин миңә ҡарама! Яңғыҙ һыйырҙы былай ҙа көтөрмөн, бар Әнисә апайың янына, – тине бер көнө өләсәһе. Ул үҙен ейәнсәре алдында ғәйепле тоя. Уҡып бөткәс Сибай институтында һәйбәт урын тапкан ейәнсәрен үҙе саҡырып ҡайтарғайны. Бына хәҙер, уның арҡаһында, ни ире, ни балаһы, ни йүнле эше юк...

Нәк шул саҡ, уҡыу йылы тамамланған осор ине, ҡунаҡҡа апаһы килеп төштө. Хәтәр ине хәҙер Әнисә! Һимергән, етдиләнгән. Сикәләре ҡалас ҡапкандай бүлтәйеп тора. Зәңгәр төҫтәге иномарка, зиннәтле кейем, муйынында йыуан алтын сылбыр. Ҡапсыҡ-ҡапсыҡ күстәнәстәр сығарҙы. Байбисә! Һәр һүҙ әмер! Ул хәҙер текә, төрлө косметика әйберҙәре менән һатыу итә. Был юлы ла бер сумаҙан тауар тейәп килгән. Әсәһе йәшәп яткан ауылға һуғылып уны ла ултыртып алып ҡайткан.

– Ҡыҫҡаһы шул – мәктәбеңә барып иртәгә үк ғариза яҙаһың, эштән китәһең! Һәм туп-тура Өфөгә! Миндә йәшәрһең, миндә эшләрһең! Хоҙай насип итһә, бынамын тигән кейәү ҙә табып бирермен! Ә өләсәйгә мин акса ебәреп торам!

Өгөтләүгә әсәһе менән өләсәһе лә ҡушылды. Йәнә ай ярымдан, картуфты утап-күмеп бөткәс, Ғәҙилә юлға сыкты.

Һәм бына бәләгә тарыны. Ҡара кешеләр ҡамауында тороп ҡалған Ғәзилә эстән генә ҡабатланы:

– Абаға, абаға, күк ҡабағы асылһын...

Ярҙам һуңламаны. Урта йәштәрҙәге ҡаҡса ир йөҙөндә хасил булды ул...

– Өлкән тәфтишсе Ҡондоҙбаев!

Таныклығын һелтәп бер миҙгелгә генә эске яғын күрһәтеп алды. Әлбиттә, унда нимә яҙылыуын уҡып өлгөрөүе мөмкин түгел ине. Тегеләр баҙап ҡалды.

– Ниңә шаулашабыҙ, граждандар? Документтарҙы күрһәтәбеҙ!

Ҡатынға йән инде. Ҙур ҡара күҙҙәре йылынып киткәндәй булды. Ике ҡуллап ҡотҡарыусыһының беләген маҡып алды. Теге бәндәләрҙең иң яһилы шулай ҙа ҡурҡаҡтарҙан түгел икән.

– Эй, командир, нимәгә һиңә документ? Мин Рәсәй гражданы. Үҙәк баҙарҙа һатыу итәм. Паспорт тотоп йөрөмәйем!

– Паспорт!

Теге икәүһе документтарын сығарып тотторҙо. Морат ышандыра алды, күрәһең.

– Абдуллаев. Һинеке? Әһә, Михмонов. Теркәү бармы? Теркәү бар... Ә нишләп тауыш сығараһығыҙ? Нишләп гражданкаға бәйләнәһегеҙ?

– Юҡ-юҡ. Командир, барыһы ла яҡшы.

Яһил тажик һаман текәлеп ҡарап тора ине. Морат уға ажғырҙы, тамам тәфтишсе роленә инеп өлгөргәйне.

– Кемде көтәбеҙ? Паспорт!

– Ә һеҙҙең тикшерергә хаҡығыҙ юҡ.

– Бирермен мин һиңә хаҡығыҙ юҡты! Паспортты күрһәтәбеҙ, йәки хәҙер наряд саҡыртам.

Морат телефон төймәләренә баҫҡылай башлағайны, туҡтата һалдылар:

– Юҡ, начальник, наряд кәрәкмәҫ. Бына паспорт. Күсермәһе...

Теге ҡапыл йыуашайҙы, усында биш йөҙлөк аҡса хасил булды. Йес! Шөрләне! Рәсәйҙә беренсе көн генә түгел. Белә тәртипте.

– Был нимә? Вазифалы кешегә ришүәт?

Теге ҡатып ҡалды.

– Ә беҙ ришүәт алмайбыҙ.

Йылтыр күҙҙәрендә ҡурҡыу ғәләмәте сағылды.

– Әммә гражданкаға килтергән рухи зыянды ҡапларға теләүеңде хуплайбыҙ.

Морат «һә» тигәнсе ҡармап алып, аҡсаны ҡыҙҙың джинсы кеҫәһенә тығып та ҡуйҙы.

– Гражданка, киттек минең арттан. Ғариза яҙырһығыҙ. Һеҙ ҙә эйәрегеҙ.

Ҡыҙҙың сумкаһын эләктерҙе лә үҙе менән өҫтөрәп тигәндәй алып китте. Иң мөһиме, машинаға барып етергә! Артына әйләнеп тә ҡараманы. Шуныһы менән шик уятты. Яһилы ҡапыл ҡыҫҡырып ебәрҙе.

– Эй, эй! Күрһәт әле таныклығыңды?

– Шәберәк!

Машинаға инеп ултырҙылар, двигателде тоҡандырҙы. Яһил йүгереп килеп тә етте.

– Эй, күрһәт әле.

– Ҡара һуң, күрһәтәм!

Таныклығын асып күрһәтте. Тегенең күҙҙәре түңәрәкләнде.

– Эй! Һин прокурор түгел бит!

– Түгел шул. Мин – Робин Гуд.

Теге бәндә машинаның ишек тотҡасына йәбеште. Морат көс менән этәреп тышҡа сыкты. Тажик тибеп ебәрҙе, туфлийы еңелсә генә яуырынына эләкте.

– Үлтерәм!

– Давай!

Мә, һиңә! Аҫтан өҫкә бер генә тондорҙо. Ох, шәп булды! Теге үкереп ебәрҙе лә, сүкәйеп ултырҙы. Дуҫтары килеп етте, әммә машина ла ҡуҙғалып китте. Арттарынан мыҫҡыллы ауаз ғына яңғырап ҡалды.

– Тыныс йоҡо, ескәйҙәр!

## МОРАТ

Мораттың мин Робин Гуд тип сатнатып яуаплауы ғәжәп түгел ине. Бәләкәй сағынан уҡ батыр һәм изгелекле китап геройҙары, ғәҙеллек өсөн көрәшеүселәр менән һаташты. Дуҫ-иштәре аҙ булды, синыфтары араһында ла ала ҡарға ине. Һәр саҡ китап тотоп, гелән һүрәт төшөрөп ултырыр ине. Уйҙары алыҫта – өнөндә лә, төшөндә лә мажаралар тулы уйҙырма донъяларҙы гиҙә ине. Тиҙҙән атаһын, ул зоотехник, ауыл хужалығы идаралығына эшкә саҡырҙылар һәм ғаилә район үҙәгенә күсеп килде. Әҙәбиәт уҡытыусыһының тәьҫирендә гәзиттәргә яҙыша башланы, мәктәптә сатирик журнал ойоштороҙо. Теле әсе, һүҙе тура ине. Танауы әле лә саҡ ҡына ялпашыраҡ, туғыҙынсы синыфта һындыра һуҡтылар.

Унан институт. Был тормошоноң иң ҡыҙыҡлы, иң сағыу ваҡиғалары менән тулы осоро булды. Йығылып ятып уҡымаһа ла, бөтә фәндәр ҙә еңел бирелде уға. Элеккесә гәзит-журналдар менән хеҙмәттәшлек итте. Буш ваҡыт табып төрлө урындарҙа эшләп тә йөрөнө. Аҡсаһын хатта өйөнә ебәреп торҙо, ҡалғаны ла артығы менән етә ине. Стипендияһын да ҡушҡанда, айына йөҙ егерме һум!

– Һинең улың институтын ташлағандыр. Заводҡа эшкә төшкәндер!

Сираттағы аҡса күсермәһен алырға килгән әсәһен почта хеҙмәткәре гел шул һүҙҙәр менән ҡаршылай ине. Сөнки студенттар, ғәҙәттә, үҙҙәре аҡса теләнселәп хат яҙа. Ә Морат, киреһенсә, өйөнә ебәреп ята!

Институттан һуң бер аҙ уҡытты. Армияға алманылар, ҡанун буйынса ауыл уҡытыусыларына ташлама бар ине. Кире Өфөгә килде, төрлө редакция-нәшриәттәрҙә эшләне. Бында ла аҙ туҡмалманы. Ялғандың бик йыш өҫкә сығыуына шаһит булды. Тормошта ғәҙеллек һәр саҡ йоҙроҡ төйнәп йөрөргә тейеш тигән фекере уның һайын нығына барҙы. Юҡ, үҙ инаныуҙарынан баш тартманы ул. Тик бынан кемгә ни файҙа? Үҙе ҡасандыр изгелек эшләгән кешеләре лә бәғзе ваҡыт аяуһыҙлыҡ менән яуап бирә торҙо.

Өйләнде. Был хәл нисектер йүләрҙәрсә, көтмәгәндә килеп сыҡты. Аида, ул үҙе эшләгән нәшриәттә сәркәтип булып йөрөй ине, бер көн хәбәр һалды.

– Нишләйбеҙ? Мин ауырлы!

Һуҡҡан килеш барып йөрөгәйне шул эргәһенә. Эште боҙған булып сыҡты. Ярай, өйләнергә тура килер. Аҙаҡ ҡарарбыҙ.

Мораттың ата-әсәһе был яңылыҡты ҡыуанып ҡаршы алды. Аиданы алып ҡайтып күрһәтте. Оҙон буйлы, йәшел күҙле ҡыҙ уларға оҡшаны. Оҡшамаһа ла ни хәл ҡылһындар. Кәләштең атаһы юҡ. Ләкин, уның ҡарауы, әсәһе, Фәүзиә Мансуровна, оло дәрәжәле педагог икән. Ярай, хуш, хәйерле булһын. Утыҙҙы үткәс, ҡартайғас, улдары өйләнә бит. Ҡустыһы ла, апайҙары ла үҙ аллы донъя көтә. Күптән уның сират. Тиҙҙән ҡыҙҙы һоратырға тип йәһәннәм төбөндә ятҡан Урал аръяғынан өс машина менән килеп тә төштөләр. Туйҙы йола шарттарына ярашлы үткәреү тураһында һүҙ сыҡты.

– Ниндәй ғөрөф ул һеҙҙә? – Аиданың әсәһе һәм һеңлеһе саф башҡорт туйының асылын аңлап та етмәне, шикелле. Күптән ҡалала йәшәйҙәр бит. Тамырҙары

ла, нәҫелдәре лә буталып бөткән. Ни башҡорт, ни татар, ни урыҫ түгелдәр.

– Ул ниндәй «бит асыу» йолаһы ул?

– Килен булып төшкәндә беҙҙең якта килен һөйөү, бит асыу йолаһы бар... – тип башлағайны Мораттың әсәһе, әммә бер аҙ дорфараҡ ҡоҙағый тейешле кеше, «оло педагог» бүлдерә һалды:

– Бит асыу түгел, арттарын асып йөрөй хәҙерге йәштәр!

Быны менән ул һеҙҙең йола иҫкергән тип кенә әйтергә теләгәйне. Әммә йөклө ҡыҙының йөҙөнә төкөрөү һымаҡ килеп сыкты. Аида ҡып-ҡыҙыл булды. Буласаҡ балдыҙы, кейәүҙән айырылып ҡайтҡан шаталаҡ, пырх итте. Классно, арт асыу йолаһы... Ҡоҙалар өндәшмәне. Үпкәләнеләр. Аиданың ағаһы уңайһыҙ хәлде шаярыуға һабыштырып ҡараны, ләкин әйткән һүҙ – аткан уҡ. Шулай итеп, аралар тәүге көндән уҡ һыуынды.

Туй үтте. Мораттың атаһы табында әйткән һүҙен тотоп, ипотекаға фатир алып бирҙе.

Тиҙҙән Айгүзәл тыуҙы. Был исемгә Аида менән ҡәйнәһе ҡаршы булды, ләкин Морат йәһәт кенә ЗАГС-ка барып шул исемде яҙҙырҙы ла ҡайтты. Тегеләр яңғыраулыҡлы Фрида тигәнгә сат йәбешкәйне. Кейәүгә үпкәләп, Фәүзиә Мансуровна байтаҡ турһайып йөрөнө.

Башта татыу ғына йәшәнеләр. Унан ҡашығаяҡ шалтырай башланы. Ҡәйнәһе ҡыҫыла ине араларына.

– Тапҡанһың сығыр кеше! Йөрөй шунда нәшриәт тирәһендә бисә һымаҡ. Ни ит түгел, ни балыҡ түгел.

Тиҙҙән Мораттың атаһы көтмәгәндә гүр эйәһе булды. Аида менән икәүләп кенә ерләүгә барып ураныҡлар. Ауыл яғынан ярҙам бөттө. Бөтә донъяны нәҡ атаһы тотоп торған икән. Һуңғы йылдарҙа ул район үҙәктә ҙур ғына етәксе булып эшләгәйне. Ярай, Өфө эргәһенән Моратҡа ер участкаһы ла алып биреп өлгөрҙө. Ҡоҙа булмағас, йәғни ауыл яғынан йәштәргә ярҙам бөткәс, ҡәйнәһенең былай ҙа шәп булмаған мөнәсәбәте һалҡын һуғыш халәтен тыуҙырҙы. Туғандар бөтөнләй аралашмай башланы. Йәштәрҙең ыҙғышы хәҙер һәр сүптән тоҡанып китә ине.

– Ҡыҙым, күсеп ҡайт әйҙә өйгә, – әсәһе Аиданы телефон аша өгөтләне. – Балаңды баҡсаға урынлаштырғансы үҙем ҡарармын.

– Юҡ инде, ҡайтып йөрөмәһен! – Трубкала һеңлеһе Элиданың тауышы ишетелә бирҙе. Ул кейәүҙән айырылып ҡайтып, ике бүлмәнең береһен биләгәйне. Былай ҙа ҡыҫынҡы фатирҙа йәнә бер ғаиләнең өҫтәлеүе ни суртыма кәрәк? Өҫтәүенә йәш сабый менән. Аида ризалыҡ биреп өлгөрмәне, әсәһе әңгәмәне икенсегә борҙо. Борҙо ла башҡаса был хаҡта һүҙ сығарманы. Элиданан ҡурҡа ине ул.

Бер мәл ҡәйнәһе ейәнсәрен алып ҡайтып китте. Тиҙҙән кире килтерҙе, һәм Морат үҙе өсөн байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ишетте:

– Атай! Ҙурайғас мин елғыуар булам! Һинең һымаҡ!

– Ниндәй елғыуар ул тағы? Уны кем әйтә?

– Бабушка әйтә, бабушка! Атайың елғыуар, уға окшап елғыуар булма, ҡыҙым, ти. Ә мин барыбер булам!

Аптыраманы Морат. Ҡәйнәһе баштан уҡ яратманы уны. Ғүмере буйына интернатта тәрбиәсе булып эшләгәс, әбейҙең тормошка ла, шул тормош тигән мөхиттә көн итеүсе йән эйәләренә лә күптән һөйәкләнеп ҡатҡан ҡарашы бар ине.

– Кемдең кем икәнен мин бер ҡарауҙан белеп торам!

Әбей үҙенең йәмғиәт өсөн алыштырғыһыҙ шәхес икәнен якшы белә. Эргәһендәгеләргә аҡыллы кәңәшен әйтмәйенсә, уларҙы дөрөҫ юлға баҫтырмайынса үтеп китә алмай. Бер нисә йыл элгәре, көсләп тигәндәй, хаҡлы ялға ебәргәйнеләр. Әммә ҡарт педагогтың «дары һауыты»нда запастары бөтмәгән булып сыкты. Яу ҡырынан тылға ҡайтып килеүсе һалдат ғәҙәттә артыҡ йөгөнән бушана. Шуның кеүек Фәүзиә Мансуровнаға ла уҡ-яһауҙарын атып бөтөрөргә кәрәк ине, күрәһең. Элек интернат балаларына сарыф ҡылған көс-ғәйрәтен хәҙер күршеләренә, подъезға эйәләшкән бесәйҙәргә төшөрә ине. Әммә педагогик золомдоң иң ауыры кейәүе менән ейәнсәре иңенә тура килде. Сөнки улар күрше-күлән кеүек фатирында бикләнеп йәки бесәй-сәсәй кеүек һыртын ҡуйып ултыра алмай ине. Аида ла әсәһенең йоғонтоһонда, торған һайын нығыраҡ мыжыны. Аҡса етмәй, эштән һуңлап ҡайта. Ана, таныштар машина алған. Ә беҙ һаман йәйәү йөрөйбөҙ. Өйләнгәндең өсөнсө йылына улар ҙа тимер атлы булды. Ҡәйнәһенә һәм ғаиләһенә йылы яҡҡа юллама алды. Тик Фәүзиә Мансуровна (ул үҙен элеккесә рәсми атағанды хуп күрә) бара алманы, ҡан баҫымы күтәрелгәйне. Морат ғаиләһе һәм балдыҙы менән осто Төркиәгә. Ер участкаһына бура килтереп ултыртты, яйлап өйөн һала башланы. Үҙен йүнсел итеп күрһәтергә тырышты. Ләкин был көндән-көн хөртәйә барыусы хәлде үҙгәртә алманы, ғаиләнең яҙмышы тотошлай ҡәйнә ҡулына күскәйне.

– Һин әсәйҙе харап иткәнһең!

– Быны ла бабушкаң әйттеме?

– Эйе, бабушка! Фәүзиманна әйтте!

Бала һикергеләп ҡәнәфиҙе урап сыкты.

– Атай, ә нимә була ул «харап»?

Морат буҙарынды, ләкин өндәшмәне. Сабый аш бүлмәһендә тырнаҡ буяп ултырған Аидаға йүгереп барҙы.

– Әсәй, ә нимә була ул «харап»?

– Белмәйемсе.

– Ә елғыуар?

– Кемдән өйрәндең ул һүҙҙәрҙе?

– Бабушка атайҙы «елғыуар» ти. Һине харап итте, ти.

Аида телефонға тотондо:

– Мам, нишләп баланы ҡотортаһың? Етер, ҡыҫылма беҙҙең тормошка!

Трубканы атып бәрҙе. Йәштәр берауыҡ тынсып йәшәп алды. Унан ҡәйнә йәнә килеп йөрөй башланы. Аиданың уларҙа ҡуна ҡалыуы йышайҙы, үҙе менән ҡыҙын да алып китә ине.

Морат телерадиокомпанияға эшкә күсте. Унда фельетондар шәлкемен алып бара башланы. Программа хакимиәт вәкилдәрен дә, хаттин ашҡан эшҡыуарҙарҙы ла, таҫма телле сәйәсмәндәрҙе лә аяуһыҙ ҡайыҙлай ине. Морат Ҡондоҙбаевтың республикала даны артты. Дошмандары иһә ТТ, йәғни «тиҫкәре талпан» тигән ҡушамат йәбештерҙе. Дөрөҫ, Морат үҙе быны фәҡәт хуплау-маҡтау билдәһе тип ҡабул итә ине.

– Хәйерле кис, хөрмәтле дуҫтар!

Һеҙ Морат Ҡондоҙбаев әҙерләгән «Талпан» тапшырыуын тыңлайһығыҙ!

Ошондай һүҙҙәр менән башланып китә ине һәр радиофельетон. Башланып китә лә тәүге минуттан уҡ «ҡорбанының» елкәһенән эләктереп ала. Ала ла тегенең тетмәһен тетә генә! Документтар, яҙмалар, шаһиттар. Бик төплө һәм әсе ине был сығыштар.

Дан кешене боҙа. Һатылмаҫ һәм ғәҙел Ҡондоҙбаевтың дуҫтары күбәйҙе, егет яйлап эскегә әүәҫләнә башланы. Тәүҙә унда-бында, осраҡлы рәүештә генә булһа, хәҙер һәр йома кисе, бәғзе ваҡыт ял көндәре лә күңел асыу китте. Ҡыҙмаса дуҫтарының бәғзеләре бала саҡта уҡылған китаптарҙың аҡыллы һәм ҡыйыу геройҙарын хәтерләтә ине. Уларға ҙур ышаныс бағламаһа ла,

бәхәсләшеп ултырыу, үҙенә теләктәштәр табыу күңеленә аҙ ғына булһа ла йылы бирә. Өйөнә ҡайтҡыһы килмәй ине.

Тиҙҙән Морат радионан да китте. Бер-ике тапҡыр эшкә һуңлап килде, тапшырыуын өҙҙө. Директор ғариза яҙырға ҡушты, ул ҡарышманы. Бында тәртип бик ҡәтғи ҡуйылғайны.

Былтыр декабрь айынан башлап бер танышы менән «Ғәҙеллек» тигән аҙналыҡ баҫма сығарырға тотондо. Аҡсаны танышының дуҫы – Мәскәүҙә ултырған депутат бирҙе. Күрәһең, уға Морат Ҡондоҙбаевтың исеме генә кәрәк булғандыр. Йөҙ мең данала сығыусы гәзит күләмен икеләтә арттырҙы. Редакция яңы майҙандарҙы ҡуртымға алды, хеҙмәткәрҙәр һаны ла күбәйҙе. Мораттың, ул баш мөхәррир вазифаһын да башҡара ине, хеҙмәт хаҡы ҡырҡ биш мең һумға етте. Йортоноң ҡыйығын яптырҙы, яңы машинаға күсеп ултырҙы. Аида ла, ҡәйнәһе лә бер аҙ тынысланғандай булды. Тик был бәхет оҙаҡҡа һуҙылманы. Иртә яҙҙа гәзиттән дә ҡыуҙылар. Сәбәбе – Морат депутат хужаһының сәйәси мөрәжәғәтенә ҡул ҡуйыуҙан баш тартты. Сөнки был уның тормошҡа ҡараштарына тап килмәй ине. Морат китте... Эш юҡ, аҡса юҡ. Бурыстар ҡыуығы йәнә ҡабара башланы. Бындай ваҡытта ғаиләлә янъял тырнаҡ осондай ғына сәбәптән дә тоҡаныусан. Бер кис өйҙә сираттағы бола ҡупты. Йәштәрҙең ҡашығаяҡ шалтыратыуы бәлки гәҙәттәгесә үсегешеү менән генә тамамланыр ине. Ләкин бәхәскә әлеге лә баяғы ҡәйнәһе ҡушылды:

– Сәйәси ҡарашыңды бер ереңә тығып торһаң ни була? Шунысама аҡсалы ерҙе тағы ла ҡайҙан табырға уйлайһың?

Морат телевизорҙың тауышын өҫтәне, ғәҙәттәгесә өндәшмәй ҡалырға ниәтләгәйне. Тик үҙ-үҙен ҡыҙҙыра торғас, әбей эште боҙҙо – пультты йолҡа тартып алды ла телевизорҙы һүндереп ҡуйҙы. Ниңәлер нәҡ ошо тупаҫ хәрәкәт Моратты сығырынан сығарҙы. Уның фатирына килеп, хужаны һанға һуҡмаҫҡа уйлай, убырлы ҡарсыҡ? Ҡыҙмаса ине, тәүге тапҡыр һүҙгә килеште. Әбейҙең үҙе, ҡыҙы һәм башҡа туғандары тураһында нимә уйлағанын ярҙы ла һалды. Ҡәйнәһенең йөҙө бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Әммә, утты-һыуҙы үткән тәжрибәле педагог булараҡ, юғалып ҡалманы, хөкөмдө тиҙ әтмәләне:

– Ах, һин, елғыуар! Битһеҙ! Бөттө, айырылышабыҙ!

– Айырылышабыҙ? Һиңә өйләнгәнмеммени?

– Киттек, был алкашты күргем дә килмәй...

Ҡыҙы менән ейәнсәрен елтерәтеп алып сығып китте. Тиҙҙән ҡайнағаһы менән уның ҡатыны килеп Аиданың булған мөлкәтен тейәп алып ҡайтты. Рәсми рәүештә айырылыштылар. Миловка ҡасабаһында төҙәлеп бөтөп барған йортто Морат элекке ҡатыны менән ҡыҙына ҡалдырҙы. Йәнә бер айҙан президент аппаратында эшләгән дуҫы Мирас Шаһиевичтың ярҙамында «Республика» гәзитенә эшкә төштө.

***

Бер квартал үткәс, һаман да дерелдәп килеүсе ҡатынҡай телгә килде:

– Зинһар, туҡтатығыҙ әле машинаны. Мин төшәм...

Тауышы бик йомшаҡ ине уның, нисектер төптән, күкрәктән гөрөлдәп сыға. Бик һирәк осрай торған, тәү ишетеүҙән үк хәтергә уйылып ҡалырҙай бәрхәт тауыш. Радиола эшләп киткәс, Морат быны һөнәри кимәлдә «тотоп» алды. Юлдашы ҡуйы сәстәрен һыйпағыланы, бәләкәй көҙгөһөн сығарып күҙ аҫтарын һөрттө. Ирендәрен еңелсә буяп алды. Ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ ҡатын-ҡыҙ инде. Тауис ҡош кеүек ҡаурый-ҡанаттарҙы һылап-һыйпап һәр саҡ сағыу тоторға кәрәк.

һулдағы биш ҡатлы өйгә ымланы.

– Апайым ошо йортта йәшәй.

– Беләһегеҙме, мин һеҙҙе көндөҙ үк абайлап ҡалғайным. Паркта ултыра инегеҙ.

– Эйе, мин Тирәкле районынан килдем, иртәнге поезд менән. Килһәм, апайым өйҙә юҡ. Көнө буйы ҡайтҡанын көтөп ултырҙым. Барып ҡарап киләм дә кире әйләнәм, барып ҡарап киләм дә кире әйләнәм. Шулай тик йөрөнөм.

– Ә телефоны?

– Телефоны яуап бирмәй шул. Минең килерҙе белә ине, әллә нишләп алмай. Ҡыҙыҡ ҡына инде ул, Әнисә апайым. Кил дә кил, мин һиңә эш таптым тигәс килгәйнем дә.

– Ә кем булып эшләй апайығыҙ?

– Косметика һата. Орифлэйм тейме... Шунан ҡискә ҡарай шылтырата, ғәфү ит, мин һамарҙа, семинарҙа, ти. Шулай килеп сыҡты инде, ҡапыл ғына ҡубып сыҡтым да киттем, был бит бизнес, ти. Аҫҡысты күрше бабайға ҡалдырҙым, ти.

– Ә бабайҙы күрҙегеҙме һуң?

– Күрҙем, – тип көрһөндө юлдашы. Һөрмәле ҙур күҙҙәре йәшһерәп китте. Бәлки, шулай тойола ғыналыр. – Ул лайыҡыл иҫерек, ишекте асты ла шап иттереп кире япты. Һөйләшмәне лә хатта...

Йәнә тынып ҡалды, унан усы менән ауыҙын ҡаплап, сыңғырлата көлөп ебәрҙе. Морат ғәжәпһенеп ҡараны. Яңы ғына илашыр хәлгә еткәйне, бынағайыш. Әллә етешмәйме икән быға?

– Уй-й... Ғәфү итегеҙ. Тыныс йоҡо, ой, тыныс йоҡо... кескәйҙәр...

– Ә-ә! Эйе шул! Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! Аһа-һа-һа...

Хәҙер инде икәүләп хихылдаштылар. Усы менән иренен ҡаплап көлөүенең үҙ ғилләһе бар. Һул яҡлап ситтән теше төшкән, имеш. Шуға уңайһыҙлана, йүләркәй. Исемен һорашты. Гәзилә. Матур исем.

Тағы ла яҡынайып киткәндәй булдылар. Морат үҙе лә һиҙмәҫтән һорай ҡалды:

– Ә һеҙҙең ирегеҙ бармы?

Һораны ла тертләп ҡуйҙы, әллә эйе тигән яуап ишетеүҙән ҡурҡты. Әллә һорауҙың үтә ҡапыл, үтә дорфа яңғырауынан.

– Юҡ, ирем юҡ...

Гәзилә лә ҡыҙарынды. Сөнки бик ашығып яуапланы, шикелле. Шуға ла өҫтәй һалды:

– Мин кейәүҙә булдым ул. Тик айырылдыҡ шул.

– Минең һымаҡ икән...

Байтаҡ өндәшмәй торғас Морат телгә килде:

– Әйҙәгеҙ, бергәләп барып киләйек бабайға.

– Әйҙәгеҙ.

Гәзилә йәнә Мораттың беләгенә ҡағылды.

– Әгәр һеҙ килеп сыҡмаһағыҙ, белмәйем, ни эшләр инем. Рәхмәт һеҙгә, Робин Гуд.

Машинанан сыҡҡас, Моратҡа юлдашын ентекләберәк ҡарарға форсат тейҙе. Күҙгә бәреп торорҙай сибәр булмаһа ла, ғәжәп һөйкөмлө ине Гәзилә. Уртаса буйлы, ҡара бөҙрәләре күпереп яурындарына төшә, түңәрәк кенә нәфис йөҙлө. Джинсылары ла ифрат килешә үҙенә, тығыҙ янбаштарын һығып тора, кәүҙәһен тағы ла һомғолораҡ күрһәтә. Мораттың йөрәге тулаптулап алды. Подъезға яҡынайҙылар. Бер көтөү әбей быларҙы күреп:

– Юҡ-юҡ, Әнисә юҡ, ҡайтманы әле! – тип һөрәнләне. Танып бөткәндәр инде.

– Ә уның күршеһе, һул яҡтан? – Гәзилә өмөтләнеп һорай ҡалды. Әбейҙәр йәнә кемуҙарҙан яуапланы:

– Фәдис бабайҙы әйтәңме, ҡыҙым? Юҡ ул өйҙә.

– Ҡыҙы килеп дачаға алып китте, мунса төшөргә.
– Эй, ул эскесегә ни, ике донъя бер мөрйә инде ул.
– Апайым бит аҫкысты уға ҡалдырҙым тигәйне...
– Уныһы беҙгә ҡараңғы.

Кирегә ыңғайланылар. Ғәҙилә кеҫә телефонын алып апаһына шылтыратты. Тик тоташыу ауазынан һуң, «самсунг» ҡыҫҡа ғына зыңлап алды ла һүнде. Батарейкалары ултырғайны. Нишләргә? Ғәҙилә тәғәйен ҡарарға килде:

– Мине, зинһар, тимер юл вокзалына илтеп ҡуйһағыҙ икән? Тиҙҙән беҙҙең поезд була. Хәҙер генә сыкһаҡ, өлгөрәбеҙ.

Тамам өйрәнеп алғайны үҙенә был илгәҙәк ҡатынҡай. Морат та уны баштан уҡ үҙ итте. Ҡасандыр яҡшы белгән, әммә күптән осрашмаған, шуға ла саҡ ҡына онотоп өлгөргән яҡын кешеһе кеүек ҡабул итә ине ул Ғәҙиләне. Сәйер ҙә, нисектер рәхәт тә ине уға. Бына ни өсөн яңы танышы менән айырылышыу, ә бәлки улар ҡабат бер ваҡыт та осрашмаҫтар, уғата ауыр тойолдо.

Карл Маркс урамында һәләкәт, автобус менән еңел машина тәкөшкән. Уларға йәнә ике автомобиль бәрелгән. Ҡыҫҡаһы, Өфө урамдарында ғәҙәти хәлгә әүерелә башлаған яңы күренеш – «тығын». Уны йырып сыкҡансы, ярты сәғәт ваҡыт үтте. Һеҙөмтәлә, поезд, Мораттың эске тантанаһына күрә, Ғәҙиләһеҙ генә китеп барҙы. Йес!

Ғәҙилә ял итеү бүлмәһенән урын алырға маташып ҡараны. Тик йәй уртаһында ниндәй генә буш урын булһын инде? Икенсе ҡаттағы көтөү залына инеп ултырырға уйлағайны, әммә кемдең поезға билеты бар, шуларҙы ғына үткәрәләр икән. Ҡунакханағамы? Бер төн ҡунып сығыуға ғына барлыҡ аҡсаһын сарыф итәсәк.

– Әйҙәгеҙ миңә...

Ғәҙилә, әлбиттә, был тәкдимде көтә ине. Мораттың баштан уҡ үҙенә саҡырып ныҡыша башламауы уға оҡшаны. Әммә баяраҡ ирем юҡ тип ҡапыл әйтә һалыуы арҡаһында һаман уңайһыҙлыҡ кисерә ине. Морат ни уйлар, үҙен еңел холоҡло ҡыҙ тип ҡабул итмәҫме?

– Мин яңғыҙ йәшәйем. Ә иртәгә күҙ күрер. Бәлки, апайығыҙ ҡайтып төшөр.

Ғәҙилә өндәшмәне. Әммә юҡ тип тә әйтмәне. Бер туғаны, бер танышы булмаған ҙур ҡалала урамда тороп ҡалыу ҡыҙҙың ниәттәренә инмәй ине. Машина яңы биҫтәгә елдерҙе.

Ғәҙиләне фатирына индереп телевизор тоҡандырҙы ла, ҡунаҡҡа күңелһеҙ булмаһын йәнәһе, тиҙ генә магазинға сапты. Ҡунаҡ! Уның өйөндә ҡунаҡ! Һәм ҡунаҡтың да ниндәйе бит әле! Ҡыҙыл шарап менән шоколад бар барлыҡҡа. Фәриҙәгә тип алғайны. Әммә ул ғына аҙ булыр. Йәнә, тота килеп шарап эсереп ултырмайһың бит инде ҡыҙ кешегә. Инсафлы ҡыҙ кешегә тип өҫтәйек. Ул бит Фәриҙә түгел.

Супермаркетта рәхәт, кондиционерҙар еләҫ кенә өрөп тора. Халыҡ күп түгел. Морат «Нарада» тортын, һөт, бер киҫәк сыр, өс йөҙ грамм колбаса, аҡ икмәк алды. Өс йөҙ егерме һум. Акса бөттө тиһәң дә була. Рәмил Зөфәровичтың муйынынан алмайынса булмаҫ. Морат һатып алған әйберҙәрен залдағы өҫтәлгә ҡуйҙы ла шылтыратып ебәрҙе:

– Сәләм, Рәмил Зөфәрович!
– Сәләм!
– За вами страшный должок, не забыли? – тип урыҫсалап өндәште Морат, ниндәйҙер йәнһүрәттәге ҡурҡыныс тауыш менән.
– Забыл. Ниндәй долг ул тағы? – Тегеһе белмәмешкә һалышты.
– Страшный долг. Дүрт йөҙ тәңкә.
– Бәрәс...Шулай уҡмы?
– Шулай уҡ.
– Ярай, ҡатын бөгөн генә аҡса алғайны. Бирермен.
– Иртәгә фатирға индереп сыҡ әле, кискә ҡарайыраҡ. Мин командировканан ҡайтыуғараҡ. Ошо мәлгә.
– Ярай, килештек.
– ...юғиһә, минең бала-сағаа аслыҡтан бүртенә башланы.
– Ха-ха. Аңланым, барыһы ла күкәй булыр!
– Хуш.

Ғәҙилә яңы танышының өйөнә күҙ ташланы. Ир кеше ир кеше инде. Тәү ҡарашҡа барыһы ла үҙ урынында кеүек, әммә күптән ҡатын-ҡыҙ ҡулы теймәгәне һиҙелеп тора. Һай, йүнһеҙ. Гөлдәре һулып бара, гер ултырғыста тора, аш бүлмәһендә пластик стакан, шундай уҡ сәнскестәр күренә. Ҡот юҡ. Ә былай, бик тә ипле, үтә лә уңайлы фатир. Телевизорҙа сабыйҙар өсөн тапшырыуҙар башланғайны. «Тыныс йоҡо, кескәйҙәр!» тип атала. Мәҙәк, әллә Морат ысынлап шул йәнһүрәттәрҙе ҡараймы икән? Хәйер, уның ни мәҙәге бар, ул үҙе лә ярата элекке мультиктарҙы. Иҙәндәге телефон шылтыраны. Кемдер бик ныҡышып таптырҙы хужаны.

Морат ҡош ҡанаттарында осоп подъезға килеп инде. Унда Ғәҙилә көтә! Фатир ишеген асып кереүгә телефоны һайрай башланы. Фәриҙә, кәһәрең. Ғәҙәтенсә ирендәрен супылдатып алды. Үйынсыҡлап өндәште.

– Алло-у!
– Эйе...
– Эй, һин, алкаш несчастный, мин бит көтәм, ҡайҙаһың?

Ҡайҙа – ҡайын башында. Мораттың шәп кәйефе һүрелә төштө. Тауышын баҫып яуапланы:

– Ҡарәле, әйҙә икенсе юлы...
– Нимә-ә? Нисек икенсе юлы?
– Аҙаҡ аңлатырмын. Мин, ней...
– Тауыҡ бешкән, өҫтәл ябылған!
– Юҡ, ҡарәле. Миңә ҡунаҡтар килеп төштө, – үҙе тиҙ генә Ғәҙилә яғына ҡарап алды. Ҡатынкай телевизор алдында кәнәфиҙә ултыра ине. – Иртәгә, иртәгә аңлатырмын. Әле мине саҡыралар, ғәфү ит!

Кеҫә телефонын һүндереп ҡуйҙы. Эскә үтте:

– Мин ҡайттым, ашарға алып ҡайттым!
– Ә мин сәй ҡуйҙым.

Ғәҙилә теге яҡтан тауыш бирҙе. Аш бүлмәһенә үтте. Сәй ҡайнаған, хәҙер-хәҙер. Тиҙ генә тортты телгеләне, сыр, колбаса, икмәкте лә йоҡа киҫәктәргә бүлеп тәрилкәләргә һалды. Шарапты асырғамы икән? Килешмәҫ. Шоколадты мөмкин.

Икәүләп сәй эстеләр. Морат йәнә һорап алды:

– Ә һеҙҙең иптәшегеҙ, ул әле ауылдамы?
– Ауылда түгел. Ул вахта менән Сургут яғына йөрөп эшләй. Беҙ күптән айырылыштыҡ.
– Ә ниңә?
– Эсә башланы. Ныҡ көнләште.
– Минең һымаҡ икән.

Ғәҙиләнең күҙҙәре ҙурайып китте.

– Нисек?
– Мин дә эстем бит. Унан бисәм ташлап китте.
– Ҡайҙа китте, ата-әсәләренәме?
– Башта әсәһенә, унан бер бай эшҡыуарға. Ул хәҙер яҡшы йәшәй.

Морат элекке ҡатынын фырт ир менән яңыраҡ ресторанда күреүен һөйләргә булды ла туктап ҡалды. Кәрәкмәҫ, моғайын. Нисектер аҡланған һымаҡ килеп сыға.

Быға саҡлы булған ихласлыҡ ниңәлер уңайһыҙланыу менән алышынды. Ғәҙилә ҡапыл шомоҡайға әйләнде.

Өй телефоны шылтыраны. Морат теләр-теләмәҫ кенә барып трубканы алды, ҡәһәрең, тағы ла Фәриҙә. Юҡ, килә алмайым. Иртәгә йәки иртәнән һуң...

Ғәҙилә иғтибар итмәгән булды. Ләкин былдай шыпыртын һөйләшеү фәҡәт ҡатын-ҡыҙ менән булғанын аңлап тора, әлбиттә. Моратҡа йәнә ҡыйын булып китте.

Ғәҙәттә, Морат һуң йоҡларға ята. Ул-был эштәрен тамамлағас, китап уҡый йәки интернет ҡараштыра. Ҡунағына залда диванға урын һалып бирҙе лә үҙе телевизор тоҡандырҙы. Шул арала Ғәҙилә йыуынып сыҡты. Уның еүеш сәс шәлкемдәре нәфис муйынына, битенә йәбешкән. Ямғырҙан һуң таралған тәбиғи сафлыҡ аңҡый кеүек үҙенән. Һөймәлекле, бигерәк һөймәлекле ине Ғәҙилә. Әллә, ысынлап та, ғашиҡ булдымы? Кит, булмаҫ. Хәйер, кем белә...

– Тыныс йоҡо! – Морат ҡатынға телевизор пультын бирҙе.

– Тыныс йоҡо!

Балконда оло ҡаланың һүрелә барған шау-шыуы ишетелә. Ҡыҙарып ай ҡалҡа башлаған. Ҡойҡала ятып йоҡлап китте. Төн уртаһында ҡапыл телефон шылтыраны. Кемдер яңылыш эләктеме, әллә тағы ла Фәриҙәме? Уның төн уртаһында оҙон-оҙаҡ хәбәр һата торған ғәҙәте бар. Беләһеңме, мин ни тураһында уйлайым... Ә беләһеңме, бөгөн мин ниндәй күлдәк күрҙем... Ә һин мине ысынлап та яратаһыңмы, ә һин шулаймы-тегеләйме... Осо ла, ҡырыйы ла юҡ.

Тиҙ генә барып телефон сымын ояһынан тартып алды. Йәшереп кенә ҡунағына күҙ һалды. Ғәҙилә сабый кеүек бөгәрләнеп ятҡан ине. Аҡһыл йөҙөнә тыштағы фонарҙың яҡтыһы төшә. Оҙон керпектәре тертләп-тертләп ала, тулы ирендәрен ҡымтыған, һулышы тыныс, мышнап ҡына йоҡлай.

Мораттың йөрәген быға саҡлы булмаған наҙлы хистәр биләне. Аяуһыҙ тормош тарафынан йәберләнгән, тапалған, ә хәҙер килеп уның торлағында яҡлау тапҡан ошо йән эйәһен ҡурсағыһы килде уның.

## ҺАРЫҠ ЫШАНЫСТЫ АҠЛАМАНЫ

Иртәгеһенә Ғәҙилә сәй эсер-эсмәҫтән йыйына башланы. Сәсен өҫкә күтәреп, «ат ҡойроғо» яһаны. Джинсыһы менән сарафанын һалып, аҡ күлдәген кейҙе. Биҙәнеп-төҙәнеп алды. Сумкаһын ишек төбөнә илтеп ҡуйҙы. Йәл. Бында рәхәт ине уға. Әммә китергә булды. Сөнки шулай кәрәк. Бәлки, апаһы ҡайтып төшәр. Уға шылтыратып ҡараны, кеҫә телефоны һүндерелгән. Ләкин ҡатын үҙ һүҙендә торҙо.

– Әгәр ҙә ҡайтмаһа, берәй күршеһенә инеп көтөп ултырырмын.

Морат шулай ҙа уға фатирының алмаш аҫҡысын бирҙе. Бәлки, кәрәге тейер, тормошта төрлө хәл була. Тегеһе иһә баш тартты. Рәхмәт, кәрәкмәҫ. Туҡта, хәйлә уйлап тапты түгелме?

– Ҡарәле, Ғәҙилә, минең һеҙгә ҙур үтенесем бар бит әле...

– Ниндәй үтенес? – Ҡунағы уға ҡыҙыҡһыныу менән баҡты.

– Анау көнө мине һыу баҫты. Өҫтәге күрше йәнә кранын япмай сығып киткән.

– Ә-ә, күрҙем-күрҙем, – Ғәҙилә тиҙ генә аңлап алды. Үтенестең дә асылына төшөндө, шикелле. Сәй эсеп ултыралар ине, аш бүлмәһенең түбәһенә ишаралап алды. – Кисә үк абайлағайным.

– Мин хәҙер командировкаға китәм. Әгәр ҙә ваҡытығыҙ булһа...

Ғәҙилә әйтеп бөтөргә ирек бирмәне, хатта шатланып киткәндәй тойолдо.

– Мин уны хәҙер үк аҡлап бирәм! Барыбер көнө буйы буш, апайым бер шылтыратмаһа бер шылтыратыр.

Теге юлы Гөлназ менән Мәстүрә апай ҡалдырып киткән бумала һәм эзбиз ваннаның аҫтында ята ине. Кәрәк-яраҡты һәм үҙенең иҫке халатын ҡалдырҙы ла, Морат тышҡа ашыҡты. Водителе килеп еткәйне. Сәйер генә танышҡан, әммә әсенеп өлгөргән ҡунағының үҙ өйөндә ҡалыуы һәм уның ҡайтыуын көтәсәген белеү рәхәт ине уға.

Эдик менән сәфәр сығыу көн оҙоно ялҡытҡыс хәбәр тыңлауға әүерелә. Барлыҡ һөйләгәне командировканан командировкаға насарая барыусы сәләмәтлегенә ҡайтып ҡала. Үҙенә ҡырҡ алты йәш, тормошоноң иң сағыу ваҡиғалары фәҡәт ана шул сырхауҙарға бәйле.

– Мин еңгәйең менән һуҡыр эсәкте ҡырҡып ташлаған йылда таныштым. Был, тимәк, мең туғыҙ йөҙ һикһән икенсе йыл була... Редакцияға эшкә төштөм бөйөрҙән таш алдырған яҙҙа...

Хәбәре ошондай юҫыҡта башланып китә лә, һәр сирҙе нәфис һүрәтләүгә короло, үҙе кисергән михнәттәрҙе бәйнә-бәйнә тасуирлау менән тамамлана. Тәүҙә юлдашы иғтибар менән тыңлай. Унан ялҡа төшә, йәнә бер сәғәттән ҡолаҡ тәңгәлендә безелдәгән себенде ҡыуғандай, ҡул һелтәп ҡуя. Морат йоҡомһораны. Ҡаран-Йылға үҙәгенә килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды.

Район үҙәктәре һәр ерҙә лә бер сама. Киң майҙан тирәләй ылыҫлы ағастар үҫә. Ошонда уҡ аллея. Еңеү паркы. «Мәңгелек ут» тирәһен күгәрсендәр – «тыныслыҡ ҡоштары» тиҙәкләп бөткән. Ыҙғыш сыҡҡан урынға йүгереп килеп еткән кешеләр кеүек, был тәңгәлдә милиция, прокуратура, халыҡ суды, һалым инспекцияһы кеүек рәсми ойошмалар ҡамап алған. Универмаг, кафе, ашхана, баҙар ҙа ошонда. Хакимиәт бинаһын әллә ҡайҙан уҡ шәйләргә мөмкин, уның ҡыйығында дәүләт флагы ҡаҙалған. Алдында ғәҙәттә Ленин һәйкәле тора. Улар, ильичтар, районына ҡарап төрлө төҫтә, төрлө ҙурлыҡта. Кемеһелер ҡулын күтәреп һаман да эшсе-крәҫтиәндәрҙе коммунизмға әйҙәй. Кемеһелер, хыялдарының килеп сыҡмауына ҡайғырып, уйсан ғына баҫып тора. Бәғзеһе бөтөнләй битараф төҫ менән ҡулын кеҫәһенә тыҡҡан.

Хакимиәт бинаһынан бер ир сыҡты. Мәғлүмәт бүлеге мөдире, уны электән белә. Хужа кетә, тине. Инделәр, икенсе ҡатҡа күтәрелделәр. Ҡабул итеү бүлмәһендәге сәркәтип ҡыҙ Моратҡа ен күргәндәй тексәйеп баҡты. Күрәһең, килеүенең маҡсатын белә. «Бөтөрөргә» килгән. Сәләмен дә алманы, тырнаҡ буяуын дауам итте.

Әнис Фәрүәзович, киреһенсә, эш өҫтәле артынан һикереп торҙо, ҡуш ҡуллап күреште. Теге юлы көнө буйы ҡарауыллап та тота алмағайны, бөгөн иһә алыштырып ҡуйғандармы! Ха-ха, хатта көтөп ултырған, имеш. Һаҡ булырға кәрәк. Этлек әҙерләй.

Хакимиәт башлығы тулы кәүҙәле, төҫ-башҡа арыу кеше ине. Ғөмүмән, ҙур түрәләрҙе олпатыраҡ, килбәтлерәк ирҙәрҙән генә тәғәйенләйҙәр, шикелле. Морат үҙ ғүмерендә күпме күрҙе уларҙы, ләкин бер генә тапҡыр ҙа уймаҡ танаулы, ҡылый күҙле йәки үтә ябыҡ «төп хужаны» осратманы. Игенселек – малсылыҡҡа ҡарап торған районда хакимиәт башлығы мотлаҡ ауыл хужалығы институтын тамамлаған кеше була. Шуға ла улар крәҫтиәндәрсә тура бәреп, кәрәкһә, борослап-тоҙлап һөйләшә. Был, күрәһең, ҙур кабинет эйәләренең ергә, тәбиғәткә, тимәк, ябай халыҡҡа яҡынлығына

ишара. Ләкин Ҡаран-Йылға хакимы бөгөн, үҙенә хас булмағанса, дипломатик төтөн томаны артына ышыҡланды.

– Йә, туған, нисек килеп еттең?

Үтә яҡын мөғәмәләлә, үтә татлы өндәшеүе күпте күргән, күпте кисергән журналистың шөбһәһен көсәйтә төштө.

– Яҡшы, Әнис Фәрүәзович, рәхмәт.

– Әйҙә, юлдан арып килгәнһеңдер, сәй эсеп алайыҡ.

Кабинеттың артына, бәләкәй генә аулаҡ бүлмәгә үттеләр. Күн менән көпләнгән диванға сүгәләнеләр, тәпәш өҫтәлдә һый-ниғмәт, груша, йөҙөм, печенье. Затлы коньяк сығарҙы. Юҡ, рәхмәт. Сәй мөмкин.

– Туған, нисек унда, Өфөлә? Еңел түгелдер инде?

– Өфө Өфө инде. Ҡиммәт ҡала...

– Фатир мәсьәләләре нисегерәк?

– Фатир бар.

– Һин, туған, тартынма. Мәгәр ер алып йорт төҙергә теләһәң, туп-тура миңә шылтыратаһың. Беҙҙә бит урман хужалығы бар. Егеттәргә әйтермен. Шаңғырлап торған ҡарағайҙан бурап, алып барып ҡуйырбыҙ...

– Рәхмәт, кәрәкмәй.

– Ер участкаң бармы?

– Юҡ.

– Булыр-булыр уныһы ла. Ашыҡма, иң мөһиме, теләк булһын.

– Теләк юҡ.

– Әлегә юҡ, тип әйт.

– Әлегә.

Тиҫкәре. «Ит изгелек, көт яуызлыҡ». Йүнләп һөйләшергә лә теләмәй. Ниһайәт, был һүҙҙән һуң, Әнис Фәрүәзович үтенесенә күсте:

– Ҡарәле, туған. Нисек әйтергә, эш былайыраҡ бит әле...

– Тураһын әйтегеҙ ҙә ҡуйығыҙ, Әнис Фәрүәзович.

Шик юҡ, мыҫҡыл итә был ҡәбәхәт... Ярай-ярай, арт һыныңды уҡытырбыҙ, маңҡа.

– Тураһы шул, туған. Яҙмайыраҡ тор әле шул фельетоныңды.

Морат был тәҡдимде көткәйне.

– Юҡ, Әнис Фәрүәзович, мин башлаған эште ташлап ҡуя алмайым. Һеҙҙең бишкөрәктәр минең турала ни уйлар?

– Туған, һин дөрөҫ аңла. Һине кирегә күндереп маташмайым... Хәҙер район өсөн ауыр мәл. Кризис. Күперҙең аҡсаһын социалкаға күсерҙек.

– Ә күпер социалка түгелме ни? Ыштандың балағын киҫеп алып артын ямап маташаһығыҙ түгелме?

– Ярай, туған, һинең менән бөтәһе лә аңлашылды. Үпкәләмә. Был һөйләшеүҙе онотток!

Түрә бик етди, рәсми тонға күсте.

– Хәҙер эш тураһында. Башта күперҙе йәнә бер ҡарап килерһегеҙ. Унан лагерҙа ашап алаһығыҙ ҙа, Иҫке Акташ ауылына бараһығыҙ. Унда бер фермер көтөү-көтөү мал аҫрай, һеҙгә лә ҡыҙыҡ булыр тип уйлайбыҙ.

Ен күргән ҡыҙ факс оҙатыу менән мәшғүл ине. Хужанан сығып килеүсе Өфө ҡунағына йәнә ялҡынлы ҡараш ташланы. Абау, ни ҡәҙәре нәфрәт! Әйтерһең дә атаһын һуйған. Мораттың кинәт көлкөһө килде һәм... күҙ ҡараларын өйөрөлтөп танау осона килтереп терәне, телен һуҙып ебәрҙе. Айгүзәле көйһеҙләнһә гел шулай әүрәтә ине. Ҡатындың йөҙө ҡарайҙы. Корреспонденттың шайтан түгеллегенә тамам ышанғайны.

Ысынлап та, ҡара болоттар ҡуйыра башлағайны Ҡаран-Йылға хакимы өҫтөндә. Бына икенсе аҙна инде республика күҙәтеү-иҫәп палатаһы ревизорҙары соҡсона. Йәшендең теләһә ҡайһы мәлдә йәшнәүе ихтимал. Төп хужаның, президенттың, уйында ни барын кем әйтә алһын? Шуға ла матбуғатта күренгән һәр тәнҡит мәҡәләһе башын ашарға һәләтле. Бынау корреспондентты, Ҡондоҙбаевты, туктатырға кәрәк.

Бишкөрәк күпере менән шөғөлләнә башлағас та министрлыҡҡа шылтыратты. Фирғәт дуҫы эшләй унда. Тегеһе тынысландырырға ашыҡты:

– Һин, Әнис дуҫҡайым, давай, бураны тиҙләт! – Улына ер алып йорт төҙөтөргә йыйына ине. Әнис Фәрүәзович ярҙам вәғәҙә итеп тә бер аҙ һуҙа төшкәйне.

– Ә журналюганы мин үҙ өҫтөмә алам. Унда бит минең бажа баш мөхәррир. Борсолма, дуҫҡайым. Һәммәһе лә күкәй булыр!

Рафаил Ғүмәрович бажаһының үтенесен, дөрөҫөрәге талабын кире ҡаға алманы. Ярай, Ҡондоҙбаев менән аңлашырбыҙ. Тик нисек? Быныһы иң ауыры ине. Әммә урынына ҡуйырға барыбер тура киләсәк. Сөнки яйлап коллективты ла үҙенә ҡаршы ҡоторта тип хәбәр еткергәйнеләр. Теге ҡанатлы әйтем иҫенә төштө. Аҡыллы кеше проблеманы алдан күреп, алдан иҫкәртә.

– Сит ҡулдар ярҙамында, үҙе ҡыҫылмай ғына иҫкәртә, – тип һөйләнеп алды Рафаил Ғүмәрович. Нисек? Бик ябай. Әйтәйек, шул уҡ Ҡаран-Йылға районы башлығы ярҙамында. Һөҙөмтәлә, Фирғәт бажаһына ла, был арты бысраҡ түрәгә лә ярҙам иткән килеп сыға. Ә ысынында, тегеләр үҙҙәре уның ҡоралына әйләнәсәк. Бармы план? Бар план. Әнис Фәрүәзовичҡа үҙе шылтыратты. Ғорурлығын ваҡытлыса йәшереп торҙо.

– Кире бөткән тиҫкәре әҙәм инде ул Ҡондоҙбаев... Белмәйем, һеҙгә нисек ярҙам итергә булыр икән? Хат килгәс, беҙ уны тикшерергә, баҫырға тейешбеҙ.

– Нисектер, ул корреспондентыңды, ну...

– Аңланым. Әммә мин бит асыҡтан-асыҡ уны ҡыуып сығара алмайым. Уны республикала яҡшы беләләр.

– Шулай уҡмы ни?

– Шулай уҡ шул. Әлегә мәҡәләһен номерҙан алып торҙом. Тик был ваҡытлыса сара, аңлайһығыҙ инде.

– Аңлайбыҙ. Йомшаҡ яҡтары бөтөнләй юҡмы инде?

– Әлбиттә, бар. Эскелек һәм, бәғзе мәғлүмәттәр буйынса, бисә-сәсә.

– Ай-яй-яй, әхлаҡһыҙ! Аңланым... Рәхмәт, Рафаил Ғүмәрович!

Күперҙе яңынан барып ҡаранылар. Бер аҙ блоктар, тимер-бетон бағаналар килтергәндәр. Әммә эш башланмаған, был тәңгәлдә йылғанан сығып булмай. Ҡаран-йылға һайыҡҡан, тик кисеүҙән үтерлек түгел. Бишкөрәккә аҫҡы яҡтан, паром менән сыҡтылар. Ауыл хакимы ҡаршы булһа ла, халыҡты мәктәптә йыйып һөйләшеү үткәрҙе. Йәмәғәт йәнә бер ауыҙҙан Әнис Фәрүәзовичты һүкте. Уның район үҙәгендә төҙөп яткан өс ҡатлы йортон барып ҡарарға кәңәш иттеләр.

– Бына ҡайҙа китә ул беҙҙең күпер аҡсаһы!

Моратты оҙата йөрөүсе мәғлүмәт бүлеге мөдире барыһын да тыңлап, һәммәһен дә теркәп тигәндәй эргәлә уралды. Әммә бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Күрше ауылдағы фермер менән осраштылар. Ул күпләп һыйыр малы, һарыҡ-кәзә аҫрай ине. Был материал ауыл хужалығы бүлегенең үтенесе буйынса әҙерләнде. Рәмил Зөфәрович үҙенә файҙа булмаһа командировкаға йөрөмәй. Гел һөнәрҙәштәрен егә.

Эш тамам. Өфө ҡунағын йәйге лагерға алып киттеләр.

– Беҙҙә ҡунаҡтарҙы һыйламайынса ҡайтарыу йолаһы юҡ, – тип ныҡышты оҙатыусыһы. Мораттың тоткарланырға уйы юҡ ине лә бит, ләкин Эдиктың сырайы

һытылыуын абайлап тәкдимде ҡабул итте. Юғиһә, баш ҡалаға барып еткәнсе ас йөрөүҙең зыяны тураһында лекция уҡыясаҡ.

Йылғаның боролоп-боролоп аҡҡан йәмле урынында бер нисә ағас йорт күренә. Балалар һиҙелмәй, смена алышынған көн икән. Лагерь начальнигы ҡаршыланы, унан ашханаға алып барып ашаттылар. Араҡы ла сығарылды, ләкин Морат хәмерҙән баш тартты. Бер ысҡынһа, оҙаҡҡа һуҙылыуы ихтимал. Шуға ла үҙен йүгәндә тоторға тырышты. Башҡалар ҙа теләр-теләмәҫ кенә рюмкаларҙы ситкә этәреп ҡуйҙы. Ҡунаҡтан уҙҙырып булмай бит инде.

– Их, белһәгеҙ икән, беҙҙә бит ожмах! Ул матурлыҡ, ул саф һауа, ул балыҡ!

Көн ҡыҫҡа ауышты. Күптәнге балыҡсы буларак, Морат ымһына ла биреп ҡуйҙы. Ятыуҙа сабаҡ ҡарпый ине.

– Ҡалығыҙ бер төнгә! Мунса яғабыҙ, табын ойоштораbыҙ. Иртәгә таң менән кире ҡуҙғалырһығыҙ...

Мөдир ҡайтып китте, ә лагерь начальнигы вожатыйын саҡырып килтерҙе. Күҙҙәре янып торған йәш кенә ҡыҙҙы.

– Бына һеҙгә куратор. Лагерҙы күрһәтеп таныштырып сығыр. Исеме Лиана. Ә был – Өфө журналисы Морат ағайың булыр.

– Бик тә шатмын! – Ҡыҙ күҙ-башын уйнатып ҡулын һуҙҙы. Нәҙек кенә бармаҡтары йомшаҡ, наҙлы ине.

– Беҙ журналистарҙы яратабыҙ.

Лиана көйәҙ генә кейенеп алған, неҫкә билен аҡ ҡайыш менән быуған. Сәстәре биленә тиклем туҙырап төшкән. Шәп. Һылыуҡай тәк һылыуҡай. Уйнаҡлап ҡына тора, шайтанбикә. Лагерҙы ҡарап сыҡҡас, Мораттарға тәғәйенләнгән өйҙө күрһәтте. Эре ҡарағайҙарҙан һалынған торлаҡта сайыр еҫе аңҡый. Ыҡсым ғына ике карауат тора, һыуытҡыста һыра, ҡымыҙ, минераль һыу һәм һут ҡуйылған. Телевизор бар.

– Ә мин бынау палатала йәшәйем. Үҙем генә. Әхирәтем ялға ҡайтып китте...

Лиана эргәлә торған тәҡта бинаға күрһәтте. Унан мунсаға алып китте. Соланында бер ҡарт мейес токандырырға йыйына ине.

– Ғөзәйер ағай, мин ҡунаҡҡа эсен күрһәтеп сығайым әле.

Ҡыҙ ярым ҡараңғылыҡҡа ингәс, яңылыш ҡына Моратҡа ҡағылып китте. Аһ, шайтан. Ни эшләй...Ҡыҙ наҙлы итеп шыбырланы. Эҫе тыны ҡолаҡтарын өттө.

– Теләһәгеҙ, инеп арҡағыҙҙы ышҡып сығырмын! Беҙҙә шундай йола бар ул...

Күрәләтә ымһындыра ине Лиана. Сыңғырҙата көлөп ебәрҙе. Шаяртам-шаяртам... Морат быны үтә еңел бирелеүсе, үҙҙәре өҫкә менеп килеүсе ҡатын-ҡыҙҙан ҡурҡа. Нисектер ытырғана ла. Ул яулап алырға күнеккән. Мунсанан сығып ысҡынды. Яр буйында ултырған Эдикты эҙләп тапты:

– Ҡайтабыҙ!

Күңеле тыныс түгел. Әлеге сәйер ҡыланыштар – көсләп-көсләп эсерергә, еңел холоҡло ҡыҙҙы түшәгенә һалырға маташыуҙар – һәммәһе лә юҡҡа түгел. Этлек уйлайҙар. Һәм был, һис шикһеҙ, өҫтән килә. Әнис Фәрүәзовичтан.

– Эй, эттәгенәһе. Ни булды, нишләп улай иртә ҡайтырға булып киттегеҙ әле ул?

Лагерь хужаһы сәбәләнә башланы, һалҡын ғына хушлаштылар. Тегеһе бик ҡәнәғәтһеҙ төҫ менән тороп ҡалды. Юлға сыҡтылар. Мораттың күҙ алдына Ғәзилә килде. Һәм нисектер бөгөнгө сәйер ваҡиғаларҙан талсыҡҡан күңеленә рәхәт булып китте. Уны өйҙә көтәләр!

Телефоны сипылдай башланы. Бер түгел ике СМС-хәбәр килеп ҡунды. Берәһе ят һан. «Имен йөрөгөҙ!» тиелгән. Был Ғәзиләнән! Иртәнсәк үҙ номерын бирҙе, ә уныҡын яҙып алырға өлгөрмәгәйне. Икенсеһе Рәмил Зөфәровичтән. «Ит ал!» тип кенә яҙылған. Күрәһең, күптән ебәргәндәр, ләкин элемтә булмағас әле яңы ғына килеп тоташҡан. Минут та үтмәне, һуңғы СМС эйәһе үҙе шылтыратып ебәрҙе. Тауышы тонок яңғыраны:

– Ҡартлас, берәй хужалыҡҡа инеп кенә һарыҡ алып ҡайт әле. Тиҙҙән курсташтарҙы йыям, ит кәрәк. Минең дуҫ Харрасовҡа инеп ал. Ул көтә, шылтыратҡанмын.

– Мин районда сығып барам бит инде.

– Зинһар өсөн, ҡартлас.

Ярай, ни ҡылаһың... Теге көндөҙ һуғылып киткән фермер Вилюс Харрасовтың ауылына барып һарыҡ тейәгәнсе ҡараңғы төштө. Дуҫы Рәмил өсөн хужа уны бушлай ебәрҙе.

– Аҙаҡ мин Өфөлә булғанда, ресторанға алып барһа, шул етә, – тине.

Район хакимиәте башлығы эштән ҡайтып тамаҡ туйҙырырға ғына ултырғайны, кесә телефонынан Вилюс шылтыратты.

– Теге корреспондентың әле генә һарыҡ алып китте.

– Корреспондентың, имеш. Минеке түгел инде ул. Ярай, шунан нимә?

– Һуң, анау йылы һуған тейәтеп ослағайның бит әле берәүҙе. Быныһын да шулайтыр кәрәк...

Вилюс уның алыҫ туғаны килеп сыға. Бик аҡыллы егет, бейек осасаҡ. Мәгәр берәй ҡараңғы мөйөштә һуйып китмәһәләр. Ифрат текә ҡылана, самаһыҙыраҡ.

– Рәхмәт, уйлармын. Тик һин күрмәнең дә белмәнең, йәме?

– Йә.

Һуған тарихына килгәндә, уныһы былай булды. Бер мәл районға республика гәзитенең махсус хәбәрсеһе килеп төштө. Соҡсонорға. Әнис Фәрүәзович был тиҫкәрене тегеләй ҙә былай ҙа ризалаштырырға маташты. Юҡ, кәзә тәкәһе кеүек ныҡышып тик ултыра. Ни эшләргә? Ҡарар бик тиҙ етлекте. Эш аҙағында бажаһы эшләгән колхозға индереп ҡунаҡ иттерҙе лә, кҫтәнәскә бер ток һуған тейәтте. Теге «һуғып алғас» ни, ике донъя – бер мөрйә. Йырлай-йырлай ҡайтып китте. Ә Әнис Фәрүәзович ГАИ етәксеһенә шылтыратып ебәрҙе.

– Сигнал бар, шул-шул номерлы машинаны туҡтатып тикшерегеҙ. Киров колхозынан һуған урлағандар.

Район биләмәһе сигендә туҡтаттылар. Ыҫынлап та, редакция уазигының артында теге «урланған» һуған ята ине.

– Ҡайҙа тауарға накладной?

– Ниндәй накладной ул тағы? Был бит кҫтәнәс!

Хәбәрсе екеренде, ҡурҡытып маташты. Тиҙ үк айныкты, әммә һуң ине инде. Водителе лә аңлатып маташты, бары тыңлаусы кеше булманы. Кире колхоз рәйесенә алып килделәр. Уныһы белмәмеш тә, күрмәмеш. Ниндәй кҫтәнәс ул тағы? Юҡ, егеттәр, был бит минең шәхси һуған түгел. Халыҡ мөлкәтен теләһә кемгә таратырға минең башҡа тай типмәгән. Был иптәш беҙҙә булды булыуға, әммә мин бер кемгә лә бер нәмә лә бирмәнем.

Хәбәрсе мәҡәләһен баҫтырманы.

***

Моратты төрмәгә индереп яптылар. Тәне үлтереп һыҙлай. Ул тиклем ҡыйнауға нисек түҙәһең инде. Бигерәк йыртҡыстарса ҡыланалар. Алдына имәнес сырайлы йәлләд килеп баҫты. Ҡара күҙлек кейгән, хәбәрсе танып ҡалмаһын өсөндәр инде. Әммә погонында бер

һыҙатка төшкән өс йондоҙҙо абайланы. Лейтенант. Ҡулында тимер таяк.

– Әйт, кем ебәрҙе һине? Кем ҡушты Әнис Фәрүәзовичты үлтерергә?

Морат был йүләр һорауға яуап бирмәне. Район хакимының ваҡытһыҙ вафатын ишетһә лә, үҙен шул енәйәткә ҡатнаштырырҙар тип көтмәгәйне. Провокация был! Үҙен мөмкин ҡәҙәр тынысыраҡ тоторға тырышты. Тиҙҙән барыһы ла үҙ урынына ултырыр, аңлашырҙар һәм сығарып ебәрерҙәр. Ләкин теге яуыз тимер таяғын йөҙә алдында уйнатты:

– Пистолетты ҡайҙан алдың?

– Ниндәй пистолетты? – Морат ғәжәпләнеп һораны.

– Ике мәртәбә атҡанһың. Күргән кешеләр бар, хәҙер шаһиттарҙы саҡырабыҙ.

– Кем күргән?

– Лиана!

– Һеҙ ни һөйләйһегеҙ ул?

– Хәҙер башыңды яра һуғам. Юҡ, тукта әле, икенсе төрлө язалайым мин һине...

Лейтенант тотҡондоң ултырғысын һелкетеп-һелкетеп алды. Оҙон телен сығарҙы ла Мораттың битен ялай башланы. Тегеһе һаман да ипкә килмәгәс, яман итеп баҡырып ебәрҙе:

– Бә-ә-ә!

Ошо урында Морат уянып китте. Машина сокорло юлда һикерә-һикерә алға бара. Тураға ынтылғайнылар, тиҙҙән трассаға сығасаҡтар. Арттағы һарыҡ ялаған икән битен. Морат ултырғысын ҡайҡайтып, ярым ятып бара ине. Фу. Насар төш. Һиңәлер күңеле тынғыһыҙлана башланы. Эдик күрше бабайҙың нисек аяҡ һындырыуын тасуирлай. Уға тыңлаусы кәрәкмәй, үҙ алдына бытырлап барһа шул етә. Юлдашының серемгә талыуын күптән абайланы, әммә ләпелдәүен туктатманы. Һарыҡ та уның хәбәренән тиҙ ялкты, күрәһең, медицинаға хайуан битараф ине. Мораттың битенә үрелде.

Хәбәрсене белгән борсолоу тойғоһо һарыҡ ҡарынындағы эхинококк ҡорто кеүек ҡабара барҙы. Һәм ниһайәт ҡәтғи ҡарарға килде. Тәүҙә Рәмил Зөфәровичҡа шылтыратты:

– Һинең фермерыңдың хакимиәт башлығына ҡатнашлығы бармы? Туғаны түгелме?

– Ҡустыһы килеп сыға. Ә нимә?

Морат яуап биреп торманы. Тимәк, туғаны. Барыһы ла үҙ урынына ултырҙы. Тимәк... Тимәк, был тоҙаҡ...

– Туктат машинаны!

Һарыкты ҡыуаҡ араһына индерҙеләр. Уныһы бәйле тояҡтарын тыпырсындырып баҫырға маташты. Боролошто үтеүгә ГИБДД машинаһы юлды ҡапланы. Уларҙы көтәләр ине. Ике кеше сыкты. Йәнә береһе видеокамераһын ҡабыҙып яҡынайҙы.

– Багажникты асығыҙ.

Берәүһе Эдиктың путевкаһын, хоҡуҡ танытмаһын тикшерергә тотондо. Видеооператор ҙа машинаның алдына сығып номерҙарын төшөрә башланы. Капитан шоферға уҫал өндәште:

– Һарыҡ ҡайҙа?

Эдик, айҙан ҡолап төшкәндәй, мәғәнәһеҙ яуап ҡайтарҙы:

– Ашҡаҙан ауырта...

Һаңғырауға сәләм бирһәң, атаң башы тип әйтер. Капитандың йөҙөндә ғәжәпләнеү сағылды. Һөнтор егет артта соксондо. Морат салондан сығып инспекторға яҡынайҙы.

– Нимә эҙләйһегеҙ?

– Юҡ, ябай тикшереү инде.

– Мин гәзит хеҙмәткәре. Бына таныҡлығым. Аңлатығыҙ, ни булды?

– Һеҙ Ҡондоҙбаев ағаймы?

Егет һынсыл ҡараш ташланы. Таныҡлығын кире һуҙҙы ла, ишара менән генә багажник төбөнә йәйелгән иҫке тоҡҡа күрһәтте. Унда һарыктың «борсаҡтары» ята ине. Үҙе үк ҡулы менән һепереп төшөрҙө, иптәштәренә ыңғайланы.

– Шикләнерлек бер нәмә лә юҡ, иптәш капитан.

Ни ғәжәп, әммә инспектор Моратты һатманы. Ул Бишкөрәктеке ине.

Әнис Фәрүәзович һүнгән телевизор ҡаршында ултыра. Әле генә район эске эштәр бүлеге начальнигы шылтыратты. Юҡ, һарыҡ табылмаған. Тегенең машинаһында бер ни ҙә юҡ.

– Ҡанатланып күккә осмағандыр бит инде?

– Юҡ, осмаған. – Көлә, ҡәбәхәт.

– Осмағас һуң, эҙләгеҙ!

– Эҙләрбеҙ. Мәгәр һарыҡ ысынлап та булған булһа, табырбыҙ.

Милиция башлығының һүҙҙәре кинәйәле. Былтыр көҙ булған ваҡиғаға төрттөрә. Вилюстең ике баш һыйыры юғалды. Милиция көнө-төнө эҙләп тәки осона сыкты. Баҡһаң, улар юғалмаған, ә хужаһы тарафынан иткә һуйып тапшырылған, имеш. Шуға ишаралай милиция башлығы. Мыҫҡыл итә, хайуан. Ҡурҡмай, сөнки Әнис Фәрүәзовичты алалар тигән хәбәр йөрөй. Аллйот, әгәр хужа китһә, уның да артына тибәсәктәрен аңламаймы икән?

Кейәүе шылтыратты. Һарыкты тегеләр ярты юлда ташлап киткән. Бына шулай...

Йәнә ярты сәғәттән милиция хужаһы бәйләнешкә сыкты. Ауыл яғынан килгән юлда бер урмансыны туктаткандар, машинаһында фермер Харрасовтың һарығы. Эйе, хужаһына алып барғандар. Уныһы үҙ малын таныған. Урмансыға протокол төҙөлгән. Ғауға тамам.

Вилюс мал тояҡтарын бауҙан ысҡындырҙы. Дүрткә бөкләп ҡыҫтырылған ҡағыҙ киҫәге килеп төштө. Унда ашыҡ-бошоҡ һүҙҙәр сыймаҡланғайны.

«Әнүс Фәрүәзович! Ышанысығыҙҙы аҡлай алманым, ғәфү итегеҙ. Һарыҡ ҡустығыҙ.»

Был Мораттың район хакимына сәләме ине.

## ӨЙҘӘ

Гәҙилә буйҙаҡ фатирын төшкә тиклем үк ялт иттереп ҡуйҙы. Гәҙәтенсә йырлай-йырлай, күңел биреп эшләне ул. Аш бүлмәһенең генә түгел, залдың да түбәһен аҡлап сыкты. Унан тәҙрәләрҙе йыуып алды. Моратҡа шылтыратып ҡарағайны ла, элемтә юҡ, имеш. SMS-хәбәр оҙатты. Төштән һуң саң һурҙырғыс менән залдағы берҙән-бер келәмде таҙартты, иҙәнде йыуып сыкты. Ай-һай, был кеше мәлендә нык байрам иткәнгә окшай. Юҡ, торлағын тәртиптә тоторға тырышҡан ул тырышыуға. Әммә балкондағы койка аҫтында ярты тоҡ хәмер шешәһе тапты. Ҡатын-ҡыҙ һиҙәптәренә лә юлыкты. Гәҙиләнең күңелендә ниндәйҙер көнләшеүме, үпкәләүме тойғоһо яралды. Хәйер, нимәгә үпкәләргә инде. Ул бит ире лә, йәре лә түгел. Урамға сығып әйләнде. Яҡында баҙар бар икән, шунда ыңғайланы. Аллеяның күләгәле яғынан атларға тырышты. Селлә ҡояшы өтөп бара. Бер килограмм ит, кишер, помидор, йәшел һуған, укроп, башка хуш еҫле үләндәр алды. Былау бешерәсәк.

Апаһы хаҡында бөтөнләй оноткайны. Бер заман телефоны телгә килде. Иртәнге поезд менән ҡайтып

етәм, ти. Һин ҡайҙа? Яҡшы кешеләрҙә тип кенә яуапланы Fәҙилә. Аҙаҡ аңлатырмын...

Кискә ҡарай ҡаты итеп ишек туҡылдаттылар. Fәҙилә тертләп китте, Морат ҡайтты! Тик ниндәйҙер ят, һаҡаллы ир тора ине.

– Һеҙ кем?

– Мин, мин... Мин Морат ағайҙың һеңлеһе...

– Морат ағайҙың? Уның һеңлеһе бармы ни ул?

– Бар шул.

Һаҡалтай йәнә тишә яҙып ҡараны ла салбарының арттҡы кеҫәһенән аҡса сығарҙы:

– Бурысымды килтерҙем. Беҙ бергә эшләйбеҙ. Шылтыратып ҡараным, телефонын алмай бит.

Рәмил Зөфәрович йөҙ һумлыҡтарҙы иҙәнгә һалды. Ырым бар – кис аҡсаны ҡулға бирмәйҙәр. Унан боролоп сығыуға ыңғайланы һәм өҫтәп ҡуйҙы:

– Ну, сос та инде, ә? Ҡайҙан таба тигән шундай сибәркәйҙәрҙе.

Лифт шаулап төшөп китте. Бик һөмһөҙ кеше. Fәҙиләгә ул һис тә оҡшаманы. Ҡарашы майлы, нисектер һөймәлекһеҙ.

Душ аҫтына тороп йыуынып алды. Унан аш бүлмәһенә үтте. Былауҙы йәнә йылытты. Балконға сығып ҡарап инде. Ҡояш теләр-теләмәҫ кенә күрше бина ҡыйығы артына төшөп юғалды. Һаман да юҡ. Ваннаға инеп буянып-төҙәнеп сыҡты. Сәстәрен яурынына төшөрҙө. Ҡыҙыҡ, үҙенең хәләл ефетен көткәндәй көтә. Ошо кинәт килгән уйынан оялып, йәнә үҙен битәрләп алды. Эсергә яратҡан кеше менән бәйләнергә йүләрме ни? Ана Дамир ҙа бит башта хур егете ине...

Морат лифттан сығыуға танауына тәмле еҫ бәрелде. Уны көтәләр! Фатир тотҡаһын тартыр-тартмаҫтан ишек асылып китте. Йөҙө алланған, сәскәле халат кейгән Fәҙилә килеп баҫты. Көтөп торған, тимәк. Мораттың барлыҡ булмышын ҡәнәғәтләнеү тойғоһо биләне.

– Оһо, был минең фатир түгел!

Ир шаярып һөйләнде. Торлағы, ысынлап та, ялтлап, балҡып тора ине. Нур тулған уға, ҡот ҡунған.

– Ә мине танийһығыҙмы?

– О-о, хужабикәм, һеҙҙе күргәнем бар!

– Ҡайҙа күрҙегеҙ һуң?

– Төшөмдә, шикелле...

Икәүләп көлөштөләр. Зәңгәр күктә йөҙгән болот төҫлө күтәреңке кәйеф, ғәжәйеп рәхәтлек солғаны уларҙы.

Киске ашҡа ултырҙылар. Хәйер, киске тип инде, сәғәт уҡтары төүлек аҙағына яҡынлаша. Эх, былауы ла һуң, былауы! Бындай тәмле, ярмаланып торған, хуш еҫле былауҙы һис ҡасан да тәмләгәне юҡ ине. Һис шикһеҙ, Fәҙилә алтын ҡуллы хужабикә ине. Сәй эскәндә Морат командировка мажараларын бәйән итте. Фәҡәт мунсалағы хәлде төшөрөп ҡалдырҙы. Fәҙилә журналист тормошоноң быға саҡлы ишетмәгән нескәлектәре тураһында тыңлап аңҡы-тиңке килде. Унан үҙенең бөгөнгө эш-төшөн бәйән ҡылды, сәйер һаҡалтай тураһында телгә алды.

– Ә ул кешекәйгә мин һеңлегеҙ тип әйттем.

– Дөрөҫ әйткәнһегеҙ.

– Ә ул ышанманы.

– Ышанмаһа, ышанмаһын! Миңә барыбер.

Морат шулай ҙа уйға ҡалды. Fәҙилә тураһында иртәгә барлыҡ коллектив беләсәк. Ярай, белһендәр. Төкөрҙөм. Мин буйҙаҡ кеше. Ирекле ҡош.

Хужа кисәге кеүек балконда, Fәҙилә залда йоҡланы. Төш күрҙе. Имеш, ниндәйҙер бик матур ялан. Унда бер ҡыҙ сәскә йыя. Йөҙөн күрмәй, шуға ла кем икәнен айырмай. Fәҙилә икәнен генә тойомлай. Янына интыла, әммә ҡыбырлай алмай. Унан ҡайҙалыр йүгерҙе, туҡтаны, тик илаһи зат юҡ ине инде.

Иртәгеһен Fәҙиләне апаһына алып барҙы. Икенсе ҡаттағы балконда йыуан ҡатын пәйҙә булды, ҡул болғаны. Fәҙилә йылмайып хушлашты, арттҡы ултырғыстан сумкаһын алды. Морат ашығып өндәште:

– Мин шылтыратырмын!

Кис Ағиҙел ярында теҙелеп киткән йәйге кафеларҙың береһендә осрашырға һүҙ ҡуйышҡайнылар. Fәҙилә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә баш ҡаҡты, күҙҙәре йондоҙҙай балҡып китте.

– Осрашыуға тиклем!

***

Редакцияла элек бүлмәләрҙә төтәтәләр ине. Хәҙер дәүләт ойошмаларында тартыу тыйыла, шунлыҡтан тәмәкеселәр подвалдағы махсус бүлмәгә йыйыла. Фотограф Нәғим сираттағы мәҙәген башланы:

– Минең балдыҙ һөйләй. Колледжда уҡығанында булған хәл. Үҙе һымаҡ ике ҡыҙ менән төнләп ҡайтып киләләр икән. Ун биш, ун алты йәш бит инде быларға. Бер иномарка туҡтаған эргәләренә. «Ҡыҙҙар, эшләйһегеҙме?» – тип һорай икән шоферы. Кәсеп итеп йөрөгән «төнгө күбәләктәр» тип уйлай бит инде. Ә был бала-саға, беләһегеҙме, нимә тип яуаплаған?

Нәғим тәмәке төтөнөн дүңгәләкләп осорҙо.

– Нимә тип?

– Юҡ, әлегә эшләмәйбеҙ! Уҡыйбыҙ!

Ирҙәр шау итеп ҡалды:

– Ха-ха-ха!

Көлөп туйғас, Нәғим йәнә бер ҡыҙығын һөйләне.

– Икенсе юлы минең бер таныш ҡатын...

– Таныш ҡынамы икән?

– Таныш ҡына, егеттәр, таныш ҡына. Юҡ, һәйбәт ҡатын ул. Шул таныш бисә төнләп ҡайтып килә икән. Ниндәйҙер ҡунаҡтанмы, кисәнәнме. Ялтыр-йолтор күлдәк, ҡыҫҡа итәк кейгән бит инде был. Эргәһенә шым ғына текә машина килеп туҡтаған.

– Сәғәтенә күпме? – тип һорай икән.

Минең таныш ишетеп етмәгән. Сәғәт нисә тип һорай икән тип аңлап:

– Өс! – тип яуаплаған. Тегеһенең күҙе маңлайына менгән.

– Юҡ, өс ҡиммәт, тигән дә һыҙған.

– Нишләп? – Йор һүҙҙе аңламаған Рәмил тауыш бирҙе. Нәғимдең ялтыр йөҙөндә ҡәнәғәтһеҙлек сағылды.

– Сәғәтенә өс мең һум һорай тип уйлаған.

– Һа-һа-һа!

Рәмил Зөфәрович барыһынан да нығыраҡ шарҡылданы. Баяғы йүнһеҙ һорауы өсөн ғәфү үтенгән кеүек булды. Үҙе лә шуны аңлап хәбәрен икенсегә борорға ашыҡты.

– Егеттәр, һеҙ кеше лаҡабын һөйләйһегеҙ. Ә бит геройҙар беҙҙең арала!

– Ниндәй геройҙар ул тағы? – Егеттәрҙең сырайына ҡыҙыҡһыныу ғәләмәте сыҡты.

– Кисә төнләп Моратҡа барып индем. Ул бит миңә һарыҡ алып ҡайтырға тейеш ине.

– Нимәгә ул һиңә һарыҡ?

– Курсташтарҙы йыям ошо шәмбелә. Беләһегеҙ бит, мин хәҙер шәхси йортта йәшәйем. Ихатала мал салып, ҡаҙан аҫам. Байрам була инде, бер һүҙ менән әйткәндә, шешлек була.

– Шунан?

– Шунан, барып инһәм, бер сибәркәй ярым яланғас йөрөп ята!

– Булмаҫ!

– Ниңә булмаһын! Әллә алдап һөйләй тейһеңме? Мәйтәм, һин кем? Морат ағайымдың бер туған “һеңлеһе” тигән була. Эх, һылыу ҡыҙ инде, егеттәр, ҡашыкҡа ғына һалып йоторлоҡ! Эх...

Азат елкәһен тырнап алды.

– Ул бит буйҙаҡ, уға мөмкин.

– Әйтәгүр, ай һайын яңы бисә! БыҒаса театрҙан Фәриҙә менән типтерә ине. Хәҙер ана «һеңлеһе» менән. Әйтмәксе, беҙҙең Гөлназ да булып сыккан, шикелле, үҙендә.

– Булмаҫ!

– Ниңә булмаһын? Булалыр инде, булдырһаң...

– Ә һарыҡ? Алып ҡайтканмы һуң һарыкты?

– Юҡ, уныһын булдыра алмаған.

Морат башта хужаға керҙе. Рафаил Ғүмәрович бик кәйефһеҙ ултыра ине. Теге һарыҡ мажараһын һөйләргә булғайны, нимәлер туҡтатты. Юҡ, кәрәкмәҫтер.

– Нимә, яҙырға булдың инде фельетоныңды?

– Эйе, барыһы ла дөрөҫкә сыкты бит.

– Уныһы шулай инде. Ярай, бар, дүшәмбе номерына әҙерләп бир. Тик зерә фәстермә. Ул башлыкты барыбер алалар ул.

Мәкәләне яңыртып, фотолар менән нығытып, уҫал ғына фельетон яҙып ташланы. Электрон почтаһына күҙ һалды. Кисә хакимиәт башлығының төҙөлеп яткан коттеджын төшөрөргә өлгөрмәгәйне. Бишкөрәктән бер укытыусы интернет аша йорттоң фотоһын ебәргән. Айбай! Хәтәр... Бына ҡайҙа китә икән күпер аҡсаһы! Был һүрәтте лә мәкәләгә ҡыҫтырҙы.

Әнисә һеңлеһен шау-шыу килеп ҡаршыланы. Уға орифлэйм һатырға түгел, ә баҙарҙа кеше сакырып торорға кәрәк. һаулыҡ һораштымы-юкмы, әммә шундук һорауҙар менән күмде.

– Кем ул? Нисә йәштә? Бисәһе бармы?

Фәҙилә сумкаһын иҙәнгә ултыртты, аяҡ кейемен сисеп залға уҙҙы. Гәлсәр шәмдәл, затлы йыһаздар, ҡиммәтле балаҫтар. Киң экранлы ялпаҡ телевизор. Күренеп тора, байбисәнең өйө!

– Ул бик якшы кеше.

– Улар бөтәһе лә якшы кеше. Тора башлаһаң ғына беләһең кем икәнен...

Кис еткәндә көс-хәл менән көтөп алдылар. Фәҙиләнән дә бигерәк апаһы түҙемһеҙләнде.

– Мин дә барам. Барам, күрәм! Тура киләме һиңә-юкмы, аҙаҡ әйтермен...

– Апай, мин бит уға кейәүгә сығырға йыйынмайым.

– Сыкмаһаң ни, кем һиңә кейәүгә сык ти? Барам-барам! Мин бит һинең өсөн яуаплы. Барам, күрәм...

– Апай, улың ҡайҙа? Лагерҙалыр инде?

Был һорауҙы Әнисә ҡолаҡ һыртынан үткәреп ебәрҙе. һәр сактағыса ишетмәй ҙә, күрмәй ҙә, тутыйғош һымаҡ үҙ хәбәрен ҡабатлап тик тора.

– Барам-барам, күрәм...

Ниһайәт Фәҙиләнең һорауы мейеһенә килеп етте:

– Данил санаторийҙа. Тиҙҙән алып ҡайтам.

Морат хаҡында гәзиттән укып белә, исеме таныш. Әүәлерәк радионан да һөйләй торғайны. Ҡыҙыҡ, якындан ниндәйерәк кеше икән? Ауылдан яңы-яңы ғына килеп төшкән яп-ябай ҡатынға ымһыныусы ул ниндәй ир икән?

Хәҙер һеңлеһенең ай-вайына ҡарамаҫтан, Ағиҙел ярына, кафеға йыйына башланы. Фәҙилә нишләһен? Ул апаһынан үтеп артык бер ни ҡыла алмай шул. Бала сактан уҡ Әнисәнең һүҙе һүҙ булды. Бер нәмәне алдына алһа, үҙенекен итмәйенсә ҡуймай. Үтә лә нықыш, кирегә бөткән кеше. Алтын балдактарын, сылбырҙарын, алкаларын такты. Киң декольтелы ебәк күлдәген кейҙе. Килешә үҙенә. Әммә йәйге селләлә сәйер, урынһыҙ һымак. Фәҙилә был хакта әйтергә уйланы ла, туктап ҡалды. Оло һүҙ сығасаҡ, барыһы ла апаһының үпкәләүе, хатта илау-ҡарғауы менән тамамланасаҡ. Уны һүҙ менән еңгән, кирегә күндергән кеше тыумаған әле.

– Ҡурҡма, мин һеҙҙең менән ултырмаҫмын. Ситтән генә күҙ һалырмын да ҡайтып китермен.

Әнисәнең мода буйынса кейенә башлауының сере ябай. Бынан дүрт-биш йыл элек, ул сак ире менән бергә торалар ине, Данил улы һүҙ башланы:

– Мам! Матур итеп кейен дә әйҙә урамға!

– Ә нимә эшләйбеҙ унда?

– Яңы атай алып ҡайтабыҙ!

– ???

– Был атай ямакай булып сыкты. Алыштырырға кәрәк!

Әнисәнең көлкөһө килде, әммә был ғибрәтле һөйләшеүҙән һуң ир кеше менән мөнәсәбәттәрен яйларға ашыкманы. Киреһенсә, хәләлен ҡыуып сығарҙы ла «матур итеп кейенергә» әүәҫләнде.

Морат яңы танышын автобус туҡталышында көтә ине. Кемдер исемләп өндәште. Әйләнеп ҡараһа – Фәҙилә! Эргәһендә яңы йыл шыршыһындай биҙәнгән ҡатын. Төҫкә былай йәмһеҙ ҙә түгел түгеллеккә. Тик үтә сыбар кейенгән, өҫтөндә тотош ювелир әйберҙәр күргәҙмәһе. Аяғында осло үксәле ҡыҙыл туфлиҙәр. Ҡайҡайып сак баҫып тора.

– Был минең апайым, Әнисә. Һөйләгәйнем бит әҙерәк...

– Морат.

– Әнисә! Бик шатмын танышыуға.

Ҡатын ҡылансыкланып ҡулын ҡыҫты.

– Беҙҙе автобус менән килерҙәр тип көткәйнегеҙме?

– Эйе, мин Фәҙиләне көткәйнем, автобус менән килә икән тип...

Әнисә был кинәйәле яуапты ишетмәне лә. Үҙенекен тылкыны:

– Ә беҙ анау яктан килдек. Күрәһегеҙме, ана-а-а зәңгәр «вольво» тора. Ул беҙҙеке!

Текә машинаға төртөп күрһәтте. Фәҙилә – сәй, ә Әнисә кофе менән мөрхәтһенде. Ир кеше бер бокал минерал һыу алды. Сағыу япма аҫтындағы зәңгәр пластик өҫтәл тирәләй урынлаштылар. Ағиҙел ус төбөндәгеләй күренә, йылғанан талғын ел иҫә.

Бик күңелле ултырҙылар. Башта Морат Әнисәнән тартына, ятһырай ине. Әммә тегеһе шарылдаҡ, ябай ҡатын булып сыкты. Әлбиттә, хәбәрендә бер ниндәй ҙә мәғәнә, зыялылыҡ ғәләмәте юҡ, ләкин ана шул үтә асык күңелле булыуы үҙенә ылыктыра кеүек. Эсендәге – тышында тиҙәр ундайҙар хаҡында. Мәҫәлән, Мораттан ҡайҙа эшләүен һорашкан булды. Билдәле, быныһы исем өсөн генә ине. Шул хәтлем күп белгән, һәр нәмә менән ҡыҙыкһынған төпсөр ҡатын яңы танышының кемлеген белмәй буламы ни? Гәзиттә тигәс, эшҡыуар ҡатын сарылдап ҡысҡырып ебәрҙе:

– Реклама! Реклама!

Был мәгәр уртаҡ тел тапһаҡ, баҫмағыҙҙа реклама бирәсәкмен, отошло хеҙмәттәшлек итербеҙ тигәнде аңлата булды.

Үҙенең нисек эшҡыуарлыкка килеүен, күпме алыуын, нимәгә тотоноуын һәм тотонорға самалауын бәйән итте.

– Егерме биш мең әлегә! Егерме биш мең һум, бер нәмә лә эшләмәйенсә! Сөнки был Орифлэйм!

Морат селтәр сауҙаһы менән шөғөлләнеүселәрҙе

һатып алыусылар менән эш итергә махсус өйрәтеүҙәрен ишеткәне бар ине, әлбиттә. Иң мөһиме – кешене ышандырыу. Арбау! Был тотош бер сәнғәт. Уның мәғәнәһе – клиентты бөтөнләй кәрәкмәгән әйберҙе һөйөнөп-ҡыуанып, рәхмәттәр әйтә-әйтә һатып алыуға килтереп тереү. Ә быныӊ өсөн шул хәбәреңә ысын күңелдән үҙеңә ышаныу кәрәк... Әнисә лә ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙгә барлыҡ булмышы менән инанған.

– ...һәм был сик түгел. Бына, мәҫәлән, минең менән бер ваҡытта башлаған Гуляның хәҙер үҙ фирмаһы! Мин дә уйлап торам әле, нейтергә, киңәйергә...

Тағы ла ирмәк бер ғәҙәте бар икән Әнисәнең. Һөйләшкәндә әңгәмәсеһенең ҡулына һуғып-һуғып ала. Яңылыш ҡына, һүҙгә әүрәгәндә, осраҡлы рәүештә генә. Ләкин осраҡлыҡ юҡ бында. Беренсенән, хәбәр тыңлаусының иғтибарын гелән үҙендә тоторға тырышыу. Икенсенән, быныһы бик мөһим, рухи яҡынлыҡҡа ишара. Тик Мораттың әрһеҙ бисә менән ниндәй рухи берҙәмлеге булһын инде? Ул фәҡәт Ғәҙиләнең апаһы. Шул ғына.

## ИҪӘҮӘН ФРАНЦУЗ

Унан Моратҡа сират етте. Әнисәнең ҡулына һуға-һуға һөйләүе байтаҡ йылдар элек булған мәҙәк хәлде иҫенә төшөрҙө.

– Йәш саҡта мин «Родина» кинотеатрында ҡарауылсы булып эшләнем. Бер мәл директор бүлмәһенән галстуклы кеше килеп сыҡты. «Студентмы» тип һорай был. Мин әйтәм, эйе. Аҡса эшләргә теләйһеңме ти. Әлбиттә, теләйем, тик нисек? Был аңлата.

– Бөгөн француз киноһының премьераһы була, ти. Ун минуттан башлана... Франция илселегенең өсөнсө сәркәтибе килгән. Тамашасылар алдында сығыш яһарға тейеш. Тик проблема шунда – тәржемәсе ауырып киткән...

– Шунан?

– Һин тәржемәсе булаһың!

– Нисек? Мин француз телен белмәйем!

– Белеү кәрәкмәй, был әйтә. Ҡулыңа папка тотторабыҙ, ә унда барлыҡ текст яҙылған. Теге һөйләй, ә һин һәр һөйләмдән һуң тәржемәһен уҡыйһың да тораһың. Шул ғына.

– Ярай, мәйтәм, ә күпме гонорар?

– Утыҙ һум.

– Бара.

Теге француз ярайһы уҡ йәш, бер аҙ пеләшерәк кеше икән. Сыҡтыҡ сәхнәгә. Зал туп-тулы. Теге комсомол әһеле миңә үҙенең пинжәген биреп торҙо. Джинсы салбар, ҡара водолазка һәм ҡара пинжәк. Былай тәржемәсегә оҡшағанмын инде. Етдилек өсөн күҙлегемде кейеп ебәрҙем.

Француз үҙ телендә сәләмләне. Мин ҡыҙыл папкамды асып тәүге һөйләмде уҡыным:

– Хәйерле кис, хөрмәтле әфәнделәр!

Француз йәнә бер ауыҙ һүҙ әйтте лә туҡтаны, ипләп кенә минең ҡулға ҡағылды, нәҡ бына Әнисә ханым кеүек...

Әнисә иһаһайлап көлөп алды. Морат дауам итте.

– ...ә мин киләһе һөйләмде уҡыным:

«Әгәр ҙә бөгөн һеҙҙең илдә үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫмәһә, ошо премьера ла булмаҫ ине...»

Шулай итеп ул бер аҙ һөйләй ҙә туҡтай, ә мин бик етди төҫ менән тегене «тәржемә» итәм. Бер заман тексттың иң аҙағына килеп еттем.

– Ә хәҙер, хөрмәтле әфәнделәр, һеҙҙең иғтибарығыҙға вәғәҙә иткән премьера! Хәйерле сәғәттә! Киләһе осрашҡанға тиклем!

Мин шулай итеп уҡып бөттөм, ә был дауам итә. Текстан тыш хәбәр һөйләй. Нишләргә? Мин бит уның бер һүҙен дә аңламайым. Туҡтап ҡалдым, ә был иплэп кенә ҡулға һуға! Ярай, мәйтәм, буржуй, мин һаран түгел. Теләйһең икән, рәхим ит. Яңынан уҡый башланым. Иң баштан.

– Хәйерле кис, хөрмәтле әфәнделәр!

Телмәрҙән ялҡа башлаған халыҡ кинәт уянып китте. Меңәрләгән күҙ миңә төбәлде.

– Әгәр ҙә бөгөн һеҙҙең илдә үҙгәртеп ҡороу елдәре иҫмәһә, мәйтәм, премьера ла булмаҫ ине...

Халыҡ араһында шыбыр-шыбыр һөйләшеү китте. Берәү сикәһенә бармағын төртөп, бороп күрһәтте. Имеш, һайғауығыҙ һирәгәйә башланымы әллә... Ә француз һаман туймай, һаман хәбәр һөйләй. Йәнә иң аҙағына барып еттем. Йәнә хушлаштым.

– Хәйерле сәғәттә! Киләһе осрашҡанға тиклем!

Эйе, мин инде икенсегә хушлаштым, ә был ләпелдәй генә бит, ҡәһәрең. Халыҡ иплэп кенә көлә башланы, кемдер ҡул сабырға тотондо. Теге буржуй, өсөнсө сәркәтип, быны үҙенең уңышы тип аңланы, шикелле. Тағы ла ныҒыраҡ ҡыҙышып, ҡулын һелтәй-һелтәй, минең беләккә һуға-һуға, йәнәһе, «нимә ҡарап тораһың, тәржемә ит!» дауам ҡылды. Нишләйһең, йәнә тапалған һуҡмаҡтан китергә тура килде.

– Хәйерле кис, хөрмәтле әфәнделәр! Әгәр ҙә бөгөн һеҙҙең илдә...

Өсөнсө тапҡыр шулай сәләмләүем булды, былай ҙа көскә тыйылып торған ташҡын йырылып китте! Тәүҙә бер йәш ҡыҙ көлөп ебәрҙе.

– И-их! И-их! И-их! Их-һа-һа-һа-һа!

Морат баяғы ҡыҙҙы эләкләп күрһәтте. Ғәҙилә менән Әнисәгә лә шул ҡалды – һығылып китеп көлөргә тотондолар.

– ...Был үҙенә күрә сигнал булдымы ни, зал тәгәрәп китте...

Унан Әнисә үҙ эшендәге ҡыҙыҡтарҙы бәйән итте. Тик артыҡ маһирлығы юҡ ине. Һәр һөйләмде сурытып, кем нимә әйткән, ә ысынында нимә әйтергә теләгән, һәм ни өсөн нәҡ ошо урында көлкө булған – шуларҙы ҡат-ҡат аңлата-аңлата ялҡытып бөттө. Исем өсөн көлгән булдылар. Быны Әнисә үҙе лә тойомланы, бер аҙ үпкәләп ҡуйҙы.

– Мин ҡыҙыҡ һөйләй белмәйем шул...

Ғәҙилә лә яратҡан көләмәсен иҫкә төшөрҙө. Ул мәктәптә эшләгәнендә балалар ауыҙынан ишеткән мәҙәк ине.

Морат тора-бара Әнисәгә ихласлыҡ күрһәтә башланы. Бер-икене үҙе кеүек уҡ ҡулына ҡағылды. Ғәҙиләнең йөҙөндә еңелсә көнсөллөк билдәһе салынғас, күңеле булды. Был яҡшы. Тимәк, апаһынан ҡыҙғана. Ә ҡатын-ҡыҙҙы яулап алыу өсөн уның күңелендә көнсөллөк уятыу иң шәп ысул. Морат һынағаны бар. Тик саманан сығырға ярамай, юғиһә эште боҙоуың ихтимал.

Бер һүҙ менән әйткәндә, был йәйге кис ярайһы уҡ күңелле үтте. Тик иң аҙағында ғына аңлашылмаған хәл килеп сыҡты.

– Морат ағай, һаумыһығыҙ, – ҡайҙандыр ҡулына кола шешәһе тотҡан Гөлназ пәйҙә булды. Хәйер, йәш кешене кафела күреү һис тә көтөлмәгән ваҡиға түгел түгеллеккә. «Ағайы»ның һаман да пырх-пырх килгән юлдаштарына бер генә ҡараш ташланы.

– Һаубыҙ, һаубыҙ! Ни эшләп йөрөү? – Морат ҡыҙға ғәҙәти һорау бирҙе, һәм башына тондорғандай мәкерле яуап алды.

– Нишләп тип инде... Азалия менән дискотекаға тип килгәйнек. Әле иртәрәк икән. Беҙ анау мөйөштәбеҙ.

Теге юлы һеҙҙең менән ял итеп ултырғайнык бит әле, шул уҡ урында.

Ҡыҙ ҡараңғы мөйөшкә ҡул һелтәне.

– Пока, Морат ағай!

Янбашын бәүелтеп, шыҡ-шыҡ баҫып китеп барҙы. Быныһын көтмәгәйне Морат. Аһ, хәйерсе. Артығын ысҡындырҙы. Булды ул хәл, булды. Эштән һуң тап булышып, былай ғына инеп ултырғайнылар бер кисте. Тик был күптәнге ваҡиға... Ғәзиләнең йөҙө ҡараңғыланып киткәнен абайланы. Уға нисек аңлатаһың? Артабан һүҙ насар ялғанды. Күберәк Әнисә тәтелдәне. Тиҙҙән сәғәтенә күҙ һалғылай башланы. Ҡайтырға ваҡыт, иртәгә ниндәйҙер семинары ниәтләштерелгән икән. Морат машинаһыҙ ине, уны теге зәңгәр «вольво» менән килтереп ҡалдырып киттеләр.

– Был кеше һиңә бармай!

Апаһының көтөлмәгән хөкөмө Ғәзиләне ғәжәпкә ҡалдырҙы. Тик... ни өсөн бармай?

– Ул бит эскесе!

– Ҡуйсы, апай. Минералка ғына эсеп ултырҙы...

– Ана шуның өсөн эскесе! Саҡ ҡына хәмер эсһә, тимәк, холҡо юҡ. Шуны белә, шунан ҡурҡа!

Мораттың балконында торған ярты ҡапсыҡ буш шешә хәтеренә төштө.

– Унан, йүнһеҙерәк күренә...

– ...?

– Мин реклама бирәм гәзитеңә, әйҙә бергәләп эшләйек тиеберәк әйттем бит инде. Ә ул нимә? Ыжламаны ла. Тимәк, аҡса табыуға барымы юҡ...

– Апай, ул һинең кеүек эшҡыуар түгел дә баһа...

– Булмаһа ни? Хәҙер ирмен тигән ир, хут һауанан булһа ла аҡса эшләргә тейеш... Юҡ икән, ана бара юлың. Еҙнәңде артына типтем бит, ялҡаулана башлағас. Ана шулайтаһың да ҡуяһың!

– Китсе, апай, юҡты һөйләмә.

– Тағы ла, ул кешең бисә-сәсәгә бик әүәҫ күренә.

– Нисек?

– Шулай. Һинең менән танышҡан, ә ике күҙен минән алмайсы!

– Һуң, апай, үҙең бер туҡтауһыҙ ҡулына һуғып ултырҙың бит...

– Бармай, бармай! Анау йәш ҡыҙҙы ла әүрәтеп алған, шикелле. Бармай!

Бармай? Шулайҙыр ҙа. Ғөмүмән, ул кейәүгә сығырға йыйынмай бит. Апаһына шул хаҡта әйтте.

– Унан, һин бит беҙҙең менән бергә ултырырға тейеш түгел инең. Үҙең ситтән генә ҡарап торормон тигәйнең бит.

– Әй, ҡороғоро, әйткәйнем шул!

Көлөштөләр. Ләкин Ғәзиләнең күңеле болоҡһоу ине.

## ҠИММӘТКӘ ТӨШКӘН ЙОҠО

Иртәнсәк баш мөхәррир Моратты саҡырып алды. Ҡулына хат тотторҙо. Алыҫ районда, урман эсендә ултырған кескәй ауылдан яҙылған ялыу.

– Ике көнгә командировка алығыҙ ҙа, тикшереп килегеҙ. Мәгәр дөрөҫкә сыҡһа, мәҡәләне киләһе аҙнаға ҡуйырбыҙ.

Исманғол халҡы бына инде өсөнсө ай электр утынан мәхрүм, имеш. Заманында бында леспромхоздың бүлексәһе булған, әммә иҡтисади көрсөк шарттарында ойошма бөлгән, күп тә үтмәҫтән бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан. Исманғолдарҙы Үрге Кәжән ауыл советына балансҡа ҡуйғандар, тик улары яңыраҡ ауылдың утын ҡырҡҡан. Сәбәбе – имеш, ике ауыл араһындағы электр бағаналары ҡолаған, сым өҙөлгән. Исманғолдар үҙ көстәре менән яңы бағаналар ултыртып сыҡҡандар, сым тартҡандар. Хәҙер ауылды әҙәмсә, тотҡарлыҡһыҙ тәьмин итеү өсөн бер-ике трансформатор кәрәк. Ләкин уныһына инде хәлдәре етмәй... Дизель табып сафҡа ебәреп ҡараған булғандар, әммә көсөргәнештең «һикереүе» һөҙөмтәһендә күптәрҙең һыуытҡыстары янған, телевизорҙар эштән сыҡҡан, ит, майҡаймаҡ кеүек ризыҡтар боҙолоп әрәм булған...

Морат тәүҙә Үрге Кәжән ауыл хакимиәте башлығы менән һөйләште. Ике йөҙ саҡрымдан килгән тауыш бик тоноҡ һәм асыулы ине.

– Беҙҙең балансҡа түгел улар. Башыбыҙға бәлә булдылар инде...

«Росэнерго»ның төбәк идараһына шылтыратты. Ниндәй мәсьәлә менән мөрәжәғәт итеүен белгәс, оҙаҡ көттөрҙөләр. Йәнәһе, бөтә етәкселәр ҙә кәңәшмәлә. Унан сәркәтип хужа сығып китте, иртәгә шылтыратығыҙ, тип яуапланы. Ныҡыша торғас, ниндәйҙер бүлек етәксеһен тота алды.

– Мәсьәләне беләбеҙ, улар беҙҙе лә ыҙалаталар ялыуҙары менән. Ләкин шуны аңлағыҙ, исманғолдар бит леспромхозға ҡарай...

– Юҡ ул ойошма. Бөткәненә биш былтыр!

– Улайһа, Кәжән ауыл советына...

– Ауыл халҡы электр уты өсөн һеҙгә түләйме?

– Ну, беҙгә...

– Тимәк, үҙ белдегегеҙ менән яуаплылыҡтан баш тарта алмайһығыҙ. Мәгәр һеҙҙең ҡарамаҡта булмаһалар, ут өсөн башҡа ойошмаларға түләрҙәр ине. Судҡа бирһәләр, һис шикһеҙ еңәсәктәр бит!

Теге түрә электр утын ҡулланыусыға килтереп еткереүҙең төрлө кимәлдә булыуын – етештереүҙең бер ҡулда, уны һатыуҙың һәм бүлеп таратыуҙың бүтәндәрҙә икәнен аңлата башланы. Быныһын Морат үҙе лә белеп тора. Ләкин былайға китһә, йәғни кемдең ғәйепле икәнен тәфсирләп сурыта башлаһаң, исманғолдар һис ҡасан да утлы булмаясаҡ. Шуға ла тыйылған сараға – ҡурҡытырға тотондо.

– Иван Петровичҡа (был төп етәксе ине) минең үтенесте тапшырығыҙ. Иртәгә телевидениенан төшөрөү төркөмө менән киләсәкмен. Шунда һөйләрһегеҙ хәбәрегеҙҙе...

Төштән һуң көткән шылтыратыу яңғыраны, Ғәзиләнән.

– Морат ағай, ҡотлағыҙ! Мине эшкә алалар!

– Ҡотлайым! Кем итеп?

– Референт итеп бер фирмаға! Ике аҙнанан килергә ҡуштылар...

– Ҡотлайым, Ғәзилә, ҡотлайым!

Морат уның өсөн ихлас шатланды.

– Бөгөн юлға сығам, киске поезға!

– Ҡарәле, иртәгә мин дә бит һеҙҙең яҡтарға юлланам. Иҙелбашына! Әйҙәгеҙ бергәләп!

– Уй, ул бит беҙҙең районға терәлеп кенә ята. Ҡалай уңай булды...

Был кисте осраша алманылар, апаһы Ғәзиләне ниндәйҙер концертҡа алып китте.

Иртәгеһенә алыҫ сәфәргә ҡуҙғалдылар. Эдик гәзәтенсә юл буйына сафсата һатып килде. Юлдаштары бик тиҙ ялҡты. Шофер иһә тәҙрә быялаһында ялтыраған күләгәһенә төбәп иммунитет ҡаҡшауҙың төп сәбәптәрен тәфсирләне. Моратҡа артта ултырып килгән ҡыҙ менән һөйләшергә форсат теймәне. Мөһабәт тауҙарға һәм ғәжәйеп гүзәл тәбиғәткә һоҡланып килергә генә ҡалды.

Өс сәғәттән Үрге Кәжәндә инеләр. Ауыл хакимиәте башлығын тап итә алманы. Бер һуҡмышыраҡ егет

машина маңлайындағы «Матбуғат» тигән яҙыуҙы күреп, көләп ебәрҙе:

– Бына кемдән өркөп ҡаскан икән беҙҙең Федорыч!

Бакһаң, иртә менән килеп урағән да, урмансылар яғына сығып олаккан. Сәркәтип мәрйә лә бер нәмә әйтә алманы. Артабан киттеләр, Исманғолға йәнә егерме бишләп сакрым ҡалғайны. Бик алама юл, емерелеп барған күпер ишараты. Заман ҡаҙаныштары ҡараңғы төбәккә электр бағаналары сифатында ғына килеп еткәйне. Кеҫә телефондарын һүндереп ҡуйҙылар, уларҙың файҙаһы ҡалманы. Ауылға инделәр, мәктәп бинаһын эҙләп таптылар. Баксала эшләп йөрөгән укыусылар сыр-сыу килеп уратып алды, ололар ҙа күренде. Сикһеҙ тулҡынланғандар ине, олорак апайҙарҙың күҙендә йәштәр ялтыраны.

– Һеҙ гәзиттәнме? Ә беҙҙә кисә генә ут бирҙеләр...

Бер-береһен бүлдерә-бүлдерә ғәжәп хәлде бәйән иттеләр. Бакһаң, кисә төштән һуң Иҙелбашынан бер көтөү түрә-кара, автобус тулы электриктар килеп төшкән. Төшкән дә «һә» тигәнсе трансформатор ҡуйып, күҙ асып йомғансы утты тоташтырып та ҡуйғандар!

Рәхмәттәрен яуҙыра-яуҙыра оҙатып тороп ҡалды исманғолдар. Бына ошондай ғәҙеллек тантана иткән ҡыҫка миҙгелдәр өсөн генә булһа ла эшләргә, көрәшергә кәрәк ине. Рухы күтәрелеп киткән Морат шулай уйланды.

Эш тамам, уларҙың ҡарамағында йәнә бер тәүлек. Үрге Кәжәнгә һуғылып көтмәгәндә башлыкты ҡаптырҙы. Уныһы шундуҡ ҡыскырына башланы:

– Һеҙ нишләп мине эҙәрлекләйһегеҙ?

– ?!

– Иҙелбашынан да, Өфөнән дә әрләүҙәре етмәгән, әле килеп һеҙ ҡаңғыртаһығыҙ...

– Сәбәбен беләһегеҙ бит. Исманғолдарҙы үгәйһетәһегеҙ икән.

– Мин үҙ аксама һатып алып уларға трансформатор ултырттым!

– Үҙ аксағыҙға?

– Ярай инде, һүҙгә бәйләнмәгеҙ. Беҙҙә бит әндрәй ҡаҙнаһы юк! Был Өфө түгел, беҙҙә нефтянка юк, был ауыл советы! Бөлгөнлөк, кризис! Трансформатор беләһегеҙме күпме тора?

Морат һүҙҙе элеп алды:

– ...әммә шуныһы ҡыуаныслы – ауыл советының бәғзе граждандары бик бай күренә, – кинәйәләп башлыктың тышта ултырған джибына ымланы.

– Нимәне күҙ уңында тотаһығыҙ?

– Нимә күҙ уңында – шуны тотабыҙ...

Мораттың ауыҙынан сыккан был яуап әллә үтә йүләр, әллә үтә мәғәнәле булды. Хакимиәт әһеле ҡаты уйланыуҙан көсөргәнеп, маңлайын сырыштырҙы ла, «һы» тип ҡуйҙы.

– Шулай булғас, бер трансформатор пүстәк инде ул һеҙгә.

– Мин юлды белдем, килеп йөрөрмөн инде, – тип уйынлы-ысынлы ҡапаҡлап хушлашты Тамерлан Федорович менән. Уныһы йәнә токанып китте:

– Мине күҙәтеү кәрәкмәй! Мин үҙ эшемде беләм! Икенсе көн йоклағаным юк!

– Йокламағыҙ ҙа, Тамерлан Федорович. Юғиһә, йоҡоғоҙ исманғолдар өсөн ҡиммәткә төшә.

Ғәҙиләнең ауылына киттеләр. Эх! Бигерәк хозур шул был яктар! Мөһабәт карағайҙар юлдың ике яғынан теҙелгән, ваҡыты-ваҡыты менән кинәт таралып китәләр ҙә, акландарҙа күпереп үҫкән муйыл ағастарына, ялбыр ҡайындарға урын бирәләр. Алыҫтарак күгелйем-йәшел тау армыттары һуҙыла. Уларҙың түбәһен селлә монары ҡаплаған. Шуға лә елпелдәп-елпелдәп китәләр, берсә алыҫайып, берсә якынайғандай тоҫ алалар. Машинаны Ағиҙел ярында туктатып, йәшел үләнгә аяк баҫтылар. Тирә-яктан хуш еҫ аңкый, меңәрләгән сиңерткәләр зырлай, өҙҙөрөп-өҙҙөрөп коштар һайрай. Инде һакауланған кәкүк сакыра. Ҡыҙык, башта ул бака һымак уа-ка-ка-ка, уа-ка-ка-ка тип ала. Унан ҡәҙимгесә кәк-күк, кәк-күк тип бөтөрөп куя. Үтә лә мәҙәк ине был.

Морат ак күлдәген сисеп ырғытты ла, ялан аякланып йылғаға йүгерҙе. Джинсыһын сисеп үләнгә һалды, ярҙан ятыуға һикерҙе. Эх, ҡандай ләззәт! Булған борсолоуҙары, асыу-хәсрәте юкка сыкты. Ошо саф һыу алып китте уларҙы. Тәрән генә ине бында, урталарак ҡулын күтәреп үлсәп ҡараны, баштан аша икән. Ҡолас ташлап теге ярға йөҙөп сыкты. Тәү карашка ҡаксарак тойолһа ла, кояшка шактай янған тәненән көс-ғәйрәт урғылып тора ине. Эдик иһә һыуға инергә ҡыйманы. Танау эсенән мөгөрләп, яр ситендәге суйыр ташта һәйкәлдәй баҫып тороуы ине.

Ғәҙилә хуш еҫле акланда күбәләктәй бөтөрөлдө. Унан машинаға ингәс, юлдаштарын эре-эре еләк менән һыйланы, йыйып алған гөлләмәһен пластик һауытка урынлаштырҙы. Донъялар тағы ла яктырып, сағыуланып киткәндәй булды.

Эдик радиоһын ҡабыҙып ебәрҙе. Башкортса ниндәйҙер тапшырыу бара. Тик асык ишетелмәй, шытыр-мытыр килә. Йәйге хозур көндә сикһеҙ офоктарҙа талпынған ҡоштай кәйефе күтәрелде Мораттың. Һәм башынан үткән мәҙәк хәлдәрҙе бәйән ҡылыуға кереште.

## ҠЫҘЫҠ-МЫҘЫҠ-МӘРӘКӘ

– Радиола эшләгәндә нисек ине тип һорайһың? Шәп ине, күңелле ине! Әлбиттә, үҙ ауырлыктары ла булғандыр, әммә ҡыҙык-мыҙыктары күберәк хәтерҙә калған.

Бер мәл Баймак яктарынан командировканан ҡайтып киләбеҙ. Үҙебеҙҙең Башкортостан радиоһын тыңлайбыҙ. Юлыбыҙ тауҙар аша үтә. Бәйләнеш насар: сигнал йә юғала, йә килеп сыға. Диктор иғлан итә бер заман:

– Ә хәҙер, хөрмәтле тыңлаусыларыбыҙ, иғтибарығыҙға мәшһүр йырсыбыҙ Рамаҙан Йәнбәков башкарыуында башкорт халык йыры «Уйыл»ды тәкдим итәбеҙ!

Шулай тип әйтеүе булды, сигнал юғалды. Ҡот оскос көй яңғыраны, был Америка негрҙарының «кара» рэп музыкаһы ине! Теге йырсы акырып-акырып йырлай, шиғыр укыған һымак өҙөп-өҙөп һөйләнеп тә ала. Мәхшәр! Унан йәнә сигнал килеп «капты», беҙҙең диктор килеп сыкты:

– Хөрмәтле дуҫтар! Һеҙ халкыбыҙҙың мәшһүр йырсыһы Рамаҙан Йәнбәков башкарыуында башкорт халык йыры «Уйыл»ды тыңланығыҙ...

Көләшеп алдылар. Морат мәҙәктәрен дауам итте.

– Тура бәйләнештә эшләүе рәхәт түгел ул. Һәр әйткән һүҙең, һәр тын алышың ишетелеп тора. Һине бер юлы миллионлаған халык тыңлай! Минең шеф әйтмешләй, ответственность огромная!

Шулай бер вакыт балаларҙы тәрбиәләү ысулдары хакында һөйләшеү алып барам. Кемдәр ишле бала тәрбиәләй, уларҙың шылтыратыуын, тәжрибә уртаклашыуын һорайым. Ә телефон линияһына Өфөнән бер әбей «кунаклап» алды ла китмәй ҙә китмәй.

– Мин бала-сағаны шулай-шулай тәрбиәләр инем, – тип хәбәр һата.

– Ә үҙегеҙҙең балаларығыҙ нисәү?

– Ә минең бала-саға юк. Сөнки мин кейәүгә сыкма-

ған, – ти был. – Иллә мәгәр булған булһа, мин уларҙы шулайтып-шулайтып тәрбиәләр инем...

Билдәле, был ҡыҙыҡ түгел. Сафсата һатыу ғына. Тик әбейем аңламай, һаман үҙенекен тылҡый. Шулайтыр инем, былайтыр инем...

– Ярай, инәй, ҙур рәхмәт һеҙгә! Киләсәктә лә беҙҙең радионың тоғро юлдашы булып ҡалырһығыҙ тип ышанам!

Хушлаштым да микрофон төймәһенә төрттөм. Ә үҙемдең һарыу ҡайнай, яман һүҙ ысҡынғанын һиҙмәй ҙә ҡалдым:

– Достала бабка!!!

Ҡарайым, быяла артында аппаратныйҙа ултырған режиссерҙың күҙе аҡшайып китте. Баҡһаң, минең «достала бабка» бөтә ғаләмгә сығып ысҡынған! Ашыкбошоҡ баҫҡан микрофоным һүнеп бөтмәгән булып сыҡты...

Был әкәмәттең ғауғаһы ҙур булды, мине эштән ҡыуҙылар. Ләкин файҙаһыҙ зыян булмай, тиҙәр. Ошо хәлдән һуң теге әрһеҙ әбей башҡаса эфирға сыҡманы. Һөнәрҙәштәр үҙемә рәхмәт уҡып йөрөнө.

Көлөштөләр. Һүҙгә Эдик ҡушылды. Үҙенең нисек итеп уролог урынына гинеколог кабинетына барып эләгеүен бәйән итә башлағайны, килеп тә еттеләр. Бейек тау аҫтында аҡ таҫмалай йылтырап йылға аға. Йәшел ярында ыҡсым ғына ауыл күренә ине.

## ЙЫЛҒА ӨҪТӨНДӘ КӨМӨШ АЙ

Йәйге көн самаһыҙ оҙон. Морат мунса янындағы бүрәнәлә ултыра. Көн эҫеһе инде һүрелгән. Талғын ғына еләҫ ел иҫеп ҡуя. Рәхәт уға, сикһеҙ рәхәт. Бер ҡайҙа ла ашығырға түгел. Күңеле менән, бөтә булмышы менән ял итә ул.

Бигерәк йәмле, бигерәк хозур шул был яҡтар. Өй йәшел сирәм каплаған ярҙа ултыра. Картуф баҡсаһы талғын ғына һөҙәкләнеп бер осо менән йылғаға төшә. Унда бала-саға сыр-сыу килә, сепрәк киҫәге менән селбәрә һөҙә. Эй, бәхетле, уйһыҙ бала саҡ. Сағыу ҡояшлы, йәм-йәшел үләнле, ап-аҡ болоттар йөҙгән зәңгәр күкле вайымһыҙ мәл...

Тарбағай тирәктәр картуф баҡсаһының ҡырыйы буйлап ултырған. Уларҙың мул күләгәһендә ҡош-ҡорт йөрөй, бер-ике кәзә ята. Ҡупшы ғына әтәс ҡойма башына ҡунаҡлаған. Ҡойма буйлап ҡуйы әрәмәлек, кеҫерткән шаулап үҫә. Ҡыуаҡтарҙа емеш-еләк ҡыҙара. Йылы тиреҫлектә еңгәсәйҙәр ҡыҙына, себештәр тибенә.

Бына ошо йәйге хозурлыҡтың уртаһынан бер ҡыҙ атлай. Ул ыҡсым кәүҙәле, ҡыҫҡа итәкле күлдәге тығыҙ тәненә һылашҡан. Ҡабарып торған сәс толҡындары түңәрәк йөҙөн тағы ла күркәмерәк, тағы ла һөйкөмлөрәк итә. Был Фәҙилә. Иҙелдән һыу алып ҡайтып килеүе. Күнәктәр ауырлығынан һығылып, яй ғына атлай. Һуҡмаҡтан өҫкә ҡарай менеп килә. Баш өҫтөндә турғайҙар сырҡылдаша, ҡайҙалыр кәкүк өҙгөләнә, һандуғас моңо һибелә. Ғәжәп, әммә был илаһи күренеш Моратка таныш. Төшөндәме, өңөндәме күрҙе уны. Бәлки берәй рәсемдәлер. Ҡояшлы йәйге иртәләме, кистәме, көмөш һыулы йылға буйынан сибәр ҡыҙ ҡайтып килә, имеш. Күнәктәре мөлдөрәмә тулы, өҫтөндә күңелле саткылар уйнай. Ҡыҙ бик һылыу, йөҙөндә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайыу сағыла. Тик уның Фәҙилә икәнлеген генә белмәгән шул!

Их, ниндәй көн бөгөн... Һөйгәне йәйләп кына янына килә, Ағиҙел толҡындары талғын ғына тибрәлә. Ә күңелдә күптәнге матур йыр яңғырай. Кәйефе күтәренке, йәки, киреһенсә, бик ауыр булғанда ниңәлер моңлана башлай ул. Бына әле лә танау аҫтынан ғына мөңгөрәне.

*Аҡ толҡындар, аҡ толҡындар*
*Ярға ҡаға ҡанатын.*
*Эй, сибәр ҡыҙ, эй, ҡара күҙ,*
*Күҙем төштө һиңә, башҡорт ҡыҙына.*

Морат урынынан һикереп торҙо ла ҡаршыға йүгерҙе, көслө ҡулдарына тулы биҙрәләрҙе алды. Мәгәр кемдер иғтибарлап күҙәтеп торһа, икеһенең дә йөҙөндә бәхетле йылмайыу әҫәрен шәйләр ине.

Эх, ҡара мунсаға ни етә! Егеттәр иң ҡыҙыуына инде. Ысын күңелдән рәхәтләнеп сабынды Морат. Фәҙилә биреп ебәргән айранды һемерә-һемерә мунса сиоланында ял итеп алды. Эдик күберәк иҙәндә ултырҙы. Унан йәнә быулы-боҫло ожмахҡа!

Кис Мораттарҙы күрше йортҡа алып киттеләр. Фәҙиләнең ағай тейеш туғаны ашҡа саҡырғайны. Йырлашып ултырҙылар. Егеттәр ошо ҡунаҡсыл йортта ҡунырға тейештәр ине. Халыҡ йәйләп таралды. Һаман Морат тирәһендә өйөрөлөүсе һипкелле ҡыҙ, исеме Рәмзиә булды шикелле, оран һалды:

– Йәштәр, киттек клубҡа!

Моратты ҡултыҡлап уҡ алды. Оһо-һо, был хәтәр күренә... Әммә инде ҡартайып барғанда үҙен йәштәр иҫәбенә индереүгә һис тә ҡаршы түгел ине. Фәҙиләнең шелтәле ҡарашын тойғандай булды. Әрһеҙ ҡыҙ талпан кеүек йәбешеп алғайны. Үҙе юлдашына һыйынып инеп бара, үҙе бер минутҡа ла тынмай, билдәле журналист Морат Ҡондоҙбаевтың ижадына булған ҡайнар мөхәббәтен тәкрарлай. Мин һеҙҙең гәзиткә бер шиғырымды килтерәм, кеҫә телефонығыҙҙы бирегеҙ тип ныҡыша башланы.

– Теләйһегеҙме, мин шиғырымды уҡып ишеттерәм, тик көлмәгеҙ, йәме, – Рәмзиә рөхсәт көтөп йонсоманы. Сәхнәлә шиғыр һөйләгәндәй яһалма күтәренкелек менән сутылдай башланы:

*Тау башында яңғыҙ бер ҡайын бар.*
*Йәшел яулыҡ ябына яҙ һайын.*
*Иркәм, һиңә булған ҡайнар хисем*
*Гөрләп сәскә ата таң һайын.*

Арттараҡ ҡалған Фәҙиләне байҡап бара ине, шуға ла шиғырҙың аҙағын ғына ишетте. Һәр таң һайын сәскә атыусы үҫемлек бик сәйер, хатта шикле тойолдо. Ундай мөғжизәне күҙ алдына баҫтыра алмағас, эстән генә мыңғырҙап ҡуйҙы.

– Есенин, блин...

Тик ижад ҡомары солғап алған шағирә юлдашының эске кисерештәрен абайламаны.

Клуб ябыҡ булып сыҡты. Рәмзиә яңғыҙ фонарь аҫтында һөйләшеп торған йәштәр араһына инеп юғалды. Ниндәйҙер оҙон буйлы һуҡмыш егет ҡосаҡлап ҡарманы ла, сыр-сыуына төкөрөп тә бирмәҫтән алды ла ҡалды. Рәхмәт инде үҙенә.

Ике ғашиҡ иһә йылға буйына төштө. Ғәжәйеп төн ине. Ҡараһыу күк бүҫтауында меңәрләгән йондоҙҙар тоҡанған. Бына берәүһе кинәт урынынан ҡуҙғалды ла, һалмаҡ ҡына осоп китте.

– Ой, йондоҙ атылды! Теләк теләйек! – Фәҙилә юлдашын беләгенән тотоп алды. Ҡайнар һулышын тойғандай булды.

– Әйҙә һуң...

Йондоҙ дерелдәп балкый-балкый аҫка төшөп юғалды. Ҡайҙалыр эт өрә. Иҙел ҡамышында баҡалар йыр һуҙа. Ара-тирә балыҡ һикергеләй, нимәләр шаптырлап һыу өҫтөндә уйнай. Ҡыр өйрәгеме икән? Улар төндә йоҡларға тейештер ул? Тирә-як ҡуйы ҡараңғылыкҡа

сумған. Ай нуры тулҡын өҫтөндә ялтырай. Ниндәйҙер әкиәти юл һымаҡ йылға буйлап һуҙылып киткән. Эх, ошо юлдан йән һөйгәнең менән ғүмер буйы ҡулға-ҡул тотоношоп барырға ла барырға ине.

– Һин нимә теләнең?

– Һин теләгәнде...

– Ә мин нимә теләнем һуң?

Морат яуап урынына ҡыҙҙы ҡосағына алды. Һалҡынса таң еле иҫә башлағансы ултырҙылар. Морат, ҡыҙҙың ҡалтырана башлағанын тойоп, курткаһын сисеп кейҙерҙе. Ҡыҙ башын уның күкрәгенә һалды. Был таңда күп нәмәләр хаҡында серләштеләр.

– Мин йәнә ике аҙнанан ғына булам Өфөлә. – Гәҙиләнең тауышында моңһоуланыу ауаздары ишетелеп ҡалғандай.

– Беләм, Ғәҙиләм, беләм.

– Ҡасан үтә инде шул ваҡыт. Өҫтәүенә беҙҙә телефон да тотмай.

– Ә мин һиңә хат яҙып торормон.

– Беҙҙә почта насар эшләй. Аҙнаһына ике мәртәбә генә тараталар.

– Ә беҙ көн һайын, сәғәт һайын хат алышасаҡбыҙ. Вәғәҙә итәм.

– Нисек?

– Электрон адрес яһап бирәм дә һиңә, хәбәрләшә башларбыҙ.

– Ә минең компьютерым юҡ. Хәйер, ағайымдың ҡыҙында бар. Интернеты ла бар. Шуға барып яҙышырмын.

– Улайһа, хәҙер адрес уйлайбыҙ.

Бер аҙ кәңәшләшеп түбәндәге адреста туҡтанылар.

– Гәҙилә28 (быныһы йәше ине ҡыҙҙың) собачка мэйл нөктә ру.

– Ә пароль, пароль нисек буласаҡ беҙҙең почтаға?

– Паролебеҙ – мөхәббәт.

Морат һөйгәнен һаҡ ҡына, наҙлап ҡосаҡланы. Балдай татлы тулы ирендәренән һурып үпте. Йөрәк менән йөрәк серләште.

– Мин көтәрмен.

– Мин ризамын.

– Мин һине бер миҙгелгә генә лә онотмаҫмын.

– Беҙ бер ҡасан да айырылышмаҫбыҙ!

Ләкин алда нимә көткәнен улар күҙ алдына ла килтермәй ине...

## ЙӘЙГЕ СЕЛЛӘ

Гәҙилә бөгөн дә инде нисәнсе тапҡыр тау башына менә. Зәғиф бәйләнеш һыҙаты ошо төштә килеп сыға. Шылтыратты. Юҡ, телефонын алмай. Бына икенсе аҙна инде Мораттан бер ниндәй ҙә хәбәр юҡ. Ҡайтып китте лә, уның тормошонда бөтөнләй булмағандай юҡҡа сыҡты. Бәйләнешкә сыҡмай. Электрон адресы асылмай. Бәлки, вәғәҙә итһә лә, эшләмәгәндер. Гүзәл һеңлеһенең интернетында маташтырып ҡараны, ләкин уңышҡа өлгәшмәне. Паролде яҙып ҡарай, тик тимер машина нишләптер үжәтләнә, рөхсәт бирмәй. Пароль дөрөҫ түгел. «Мөхәббәт» бармай, тимәк. Быныһы инде бөтөнләй үлтерҙе ҡыҙҙы. Шулай уҡ, яратам тип һөйләгән ялҡынлы хәбәре буш һүҙ генә килеп сығамы инде? Ҡыҙ быға ышанманы. Тимәк, ысынлап та, ниҙер булған, ниндәйҙер ҡурҡыныслы хәлгә тарыған. Бәлки, телефонын юғалтҡандыр ҙа, ҡош телендәй ҙә хәбәр ебәрә алмайҙыр. Ә ниңә апаһы аша сығып ҡарамай икән? Хат яҙырға ла мөмкин, тик почтальон уларҙың йортон урап үтә торҙо. Рәмзиәнең әсәһе тарата баҫмаларҙы. Бер көн эшһеҙ ятҡан студент ҡыҙ үҙе килеп инде. Ҡулында гәзит-журнал тулы ауыр сумка. Гәҙиләнең атаһы яғынан өс туған һеңлекәше килеп сыға ул.

– Апай, ә миңә теге корреспондент ағай телефонын бирҙе...

Уның һипкелле йөҙө шул мәлдә ҡыуанысһыҙ тәҫ алғайны, Гәҙилә түҙмәне, көләп ебәрҙе. Ат башындай алтын тапҡанмы ни! Быны Рәмзиә үҙенсә аңланы һәм ашығып өҫтәп ҡуйҙы

– Белгең килһә, ул минең шиғырҙарҙы гәзитендә баҫтырам, тине.

Рәмзиә был ғына аҙ булыр типме, фәстереп ебәрҙе:

– Ул миңә шылтыратып, яңы әйберҙәренде лә әҙерләй тор, көҙ уҡыуға килгәнеңдә индереп сығарһың тейсе... Эй, бәйләнсек ағай ҙа инде.

Кинәт усындағы кеҫә телефоны нескә һелкенеп алды ла күңелле генә көйләп ебәрҙе. Морат! Гәҙилә экранға төбәлде. Юҡ, апаһы икән. Һирәк-һаяҡ һөйләшеп тора уның менән. Тик Морат тураһында һыңар һүҙ ҙә әйткеһе килмәй. Теге юлы Тирәкленән ҡайтышлай шоферы менән инеп сығыуын ғына хәбәр итте лә вәссәләм. Үҙе шылтыратмай, килеп хәл дә белешмәй, ти. Йүнһеҙ кеше тип тә битәрләргә тартынмай. Телефондан башта ниндәйҙер шау-шыу, музыка ауаздары яңғыраны. Унан теге остан ярып һалдылар.

– Морат та Морат тип аҡылдан шашаһың... Бына алдымда тора Моратың, әле генә бер ҡыҙ менән тоттом. Тфү, мәсхәрә!

***

Бер мәл таныш рәссам Әнисәнең портретын эшләгәйне. Тәүҙә ҡағыҙ битендә груша хасил булды. Ауыҙ урынына ҙур ҡыҙыл ирендәр яһаны. Унан икенсе грушаны баштүбән әйләндереп тәүгеһенең аҫтына терәне. Бүтән һис нәмә лә өҫтәп мәшәҡәтләнмәне. Күҙ ҙә, ҡолаҡ та, муйын да, аяҡ-ҡул да юҡ. Ике груша ла бер шәлкем ирен.

– Тамам! Бына был һеҙҙең дөйөмләштерелгән рәсемегеҙ, – тине. Шаяртты булды үҙенсә. Әнисә бик ҡаты асыуланғайны ул саҡта.

Ванна бүлмәһендәге ҙур көҙгө алдында тороуы ине. Данилын тапҡандан һуң ҡапыл ғына һимерҙе лә китте шул. Кәүҙәһенең өҫтө ҡалынайып, аяҡ яғы үҙгәрешһеҙ ҡалды. Ысынлап та грушаға оҡшап тора. Киң яуырындары был тәьҫоратты тағы ла көсәйтә төшә. Муйыны әүәле лә самалы ине, хәҙер инде икенсе эйәк баҫымында тамам ултырған. Сикәләр үҙе яратҡан мәкле булочкалар кеүек ҡабарып тора. Ҡаш-керпеген һыҙғыслап йөрөһә, күҙҙәре былай матур ғына. Тик әле йыуынғандан һуң, һөрмә-буяуҙары ағып төшкәс, нисектер төҫһеҙләнеп ҡалған. Йөнтәҫ таҫтамалын башына ҙур итеп урап ҡуйғайны, яңы оҡшашлыҡ шәйләп, сырайын һытып алды. Аҡ бәшмәк, хәс тә аҡ бәшмәк! Эшләпәле аҡ бәшмәк...

Танау бәләкәйерәк, кәкесерәк. Хәйер, нәк ошондай морон кемгәлер бик оҡшай, ти ул. Китапта уҡығайны. Ир-егеткә килешмәй, әлбиттә. Ә бына ҡатынҡыҙға серлелек, нәфислек, нәзәкәтлелек бирә тиҙәрме шул. Иөҙөндә иң айырылып, мин бында тип ҡыҫҡырып торғаны – әлеге лә баяғы ҡабарынҡы ирендәре. Теге рәссам былай бик дөрөҫ тотоп алған төп сифаттарын. Ысынлап та, арҡыс-торҡос ҡуйылған ике грушаны хәтерләтә икән. Ләкин был уйҙарын тиҙерәк ҡыуа һалды. Уның һымаҡ булырға кәрәк әле. Ана, утыҙға етте, ә бер генә лә сырышы, йыйырсығы юҡ. Хоҙайға шөкөр. Күкрәктәре бик матур. Эске һөйкөмлөгө лә юҡ түгел. Һәр хәлдә ир-ат заты урап үтмәй.

Тик йүнлеһе генә осрамай. Шулай булғас, оһо-һо әле беҙ...

Үҙенең ошо уйҙарынан ҡатын дәртләнеп китте. Оһо-һо-һо тинемме шул? Кәнишне. Оһо-һо-һо шул! Бынау ҡәҙәре фатирҙы ла, ундағы зиннәт-киммәтте лә үҙ ҡулы менән булдырҙы. Тик ирҙән генә бәхете юҡ. Ана Ғәҙиләгә генә әҙергә-бәҙер егет тап була ла ҡуя.

Ишеккә нимәлер бәрелде. Унан ҡыңғырау тауышы ишетелде. Ҡатын йөнтәҫ халатын кейә һалып, ялан аяҡ килеш ишеккә ынтылды, күҙәтеү уйымына терәлде. Оҙаҡ йәшәр был Ғәҙилә. Теге абышкаһы, Морат. Эргәһендә ябыҡ ир, уныһын белмәй.

– Инегеҙ, рәхим итегеҙ!

Морат водителе менән ауыр ғына токто индерҙеләр. Ә-ә, картуф был. Ғәҙилә ауылдан ебәргән. Шылтыраткайны шул.

– Һаумыһығыҙ, картуф килеп етте! Ҡайҙа ҡуйырға?

– Әйҙәгеҙ, балконға ҡуяйыҡ.

Әнисә үҙе баҡсаһында емеш-еләк, картуф-сөгөлдөр үҫтереп ыҙаламай. Ваҡыты юҡ. Һатып алырға мөмкин, әлбиттә. Тик аҡсаһы сығып барамы ни уның? Шуға ла ауылдан нимә килтерергә була, һәммәһен дә ташый.

Сәй эсергә ҡыҫтаны, әммә юлсылар тотҡарланманы. Әнисә эйелгәйне, халат иҙеүҙәре асылып китте лә ап-аҡ түштәре күренеп ҡалды. Шофер ирҙең аҫтыртын ҡарашын ап-асыҡ тойҙо. Әлбиттә, бындай иғтибарға өйрәнгән ул. Әммә һокланыу-хисләнеүҙең ҡасан артыҡ булғаны бар? Тик Мораттың йөҙөндә бер ниндәй ҙә кисерештәр сағылманы. Хәйер, юҡ. Саҡ ҡына йылмайып ҡуйғандай тойолдо. Мыҫҡыл итәме, оятһыҙ? Әллә юрамал түшен асты тип аңланымы? Был хужабикәнең зитына тейҙе. Ярай-ярай, Ғәҙиләңдең дә минән артыҡ ере юҡ әле. Ул да иренән айырылған прастуй ауыл бисәһе. Йолкош, йәнем көймәгәйне!

Ҡуҙғалып китеүҙәрен балкондан ғына күҙәтеп ҡалды. Кире бүлмәгә сыкты. Был нимә? Ишек төбөндәге йомшаҡ балаҫта, ултырғыс аҫтындараҡ, нимәлер сипылдап телгә килде. Күгелйем төҫтә яктырып-яктырып алды. Кеҫә телефоны. Мораттыҡы. Моғайын, аяҡ кейемдәрен сискәнендә эйелгән дә, "сименсы" шым ғына төшөп ҡалған. Ҡатын ҡыҙыҡһыныуын тыя алмайынса, төймәләргә баҫҡыланы. Тә-ә-к, кемдәрең бар икән, иптәш корреспондент? Атаҡ, артыҡ һис кемгә лә хәжәтең юҡ икән дә баһа. Фәҡәт Ғәҙилә генә шылтыраткан да шылтыраткан. СМС-тар ебәргән. Мораттың да яуаптары шул сама. Һағындым, көтәрмөн... Фу, уҡыуы ла көлкө. Мөхәббәт, имеш. Әнисәне аңлайышһыҙ көнсөллөк хисе биләне. Нишләп берәүҙәргә үлеп ғашиҡ булалар, ә икенселәр үҙ яртыһын эҙләп иң матур йылдарын заяға уҙғара? Ғәҙеллек бармы был донъяла, әллә юкмы? Юҡтыр. Әнисә телефонды шкаф эсенә бырактырҙы.

Морат алыҫ районда йөрөгән арала республикала бик етди үҙгәрештәр булып алған, имеш. Президент мөҙҙәтенән алда ялға китеп, Мәскәү яңы етәксе тәғәйенләп ҡуйған. Аҡ йортта тын ғына ҡаңғырыш бара. Депутаттар әүәлге совет заманындағы кеүек бер тауыштан яңы башлыҡ өсөн тауыш биргән. Халыҡ, әлбиттә, бер аҙ шаңҡып ҡалған. Морат ҡайтҡас, ҡала майҙанында йыйылған йәштәр пикетында йөрөп килде. Республика мәнфәғәттәрен яклауҙы талап итеп сығыш яһаусылар ине улар. Баш мөхәррир хеҙмәткәренең был ҡылығын хупламаны. Йөрөй шунда ҡаңғырып, эт өргәнгә бет өргән тигәндәй... Ул турала бер ниндәй ҙә мәҡәлә яҙмайһың, барыбер үткәрмәйем!

Ошо дөйөм буталсыкта һимеҙ балыҡ тоторға теләүселәр хасил булды. Мораттың ҡан «дуҫы» – Ҡаран-Йылға районының элекке хакимы гәзиттә мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Бына, йәнәһе, ниһайәт, азатлыҡ! Исмаһам, хәҙер йәнең теләгәнсе үҙ фекереңде әйтергә, кемде теләйһең шуны тәнҡитләргә мөмкин. Имеш, элекке батшалар уны ҡот осҡос ҡыйырһытҡан, булмаған гонаһтарҙа ғәйепләп көнө-төнө ҡанын эскән...

Морат был хаҡта ишеткәс, Рафаил Ғүмәровичҡа бәреп инде. Янъял көткәйне, әммә түрә «аңлашыуға» үтә лә тыныс төҫ бирҙе.

– Беҙ республика баҫмаһы, беҙ алдынғы сафтарҙа барырға тейешбеҙ, ответственность хәҙер айырыуса огромная! – тип башланы мөхәррир. Уны яҡын арала вазифаһынан бушатырға йыйыналар тигән хәбәр дөрөҫкә сығырға оҡшай. Бажаһы былай үҙ урынында, әммә ул да бөгөн бында, иртәгә тегендә тигәндәй. Бигерәк һурығып, үтә лә етдиләнеп киткән. Хәҙер һәр кем менән ифрат та иғтибарлы, атайҙарса яғымлы һөйләшә. Ысынлап та, йомшаҡ ҡәнәфиһенән ҡыуып төшерһәләр, исмаһам, хеҙмәткәрҙәрендә булһа ла яҡты хәтирәләр ҡалыр тип өмөтләнәләр. Бахыр. Морат ҡапыл уғата ҡартайып киткән түрәне йәлләп ҡуйҙы. Эйе, ни тиклем бейек менәһең, шул тиклем ҡолап төшөүе ҡыйыныраҡ шул.

Рафаил Ғүмәрович бармағы менән ишаралап яҡыныраҡ килергә ымланы. Морат эйелә биргәс, шыпырт ҡына өҫтәне. Әйтерһең дә хәрби серҙе систе:

– Беҙ уны, – бармаҡ өҫкә күтәрелде, – (яңы президентты, тип аңланы Морат) хупларға тейешбеҙ...

– Мин ҡаршы түгел, мәгәр республикаға һәм уның аҫаба халҡына арҡыры тормаһа! – тине Морат ҡәтғи төҫ менән.

– Ләкин Ҡаран-Йылға бурының мәҡәләһен баҫыуығыҙҙы һис нисек тә аңлай алмайым. Был бишкәрәктәрҙе генә түгел, тотош район халҡын һатыуға тиң!

– Тынысланығыҙ, беҙ уларҙың да хаттарын баҫасаҡбыҙ. Хәҙер асыҡлыҡ заманы!

Көндәр үтте, тик баш мөхәррир үҙ вәғәҙәһен үтәргә ашыҡманы. Морат әҙерләп биргән хаттар берләшмәһе лә яуаплы сәркәтип бүлмәһенән сыға алманы. Рафаил Ғүмәрович менән аралары боҙола барҙы. Өҫтәүенә, Аҡ Йорттағы дуҫы Мирас Шаһиевичты алып ташланылар. Уның, бик итәғәтле, намыҫлы кешенең башын, һис шикһеҙ, күп һанлы «дуҫ»тары ашағандыр.

Әммә иң борсоғаны – Ғәҙиләнән хәбәр булмауы. Әмәлгә ҡалғандай, кеҫә телефонын юғалтты, бәйләнеш өҙөлдө. Әнисәгә лә инде нисәнсе ҡат өндәшеп ҡараны, юҡ, һеңлем миңә лә шылтыратмай ти. Ғәжәп... Электрон адресҡа хәбәр артынан хәбәр ебәрә, яуап юҡ. Почта бүлексәһенә барып хат та яҙып һалды, тик файҙаһыҙ. Бәлки, элекке ире Себерҙән ҡайтҡандыр ҙа, яңынан ҡауышҡандарҙыр? Шул уйҙарын һаман да ташламаған, апаһы аша сәләм ебәреп тора тип һөйләгәйне Ғәҙилә. Юҡ, уныһы мөмкин түгел. Морат хәүефле уйҙарын ҡыуырға тырышты.

Иртәгеһенә бүлмәһенә Гөлназ килеп инде. Зәңгәрһыу күлдәк кейгән, сәсен ыҡсым ғына итеп үргән. Морат унығына юл ыңғайы ғына иғтибар итте, элекке кеүек комплимент яһап торманы.

– Морат ағай, минең һеҙгә бик ҙур үтенесем бар ине...

Ҡыҙ күҙҙәрен тултырып ҡараны. Ниндәй йомош тағы? Морат компьютерынан айырылды.

– Миңә буйҙаҡтар темаһын яҡтыртырға ҡуштылар.

– Шунан? Әллә минән интервью алырға самалайһыңмы?
– Шаяртмағыҙ әле, Морат ағай. Миңә Синтезспирт заводының мәҙәниәт йортона барырға кәрәк. Унда димселәр клубы эшләй икән. Аулаҡ кисәһенә.
– Шунан?
– Яңғыҙым барырға ҡурҡам. Унда ныҡ бәйләнәләр ти ҙә ул...
– Шул сәбәпле мине эйәртеп алып барырға уйлайһың инде?
– Зинһар өсөн, Морат ағай! Үтенеп һорайым. Башҡа һалыныр кешем юҡ, беләһегеҙ бит.
Күптән түгел балалар йортонан яҙған уңышһыҙ мәҡәләһе өсөн ҡыҙға ярайһы ғына эләккәйне. Отпускыһына ла һаман китә алмай йөрөй. Меҫкен. Теге юлы йәйге кафела күрһәткән кәмите өсөн Морат ҡыҙға асыуланыңҡырап йөрөй ине. Ләкин хәҙер уның ғәйепле кеше төҫлө башын эйеп килеп инеүен күреп, һарыуы баҫылды.
– Ә нишләп һин яҙырға тейеш? Минеңсә Эльвира Вәкилевнаның, редакцияның маҡтаулы карт ҡыҙының, мораль хоҡуғы көслөрәк түгелме ни? Аулаҡ өйгә йөрөргә уға ҡулайыраҡ та баһа...
Ғәҙәтенсә аҫҡы иренен бүлтәйтеп, күршеһенең һаман ризалыҡ бирмәүенә үсегеп торған Гөлназ йәнләнеп китте, пырхылдап көлөп ебәрҙе.
– Эйе шул. Ҡулайыраҡ! Тик нишләптер бер ҙә барғыһы килмәйсе.
Кис Морат ҡыҙҙы фатирынан барып алды ла Октябрь проспекты буйлап елдерҙе. Ҡараңғы төшөргә әле иртәрәк, әммә халыҡ яйлап тартыла башлағайны бында. Залда өҫтәлдәр ҡуйылған, музыка уйнай. Йәштәрсә кейенгән, сағыу биҙәнгән оло ханымдар, сәстәре ҡойолоп бөтһә лә йәшлек дәртен юғалтмаған бабайҙар, урта йәштәге ҡатын-ҡыҙ күпселекте тәшкил итә. Гөлназ шунда уҡ эшкә тотондо. Аулаҡ кисәһен ойоштороусы апайҙар менән танышты, аҙаҡ буйҙаҡтарҙың үҙҙәренән һорау ала башланы.
Морат ни эшләргә белмәй, бындай кисәләргә ҙә ул тәүге тапкыр ине, – унда һуғылды, бында һуғылды. Сәғәт буйына машинаһында ултырҙы, кире инде.
– Уй, Морат ағай, һеҙҙе көттөрҙөм инде, – ҡыҙ тып итеп алдына баҫты. Күҙҙәре ялтырап киткән, ирендәре асылған. Сибәр, шайтанбикә.
– Минең эш бөттө инде. Әйҙәгеҙ берҙе генә бейеп алайыҡ та, ҡуҙғалайыҡ.
Мораттың бер минут та тоткарланғыһы килмәй ине. Ләкин тап ошо мәлдә "Аҡ бейеү" иғлан иттеләр. Ҡыҙ нәҙәкәтле ҡыланып бейергә төшөрҙө. Нишләйһең, ризалашырға тура килде. Уртаға сығырға ла өлгөрмәнеләр, ниндәйҙер хәрби формалағы йыуантыҡ ир ҡыҫылды:
– Ғәфү үтенәм, егет кеше, һеҙҙең туташығыҙҙы саҡыра алмаҫмынмы икән?
Был майор бер нисә секунд ҡына алдараҡ өндәшһә, Морат ҡуш ҡуллап һылыуҡайҙы тотторып ебәрер ине. Тик хәҙер һуң инде. Күңелендә хосусилыҡ ҡорто оялап өлгөргәйне.
– Юҡ, булмай!
Кавалер һөмһөҙ итеп текәлеп тороуын дауам итте.
– Ну?
Ошо «ну» үлтерҙе лә инде. Бында һиңә казарма бармы, солдафон?
– Китегеҙ! Был минең кәләшем!
Морат шулай тине лә, үҙе лә һиҙмәҫтән ҡыҙҙы суп иттереп үбеп алды. Аһ, шайтан! Ни эшләне? Теләмәгәйне бит.
Стена эргәһендәге ултырғыска ҡунаҡлаған Әнисәнең күҙҙәре маңлайына менде. Ул яңы ғына килгәйне. Ҡатын телефонына үрелде. Ғәҙиләһе лә ҡыуанһын әйҙә! Теге юлы картуф индереп сыҡҡанда, Мораттың мыҫҡыллы йылмайып ҡуйыуы иҫенә төштө. Ярай, көлкөндө яңғыратырбыҙ, аҙғын бесәй.
– Морат та Морат тип аҡылдан шашаһың. Бына алдымда тора Моратың! Бер ҡыҙ менән тоттом. Тфү, мәсхәрә! Беләһеңме кем ул ҡыҙ? Теге юлы кафела ҡыйҡаңлап йөрөгән фәхишәһе!
Теге остан Ғәҙиләнең ялбарыулы тауышы ишетелде. Әйтерһең дә апаһы юрамал ҡылана. Фәҡәт уҫал һәм йәмһеҙ итеп шаярта ғына.
– Ҡуй әле, апай...
– Ҡуймайым! Нишләп ҡуйырға тейеш әле мин! Хәҙер үҙенә бирәм!
Әнисә тегеләрҙе ҡараңғы мөйөштә ҡыуып етте. Машинаға китеп барыуҙары ине. Морат ғәжәпләнеп өндәште.
– Әнисә, һеҙме был?
– Мин! Бер генә минутка! Иптәш корреспондент, һеҙҙең менән ауылда ҡалған мөхәббәтегеҙ һөйләшергә теләй!
Телефонын Моратка тотторҙо. Ғәҙиләнең алыҫ тауышы шау-шыу пәрҙәһен йыртып килеп етте.
– Ысынмы был, Морат?
– Ғәҙилә? Туктәле...
– Һин ысынлап та...
– Ғәҙилә, мин аңлатырмын барыһын да...
– Кәрәкмәй, миңә аңлаттылар инде. Эх, һин...
– Ғәҙилә, Ғәҙилә... Мин аңлатырмын.
Телефон өҙөп-өҙөп иланы. Бәлки аңлашырҙар, бәлки барыһы ла үҙ урынына ҡайтыр тигән өмөт саткыларын сығарып балкып-балкып алды. Ләкин мөғжизә Ғәҙиләнең теге абаға тураһындағы әкиәтендә генә була торғандыр. Экран һуңғы көсөнә ялпылдап алды, һәм тирә-як караңғылыкка сумды.

## БОҘЛО ЯМҒЫР

Бына өсөнсө көн инде Морат эсеп ята. Әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ, әммә театрға барып мәс булып ҡайтты. Унан, бер башлағас, ыскынды ла китте...
Сәбәп Ғәҙилә менән килеп сыккан аңлашылмаусанлыкта ғына түгел ине. Эштә көтөлмәгән мәсьәләләр килеп тыуҙы.
– Инеп сығығыҙ әле, – эске телефондан шылтыратҡан Эльвира Вәкилевнаның тауышы һалкын ине. Баш мөхәррир урынбаҫары үҙенә һирәк саҡыра. Тимәк, ниндәйҙер үтә мөһим йомошо бар.
Эльвира Вәкилевнаның эш бүлмәһе ҙур булмаған күргәҙмәләр залына тартым. Стенала рәсемдәр – кәрзинкә эсендә һыйынып ултырған бесәй балалары, оҙон муйынлы жирафтар, пеләш башлы, тумалаҡ күҙле сабыйҙар. Былар барыһы ла бүлмә хужабикәһенең тәбиғәткә, йәнлектәргә һәм бала-сағаға ҡарата булған сикһеҙ мөхәббәтен сағылдырырға тейеш ине, күрәһең. Ошонда уҡ компьютерҙа баҫылған тәрән йөкмәткеле һүҙҙәр ажырайып тора:
«Ғаилә – изге төшөнсә! Уны көс менән дә, мәкер менән дә төҙөп булмай. Сөнки ул – ике йөрәктең мәңгелек ҡәлғәһе!»
Бүлмә эйәһенең ҡарт ҡыҙ икәнен иҫкә төшөргәндә, әлеге һүҙҙәрҙең ураУ мәғәнәһе шуға ҡайтып ҡала торғандыр.
«Дөрөҫ, мин әле үҙ ҡәлғәмде төҙөмәгәнмен. Сөнки уны мәкер менән дә, көс менән дә булдырып булмай. Лайыҡлы кешене тапмағанмындыр, бәлки. Ысын ирҙәр

юктыр, бәлки. Тимәк, көслө заттар, һеҙ үҙегеҙ ҙә ғәйепле».

Шуның арҡаһында ғаиләгә һәм балаларға тәғәйенләнгән ғәйрәтен анау жирафтарға сарыф итергә тура киләләр. Ҡыҙыҡ, баяғы ялтырауыҡлы һүҙҙәрҙе үҙе яҙған тип ишеткәйне. Шулайҙыр.

Бер мәл, әле яңы ғына эшкә килгәнендә, уны-быны абайламаҫтан әйтеп һалғайны.

– Эльвира Вәкилевна, бәлки һеҙгә аквариумда балыҡ үрсетергә кәрәктер? Һиғеҙенсе мартка уха бешерер инек! – Шаярта, йәнәһе. – Был һүрәттәрҙән ни файҙа?

– Ә минең өйөмдә ике тутыйғош йәшәй, йәш кеше!

Урынбаҫар аңлайышһыҙыраҡ яуапланы, үтә тишеп ҡараны. Был тиклем нәфрәттән Мораттың өнө тығылды. Иллә-мәгәр баяғы тутыйғоштар менән уларҙың хужабикәһе араһындағы мәҙәк мөнәсәбәттәрҙе белһә, бәлки, кәйефе ул ҡәҙәре ҡырылмаҫ та ине.

Ҡоштарҙың береһе – «нич-че!», йәғни «нисауа!», ә икенсеһе нишләптер «дура!» тиергә өйрәнеп алған, имеш. Элекке хужаһының этлеге. Һәм, күҙ алдына килтерегеҙ! Иртәнсәк, эшкә китер алдынан, Эльвира Вәкилевна көҙгө алдында өйөрөлә. Тутыйғоштарға өндәшә:

– Йә, нисек? Матурмынмы?

Тегеләрҙең береһе ярылырҙай булып шаңҡылдай:

– Нич-че! Нич-ч-че!

Икенсеһе:

– Дура! Дура!

Эштән ҡайтып инеүенә теге ике ҡош һаман да үҙ-ара талашып ултыра, имеш. Хужабикәне «сәйнәйҙәр», үҙҙәре ҡарлығып бөткән.

– Дура, дура!

– Нич-че, нич-че!

Быңдай һүҙ иреклеге урынбаҫарға, әлбиттә, окшамай. Сепрәк менән «демократ»тың ситлеген ҡаплай. Фекер айырымлығы ошоноң менән тамам. «Нисауа» ғына тороп ҡалды... Ҡана һуң, тормошта ла мәсьәләләр шулай тиҙ хәл ителһә!

– Имза йыябыҙ, иптәштәр, ҡулығыҙҙы ҡуйығыҙ! – Эльвира Вәкилевна алдындағы ҡағыҙға ымланы.

– Ниндәй имза?

– Рафаил Ғүмәровичты яклап имза.

Баҡһаң, министрлыкта баш мөхәрриргә теш ҡайрай башлағандар имеш. Кемгәлер гәзиттең эҙмә-эҙлекле ҡарашы окшамай. Атап әйткәндә, Рафаил Ғүмәровичтың эҙмә-эҙлеклеге тип аңларға кәрәк быны, иптәштәр. Хәҙер коллектив үҙ һүҙен әйтергә тейеш. Сөнки беҙ – команда! Бөгөн үк күмәк хат тегендә – ҙур етәкселәрҙең өҫтәленә барып ятырға тейеш. Шулай һөйләнде Эльвира Вәкилевна, йыйылыштағы кеүек.

– Мин...

– Нимә һин? – Урынбаҫарҙың күҙҙәре баҙлап китте. Был ни ғәләмәт. Әллә яңы фетнә әтмәләйме? Унан булыр ул.

– ...быға ҡул ҡуя алмайым.

– Нисек, «ҡуя алмайым»?

– Шулай.

– Нисек инде шулай? Бөтәһе лә ҡуйҙы.

– Ә мин ҡаршы.

– Улай булмай, иптәштәр. Нисек инде ҡаршы?

– Ул китергә тейеш.

– Ни өсөн?

– Гәзитте эт ояһына әйләндергәне өсөн...

– Шунан? – Эльвира Вәкилевна баланы кәзекләгәндәй ҡыланды.

– Бер тәнкит мәҡәләһен дә үткәрмәгәне өсөн...

– Шунан?

– Түрә-ҡараны ғына маҡтап ултырғаны өсөн...

– Шунан?

– Шул...

Урынбаҫар һүҙ көрәштереп торманы, ҡул һелтәне.

– Ярай-ярай, аҡыллыһың! Һин герой ҙа, беҙ алйот.

Эйе, Эльвира Вәкилевна тыныс ҡалды, – сәбәләнмәне лә, ҡарышлашманы ла. Ваҡиғалар үҫешенең төрлө юлдарын күҙаллап ҡуйған. Һәр ҡайһыһына әҙер.

Бер уйлаһаң, нимәгә борсолорға? Ярай, Рафаил Ғүмәровичты редакциянан алдылар ҙа икән, ти. Яңы хужа килде, ти. Уға бит коллективты һәм гәзит эшен белгән кеше, атап әйткәндә урынбаҫар кәрәк. Билдәле бит инде, һәр ойошмала ла төп түрә түр өсөн генә. Ә барлыҡ эште урынбаҫарҙар тарта. Эльвира Вәкилевна нәҡ шундай кеше. Алыштырғыһыҙ кеше тип әйткәндә лә ярай. Ошо редакцияла ғына ла нисәмә хужаны ҡабул итеп, сираттағыһын оҙатырға йыйына.

Морат сығып китте. Эльвира Вәкилевна ултыра бирҙе лә, баш мөхәрриргә йүгерҙе. Тегеһе интернет киңлектәрен байкай ине. Һуңғы аҙналарҙа был төрлө кимәл етәкселәренең төп шөғөлөнә әйләнде. Бихисап сайттарҙа республика етәксеһенең шәхесе, уның ни әйтеүе, иң мөһиме, кемдәрҙе бушатыуы, кемдәрҙе хуп күреүе тураһында ысынлы-юҡлы хәбәрҙәр тулғайны. Ошо арала яңы хөкүмәт төҙөйәсәктәр. Күптәр осасаҡ. Иң мөһиме, бажаһына ғына теймәһендәр. Ул урынында ултырһа, беҙ ҙә бирешмәҫбеҙ.

– Ҡондоҙбаевты ҡыуырға кәрәк!

Урынбаҫары буҫағанан уҡ хәбәр башланы. Рафаил Ғүмәрович мониторҙан айырылып ҡыҫала күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ килтерҙе.

– Нишләгән һуң, Эльвира Вәкилевна?

– Имза ҡуймай.

Урынбаҫар күмәк хатты түрәнең алдына һалды. Тегеһе күҙлеген эләктереп ҡарап сыҡты. Әмере теш аҫтынан сыҡты:

– Ҡыуығыҙ һуң!

Хужаның тәүәккәл ҡыланыуының сәбәбе бик ябай ине. Мораттың өҫтәге таянысын, Мирас Шаһиевичты, эшенән ебәргәндәр тип ишеткәйне. Тимәк, унан-бынан ҡурҡмаҫҡа ла була.

– Нимә тип приказ яҙырға икән?

– Эшкә һуңлап йөрөй. Кәрәк саҡта табып булмай...

– Булмай инде, телефонын юғалткас...

– Ҡыуығыҙ. Акт төҙөгөҙ ҙә ҡыуығыҙ!

– Ярай, Рафаил Ғүмәрович. Эшләйбеҙ!

Урынбаҫар эстән генә уйлап ҡуйҙы. Ҡыуыуын мотлаҡ ҡыуырбыҙ ул кирегә бөткәндә. Мәгәр үҙегеҙҙе алданыраҡ ысҡындырмаһалар, хөрмәтле Ҡыҫалагүҙ әфәнде.

Баш мөхәррир дауам итте:

– Беҙ яңы шарттарҙа яңы команда тупларға тейешбеҙ! Һәр төрлө бушбоғаҙҙарға урын булмаясаҡ. Сөнки ответственность огромная. Бигерәк тә хәҙерге осорҙа!

– Шулай, Рафаил Ғүмәрович!

Хужа ручкаһын күтәреп иплән кенә, ябай хеҙмәткәре тормай бит алдында, өҫтәлгә ташланы. Сыкһағыҙ ҙа була, ваҡытым юҡ.

***

Морат башҡа һыймаҫлыҡ йәнә бер ахмаҡлыҡ ҡылды. Кис буйы өҙгөләнде-өҙгөләнде лә, төнгә ҡарай Әнисәнең фатирына елдерҙе. Теге аулаҡ кисәһендәге хәлдең осраҡлы булыуын, үҙен яңылыш аңлауҙарын төшөндөрмәксе ине. Әлбиттә, инәлеп, кәмһенеп, тү-

бәнһенеп йөрөгән һымаҡ та бит. Ләкин ул барыһына ла түҙәсәк. Хатта тупаҫлығы менән хәтерен ҡалдырған, ул ғына ла түгел, араларына сокор ҡаҙыған бисә алдында ла хурланырға әҙер. Сөнки Гәҙиләне фәҡәт апаһы ғына ипкә килтерә алыр кеүек. Тыңлаһа уны ғына тыңлар.

Ҡатын үҙе генә ине, әммә саҡырылмаған ҡунаҡҡа аптыраманы. Аңлашыла, был меҫкен Гәҙиләне ҡайтармаҡсы. Инәлеп йөрөй, бисара. Сәй эсерҙе. Морат күстәнәскә торт килтергәйне. Хәбәрен һөйләне лә һөйләне... Әнисәнең эйәк ҡағып ихлас тыңлауын күреп, тулыһынса асылды. Тегеһенең күңелен күрергә тырышып (бына ниндәй мәсхәрәгә төштө), бер-ике тапҡыр ҡатындың ҡулына һуғып алған булды. Теге юлы кафела ултырғандағы һымаҡ. Йәнәһе, ихласлыҡ ҡыла, уға тулыһынса ышана. Әнисә ҡәнәғәт иһаһайланы:

– Һеҙ әллә миңә бәйләнә башланығыҙмы ул?

Һеңлекәшенә барыһын да аңлатырға вәғәҙәләп ҡалды. Тик хушлашҡанда ғына абайланы. Әнисәнең сырайын нәфрәт ҡатыш ерәнеү ғәләмәте ҡаплағайны.

Быйыл йәй ямғыр бөтөнләй яуманы тиерлек. Бәғзе ваҡыт, үтә томра көн аҙаҡтарында, шыйыҡ ҡына болоттар баҙнатһыҙ йыйыла башлаған була. Ләкин ҡапыл ҡалҡҡан эҫе ел уларҙы таратып, төрләһөн төрлө яҡҡа борҡотоп ебәрә. Ҡойон уйнап, һауаға тупраҡ-япраҡ оса. Целлофан моҡсайҙар ҡүтәрелеп, йорттар өҫтөндә бөтөрөлөп йөрөй башлай.

Шуның кеүек Ҡыҫалагүҙҙең түбәһендә ҡуйырған ҡара болоттар ҙа тиҙ таралды. Урынын һаҡлап ҡалған бажаһының йәнә бер ҡөҙрәте ине был. Кикереге ҡабаттан ҡүтәрелә башланы, кисә генә һәммәһе менән дә ҡуш ҡуллап һаулашып йөрөгән хужа үҙенең әүәлге, таныш фиғеленә ҡайтты. Хәҙер коллективта хасил булған бер-ике «боласы» менән дә ҡурҡмайынса иҫәпләшергә мөмкин.

Әмере бик йәһәт үтәлде. Мәгәр урынбаҫары менән әлеге әңгәмә шаршамбыла булһа, аҙна ахырында Ҡондоҙбаевты эштән бушатыу тураһында ҡарар әҙер ине. Бының өсөн Мораттың хеҙмәт урынында ярты көн булмауы ла етте. Гәҙеттә ул редакция йомошона сыҡҡанда мөдиргә әйтеп китә. Иҫкәртмәһә лә, шауҡымы теймәй ине.

«Хәбәрсе менән бүрене аяғы туйҙыра» тип ҡабатларға ярата ине баш мөхәррир. Ә был юлы демократия уйнап маташманы. «Фетнәсе»нең эштә юҡлығы хаҡында килтереп еткереү менән кадрҙар бүлегенә шылтыратты. Хеҙмәт тәртибен боҙоуға һылтанып акт төҙөнөләр. Хәҙер Ҡондоҙбаев ысынлап та үҙ урынында юҡ тигәнде раҫлаған шаһиттар кәрәк ине.

Эльвира Вәкилевнаның башына мәҙәк уй килде. Ҡондоҙбаевтың иң яҡын иптәштәренән шаһит яһарға кәрәк! Бына ҡыҙыҡ буласаҡ. Үсем ҡаныр, исмаһам...

Шул хаҡта уйлап та бөтмәне, бүлмәһендә Эдик хасил булды. Бына икенсе аҙна инде отпуск һорап мыжып йөрөй. Эҫе көндәр һаулығын тамам ҡаҡшатҡан, ҡан баҫымы ҡүтәрелгән, дачала ял итеп алырға ине...

– Әйҙә-әйҙә, үт. Ҡайҙа ғаризаң?

– Әллә ысынлап та ебәрәһегеҙме? – Шоферҙың йонсоу йөҙөндә ғәжәпләнеү сағылды.

– Килтер-килтер ҡағыҙыңды! Мөмкинселек килеп сыҡты, бәхетеңә. Командировкаларҙы кәметәбеҙ, гаражға ла эш кәмей. Аҙна-ун көн ял итеп алырһың... Башта ошо ҡағыҙға ла ҡул ҡуйып ебәр!

Ҡыуанысы эсенә һыймаған ир Ҡондоҙбаевҡа ҡаршы төҙөлгән актҡа күҙ һалды. Сырайы һытылды. Беренсе синыф уҡыусыһы кеүек ирендәрен ҡыбырлатып тағы ла берҙе уҡып сыҡты. Һәм, Эльвира Вәкилевнаның сикһеҙ ғәжәпләнеүенә, имза ҡуйыуҙан баш тартты! Ә ҡан баҫымы һуң? Ә отпуск? Ал-йот!!! Бар, коридорға сығып һыуынып ин. Имзаңды ҡуймаһаң, яңы ҡайтҡан машинаны икенсе бирәүгә бирәбеҙ. Отпуск та тәтемәй.

Рәмил Зөфәрович, киреһенсә, инәлтмәне. Теге ваҡыт курсташтарын һыйлап ҡайтарғандан һуң һаман ипкә килә алмайынса, аңҡы-тиңке йөрөүе ине. Бына әле лә урынбаҫар бүлмәһенә одеколон еҫе аңҡытып килеп инде. Эльвира Вәкилевна шундуҡ һөжүмгә күсте:

– Һаман да айыға алмайһың, ә, Абыҙгилдин?

– Юҡ-юҡ, барыһы ла яҡшы, Эльвира Вәкилевна!

– Ярай, һин исмаһам эшкә йөрөйһөң. Ә бәғзе берәүҙәр бөтөнләй килмәй. Бына Ҡондоҙбаев, мәҫәлән. Сәғәт ун ике, ә ул һаман юҡ...

Үҙенә янаған хәүеф ситләтеп үткәс, Рәмил Зөфәровичтың күңеле булды. Матур биҙәкле имзаһы ҡағыҙға төштө.

Иң ауыры Мораттың дуҫы һаналыусы Йомағолов менән ине. Урынбаҫар һүҙҙе ситтән башланы. Тауышын кәметеп, йөҙөнә борсолоу сығарҙы.

– Ағайыбыҙҙы министрлыҡҡа күсерәләр, ишеткәнһеңдер?

Азат, әлбиттә, хәбәрҙар түгел. Сөнки әле генә уйлап сығарған уйҙырма булды был. «Яңылыҡтар» хеҙмәте етәксеһе буларак ул һәр мәғлүмәтте белеп торорға тейеш килеп сыға. Әммә коллективты борсоған иң төп, иң һуңғы яңылыҡ уны урап үтеп киткән, имеш. Шуға ла саҡ ҡына ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисерҙе. Ләкин һыр бирмәне, етди сырай менән мәғәнәле яуапланы:

– Ишеттем, бар ундай мәғлүмәт...

– Бар ғына ла түгел, мәсьәлә хәл ителгән тиерлек. Тик ҡасан, иртәгәме, йәнә бер йылданмы, билдәһеҙ әлегә. Был сер, берәүгә лә ыскындырма...

Урынбаҫар әңгәмәсеһенә һынсыл ҡараш ташланы ла дауам ҡылды.

– Беҙгә алмаш тураһында уйлай башларға ваҡыт. Үҙебеҙҙән егеттәрҙе ҡүтәрергә кәрәк, – быныһы Эльвира Вәкилевнаның төп хужа булырға дәғүә итмәүенә ишара ине.

– Әлегә баш мөхәррир вазифаһында ике кешене генә күрәм. Береһе һин, Азат Гафурович.

Үҙенә быға булмағанса, атаһының исемен дә ҡушып Гафурович тип өндәшеүендә оло мәғәнә күрҙе.

– Икенсеһе – Рәмил Зөфәрович...

Эстән тантана итте Йомағолов. Ҡыуанырға урын бар ине. Рәмил Зөфәровичты түгел, серләшергә тап үҙен саҡырғас, тимәк, урынбаҫар уның яҡта!

– Ә нишләп, Рәмил ағай ҙа лайыҡлы. Тик...

– Тик йомшаҡ яҡтары бар, – тип дауам итте уның фекерен Эльвира Вәкилевна. – Мин һинең кандидатураны тәҡдим итәсәкмен.

– Рәхмәт, ҙур рәхмәт, ышанысығыҙ өсөн!

– Һин, Азат Гафурович, күптән эшләйһең редакцияла. Эште беләһең, кешеләрҙе беләһең. Принципиальныйһың!

Һуңғы һүҙгә айырым баҫым яһаны. Аҙаҡ гәзиттең яңы һаны, хеҙмәт тәртибе тураһында һөйләштеләр.

– Бына рәхәт ҡайһы кешеләргә! Эшкә лә йөрөмәйҙәр.

Ҡондоҙбаевтың ҡылығын тасуир итте. Актты күрһәтте.

– Юҡ, мин быға ҡул ҡуя алмайым... – Азаттың йөҙө үҙгәрҙе.

– Нисек?

– Ул дуҫ та инде минең... Дуҫ уҡ булмаһа ла, ну бергә ултырабыҙ бит.

– Ә принципиальность? Һиңә гәзиттең яҙмышы ҡәҙерләме, әллә бергә ултырған дуҫмы?

– Унының шулай ҙа ул...

– Иң йәнде көйҙөргәне шул, Азат Гафурович, өҫтән Ҡондоҙбаевты ҡоҙалап маташалар, баш мөхәррир итеп!

Бынының ла ялған ине. Сөнки Мирас Шаһиевичты бушатҡандан һуң, Мораттың юғарыла таянысы ҡалмағайны. Азат был уйҙырмаға ышанманы кеүек. Шулай ҙа үҙенә артыҡ көндәш кәрәкмәгәнен асыҡ аңланы. Әммә ҡул ҡуйыуҙан йәнә баш тартты.

– Бар, уйлап кил! Бер сәғәттән көтәм.

Азат ғәҙәтенсә тәмәке тартыу бүлмәһенә инеп батты. Юҡ, ул дуҫын һатмаясаҡ.

Морат тимер юл вокзалынан репортаж эшләп ҡайтып инеүе булды, телефон шылтыраны. Эльвира Вәкилевнаның шом ҡатыш тантаналы тауышы яңғыраны:

– Баш мөхәррирғә инегеҙ.

Инде, артынан уҡ урынбаҫар пәйҙә булды. Актты күрһәттеләр.

– Ответственность бөгөн, – ҡабатлайым, айырыуса бөгөн, огромная! Ә һеҙ әллә ҡайҙа һәптәңләп йөрөйһөгөҙ. Өҫтәүенә, һынау мөҙҙәтегеҙ ҙә сыҡмаған...

Хәҙер был мәл сағыу итеп хәтерендә уйылып ҡалһын! Хушлашыу һүҙен әйтергә кәрәк ине. Ниндәйҙер кинолағы кеүек ҡыланды:

– Һау булығыҙ, беҙ һеҙҙең ярҙамға мохтаж түгел...

Шулай ҡыҫҡа тотто һүҙҙе Ҡыҫалагүҙ. Морат бер ни әйтә алмаҫтан ҡағыҙ киҫәгенә ҡарап ултыра. Бына акт, бына имзалар. Уны «ҡайҙалыр һәптәңләп», йәғни эт һуғарып йөрөүен иҫбатлап дуҫтары – Азат Йомағолов, Рәмил Абыҙгилдин һәм яңы ғына эшләй башлаған йәш фотограф Нәғим Сәлимов ҡул ҡуйғайны. Редакциялағы һуңғы ир заты – мәңге сырхау Эдик ҡына имза һуғыуҙан баш тартҡайны.

Сәхнәлә оло йәштәге йырсы көсәнә. Заманында республиканы дыу килтергән, ул ғына ла түгел, донъяның артына тибеп йәшәгән хәтәр билдәле кеше ине. Бер-ике юл автограф яҙҙырып алыу өсөн һыу буйы сиратҡа баҫалар ине. Эх, һин, ваҡыт! Ни ҡиәфәткә индермәйһең дә әҙәм балаларын, ниҙәр генә ҡыландырмайһың... Хәҙер инде тауышы ултырған, көүҙәһе ҡалынайған, йөҙөн сырыш баҫҡан. Ҡасандыр ҡыҙҙарҙың һушын алырға һәләтле зәңгәр күҙҙәре лә тоноғайып ҡалған.

Әлбиттә, ағайыбыҙ йәшәреп маташа. Сәсен сөмҡараға буяған, бит тиреләрен тарттырған. Йәштәрсә еңел һикергеләп, килде-киттеле йыр һуҙа. Был баяғы йәлләү хистәрен тағы ла тәрәнәйтә төшә.

*Ете урам, ете урам*
*Йөрәгемә бәйләнгән.*
*Гармун тартып таңға хәҙәр*
*Етеһен бер әйләнәм...*

Микрофонды ике бармағы менән генә тотоп, үтә ҡылансыҡ төҫтә баянсыға яҡынлай. Әйтерһең дә, ем тапҡан әтәс, шул шатлыҡлы хәбәрҙе тауыҡтарына еткерергә ниәтләй. Ғорурлыҡ та, уйынсыллыҡ та, тәкәбберлек тә сағыла ҡыланышында. Унының иһә, баянсыны әйтәм, башын һулға һалған да, күҙҙәрен йома-аса һыҙҙыра ғына. Барлыҡ булмышы менән алыҫта, сикһеҙ ләззәтлек донъяһында. Эргәһенә килеп баҫҡан элекке бөйөк артисты абайламаған булып ҡылана. Тегеһе баянсының яурынына ҡулын һалған була, сөнки йыр гармунсы мөхәббәте тураһында. Юҡ, исмаһам, берикене баш ҡағып, хуплап алыуҙы ла түбәнселек күрҙе, сукынғыр.

Йырсы, ниһайәт, тамамланы. Шаян ҡыланып ике ҡулын күкрәгенә терәне. Баш эйҙе. Залдан мөсһөҙ генә ус шапылдатыуҙар ишетелде. Ағайыбыҙ, тинлек теләнселәгән хәйерселәй, һаман тора бирҙе. Халыҡтың күңелендә йәлләү тойғоһо яралды, шикелле. Шыйыҡ ҡул сабыуҙар шыйыҡ алҡышҡа – йәйге эҫелә кибеп бөтөп барған зәғиф инешкә әүерелде. Бер сабый сығып сәскә тотторҙо. Артист көсләшеп йәнә бер, бынының элекке, йәшлек репертуарынан ине, йырын ишеттерҙе. Рәхмәтле була белмәгән тамашасыларҙан шул рәүешле үс алғас, ниһайәт, баш ҡайҡайтып сығып китте.

Түҙмәне, ишеккә ыңғайланы. Эсе бошоуҙан, юл ыңғайы ғына ингәйне ул театрға. Барыбер өйҙә урын тапмаясаҡ.

Еләҫ ҡараңғы залда ҡалҡынып артынан йәнә бер ир эйәрҙе. Себергә йөрөп эшләүсе нефтсе икән. Вахтанан кисә генә ҡайтҡан. Тәмәке тарттылар. Буфеттан һыра алдылар. Унан инде китте-китте-китте... нисек ҡайтып етеүен дә хәтерләмәй.

Башы зыңҡып уянды, сәғәт төнгө өс икән. Йәнә тороп ултырғанында ҡояш ҡаршылағы өйҙәрҙең тәҙрәһендә сағыла ине. Кешеләр эшкә ашыға. Тик уға ғына ҡабаланырға түгел. Уны ҡыу-ҙы-лар... һәм үҙен дуҫ тип йөрөткән әҙәмдәр ярҙамында ҡыуҙылар. Хәҙер ғаиләһе лә, һөйгәне лә, дуҫтары ла, эше лә юҡ. Ул яңғыҙ.

Телефон шылтырай ҙа шылтырай. Кемгә кәрәкмен икән? Блин. Ҡәйнәһе, Фәүзиманна.

– Әпәт эсеп ятаһыңмы?

– Юҡсы...

– Алдашма!

– Ярай-ярай. Эсеп ятам. Күңелең булдымы?

Морат тупаҫ һөйләште. Күңел болғана.

– Ана шул эскең арҡаһында бисәңдән дә, балаңдан да яҙҙың.

– Нимә кәрәк һиңә?

– Ана Айгүзәл һөйләшәм, ти.

Трубкала бала тауышы яңғыраны:

– Елғыуар, елғыуар! Мама кейәүгә сыға! Грузинға сыға, грузинға сыға!

Трубка өсөн талашалар ине булһа кәрәк, ҡыҙсыҡтың илауланғаны ишетелде.

– Ә мин бармайым уларға! Мин һинең менән йәшәйем!

Әбей трубканы тартып алды. Аңлайышһыҙ нимәлер екерҙе лә, һүндереп ҡуйҙы.

Морат шул кистә уҡ ҡәйнәһенең өйөнә юлланды, ишек төбөндә оҙаҡ тапанды. Әммә тегеләр асманы. Йәнә лаяҡыл тейәнеп ҡайтты. Ярай әле, машина менән йөрөмәне, юғиһә берәй ҡазаға тарыр ине. Тәгәрмәсен тишеп киткәндәр.

Көн-төндәрҙең иҫәбен дә юғалта башлағайны. Бер мәл аҫтағы күршеһенән һыра алдыртты. Аса ғына башлағайны, тышҡы мөхит менән берҙән-бер аралашсы – өй телефоны телгә килде. Редакциянан, Зөфәр Рәмилевич.

– Ҡарәле, ҡартлас, һин үпкәләмә. Беҙҙе мәжбүр иттеләр.

– Пошел ..., аңланыңмы?

– Һүгенмә!

– ..., аңланыңмы?

Морат трубканы ташланы. Телефон шунда уҡ яңынан телгә килде.

– ..., аңланыңмы?

– Морат ағай, был бит мин, Гөлназ.

– Рәмил ағайың ҡуштымы? Мин уға әйттем бит, ҡайҙа олағырға икәнен!

Морат шешәне башлап та өлгөрмәне, өй телефоны йәнә шылтыраны. Гөлназ низер әйтә башлағайны, иҫерек ир ажғырып ебәрҙе.

– Шылтыратма башҡа! Миңә бер кем дә кәрәкмәй.

Ғәҙиләнең ҡулынан трубка төшөп китә яҙҙы.

Кис Фәриҙә килде. Ишекте аскысы менән асып инде. Ҡасандыр үҙ ҡулы менән яһатып һөйәркәһенә тапшырып ҡуйғайны. Алйот. Уртаса буйлы, нәзек билле, оҙон сәсле йәш бисә. Ап-аҡ салбар, еңел майка кейгән, еренә еткереп килешле генә буянған. Зауыҡ бар, ни әйтәһең, актриса. Саҡырылмаған ҡунаҡ диванда хәлһеҙ яткан иргә ашыкты.

– Эй, бахыркайымды, алкаш несчастныйымды...

Ғәҙәтенсә иркәләп Мораттың алдында, балаҫта тубыкланып ултырҙы. Бармаҡтарын бесәй кеүек тырпайтып ҡуйы сәсенә батырҙы. Баш тиреһен рәхәт кенә ыуғылап массаж яһарға тотондо. Тик Мораттың һис кенә лә ғишыҡ-мишыҡ уйнарға кәйефе юҡ ине. Хәле лә самалы. Фәриҙәне, ғөмүмән бер ҡатын-ҡыҙҙы ла күргеһе килмәй. Ғәҙиләнән тыш, әлбиттә. Һөйгәнен иҫенә төшөргәс, ҡанһыраған яраға тоҙ һипкәндәй булды. Күркә кикерегеләй, асыуы ҡабара башланы.

– Эй минең бахыркайымды, алкашкайымды. Хәҙер беҙ аш бешерәбеҙ. Хәҙер беҙ баш төҙәтергә берәй нәмәҫтә килтерәбеҙ...

– Ҡарәле, һин, давай, нейт... Бар, ҡайт!

– Нәмәкәй тиһе-е-ең?

– Ҡайтып кит.

– Ҡайтып кит? Атаҡ, һин совсем что-ли...

– Бар-бар, һыҙ бынан!

Мораттың тупаҫлығына тәүге тапкыр шаһит булған ҡунаҡтың күҙҙәре тупайҙы.

– Ах һин, алкаш несчастный! Мин уны әҙәмгә һанап хәл белергә килгән булам, ә ул, блин...

Фәриҙә шап иттереп ирҙең сикәһенә эләктерҙе.

– Бәдбәхет! Тағы ла берәйһен таптыңмы? Кәзә тәкәһе!

Ҡырт боролдо, сумочкаһын яурын аша ташланы, тыҡ-тыҡ баҫып ишеккә ынтылды. Унан йәнә ҡырт боролдо, яһалмараҡ тауыш менән тыныс һәм асыҡ итеп өндәште. Сәхнәлә баҫып торамы ни.

– Һин ғүмерең буйына эшкинмәгән, неудачник булдың! Һәм, бына мин әйтте тиерһең, неудачник булып ҡаласаҡһың да! Хуш!

Башын ғорур тотоп сығып китте. Күренеш тамам. Шаршау ябылды. Алҡыштар! Афарин! Ана бара юлың...

Ғәҙилә лифттан сығыуға ҡаршыһына ап-аҡ салбар, зәңгәр майка кейгән ҡатын осраны.

– Ә-ә! Һаумыһығыҙ, һеҙ ҙә Мораткамы?

– Эйе...

– Моғайын, һеҙ теге эшендәге әхирәтелер, Гөлназдыр.

Ғәҙиләнең йәнә йөрәге жыу итте. Һаман да шул Гөлназ! Өҫтәүенә был ханым. Кем быныһы? Йәнә бер мөхәббәтеме?

– Тик бына нимә, һылыуҡай. Ул әле генә миңә тәкдим яһаны. Ҡаңғыртма уны башҡаса. Ошо йомала никах уҡытасаҡбыҙ.

Фәриҙә бармағына кейгән бриллиант ҡашлы балдағын әйләндереп тигеҙ яғы менән күрһәтте.

– Бына шулай, Гөлназ апай. Үтенеп һорайым башҡаса бында килеп йөрөмәгеҙ. Хушығыҙ.

Фәриҙә лифт менән шаулатып төшөп китте. Апай тип өндәшеүе үҙенең йәшерәк икәнлегенә ишара ине. Әлбиттә, ир-атка йәшерәктәр кәрәк. Ғәҙиләнең күңелендә ниндәйҙер нәфрәт, дөрөҫөрәге ғәрләнеү тойғоһо яралды. Ҡайҙандыр көс, тәүәккәллек килде. Ишекте асып эскә үтте.

Тәҙрәлә аҡ кейемле ҡатындың күләгәһе сағылды. Морат башын ҡалкыта биреп томанлы күҙҙәрен алартып ҡараны. Фәриҙә, тәки кире әйләнгән әрһеҙ бисә.

– Әпәт һинме? Юғал күҙемдән!

Ғәҙилә иртәнсәк телефондан ишеткән нәфрәтле тауыштың фәҡәт үҙенә төбәлгәнен аңланы. Яңылышлыҡ юҡ. Тимәк... Ғәҙилә урамға ташланды...

Һеңлеһенең балконда шым ғына һыктауын абайлап, Әнисә янына килде. Барыһын да аңланы, йыуатырға тырышты:

– Тапҡанһың ҡайғырыр кеше. Ул һинең тырнағыңа ла тормай. Һин бит уны яратмайһың!

Унан өҫтәп ҡуйҙы.

– Хатта миңә лә бәйләнеп маташты бит ул, теге юлы...

Һеңлеһен арҡаһынан ҡосаҡланы:

– Кисә генә Дамир кейәү шылтыратты. Ғәфү итһен, ти, килеп алып ҡайтам, ти.

Морат мәсет төпкөләндәге залда, сыбар балаҫта ултыра. Бында тыныс, еләҫ. Күңел тыныслығы ла тапкандай. Ул һәммәһен дә юғалтты. Тик ғәҙеллеккә ышанысын, намыҫын ғына һаҡлап алып ҡалды...

Ул белә, ҡасан да булһа Изге һәм Саф юлға баҫасаҡ. Әлегә әҙер түгел. Ихтыяры етеңкерәмәй. Бөгөн түгел, иртәгә. Мотлаҡ, иртәгә. Быныһы шикһеҙ.

Морат биш ҡатлы йорт алдындағы туҙанлы ағастар ышығында, буяуы ҡубып бөткән эскәмйәлә. Икенсе каттағы таныш тәҙрәгә ҡарап-ҡарап ала. Күптән ултыра ул, Ғәҙиләне көтә. Осрашырҙар, һөйләшерҙәр, аңлашырҙар.

Ниһайәт, зәңгәр вольво күренде. Әнисә ҡайтты. Байбисә бик тәкәббер ҡиәфәт менән машинаһынан төштө, ауыр пакеттар тотоп ишеккә ыңғайланы. Артынан ҡыҫҡа салбар һәм һары күлдәк кейгән ете-һигеҙ йәшлек малай эйәрҙе. Морат уларҙы туктатырға ҡыйманы. Йәнә ярты сәғәттәрҙән малай уйнарға сыкты. Ҡулында күн туп. Ағас башына бәрә башланы, ботаҡка эленгән таҫраҡты һуғып төшөрөргә маташыуы ине. Ләкин туп, олон менән ботаҡ араһына һыкып, тороп ҡалды. Бала үрмәләп-үрмәләп тә булдыр алманы, аяҡ-ҡулын һыҙырып кире төштө.

Моратты күреп ҡалды ла бармағын өҫкә төбәп кинәт кенә илап ебәрҙе.

– Ту-у-уп, ту-у-уп!

Беҙҙең герой бер-ике һикереүҙән өҫтәге ботаҡты эләктерҙе, һелкеткеләп тупты төшөрҙө. Үҙенекенә ирешкәс, әле генә яу һалып аҡырған бала, нисек башлаған, шулай тынды. Бер бороу менән генә радиоалғысты һүндерҙеләрме ни! Итәғәтле генә баш эйҙе. Алғы тештәре юҡ икән, шуға ла рәхмәте шыпылдап сыкты.

– Шпашибо!

Әнисәнең тәрбиәһе. Берҙән-бер балаһын үҙ көнөн үҙе күрергә өйрәтә ине. Теләгәнеңә тиҙерәк өлгәшеү өсөн иң көслө ҡорал – илау. Бигерәк тә сабый илаһа, һис кем дә ҡаршы тора алмай. Кескәй Данил быны якшы үҙләштерҙе. Әммә йышыраҡ Әнисәнең үҙенә ҡарата ҡуллана, әсәһенән нимә теләй шуны таптыра ине.

Бала Мораттың йөҙөнә бармағын төбәне. Хәс Америка фильмдарындағы кеүек. Дже-е-ек? Һинме был, шайтан алғыры...

– Мора-а-т? Яңылышмаһам?
– Яңылышмайһың.
– Ғәҙилә апайҙы көтәһегеҙ?
– Эйе. Тукта, һин кем әле? Һинең әсәйең...
– Әнисә...
– Ә Ғәҙилә апайың?
– Уны һеҙ бушка көтәһегеҙ. Ниндәйҙер миңә билдәһеҙ сәбәптәр аркаһында, ул һеҙҙе яратмай.
– Нишләп яратмай? Һин ҡайҙан беләһең?
– О-о, һеҙҙең һорауға яуап бик ябай. Мамам әйтте.
– Ә Ғәҙилә апайың ҡайҙа? Һеҙгә, йәш джентельмен, билдәле түгелме?
– Был хакта шуны ышанысльı итеп әйтергә кәрәк – эштә!

Ике "зыялы"ның итәғәтле, ләкин яһалмараҡ әңгәмәһен Әнисә боҙҙо. Балконда пәйҙә булды ла улына кыскыра башланы. Тирәк артында торған Моратты шәйләмәне, шикелле.
– Дани-и-л! Өйгә!
– Шулай ҙа мине ҡайҙан беләһең? – Морат малайҙан һорап ҡалырға ашыкты.
– Элементарно, Ватсон! Телефоныгыҙҙы беҙҙә ятҡырып ҡалдырғанһығыҙ. Ә унда «галерея»ла фотоғоҙ бар, шунан таныным. Исемегеҙ ҙә яҙылған.
– Нисек? Минең телефон һеҙҙәме ни?

Морат ғәжәпкә ҡалды. Тимәк, кесә телефонын Әнисәлә ҡалдырған. Теге юлы, ауылдан күстәнәс килтергәндә. Һәм хужабикә ул хакта ләм-мим өндәшмәгән. Бына ләғнәт төшкөрө бисә!
– Ә Ғәҙилә апай һеҙгә шылтыраткан да шылтыратҡан.

Данил яй ғына өйгә ыңғайланы. Туктаны, артына боролдо ла шыпырт ҡына өндәште. Бармағы йәнә күтәрелде, Дже-е-ек, картлас, тағы ла шуныһы...
– Минеңсә, ул Һеҙгә битараф түгел. Көн дә кис тәҙрәнән күҙәтә...

Мораттың талсыҡкан йөҙөндә ҡояш ҡабынды. Йес! Уның поезы әле китмәгән!

– Ни өсөн балаңа урыҫ исеме ҡуштың? – Өләсәһе башта сабыйҙың атын ҡабул итмәне. Данил да булдымы исем..
– Бер ҙә урыҫ исеме түгел! «Данлы ил» тигәндән алынған! – Иң ышанысльı һаклаңыуҙың һөжүм икәнлеген яҡшы белгән Әнисә туған-тыумасаһын боркота башланы. Ауылға ҡайтҡайнылар.

Өс айлыҡ «данлы ил» көсәнә башланы, ҡыҙарындыбүртенде лә... иплән кенә эште боҙоп ҡуйҙы. Исем тикшереү ҡайғыһы ҡалманы, хәҙер «данлы ил»деӊ халыҡ-ара абруйын ҡотҡарырға кәрәк ине. Бисә-сәсә, ҡыуанысльı аһ-уһҡа килеп, йүгерешергә тотондо.

Данил ҙурая килә ике кәмселеккә эйә булды. Кәрәкмәгән тишеккә морон тығыу һәм компьютер. Тәүгеһе өй хужалығына ярайһы ғына ҙур зыян килтергеләй ине. Йә теген машинаһын һүтеп ташлай. Йә телефонды. Кире йыйып ҡуя ҡуйыуға, тик тегеләр артабан эшләүҙән баш тарта. Сөнки бер ус шөрөптәре артып ҡалған, имеш. Йә телевизорҙа соксона, йә стенаға ҡушарлы сөй ҡаға, йә бик тә булмаһа, әсәһенең итегенә өҫтәмә табан йәбештерергә маташа.

Тәүҙә компьютерға яҡын да ебәрмәй ине. Ләкин малайҙың самаһыҙ әрһеҙлеге елегенә ултырғас, рөхсәт итергә мәжбүр булды. Хәҙер көнө-төнө виртуаль уйын уйнай, интернет киңлектәрен ҡыҙыра. Әнисәгә бер аҙ ял булды, күңеле лә тынысланды. Ирен ҡыуып сығарғандан һуң холко тамам боҙолған баланы башкаса ипкә килтерә алмай шул.

Бына әле санаторийҙан ҡайтҡас, Данил ҡороткос эшен яңы ғәйрәт менән тергеҙеп ебәрҙе. Камилыраҡ программа ҡуйҙырыу маҡсатында Әнисә ноутбукты таныш программиска ҡалдырып киткәйне. Шуға ла малай үҙ-үҙен әүрәтергә мәжбүр.

Башта телевизор ҡараны. Аҙаҡ ялкты һәм уйынсыҡ һалдаттарын, эт-бесәй-айыу-чебурашкаларҙы сафка теҙҙе. Санаторий директоры ҡиәфәтенә инеп фарман бирергә тотондо.
– Хәйерле көн, балалар! Шым-шым-шым! Бөгөндән һеҙ ябыҡ учреждениела. Кеҫә телефондарын тапшыраһығыҙ. Ата-әсәләргә ошаҡлашмайһығыҙ. Тәрбиәселәрҙе тыңлап ҡына йөрөйһөгөҙ. Һорауҙар бармы?
– Бар, – йөнтәҫ маймыл тауыш бирҙе. – Беҙҙең һәр беребеҙгә айырым бүлмә һәм компьютер кәрәк.
«Директор» бик тиҙ ризалашты.
– Ярай, булыр.

Һөҙөмтәлә, Әнисәнең һатырға әҙерләнгән тауары ҡатырға йәшниктәрҙән сығып осто. Йоҡо бүлмәһендә һәм залда егерме дүрт айырым «номер» хасил булды. Унда һалдаттар, айыу-бүре-төлкөләр урынлашты. Өҫтәлде түңкәреп тәтәй машиналарға гараж яһаны. Хәҙер ял итеүсе халыҡты компьютерҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһе генә ҡалды. Соксона торғас, әсәһенең косметичкаларына юлыҡты. Һәр береһенең ҡапкастарын асып сыҡкас, көҙгөләр экранға, ә һауыттар компьютерға оҡшап ҡалды.

Әнисә ҡайтып ингәндә ошо эштәр менән мәж килә ине. Өйҙәге зилзиләне күргәс, оло яньял ҡупты. Бәрелеш ҡаты булды. Ике як та илауға – иң көслө ҡоралдарына тотондо. Дәррәү сәрелдәшеп тә бер-береһен еңә алмағас, солох төҙөп, уртак фекергә килделәр. Данил тышка сығып туп уйнай. Аҙаҡ һауыт-һабаны йыуа. Әсәһе иһә бөгөн үк ноутбукты алып ҡайтырға бурыслы.

Шулай эшләнеләр ҙә. Кис Ғәҙилә ҡайканда малай ниндәйҙер дейеүҙе ҡыуып тау-таш аша һикергеләп йөрөй ине. Тыж-тож иткән атыу тауыштары, тауҙан ишелеп төшкән ҡар өйөмдәре, упкындар, йыртҡыс үкереүе...
– Әсәйең ҡайҙа, Данил?
– Мә, һиңә, ҡәбәхәт, мә һиңә! (быныһы виртуаль бапаҡка).
– Семинарҙа! (быныһы Ғәҙиләгә).

Малай бер генә миҙгелгә мониторҙан айырылды.
– Апай, һиңә шуны әйтеү урынлы булыр, – Данил дейеү һунарсыһы фиғеленән сығып зыялыға әүерелде. – Теге ағай бөгөн дә килде.
– Кит әле, юкты һөйләмә... Мин уны ташланым.
– Ә нишләп тәҙрәнән күҙәтәһең?
– Бер ҙә күҙәтмәйемсе! Ана дейеү тотоп ашай үҙеңде.

Данил йәнә уйынға сумды. Ғәҙилә тиҙ генә бутка бешереп алды. Икәүләп сәй эстеләр. Бала туктауһыҙ ләпелдәне. Һуңғы арала үтә бойоҡ, нимәгәлер ҡайғырып йөрөүсе апаһын йыуатырға маташыуы ине.
– Ҡарәле, Данил, һин электрон почтаны аса беләһеңме?
– "Һә" тигәнсе!

Теге юлы Морат әйткән логинды йыйҙы.
– Пароль?
– Мөхәббәт...

Кескәй Данил көлөр тип көткәйне, әммә бала етди төҫ менән хәрефтәрҙе йыйҙы. Бәлки ул һүҙҙең мәғәнәһен белмәйҙер ҙә. Почта бите пәйҙә булды!
– Оho! Ә мин күпме маташтым, аса алманым.

– Моғайын, урыҫса яҙғанһыңдыр. Латин хәрефтәре кәрәк.

Һай әттәгенәһе, нәк шулай булды шул. Бына эш нимәлә икән!

Почтала етмеш өс хат теркәлгәйне. Барыһы ла унан... Данил сығып китте, ул апаһын яңғыҙ ҡалдырырға кәрәк икәнен аңлай ине.

Ғәҙилә бер-бер артлы хаттарҙы уҡый башланы. Түгеләре тынис һәм ҡыҫҡа. Үҙенең эштәрен бәйән ҡылған. Аҙаҡ, һағынғандыр инде, наҙлы һүҙҙәре артка төшкән. Шуның менән бер ҡатарҙан яуап алмауына ғәжәпләнгән. Һуңғыһы аҙна элек килгән. Нәк улар айырылышҡан ҡәһәрле кистә. Оҙон итеп яҙғайны. Һәммәһен дә тәфсирләп аңлатырға тырышҡан, теге йылмаяҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһенә лә хис-тойғоһо юҡлығын тасуирлаған...

Бөгөн Ғәҙилә эштән иртәрәк ҡайтты. Үҙәк баҙар янындағы бер офиста ултыра ул. Сәркәтип һәм референт вазифаларын атҡара. Әнисә балаһы менән ҡайҙалыр киткән. Аш һалды, балконға сыҡты. Морат күренмәй ине.

Көн боҙола. Бәлки, ниһайәт, ямғыр яуыр? Ҡара болоттар тығыҙ көтөүгә йыйылған, көслө ел иҫә башлағайны. Ишек ҡыңғырауы яңғыраны. Һәм... Морат килеп инде! Данил менән булған кисәге һөйләшеүҙән һуң күңелендә өмөт яралғайны. Барлыҡ ҡыйыулығын егеп килеүе ине. Ҡулында сәскәләр бәйләме.

– Һин нимә? Апайым ҡайтып инһә...

Ғәҙилә был осрашыуҙы зарығып көткәйне, ниндәйҙер нәфрәтле лә, наҙлы ла һүҙҙәр әҙерләп бөткәйне. Ә ысынында барыһы ла яп-ябай, һәүетемсә. Морат ҡыуып сығармаһындар тигәндәй, ашығып яуапланы.

– Ә улар машина менән китте. Мин күрҙем.

Тиҙ генә ҡайтмаясаҡтар тип әйтергә теләне. Шунан ары һүҙ ялғанманы. Морат һаман да тапанып ишек янында тора бирҙе. Ғәҙилә иһә үтергә саҡырманы, ни уйлар, кинәт өндәште:

– Нишләп килдең?

Саҡ ҡына яғымлыраҡ итеп, йомшағыраҡ һорарға теләгәйне. Тулҡынланыуынандыр инде, ҡырҡыу яңғыраны. Үҙе уңайһыҙланды, әммә төптә ултырған эске дошманы шул уҡ дорфалыҡта дауам итте:

– Бында һине бер кем дә саҡырманы.

Үҙе ни эшләйем мин, ниндәй йүләрлек һөйләйем тип өҙгөләндә. Әммә баяғы тәкәбберлек битлеген сисеп ташлай алманы. Ирҙең бөтөнләй ҡаушап төшөүе күңеленә сәйер ләззәт бирә ине. Ҡорбанының шәфҡәтлек теләнселәүе йәлләдкә лә, моғайын, ошондай уҡ рәхәтлек өҫтәйҙер. Мораттың эсендә ниндәйҙер ҡыл өҙөлдө. Йонсоу йөҙө салшайҙы, күҙҙәренә йәш бәреп сыҡты. Ҡыҙҙы яурындарынан ҡосоп алды, ашығып теҙә башланы.

– Мин ғәйепле, Ғәҙилә, мин ғәйепле.

– Кит бынан!

– Ғәфү ит! Һинән башҡа бер кем дә кәрәкмәй миңә.

– Кит бынан! Ана Гөлназыңа һөйлә хәбәреңде!

Аһ, ни булды миңә? Ғәҙилә үҙен-үҙе белештермәйенсә эсендә йыйған әрнеүҙәрен теҙҙе. Әнисәнең яңыраҡ әйткән уйҙырмаһы ла иҫенә төштө.

– Һин бит хатта апайыма бәйләнеп маташҡанһың!

Морат йәшһерәгән күҙҙәрен төбәп, йүләр кешеләй тора бирҙе. Ҡот оскос, кәмһеткес, нахаҡ һүҙҙәрҙе ишетә ул. Мәғәнәһе генә ялҡынһынған мейеһенә барып етмәй. Ғәҙилә эстән ялбарҙы. «Аҡлан, зинһар өсөн! Мин күп нәмәлә ғәйепле тип әйт. Элекке хаталарым, үткәндәрем үс ала тип әйт! Ләкин мин һиңә хыянат итмәнем тип әйт. Был, ысынлап та, шулай бит! Һәм мин, ғорурлығымды еңеп, ғәфү итермен... Тик тынып торма ғына! Апайың ялғанды һөйләй тип әйт. Мин дә ышанмайым ул һүҙҙәргә!»

– Мин һине яратмайым!

Ғәҙиләгә ни булды? Ихтыярынан тыш, теләгенән тыш ҡот оскос һүҙҙәр ағылды:

– Мин Дамирға ҡайтып китәм...

Сихырланған кеүек теге юлы апаһы әйткәндәрҙе ҡабатланы. Әллә, ысынлап та, Әнисәне семинарҙарҙа арбарға өйрәтәләрме икән?

Морат һаман өнһөҙ. Фәҡәт һөйгәнен тамам юғалтҡанын ғына аңлай. Бер киҫәк икмәккә өмөт итеп тә ала алмаған теләнсе кеүек, ҡыҙыл күҙҙәрен төбәп торҙо-торҙо ла, боролоп сығып китте. Хризантемалары иҙәндә сәселеп ҡалды.

Тышта ямғыр ҡоторона. Ғәжәп, әммә йәйге селләнең йәнә бер мөғжизәһе – боҙлауыҡ яуа. Эре-эре борсаҡтар машина тәҙрәләренә бәрелә, асфальт өҫтөндә тәгәрләшә, тәңгә килтереп һуға. Морат ауыртыу ҙа, өшөү ҙә тоймай. Уға барыбер. Бына бер сәғәттән ашыу шул ғәрәсәт уртаһында тора. Күлдәк-салбары тәненә һылашып бөткән. Еүешләнмәгән ере ҡалмаған. Бите буйлап ямғыр тамсыларымы, күҙ йәштәреме аға. Башын эйеп тора ла тора. Һөйгәненән мәрхәмәтлелек көтә.

Ғәҙилә тыштан күҙен алмай. Һаман да ғорурлығы менән көрәшә. Ниһайәт үҙ-үҙен еңеп, ҡарар итте. Йәнә биш минут ҡына көттөрә лә, мәгәр Морат урынында торһа, ҡаршыһына йүгереп сыға.

– Тағы ла биш минут ҡына көт инде, йәнем... Биш минут ҡына! Биш минут, һәм беҙ аңлашырбыҙ, ҡауышырбыҙ, ғәфү итермен үҙеңде! Беҙ бәхетле булырбыҙ! Тик саҡ ҡына түҙ инде, саҡ ҡына көт инде мине... Абаға, абаға. Күк ҡабығы асылһын...

Нәк ошо мәлдә Морат тәҙрәгә күтәрелеп ҡараны. Ҡараны ла, күшеккән эт кеүек, ҡойма буйлап китеп барҙы.

## КӨҘГӨ ҺАҒЫШ

Аллея буйлап урта йәштәрҙәге ир атлай. Ул ялан баш, сәсенә шәлкем-шәлкем ҡырау төшкән. Еңел пальтоһының яғаһын күтәргән, ҡара туфлиҙар, зәңгәрһыу джинсылар кейгән. Үҙ уйҙарына сумып бара.

Күҙ мәлендә шундай көндәр була: һауа зыңлап торған сафлыҡ менән тула. Тын алыуы ла иркен, бөтә нәмә үтә күренмәле кеүек, күңелде иһә аңлайышһыҙ дәртләнеү, низер көтөү тойғоһо биләй. Мөғжизә көҫәү, мөхәббәт көтөү тойғоһо ул. Бына әле лә Мораттың яратҡан урыны – парк эсендә, ағастар һиллегендә торған эскәмйәгә китеп барыуы. Ваҡыты булғанда һәр көн һуғылып китергә тырыша. Тик көткән кешеһе юҡ та юҡ. Теге ваҡиғаларҙан һуң электрон адресына бер генә хат килде.

«Мине эҙләмә. Ғәфү ит».

Таң менән йөрәкһенеп уянғайны. Төш күрҙе. Ҡояшлы йәйге аҡланда бер ҡыҙ сәскә йыя. Барлыҡ ҡиәфәте, булмышы, хәрәкәттәре таныш. Үтә лә ғәзиз, үтә лә яҡын кеше. Тик йөҙөн генә айыра алмай. Был күптәнге төш. Һәм ниһайәт, эй, мөғжизә, тәүге тапкыр уға ҡарап борола. Ғәҙилә! Ап-асыҡ күрҙе, танығы уны.

Шуға ла нәк бөгөн тап итер кеүек ине. Тик эскәмйә буш булып сыҡты. Һөйгәне юҡ. Әйтерһең дә уларҙың тылсымлы осрашыуы ла, айлы төндәре лә, ҡайнар һүҙҙәре лә булмаған. Әйтерһең, фани донъялыҡта түгел, ә һәммәһе төштә генә...

Рәхимһеҙ көҙгө ел ағастарҙың һуңғы япраҡтарын өҙгөләй ине.

# ЫСЫНБАРЛЫҠТЫ ШУЛАЙ КҮРӘМ



**ВӘҒИЗ ШӘЙХЕТДИНОВ КҮРГӘҘМӘЛӘРЕНДӘ КҮП ТАПҠЫРҘАР БУЛҒАНЫМ БАР, ИЖАДЫ ХАҠЫНДА БИК ОҘАҠ ҺӨЙЛӘЙ АЛАМ. ИҢ ТӘҮГЕ СИРАТТА ӘҪӘРҘӘРЕНДӘГЕ ТӨП ҺЫҘАТТАРҒА ИҒТИБАР ЙҮНӘЛТӘМ – АВТОР ТӨРЛӨ ЖАНРҘА ЭШЛӘЙ. УЛ – ПОРТРЕТ, ПЕЙЗАЖ, НАТЮРМОРТ ОҪТАҺЫ. НИНДӘЙ ГЕНӘ ЖАНРҘЫ АЛМА, БАРЫҺЫ ЛА ҠУЛЫНАН КИЛӘ.**

Шулай ҙа һүҙҙе портреттан башларға булдым. Сөнки бөтә рәссамдар ҙа был жанрҙа уңыш ҡаҙана алмай. Ауыр өлкә ул. Образ өҫтөндә эшләгәндә рәссам кеше йөҙөнөң кәрәкле һыҙатын тотоп кала белергә тейеш. Портретта һәр деталь иғтибарға алына, шунһыҙ образ тыуҙырып булмай. Кешенең йөҙ һыҙаттары уның ниндәй хәләттә ултырыуын билдәләй: бәлки, ул шатланалыр, йәиһә ҡайғыралыр? Әллә герой һағыш-кисерештәрен күңел төпкөлөнә йәшергәнме? Былар барыһы ла рәссам иғтибарынан ситтә калмай.

Портрет жанрында айырыуса күҙҙәр күп нәмә тураһында һөйләй. Уларҙа һүрәтләнеүсенең куркыуы, йонсоуы, шатланыуы, көйөүе дөрөҫ тотоп алынырға тейеш. Юғиһә ышандырмаясак.

Вәғиз Шәйхетдинов портрет яҙыр алдынан бихисап эскиздар эшләй. Шунһыҙ портрет булмай ҙа. Һуңынан автор араларынан иң-иң уңышлыһын һайлап ала. Артабан инде майлы буяу ярҙамында портретка йән өрөлә. Рәссамдың уңышлы портретынан "Әсәйем портреты", "Рудольф Нуриев", "Шағир Денисов портреты", "Ҡыҙымдың портреты"н атарға мөмкин.

"Әсәйем" картинаһын автор әсәһе тере сакта, 1988 йылда ижад итә. Әсә йылы шәленә төрөнөп урамда улын көтә. Ҡышҡы һыуык та ҡуркытмай уны.

Вәғиз Шәйхетдиновтың иң уңышлы портреттарының береһе тип Рудольф Нуриев хакындағы әҫәрен билдәләргә мөмкин. Мәшһүр бейеүсенең рухи ныклығы, илһам-дәрте ташып тора. Эйе, ул көслө рухлы бөйөк шәхес. Ләкин иғтибарлап ҡараһаң, күҙҙәренә йәшеренгән моңһоулыкты күрмәү мөмкин түгел.

Автор тыуған яғы шәхестәренең, ябай ауыл кешеләренең портреттарын да яҙа, уларҙа хеҙмәт кешеһенең күңел байлығын бирергә тырыша. Рәссам һөйләүенсә, кайһы сакта портрет тиҙ яҙыла, бәғзе вакытта уларҙы аҙналар, айҙар, хатта йыл-

дар буйы ижад итәһең. Былар барыһы ла ижади процесс нескәлектәре. Вәғиз Шәйхетдинов тыуған яғы – Бүздәк районының данлыклы шәхестәре хаҡында яҙыуҙы үҙ алдына маҡсат итеп ҡуйған һәм ошо юҫыкта байтаҡ эштәр башҡара. Тап шундай энтузиастар арҡаһында Башҡортостан райондары һәм ҡалаларында хәҙер үҙ сәнғәт мәктәбен булдырған рәссамдар, тыуған яғының йәш һәләттәрен үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән яңы быуын үҫеп сыҡты.

Рәссам ижадының тағы ла бер биҙәге – уның тыуған яҡ, тәбиғәт темаһын яҡтыртыуы. "Иман", "Мираҫ" сериялары, "Мираҫ", "Бумеранг", "Сәғәт һуҡҡан көн кеүек", "Ҡыш" картиналары ошо йүнәлештә ижад ителгән.

Вәғиз Шәйхетдинов әҫәрҙәрендә башҡорт-татар халҡының уртаҡ йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре, Башҡортостан тарихына ҡағылышлы мотивтар бар. Эштәрендә йыш ҡына боронғо менән бөгөнгө йәнәшә бирелә, быуындар бәйләнеше күҙаллана. Миҫалға "Бумеранг" картинаһын алайыҡ. Ҡыйшайған сиркәү көмбәҙе, емерелеп барған мәсет бүрәнәләре, улар өҫтөндә өйөрөләүсе ҡарғалар һәм сем-ҡыҙыл шаңдаҡ... Алғы планда бумеранг бирелә. Ниңә шулай? Аллаһыҙҙар, иманһыҙҙар, йәнен аҡсаға, хәмергә һатҡандарға ишаралаймы икән был деталь? Бына шундай күңелһеҙ уйҙарға сумаһың "Бумеранг" әҫәрен ҡарағас, тормошобоҙҙоң ал да гөл түгеллеге хаҡында уйлайһың. Бумеранг – ысынбарлыҡ. Ҡанлы тарихыбыҙ емеше. Яуызлыҡ кешелеккә яуызлыҡ булып ҡайта, шуны онотмаһаҡ ине!

"Балан" картинаһына күҙ һалайыҡ. Баҙлап торған ҡып-ҡыҙыл балан бөртөктәренән бала сакта мунсаҡ яһап муйынға таға торғайныҡ. Балан мунсағын таҡһаң, йәнәһе лә, күҙ теймәй. Вәғиз Шәйхетдинов картинаһы бына шундай иҫтәлектәргә ҡайтарыу көҙрәтенә эйә.

Тәбиғәтте һүрәтләгәндә автор сағыу төҫтәргә өҫтөнлөк бирә, күберәк ҡыҙыл, зәңгәр, һары, йәшел буяуҙар менән эшләй. Ижадсы образының күңел торошона ҡарап ҡуллана ул буяуҙарҙы, йәшәйешкә мөнәсәбәте ниндәй, шунан сығып кәрәкле төҫтәр һайлай. Мәҫәлән, сағыу төҫтәрҙе күберәген бала саҡ иленә сәйәхәт иткәндә, тәбиғәтте һүрәтләгәндә ҡуллана. Миҫалға "Әтәс", "Ямғырҙан һуң" әҫәрҙәрен алыу ҙа етә.

Рәссам сәйәхәт итергә лә ярата. Ябай ғына осрашыуҙарҙан, ижади сәфәрҙәренән дә эскиздар, этюдтар эшләп алып ҡайта. Матурлыҡҡа бай Бөрйәндә йыш була. Тәбиғәт менән аралашыу уға дәрт-илһам өҫтәй, яңы темалар бирә. "Минең өсөн Башҡортостандан да гүзәл ил юҡ, уның тәбиғәтенә мөкиббәнмен, – ти рәссам. – Ғөмүмән, тәбиғәтте яратмаған, аңламаған рәссам юҡтыр ул!"

Вәғиз Шәйхетдинов – ирекле рәссам. Европанан айырмалы рәүештә, Рәсәйҙә "ирекеле рәссам" тигән төшөнсә яңы барлыҡҡа килә генә әле. Ә ысын рәссам рухи яҡтан да, матди яҡтан да ирекле булырға тейеш. Ғаилә ҡороу, балалар үҫтереү менән бер рәттән ижад итеүе еңел түгел. Айырыуса киң полотнолы әҫәр яҙғанда рәссам бирелеп ижад итә. Илһам килһә, бар донъя онотола. Ал-ял белмәй, ашауҙан, йоҡонан яҙа... Әммә ул шунан йәм-тәм таба. Рәхәтлек, ҡәнәғәтләнеү тойғолары кисерә.

Шулай ҙа ирекле рәссам илаһи ҡошо килгәнен көтөп ултыра икән тип уйларға ярамай. Ул әллә килә, әллә юҡ, ә эшләргә кәрәк. 1 процент – талант, 99 процент – хеҙмәт. Вәғиз Шәйхетдиновтың ижад принцибы бына шунан ғибәрәт. Ваҡыттың ҡәҙерен белеп өйрәнгән ул. Йәшәлгән һәр минутыбыҙҙың кире ҡайтмауын рәссамдарҙан да яҡшыраҡ аңлаған тағы кем бар икән?

Вәғиз Шәйхетдинов ил-йорт хәлдәренә лә битараф түгел, үҙенсә ҡабул итә, үҙенсә кисерә. Мәҫәлән, 2002 йылда Германияла Боден күле өҫтөндә авиакатастрофа булғас, ул бик ҡайғыра. Һәләкәткә осраған Башҡортостан балаларын, уларҙың ата-әсәләрен ихлас йәлләй. Һөҙөмтәлә "Яҙҙар ҡоштарһыҙ килде..." тигән моңһоу әҫәр тыуа. Ул ошо уҡ йылда "Урал" галереяһында күрһәтелә. Картинала аҡһыл-зәңгәр төҫтәр өҫтөнлөк итә, зәңгәр күк фондағы ап-аҡ ҡоштар былтырғы ояларына әйләнеп ҡайтҡан... Тик ниндәй үкенес! Оялар буш! Ҡайҙа ҡоштар? Ниңә юҡтар? Әллә зәңгәр күктә аҙашып ҡалғандармы? Эйе, унда киткәндәр кире ҡайтмай... Унда Яҡтылыҡ һәм Һөйөү хөкөм һөрә.

Вәғиз Шәйхетдинов – Башҡортостандың Бүздәк районына ҡараған Кәпәй-Ҡобау ауылы егете. Үҙенсәлекле ғаиләлә тыуып үҫкән ул. Бер ғаиләнән ике рәссам сыҡҡан. Вәғиз буласаҡ һөнәрен тап ағаһы өлгөһөндә һайлағанына ҡыуанып бөтә алмай. Вәкилде үҙенең остазы тип иҫәпләй. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия академияһының (элекке педагогия институты) һынлы сәнғәт-графика факультетында белем ала.

Уҡыуын тамамлағас, башкөллә ижад эшенә сума Вәғиз. 1988 йылда Октябрьский ҡалаһында беренсе күргәҙмәһен ойоштора. 1995 йылда Рәсәй һәм Башҡортостан рәссамдар берлегенә ағза итеп алынғас, үҙенең өлгөрөп еткән рәссам булыуын аңлай.

Эшендә лә, көндәлек тормошта ла ижади ҡарашлы, нескә күңелле рәссам бер ваҡытта ла тик тормай. Ул һәр саҡ эҙләнеү, камиллашыу өҫтөндә. Маҡсатына тырышлыҡ аша өлгәшә, табыштарын күкрәк көсө менән таба. Киң ҡараслы, тәрән фекерләүсе ҡылҡәләм оҫтаһы ул. Уның техник алымдары ла йылдан-йыл арта һәм камиллаша бара. Билдәле булыуынса, рәссам техника өҫтөндә әҫәрҙәр темаһы һәм эстәлегенә ҡарап үҫешә. Эшләйһең икән, үҫәһең, киреһенсә булһа – бер урында тапанаһың. Ижадсы өсөн был – яҙылмаған ҡанун.

Вәғиз Шәйхетдинов 1980 йылдан башлап Өфө, Рәсәй, Төбәк-ара һәм Халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә даими ҡатнашып тора, уның күргәҙмәләренә халыҡ яратып йөрөй. Төрлө жанрҙа эшләүсе талантлы рәссамдың ижад шишмәһе артабан да урғылып торһон, сәнғәт һөйөүселәрҙе яңынан-яңы әҫәрҙәре менән ҡыуандырһын.

*Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.*



Әсәйем портреты.



Бумеранг.



Шүлгәнташ.



Әтәс ҡойроғо.



Шихан.



Ҡайтыу.



Урал моңо.



шоңкар





Данир
ҒӘЙНУЛЛИН

Өфө ҡалаһы

























# Зифа ХАЖИЕВА

Сығышым менән Салауат районы Лаҡлы ауылынанмын. Өфө ҡалаһының 123-сө лицейында башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләйем. Тормош иптәшем менән Заһит исемле ул тәрбиәләйбеҙ.





# САЛАУАТ РАЙОНЫ

**БОРОНҒО АЛТАУЫЛ ТҮБӘЛӘҪ ЫРЫУЫНА (САЛАУАТ РАЙОНЫ) ҠАРАҒАН АУЫЛДАРҘА ЭРЕМСЕКТӘН БЕШЕРЕЛГӘН АҘЫҠТАРҘЫ ЭЛЕК-ЭЛЕКТӘН ЯРАТЫП АШАҒАНДАР. КӨНСЫҒЫШ ДИАЛЕКТЫНЫҢ ӘЙ-ЙҮРҮҘӘН ҺӨЙЛӘШЕНДӘ ҠАҘАН КӘКРЕҺЕ ТИП ЙӨРӨТӨЛГӘН АШ-ҺЫУ ТӨРӨ БИГЕРӘК ТӘ КИҢ ТАРАЛҒАН. ШУЛАЙ УҠ ЭРЕМСЕК ШӘҢКӘҺЕ ИҢ ЯРАТЫП АШАЛҒАН РИЗЫҠ. АЯТ УҠЫТҠАНДА, ҠОРБАН МӘЖЛЕСТӘРЕНДӘ, ЙОЛА БАЙРАМДАРЫНДА УНЫҢ УРЫНЫ – ӨҪТӘЛ ТҮРЕНДӘ.**

**"ШОҢҠАР"ҘА ЯҢЫ РУБРИКА АСЫЛҒАС, ӘСӘЙ-ӨЛӘСӘЙҘӘРҘЕҢ АМАНАТЫ ИТЕП ҺАҠЛАНҒАН БЫЛ РИЗЫҠТЫ ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАРЫНА ЛА ТӘҠДИМ ИТЕРГӘ БУЛДЫМ.**

## ҠАҘАН КӘКРЕҺЕ

1 стакан йылымыс һыуға 4 йомортҡа, бер аҙ тоҙ һалып, уртаса ҡатылыҡта ҡамыр баҫабыҙ.

1 кг аҡ эремсеккә 4 йомортҡа ҡушып бутайбыҙ.

Ҡамырҙы, билмәнгә әҙерләгән кеүек, йоҡа итеп йәйеп, түңәрәкләп киҫәбеҙ. Шунан һәр түңәрәккә ярты ҡалаҡ эремсек һалып, ярым айға оҡшатып ҡымтыйбыҙ (шуға ла кәкре тигәндәрҙер инде).

Кәкреләрҙе ҡайнап торған тоҙло һыуға һалып, өҫкә ҡалҡып сыҡҡансы бешерергә кәрәк.

Бешеп сыҡҡас, тишекле ижау менән алып, май йәки ҡаймаҡ яғып, тәрилкәгә һалабыҙ. Туралған йәшел һуған, укроп менән биҙәп, табынға бирәбеҙ (эремсек эсенә лә туралған һуған һәм укроп һалһаң, бигерәк тәмле була).



## ШӘҢКӘ

50 г йылымыс һөткә 1 ҡап маргариндың 1/3 өлөшөн, 2 йомортҡа, ярты балғалаҡтай тоҙ һәм етерлек он ҡушып йомшаҡ ҡына итеп ҡамыр баҫабыҙ.

Һыуынан яҡшылап айырылған эремсеккә 2 йомортҡа, 1 ҡалаҡ аҡ май ҡушып бутайбыҙ.

Ҡамырҙы йәйеп, майлы табаға ҡайтарма эшләрлек итеп урынлаштырғас, эремсек массаһын 1,5-2 см ҡалынлыҡта тигеҙләп йәймәгә һылайбыҙ. Унан шәңкәнең ситен ҡайтарып сығабыҙ (ҡайтарма ҡалынлығы бер иле йәки бер бармаҡ ҡалынлығы булырға тейеш).

Шәңкәне ҡыҙыу мейескә йәиһә духовкаға ҡуйып, 20 минут тирәһе бешерергә.

# РУХИӘТ КҮПЕРҘӘРЕ

**«ДОНЪЯ ТҮҢӘРӘК» ТИГӘН БИТ ӘЛЕ БЕРӘҮ, ИМЕШ, БЕРӘЙ ТЫҠРЫҠТА ОСРАШЫРБЫҘ. АБДУЛЛО МЕНӘН БЕҘҘЕҢ СИРАТТАҒЫ КҮРЕШЕҮ ҘӘ ҺИС КӨТӨЛМӘГӘНДӘ, С. АКСАКОВТЫҢ ЙОРТ-МУЗЕЙЫНДА «БЕЛЬСКИЕ ПРОСТОРЫ» ЖУРНАЛЫ БАШҠОРТ ШАҒИРҘАРЫНЫҢ ШИҒЫРҘАРЫН РУССАҒА АУҘАРЫУ КОНКУРСЫНА ЙОМҒАҠ ЯҺАУ, ЙЫЛЛЫҠ ЛАУРЕАТТАРЫН БИЛДӘЛӘҮ КИСӘҺЕНӘ ЙЫЙЫЛҒАНДА БУЛДЫ. ХӘЙЕР, ЖУРНАЛДЫҢ БЕР ЛАУРЕАТЫ ТАЖИКСТАНДЫҢ ӘҘӘБИ ФОНДЫ ДИРЕКТОРЫ, ШАҒИР ЭМОМ-АЛИ ҠУНАҠҠА КИЛӘСӘГЕ ХАҠЫНДА ИШЕТКӘС, ҺӘР ВАҠЫТТАҒЫСА ТАЖИКТАР ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ СЫҠҠАС, ҮТӘ ТЫЙНАҠ, ӘҘӘПЛЕ ҺАБАҠТАШЫМДЫ ИҪКӘ ТӨШӨРГӘЙНЕМ. БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТ УНИВЕРСИТЕТЫНЫҢ БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ ҺӘМ ЖУРНАЛИСТИКА ФАКУЛЬТЕТЫНЫҢ ЖУРНАЛИСТИКА БҮЛЕГЕНДӘ БЕРГӘ УҠЫҒАЙНЫҠ БЕҘ. ХӘЙЕР, ТОРОП ТОРОҒОҘ, НИҢӘ ӘЛЕ БӨГӨНГӨНӘН ҮТКӘНДӘРГӘ КҮПЕРҘӘРҘЕ ҮҘЕМ ГЕНӘ ҺАЛАМ. БӨГӨНГӨБӨҘ, СТУДЕНТ САҠТАР ХАҠЫНДА ҺӘМ УЛАР ТУРАҺЫНДА ҒЫНА ЛА ТҮГЕЛ ТӨРКӨМДӘШЕМ АБДУЛЛО СУЛТОНОВ МЕНӘН БЕРГӘ ҺӨЙЛӘШӘЙЕК. НИМӘ ГЕНӘ ТИМӘ, УН БАЛА ТӘРБИӘЛӘП ҮҪТЕРГӘН ШИРМОҺИ ҺӘМ ИСО СУЛТОНОВТАРҘЫҢ ҒАИЛӘҺЕНДӘ ҺИГЕҘЕНСЕ БАЛА БУЛЫП ДОНЪЯҒА КИЛГӘН ҺАБАҠТАШЫМ ӨФӨЛӘ УҠЫЙ БАШЛАУЫ МЕНӘН ОШОНДА ТӨПЛӘНДЕ. ЙЫШ БУЛМАҺА ЛА ИНДЕ БЕР ОЛО АУЫЛҒА ӘЙЛӘНГӘН ӨФӨЛӘ ОСРАШАБЫҘ: ЙӘ «НАУРЫҘ» БАЙРАМЫНДА, ЙӘ ТУҒАН УНИВЕРСИТЕТТА, ЙӘ САЛАУАТ ЮЛАЕВ ҺӘЙКӘЛЕ ЭРГӘҺЕНДӘ. БӨГӨН УЛ И. СОМОНИ ИСЕМЕНДӘГЕ БР-ҙың ТАЖИК МИЛЛИ МӘҘӘНИӘТЕ ҮҘӘГЕ ЙӘМӘҒӘТ ОЙОШМАҺЫНЫҢ МАТБУҒАТ СЕКРЕТАРЫ, ӨФӨ ВУЗДАРЫ СТУДЕНТТАРЫНЫҢ ФУТБОЛ БУЙЫНСА ТРЕНЕРЫ. ЙӘ, ЯРАЙ, БӨТӘҺЕН ДӘ АСЫП ҺАЛЫРҒА АШЫҠМАЙЫҠ ӘЛЕ…**

– Абдулло һабаҡташ, хәҙер һинең хәлдәр нисек башҡорт теле менән? Иҫләйһеңме, студент саҡта башҡорт телен белмәүеңдән беҙ хатта шаяртып көлә торғайныҡ. Үпкә һаҡламағанһыңдыр?

– Ниндәй үпкәләү ти? Моғайын, студент йылдарын һағынаһыңдыр, мин дә иҫкә алам. Беҙгә шундай һәйбәт уҡытыусылар белем бирҙе. Кураторыбыҙ, профессор Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллинды тик яҡшы һүҙ менән генә телгә алам. Ул бит беҙҙең өсөн – студенттары, бигерәк тә егеттәр өсөн (сөнки ҡыҙҙар тырыш, өлгәр, улар өсөн артыҡ хәстәрлек кәрәкмәй – **авт.**) йәнен бирергә әҙер ине.

Өфөгә килгәндә бер башҡорт һүҙе лә белмәй инем, ышанаһыңмы?

– Ышанам, әлбиттә...

– Башҡорт телен һәр ваҡыт өйрәнергә теләнем. Аллаға шөкөр, хәҙер телде аңлайым,

иркен һөйләшәм тип әйтә алмайым. Әммә "Һаумыһығыҙ!" тигән бер һүҙ менән дә бит тотош телгә, халыҡҡа ихтирам күрһәтеп була.

Башҡорт теленән имтихан биргән көн рус төркөмө студенттары һәм минең өсөн айырым һынау була торғайны. Әммә ярты йыл эсендә телде башҡорттар кеүек белеп булмауын яҡшы аңлаған уҡытыусыларыма рәхмәт! Улар үҙҙәре үк тырышлыҡты, өйрәтергә теләгәндәрен күрә-аңлап етмәгәнемде йәшермәүемде кисерә торғайны. Футбол буйынса күнекмәләр ни тиклем көсөргәнешле һәм ауыр булһа, "һаумыһығыҙ" һүҙен әйтергә өйрәнеү күнекмәләре лә миңә еңел бирелмәне.



*Эмом-Алиға "Бельские просторы" журналының "Берҙәмлек" номинацияһы дипломын БР Элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Венера Хәкимова тапшыра.*

**– Абдулло, һин бит спорт журналисы булам, ти торғайның? Футбол яраттың, футбол уйнаның...**

– Эйе, футболды әле лә яратам, ул минең ғүмерлек шөғөлөм. Студент саҡта үҙебеҙҙең башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты өсөн футбол да уйнаным. Шул осорҙа беҙ факультеттар араһында беренсе урынға сыҡтыҡ.

Ә футбол менән ҡыҙыҡһыныуым бала саҡтан килә. Тажикстанда профессиональ мәктәптәрҙә шөғөлләндем, Тажикстандың "Резерв" йәштәр йыйылма командаһында уйнаным. Аҙаҡ Дүшәмбенең "Памир" йыйылма командаһы өсөн сығыш яһай башланым. Тик спорт менән генә шөғөлләнеп булмай бит инде, юғары белем кәрәк. Атайым миңә белемде Рәсәйҙә алырға кәңәш итте. "Башҡортостанға барһаң, бигерәк тә һәйбәт булыр. Ул мосолман республикаһы, ундағы халыҡҡа һыйына алырһың", – тине.

Өфөгә килгәс тә тәүҙә беренсе күргән кешемдән: "Бында ҡайҙа футбол уйнайҙар?" – тип һораным. "Строитель" стадионына барырға кәңәш иттеләр. Ундағы бик әҙәпле тренер Анатолий Степанович йылы ҡаршы алды, күнекмәләр, уйындар башланып китте. Рәсәйҙең 2-се лигаһындағы "Ағиҙел" командаһы өсөн уйнаным. Тора-бара уны таркаттылар, тренер Смылгин Павел Анатольевич "Алексеевский" совхозында булдырылған "Альтаир" командаһы өсөн сығыш яһарға саҡырып алды. Команда көслө ине. Унда уйнаған осорҙа Башҡортостандың бик күп район-ҡалаларын күрҙем, тәбиғәтенә хайран ҡалдым. Нимәһе менәндер Тажикстанға тартым. Хәҙер Рәсәй буйынса күп йөрөргә тура килә, ысынлап та, Башҡортостандағы һымаҡ тәбиғәт бер ҡайҙа ла юҡ! Бында урман, тауҙар күп – шуныһы менән республика күңелгә ятышлы.

Башҡортостандың "Локомотив" (Стәрлетамаҡ), "Нефтехимик" (Салауат, аҙаҡ команда "Юрматы" тип үҙгәртелде), "Спартак" (Туймазы), "Химик" (Мәләүез), "Нефтяник" (Ишембай), "Спартак" (Сибай), "Горняк" (Учалы) һәм башҡа футбол командаларына ҡаршы уйнап, уңышлы сығыш яһаныҡ.

**– Белеүемсә, һин бөгөн дә футбол менән мауығаһың, студенттарҙы ла өйрәтәһең?**

– 2005 йылдан Өфө И. Сомони исемендәге тажик футбол командаһы булдырылды. Беҙ Өфө беренселегендә уңышлы сығыш яһайбыҙ. 2007 йылда еңеүсе булып, кубокҡа лайыҡ булдыҡ.

Беләһеңме, Өфөлә футбол командаһы ойоштороу беҙгә еңел бирелмәне. Беҙҙең



*И. Сомони исемендәге БР-ҙың тажик милли-мәҙәниәт үҙәге йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Абдурахмон Рәхимов милләттәштәре менән.*



*Тажикстан Республикаһының атҡаҙанған артисы Хәсәни Хәйҙәр (уртала) Өфөлә ҡунаҡта.*

учредитель – Абдурахмон Суфий улы Рәхимов. Әгәр ул һәр ваҡыт ярҙам итеп, костюмдар, күнекмә залдары өсөн мөмкинлектәр тыуҙырып тормаһа, уңыштарға өлгәшә лә алмаҫ инек.

**– Абдурахмон Суфиевич һеҙҙең тажик диаспораһының етәксеһе лә бит әле...**

– Эйе, тап шул хаҡта әйтергә теләйем. БР-ҙың И. Сомони исемендәге тажик милли мәҙәниәте үҙәге йәмәғәт ойошмаһы 2000 йылдың 29 декабрендә ойошторолдо. Уның төп маҡсаты – Башҡортостанда йәшәүсе тажиктарҙың мәҙәни талаптарын ҡәнәғәтләндереү, милләт-ара татыулыҡты нығытыу һәм милләттәштәребеҙгә Тажикстан Республикаһы менән бәйләнеш булдырыуға ярҙам итеү.

Бөгөн Башҡортостанда 3500 тирәһе тажик йәшәй. Беҙ үҙ-ара аралашабыҙ, милли байрамдарҙа осрашабыҙ, "Науруҙ" байрамында күрешеү матур йолаға әйләнде. Был сарала республикала йәшәүсе һәр милләт етди әҙерләнә, беҙ ҙә үҙебеҙҙең милли аштарыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы күрһәтәбеҙ, милли кейемдәрҙә сығыш яһайбыҙ. Абдурахмон Суфий улы махсус рәүештә Тажикстандан артистар саҡыра: уларҙы урынлаштырыу, Өфө менән таныштырыу, сығыштарын финанс яҡтан тәьмин итеү уның өҫтөндә. Ул Башҡортостандағы тажиктар өсөн ныҡлы терәк, юлбашсы кеүек. Бөтәһе лә теләһә ниндәй һорау менән уға мөрәжәғәт итә, ул һәр милләттәшенә ҡулынан килгән тиклем ярҙамлаша. Үҙебеҙҙең милли ойошманың матбуғат үҙәгендә эшләгәс, бөтәһе лә минең күҙ алдымда. Ул беҙҙең милли йәмғиәттә берҙәмлекте булдырыусы. Абдурахмон Суфий улы етәкселеге аҫтында Башҡортостандағы тажик милләте вәкилдәре ойошоп, бер-береһенә терәк булып йәшәй. Әгәр мөмкин булһа, уға милләттәштәрем исеменән рәхмәт белдерер инем.

Киләсәккә пландар күп инде ул: милли-мәҙәни үҙәгебеҙгә айырым бина һалыу эштәре алып барыла, тажик балаларына йәкшәмбе мәктәбен асырға тигән уй ҙа бар. Һәр хәлдә быйыл БР Президенты иғлан иткән "Милләт-ара татыулыҡты нығытыу" йылы Башҡортостанда ереккән тажиктарға мөмкинлектәр асыр тип ышанам.

**– Абдулло, ғаиләң менән дә таныштырып кит әле?**

– Ҡатыным Солиһомоһ менән Замира һәм Зәйнәп исемле ҡыҙҙар үҫтерәбеҙ. Балаларым менән Өфөнөң музейҙарында йөрөргә яратам. Уларға тарихи урындар, һәйкәлдәр ҡы-

ҙыклы. "Дан" музейында булғаныбыҙ хәтергә уйылып ҡалған. Атайым – Султонов Исо Назар улы – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, хәҙер инде мәрхүм. Ул һәр ваҡыт элекке бөйөк ил – СССР өсөн һуғышҡаны, көрәшкәне, милләт-ара дуҫлыҡ хаҡында яҡты хәтирәләре менән уртаҡлашыр ине. Уның кәңәшен тотоп, Өфөгә килеүемә шатмын. Бында, ысынлап та, беҙгә яҡшы ҡарайҙар.

**– Әммә беҙҙәге йолалар һаҡланмауына аптырап һөйләгәнең хәтеремдә ҡалған...**

– Эйе, булды ундай хәл. Тәүге осорҙа Рәсәйҙәге әҙәпһеҙлеккә, динһеҙлеккә бик нык иҫем китә торғайны. Автобус, троллейбуста өлкәндәргә, ҡатын-ҡыҙға урын биреүсе юҡ, әҙәпһеҙ һөйләшәләр, ҡатын-ҡыҙ тәмәке тарта, эскелек сәскә ата ғына түгел, емештәрен бирә, ә береү ҙә шуны күрмәй төҫлө ине. Тора-бара бөтәһе лә бер төрлө түгел икәнлегенә төшөндөм. Йолаларҙы тотҡан, бик тә ихтирамлы, дини ғаиләләр бар. Башҡорттарҙың ихласлығы, асыҡ күңелле булыуы тәүге тапҡыр нисек аптыратһа, әле лә шулай уҡ һоҡландыра. Төркөмдәштәрем Азамат, Тимур, Таһир, курсташым Айтуған тураһында әле лә яҡшы итеп иҫкә алам. Ҡайһы берҙәре менән эш буйынса күрешергә лә тура килә.

**– Һин электән намаҙ уҡый инең шикелле?**

– Эйе, әле лә биш намаҙымды ҡалдырғаным юҡ. Атайым менән бер һөйләшеү булғайны. Ул миңә, улым, әгәр намаҙыңды ҡалдырмаһаң, минең фатихам һәр саҡ һинең менән булыр, тигәйне. Уның ошо һүҙҙәренә тиклем намаҙҙы теләһәм уҡыным, онотҡанда, арыҡҡанда уҡылмай ҙа ҡалған саҡтар булды. Ә хәҙер бер генә намаҙҙы ла, Хоҙай ярҙамы менән, ҡалдырғаным юҡ. Беләһеңме, ҡайһы берҙә шул тиклем арыта, футболдан, ярыштан, күнекмәләрҙән ҡыл да ҡыбырлата алмаҫлыҡ булып ҡайтаһың, әммә ваннаға инеп, ҡойоноп сығып, намаҙ уҡыһам, миңә шундай еңеллек



*Абдулло Султонов атаһы менән.*

килә, хатта аңлатып бөтөрлөк түгел! Намаҙ менән бергә миңә атайым фатихаһы, рух көсө, иман, йыйнаҡлыҡ, тыйнаҡлыҡ инә.

**– Атайым элекке СССР-ҙы яҡты итеп хәтерләй ине, тинең?**

– Эйе, ул илде мин дә бер аҙ хәтерләйем бит әле. Был донъяла бер нәмә лә бушҡа түгел. Быйылғы йыл яҡташым, шағир Эмом-Алиҙың Өфөгә сәфәренән башланып китеүе лә юҡҡа түгел, минеңсә. Совет осоронда ла бит төрлө милләт шағирҙары үҙ-ара аралашҡан, дуҫ йәшәгән, шиғриәт, һүҙ сәнғәте менән төбәктәр, республикалар аша күпер һалған. Ә ундай күперҙәр нык, ҡаҡшамаҫ була, бары тик уларҙы һаҡларға ғына кәрәк! Бына үҙең уйлап ҡара әле: Рәсәйҙең ҡайһы төбәгендә йөрөһәм дә, әгәр башҡорттарҙы осратһам, мин иң беренсе БДУ-ны, төркөмдәштәремде, Миҙхәт Фазлый улын, бөтәһенең дә миңә булған мөнәсәбәтен, мәрхәмәтен иҫкә төшөрәм һәм осраған кешегә ҡулымдан килгән тиклем ярҙам итергә тырышам. Сөнки мин белгән башҡорттар үҙемә яҡты йөҙ менән торҙо. Әгәр Эмом-Алиҙың тәрән фәлсәфәле шиғриәте СССР тарҡалғандан һуң беренсе тапҡыр Башҡортостанда, Өфөлә танылыу, хуплау тапҡан икән – был бит бик ҙур шатлыҡ, тажик халҡы өсөн ғорурлыҡ! Тимәк, мәҙәниәт, сәнғәт аша өҙөлгән ептәрҙе ялғар, һүтелгән күперҙәрҙе тергеҙер мәл еткән!

***Гөлгөнә МАЛИКОВА.***

# ХӘТЕРЕГЕҘ ЯҠШЫМЫ?

КЕШЕ ХӘТЕРЕ ЛӘ ҠЫҘЫҠ:
ОНОТОРҒА ТЕЛӘЙ – ОНОТА АЛМАЙ,
ОНОТМАҪҠА ТЫРЫША – ОНОТА.

*Р. КИНЙӘБАЕВ.*



**Ҡайһы ваҡыт йәп-йәш кешеләр, хатта балалар менән үҫмерҙәр ҙә, хәтерҙәре булмауға зарлана. Быны сәбәбе — хәҙерге замандағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ стрестар, борсолоуҙар, мәғлүмәттең артыҡ күплеге. Ә һеҙҙең хәтерегеҙ яҡшымы? Шикләнһәгеҙ, тикшереп ҡарағыҙ.**

1. Бер-ике көн элек булған ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрә алмай аҙапланаһығыҙмы?
2. Кино ҡарағанда, китап уҡығанда йыш ҡына “нимә менән башланып китте әле был?” тип үҙегеҙҙән һорайһығыҙмы?
3. “Нимәгә индем әле мин бында?”, “Нимә әйтмәксе инем әле мин?” тигән саҡтарығыҙ буламы?
4. Үтә мөһим эштәр (мәҫәлән, кемгәлер шылтыратырға, ҡайҙалыр барырға, нимәнелер бирергә) тураһында онотаһығыҙмы?
5. Йыш ҡуллана торған телефон номерын хәтерегеҙгә төшөрә алмаған сағығыҙ булдымы?
6. Һөйләшеп ултырғанда кинәт кенә кешенең исемен йәки фамилияһын онотҡанығыҙ бармы?
7. Үҙегеҙ бик яҡшы белгән урында ла аҙашырға тура килгәне булдымы?
8. Өйҙән сығып киткәндә утты һүндерергә, һыуҙы ябырға онотаһығыҙмы?
9. Бер үк хәбәрҙе, мәҙәктәрҙе, онотолоп китеп, бер нисә мәртәбә һөйләйһегеҙме?
10. Ҡала атамаларын, урам исемдәрен, йәшелсә-емеш исемдәрен онотоп ебәрәһегеҙме?
11. Хәтерегеҙгә ышанмайынса, ҡайһы бер нәмәләрҙе яҙып ҡуйғанығыҙ бармы?
12. Яңылыҡтарҙы хәтерҙә ҡалдырыуы ауырмы?
13. Аскыс, телефон, ручка һәм башҡа шундай ваҡ-төйәктәрҙе таба алмайынса йыш интегәһегеҙме?
14. “Нимә әйттең әле һин?” тигән һөйләмде йыш ҡулланаһығыҙмы?
15. “Бына әле генә шунда ҡуйған инем бит” тип һуҡранаһығыҙмы?

**ЯУАПТАР:**
“Бер ҡасан да” - 0 мәрәй;
“Һирәк кенә” - 1;
“Ҡайһы ваҡытта” - 2;
“Бик йыш” - 3.



**7 һәм унан да әҙерәк.** Һеҙҙең хәтерегеҙ иҫ киткес! Әммә уны әленән-әле нығытып, сыныҡтырып, тикшереп тороу һис тә артыҡ булмаҫ.

**7-15 мәрәй.** Хәтерегеҙ бик үк насар түгел әлегә. Әммә уны сыныҡтырыу һәм нығытыу мөһим. Мәктәптә ятларға ҡушылған шиғырҙарға “төкөрөп” ҡарамағыҙ. Улар хәтер өсөн иҫ киткес яҡшы күнегеү. Кистәрен, йоҡларға яткас, үткән көндәге ваҡиғаларҙы “бөртөкләп” иҫегеҙгә төшөрөргә тырышығыҙ. Хәтерҙе сыныҡтырыусы уйындар уйнағыҙ.

**15 һәм унан да күберәк.** Һеҙҙең хәтерегеҙ бик насар. Уны ашығыс рәүештә “терелтергә, хәрәкәтләндерергә” кәрәк. Был эшкә бөгөндән үк тотоноу зарур.

# ИШЕКТЕ АСЫҒЫҘ, ӘММӘ ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ: ЙӘШ БЕЛГЕС КИЛӘ!

“БЕҘҘЕҢ ЗАМАНДА РӘХӘТ ИНЕ, ИСМАҺАМ. УҠЫУЫҢДЫ ТАМАМЛАУҒА ЭШ УРЫНЫ КӨТӨП ТОРА. УНДА БАРЫП ИНЕҮГӘ “ПОДЪЕМНЫЙ” АҠСАҺЫН ҺӘМ ФАТИР АСҠЫСЫН УСЫҢА ҺАЛАЛАР. 10-15 ЙЫЛ ЭШЛӘГӘНДӘН ҺУҢ, УЛ ФАТИР ҺИНЕКЕ БУЛА...” – ТИП ҺӨЙЛӘЙ БАШЛАЙҘАР ЙӘШ БЕЛГЕСТӘР ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ СЫҠҺА. Ә ҺИН ТЫҢЛАП ТОРАҺЫҢ ДА, УЙҒА ҠАЛАҺЫҢ. ЫСЫНЛАП ТА, ЙӘШТӘРГӘ БЕРӘЙ ҠАСАН ШУНДАЙ МӨНӘСӘБӘТ БУЛДЫМЫ ИКӘН НИ? АҠЛЫ-ҠАРАЛЫ СОВЕТ ОСОРО КИНОЛАРЫНЫҢ УЙЛАП СЫҒАРЫЛҒАН СЮЖЕТЫ ҒЫНА ТҮГЕЛМЕ ИКӘН УЛ? БЕР ГЕНӘ КӨНГӘ ШУЛ ВАҠЫТҠА БАРЫП БУЛҺА, РӘХӘТЛӘНЕП САҒЫШТЫРЫП ЯҘЫР ИНЕМ. ЛӘКИН ӘЛЕГӘ ВАҠЫТ БУЙЛАП СӘЙӘХӘТ ИТӘ ТОРҒАН МАШИНА ЮҠ. ҺӘР ХӘЛДӘ, МИНДӘ ЮҠ. ШУҒА КҮРӘ БЫЛ МӘҠӘЛӘЛӘ ҺҮҘ БАРЫ ТИК БӨГӨНГӘ ЗАМАНДЫҢ ЙӘШ БЕЛГЕСТӘРЕ ТУРАҺЫНДА БАРА.



Амбициоз, тиҙәр йәштәрҙе. Үҙ-үҙҙәренә артык ышаныусандар. Уларҙың юғары белеме фәлән йылдар эшләгән “карттар”ҙың тәжрибәһенә “аяк сала” тип уйлайҙар. Шуның менән ерҙә тормош яралғандан бирле дауам иткән аталар һәм балалар мөнәсәбәтен тағы ла киҫкенләштереп ебәрәләр.

“Башыңдан атлап үтәләр инде!” – тине бер ханым йәш коллегалары тураһында. Әлбиттә, берәү ҙә уның башынан атлап үтергә йыйынмайҙыр. Әммә заман талаптарына уға карағанда теүәлерәк яуап биреүҙәре хак. Беренсенән, йәштәр компьютерҙы якшы белә (ә унһыҙ өлкә калманы хәҙер). Бик күп программалар менән иркен эш итәләр. Сит телдәрҙе лә беләләр. Компьютерҙа йыйыу тиҙлеге лә якшырак. Унан һөнәр буйынса алған мәғлүмәттәре лә яңырак. Былар барыһы ла эш процесын тиҙләтергә, конкурентлык заманында башкаларҙан артта калмаҫка ярҙам итә.

Тик бында икенсе проблема бар. HR-белгестәр йәштәрҙең амбициялары бик йыш белем дәрәжәләренә тура килеп бөтмәүен асыклаған. Етәксе вазифаларға дәғүә иткән йәш белгестәрҙең күбеһе ябай хеҙмәткәр бурыстарын да үтәй алмай икән. Һуңғы йылдарҙа телдән төшмәгән БДИ һөҙөмтәләрен генә күҙәтәйек. Былтыр 16 меңдән артык укыусы вузға “үтерлек” балл йыя алманы. Ә был имтихан тапшырыусыларҙың 2 проценты ғына. Уңышлы тапшырыусылар араһында күпселек көскә минималь балл йыйған. Ә “100”-ләләр ни бары 2822 кеше. Бер миллионға якын укыусы араһынан! Һәм уларҙың күпмеһе үҙ башы менән тапшырғандыр әле... Йәштәр һаны кәмеү сәбәпле, вуздар абитуриенттарға талаптарын йылдан-йыл төшөрә. Шуға күрә ысын белемлеләр менән бер рәттән “3”-лө капсыктары” ла юғары укыу йорттарына “йырлап” инеп китә. Икенсе йылға ла әлеге хәл кабатлана. Нишләһендәр? Студент юк икән, уларға эш тә юк, тигән һүҙ бит. Хәйер, эш кенәме?.. Биш йыл буйы сессия һайын күстәнәс ташыйҙар. Шуға алданып, минән киткәнсе, хужаһына еткәнсе, тип ундайҙарҙан да йәш белгес “яһап” сығаралар. Тик буласак хужалар – эш биреүселәр үҙ талаптарын төшө-

рәләрме һуң? Юҡ. Социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, эшкә ҡабул итеүселәрҙең 41 проценты ғына йәш белгес әҙерлеге менән ҡәнәғәт, 37 проценты ҡәнәғәт түгел. Ә 21 проценты был һорауға ни тип яуап бирергә лә белмәй. Сөнки уларға эш процесында йәш белгестәрҙең ике "сорт"ы менән дә осрашырға тура килә.

Шулай шул бына. Аҡ эт бәләһе ҡара эткә төшә, тигәндәй. Бөгөн барыһы ла: "Уңға барырғамы икән, һулға барырғамы икән, атай-әсәй эш тапҡансы, ултырып ҡына торорғамы?" тип ятмай бит. "90-сы"ның алдашҡан йәштәре лә аренанан күптән китте. Бөгөн уларға алмашҡа йәнә үҙ-үҙенә һәм белеменә ышанған быуын килә. Эйе, бәлки ҡиммәттәр бер аҙ үҙгәргәндер. Тик был йәштәр тормоштан ни кәрәклеген яҡшы белә. Һәм маҡсатына ирешеү өсөн мәктәптән үк юл яра башлай.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, күп вуздар теорияға нигеҙләнеп кенә уҡыта. Унда хеҙмәт баҙарының талаптарын аңлап бөтөрмәгән, ғөмүмән, уларҙы белмәгән ғалимдар дәрес бирә. Студенттар практиканы ла бик формаль үтә. Күп ерҙә "йомошсо малай" бурыстарын үтәп йөрөй торғас, эштең ниҙән ғибәрәт икәнен аңламай ҙа ҡалалар.

Шул сәбәпле, диплом алған йәш белгескә үҙ аллы өҫтәмә курстар, стажировкалар үтергә тура килә. Ә эш биреүселәр лекцияларҙа һөйләнелгән әйберҙәрҙең тормошҡа бик үк тура килеп бөтмәгәнен аңлатыр өсөн күп ваҡытын сарыф итә. Юғары уҡыу йорттарында практикант-уҡытыусылар, шул иҫәптән эш биреүсе кампания вәкилдәре лә, махсус курстар алып барһа, был ҡыйынлыҡтарҙан ҡотолоп булыр ине. Әгәр йәш белгес ойошма менән студент сағында уҡ таныша торһа, диплом алып эшкә урынлашҡас, яңы коллективҡа еңелерәк инеп китер ине.

Әлбиттә, беренсе осорҙа остазының ҡул аҫтында эшләү ҙә ҡамасауламаҫ. Тик алда әйтелгән аталар һәм балалар мөнәсәбәте янына "ҡыҫҡартыу" һүҙен дә ҡуйһаң, бындай тәжрибәнең уңышы шик тыуҙыра. Ни өсөн тигәндә, һәр йәш белгес – иртәгә һинең урыныңды алырға торған көндәш. Уның булдыҡһыҙлығы "ҡарттар"ға файҙаға ғына кеүек. Унан фәлән йыллыҡ стаж бейеклегенән ҡарап ултырыусы совет осоро кешеләренең йәштәргә ҡарата мөнәсәбәте бер: эшлә, һин йәш әле. Ә мин үҙ өлөшөмдө эшләгән, хәҙер һин һөйрәгәндә ултырып ҡына барам...

Бәлки, ҡатыраҡ яңғырайҙыр. Өлкәндәр был һүҙҙәр менән ризалашмаҫ та. Тик стажға ҡарап хеҙмәт хаҡы түләүҙе бөтөргәс, ошо хоҡуҡтан ҡолаҡ ҡағыу күптәрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы кеүек. Ә студенттар фатир тураһында хыялланып ултыра. Йәш белгестәргә уныһын да бирә башлаһалар!..

Был ҡаршы икән тип уйлай күрмәгеҙ тағы. Мин ҡуш ҡуллап риза.

Йәш кешене ҡыҙыҡһындырырлыҡ стимул кәрәк. Әгәр ул үҙ өҫтөндә эшләмәһә, үҫергә, камиллашырға ынтылмаһа, ҡолаҡ ҡағасаҡ ниҙер булырға тейеш.

Йәштәр фекеренсә, уңышлы карьера күрһәткестәрен асыҡларға теләп, һорау алыуҙар үткәргәндәр. Беренсе урынға хеҙмәт хаҡы сыҡҡан. Унан күпкә ҡалышып булһа ла, үҙ һөнәрең буйынса эшләү тора. Һәр белгес үҙ урынында булырға тейеш тигән ҡараштағы йәштәр (Бында бөгөнгә көндә бөтөнләй хәл ителмәй торған профйүнәлеш мәсьәләһе тора). Өсөнсө урында эшеңдән ҡәнәғәтлек алыу ҡуйылған. Күптәр йәштәрҙең аҡса мәсьәләһенең беренсе урынға сығыуын матди байлыҡҡа ғына ынтылыуынан күрә. Әлбиттә, йәш белгесте фатир асҡысы менән көтөп торһалар, күрһәткестәр башҡасараҡ булыр ине лә бит.

Тик хеҙмәтенә күрә хөрмәте күрһәтелергә тейеш икәнде оноторға ярамайҙыр. Йәш белгестәрҙең дә "ҡаймағын – бер, һөтөн икенсе яҡҡа айырырға" ваҡыт.

Уҡырға тип сығып киткән йәштәрҙе ауылға кире ҡайтарыуҙың бер ысулы – грант биреү. Барыһына тәтей торған бәхет түгел ул. Уны Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаусыларҙың иң тырыштары, лайыҡлылары ғына ала төҫлө. Тик юҡ. Ни өсөндөр арала аҙашып барып сыҡҡандар ҙа осрай ине. Бер командировкаға барғас, ауылға ҡайтҡан грантлы йәш белгес – ветеринар менән осрашырға тура килде. Ат янына баҫып фотоға төшөрөргә ярты сәғәт өгөтләнем үҙен. Разалашманы. Ҡуркты. Ҡала егете ине. Ветфакка ла йылҡы менән һыйыр ҡарарға түгел, эт менән бесәй дауаларға ингән булған. Ауылға шул аҡсаға ымһынып ҡына килеп сыҡҡан. Әле лә ундамы икән, фермаға төшкәндә кейгән аҡ туфлийы бысранғандың икенсе көнөндә үк киттеме икән – белмәйем. Ләкин йәш белгес тигән һайын минең күҙ алдыма ул килеп баҫа. Аҡ туфли, ап-аҡ күлдәк һәм ҡара күҙлектән...

Бына ни өсөн хеҙмәтенә күрә хөрмәте булырға тейеш тим мин. Шулай иткәндә генә белемдең престижы, йәш белгестең абруйы артасаҡ. Дауаханала сиратта торған бабай табиптың йәш икәнлеген белгәс, "теге, һәйбәтенә килермен" тип боролоп ҡайтып китмәйәсәк. Йәш тәрбиәсегә ҡалдырырға ҡурҡып, әсәләр балаларын баҡсанан эйәртеп алып сыҡмаясаҡ...

*АЙЗИРӘК.*

# ТӘРБИӘ

Башҡортостаныбыҙҙың район дауаханаларының береһендә медицина тикшереүе үтеп йөрөгән саҡта шундай хәл килеп тыуҙы. Ҡайһылыр табиптың бүлмәһе алдында бик ҙур сират теҙелгәйне. Берәүҙең дә үҙ урынын биргеһе килмәй. Шул саҡ оло йәштәрҙәге бер ағай килеп инде лә: «Беҙҙең заманда ололарҙы хөрмәт иттеләр», – тип ҡыскырып, сиратта тороусыларҙың ризаһыҙлығына ҡарамай, табип бүлмәһенә инеп китте. Әлеге ағай сыҡҡас, уны ситкә саҡырып алдым да:

– Ағай, һеҙ йәш саҡта йәштәр ололарҙы хөрмәт итә торғайнымы? – тип һораным.

– Эйе, – ти ул.

– Ағай, беләһегеҙме ни өсөн ул ваҡытта ололарҙы – оло, йәштәрҙе йәш тип белгәндәр? – тим.

– Юҡ, – ти ағай.

– Сөнки һеҙҙе иманлы атай-әсәйҙәр тәрбиәләгән. Улар һеҙҙе "Ҡөрьән" һәм пәйғәмбәребеҙҙең сөннәте буйынса үҫтергән. Ололарҙы хөрмәт ит, күршең ас булғанда туҡ көйө йоҡларға ятма, урлашма, кеше хаҡын боҙма, тип өйрәткән.

Бабай, уйланып ҡына:

– Эйе шул, – ти.

– Ә һеҙ йәштәрҙе нисек тәрбиәләнегеҙ? Ололарҙы хөрмәт итмәгән бөгөнгө йәштәрҙе кем үҫтергән һуң? – тип һорағас, бабай, бер ни ҙә өндәшмәй, боролоп китеп барҙы.

Ислам дине ҡанундарына таянып йәшәгәндә халҡыбыҙ, ысынлап та, бәхетле тормош иткән. Ауылдарҙа алтышар балалы ғаиләләр гөрләп торған. Халыҡ байлығына үҙе хужа булған. Ә иң ҙур байлыҡ – ул иман байлығылыр.

"Ҡөрьән"дең «Ғимран ғаиләһе» сүрәһенең *19-сы аятында* былай тиелә: **«Ысынлап та, Аллаһ ҡаршыһындағы дин – Ислам дине».** Шул уҡ сүрәнең



**Ислам диненең төп маҡсаты — кешеләрҙе бәхетле итеү. Дин тотоусы кешеләр ике донъяла ла бәхетле булыр. Бөйөк Аллаһы Тәғәлә Уның Үҙенә генә табыныуҙы кешеләргә фарыз ҡылды, кешеләргә күктәрҙәге һәм ерҙәге күп нәмәне буйһондорҙо. Ә кеше һиҙеп, сағыштырып, аңлаһын өсөн, Ул уға аҡыл бирҙе.**

85-се аятында иһә: **«Кем дә кем Ислам диненән башҡа үҙенә икенсе дин эҙләй, уның ул дине ҡабул ителмәҫ һәм ул Әхирәттә отолоусыларҙан булыр»** тигән һүҙҙәр бар.

**Беҙҙең халыҡта бер матур сифат бар — ул ярҙамсыллыҡ тойғоһо, тирә-яҡта булған кешеләргә, туғандарға, күршеләргә тура юлды күрһәтеү. Әгәр ҙә һеҙ берәй һуҡырҙың йәки бәләкәй баланың тәрән соҡорға табан китеп барыуын күрһәгеҙ, йүгереп барып уны туҡтатырға тырышасаҡһығыҙ. Шулай уҡ, Аллаһтың хаҡ динен тотҡан иманлы ҡәрҙәштәребеҙ ҙә мәңгелек упҡынға табан барған күршеләрен, туғандарын һаҡлап алып ҡалырға тырыша. «Мин белгәнде белһәгеҙ, һеҙ бер ҡасан да көлмәҫ инегеҙ», — тигән Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) миғраж мәлендә йәһәннәмде күреп ҡайтҡандан һуң. Эй кешеләр, Ҡиәмәт көнө һәм йәһәннәм ғазаптарының ниндәй икәнен белһәк, беҙ бер ҡасан да ҡысҡырып көлмәҫ инек һәм сәждәнән баш ҡал-ҡытмаҫ инек.**

Ислам диненең төп максаты – кешеләрҙе бәхетле итеү. Дин тотоусы кешеләр ике донъяла ла бәхетле булыр. Бөйөк Аллаһы Тәғәлә Уның Үҙенә генә табыныуҙы кешеләргә фарыз ҡылды, кешеләргә күктәрҙәге һәм ерҙәге күп нәмәне буйһондорҙо. Ә кеше һиҙеп, сағыштырып, аңлаһын өсөн, Ул уға аҡыл бирҙе.

Һәм дә кеше иманын ҡеүәтләһен өсөн, Аллаһ Үҙенең Рәхмәте менән пәйғәмбәрҙәр ебәреп торған. Улар, иң яҡшы кешеләр була-

**Хәҙерге заманда күп кеше донъяуи ҡараш менән генә йәшәй. Яҡшы өй, яҡшы машина, яҡшы телефон артынан көндәр буйы йүгереп, кредиттарға батып бөтөргә әҙер. Әммә ундай уйҙар менән йәшәү кешене упҡынға төшөрә, хур итә. Изге "Ҡөрьән" китабында Аллаһы Тәғәлә күп осраҡта кешеләргә шулай мөрәжәғәт итә: «Эй, һеҙ, аҡылдары булған кешеләр!» — ти, йәки шулай һорай: «Әллә һеҙ төшөнмәйһегеҙме, уйланмайһығыҙмы, аңламайһығыҙмы?» Кешеләр, уйланығыҙ, Ҡиәмәт көнөндә Аллаһ: «Мин һинең менән булдым, ә һин кем менән булдың?» — тип һорар бит.**

раҡ, ҡалғандарға үрнәк булды, тура, дөрөҫ юл күрһәтте. Һөйөклө пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) өммәтендә булғас, беҙҙең "Ҡөрьән" китабыбыҙ бар, Аллаға шөкөр. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик күп кешеләр быны белә тороп та, үҙҙәренең нәфселәре, донъя байлыҡтары артынан ҡыуып, аҙашып ҡалдылар. Ундай кешеләр бик күп, һәм шулай аҙашҡан хәлдә был донъянан күсеп киткәндәр ҙә бик күп. "Ҡөрьән"дә «Һыйыр» сүрәһенең *18-се аятында* улар тураһында шулай әйтелә: **«һаңғырауҙар, телһеҙҙәр, һуҡырҙар...»**

Беҙҙең халыҡта бер матур сифат бар – ул ярҙамсыллыҡ тойғоһо, тирәяҡта булған кешеләргә, туғандарға, күршеләргә тура юлды күрһәтеү. Әгәр ҙә һеҙ берәй һуҡырҙың йәки бәләкәй баланың тәрән соҡорға табан китеп барыуын күрһәгеҙ, йүгереп барып уны туҡтатырға тырышасаҡһығыҙ. Шулай уҡ, Аллаһтың хаҡ динен тотҡан иманлы ҡәрҙәштәребеҙ ҙә мәңгелек упҡынға табан барған күршеләрен, туғандарын һаҡлап алып ҡалырға тырыша. «Мин белгәнде белһәгеҙ, һеҙ бер ҡасан да көлмәҫ инегеҙ», – тигән Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһү ғаләйһи үә сәлләм) миғраж мәлендә йәһәннәмде күреп ҡайтҡандан һуң. Эй кешеләр, Ҡиәмәт көнө һәм йәһәннәм ғазаптарының ниндәй икәнен белһәк, беҙ бер ҡасан да ҡысҡырып көлмәҫ инек һәм сәждәнән баш ҡалҡытмаҫ инек.

Изге "Ҡөрьән" китабының «Ғимран ғаиләһе» сүрәһендә Аллаһ әйтә: **«һеҙҙең аранан шундай йәмәғәт булыр: улар һеҙҙе яҡшылыҡҡа саҡырыр, изгелеккә өндәр һәм насарлыҡтан тыйып торор, улар – уңышҡа ирешкәндәрҙән»** *(104-се аят).* Ә «Асыҡ аңлатылдылар» сүрәһенең *33-сө аятында:* **«Кешеләрҙе Аллаһ юлына саҡырған, үҙе яҡшы эштәр башҡарған һәм «Ысынлап, мин – мөсолмандарҙан!» тигән кешенең һүҙенән кемдең һүҙе яҡшыраҡ булыуы мөмкин һуң?»** – тип ҡәтғи һорай.

Хәҙерге заманда күп кеше донъяуи ҡараш менән генә йәшәй. Яҡшы өй, яҡшы машина, яҡшы телефон артынан көндәр буйы йүгереп, кредиттарға батып бөтөргә әҙерҙәр. Әммә ундай уйҙар менән йәшәү кешене упҡынға

төшөрә, хур итә. Изге “Ҡөрьән” китабында Аллаһы Тәғәлә күп осраҡта кешеләргә шулай мөрәжәғәт итә: **«Эй, һеҙ, аҡылдары булған кешеләр!»** – ти, йәки шулай һорай: **«Әллә һеҙ төшөнмәйһегеҙме, уйланмайһығыҙмы, аңламайһығыҙмы?»** Кешеләр, уйланығыҙ, Ҡиәмәт көнөндә Аллаһ: «Мин һинең менән булдым, ә һин кем менән булдың?» – тип һорар бит.

Ә беҙ, мосолмандар, һәр ваҡыт яуаплылыҡ тураһында уйлап, ҡурҡып йөрөргә тейешбеҙҙер: «Халҡыбыҙға “Ҡөрьән”дең гүзәллеген, бөйөклөгөн алып барып еткерә алырбыҙмы?» – тип, «Аллаһ әмерҙәрен, пәйғәмбәребеҙҙең сөннәтен еренә еткереп күрһәтеүсе миҫал була алырбыҙмы?» – тип, «Ислам диненең әҙәп-әхлаҡ күркәмлеген, сафлығын, иман бөйөклөгөн кешеләргә аңлата алырбыҙмы?» – тип.

Ысын мосолман булыр өсөн йөрәгендә уятырға, уйланыуҙарға, сағыштырыуҙарға бирелергә кәрәк. Сөнки Аллаһ Үҙенең “Ҡөрьән”ендә кешеләрҙе күп ваҡыт шуға

**Мосолмандар — улар яҡшылыҡҡа саҡырыусылар, насарлыҡтан, боҙоҡлоҡтан тотоп тороусылар, улар атай-әсәйҙе хөрмәт итергә өйрәтеүселәр, туғандар менән аралашып, күршеләренең хәлен белеп торорға өндәүселәр.**

өндәй. «Хаж» сүрәһендә: **«Әллә улар, уйлана алған йөрәктәре, ишетә алған ҡолаҡтары булып, Ер йөҙө буйлап йөрөмәнеләрме ни? Ысынлап, күҙҙәр һуҡыр булмай, әммә күкрәктәрҙәге йөрәктәр һуҡыр була»,** – ти *(46-сы аят)*. Ә «Мал-тыуар» сүрәһенең 99-сы *аятында* иһә, мәҫәлән: **«...Беҙ һыуҙан үҫемлектәр үҫтерәбеҙ, уларҙан рәтләп-рәтләп орлоҡтар сығарабыҙ; һәм хөрмә ағасынан – емешле тәлгәштәр һәм йөҙөм ағасынан – баҡсалар; һәм зәйтүндә һәм анарҙы үҫтерәбеҙ – бер-береһенә оҡшаштарын һәм оҡшаш түгелдәрен. Емеш биргән саҡта ул емештәргә һәм уларҙың өлгөрөп бешеүҙәренә ҡарағыҙ! Ысынлап та, был бит иман килтергән кешеләр өсөн асыҡ аяттар!»** – ти.

Мосолмандар – улар яҡшылыҡҡа саҡырыусылар, насарлыҡтан, боҙоҡлоҡтан тотоп тороусылар, улар атай-әсәйҙе хөрмәт итергә өйрәтеүселәр, туғандар менән аралашып, күршеләренең хәлен белеп торорға өндәүселәр. Изге “Ҡөрьән” китабы һәм пәйғәмбәребеҙҙең сөннәте кешене әҙәплелектең бөйөк камилдәренә күтәрә. Билдәле ғалим Хәсән Басри (рахимәһуллаһ) уның тураһында ғәйбәт һатҡандарға бүләктәр ебәрә торған булған. “Ҡөрьән”дә, «Асыҡ аңлатылдылар» сүрәһендә Аллаһы Тәғәлә әйтә: **«Яҡшылыҡ менән яманлыҡ берҙәй түгел, яманлыҡты яҡшылыҡ менән кире ҡаҡ, һәм һинең менән дошманлашҡан кеше һинең яҡын дуҫыңа әйләнер»** *(34-се аят)*.

Аллаһым, иманлыларҙың иманын арттыр, хәйерле белем, көс, ҡеүәт бир! Халҡыбыҙҙың йөрәген, күҙҙәрен, ҡолаҡтарын асып, тура юлға баҫтыр, юҡҡа сығарма. Амин.

*Илшат ҒӘТИӘТУЛЛИН.*

## КҮҢЕЛГӘ НАСАР УЙҘАР КИЛГӘН САҠТА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

أَعُوذُ بِاللهِ مِنَ الشَّيْطَانِ الرَّجِيمِ وَمِنْ فِتْنَتِهِ
آمَنْتُ بِاللهِ وَرُسُلِهِ. اَللهُ أَحَدٌ اللهُ الصَّمَدُ لَمْ يَلِدْ
وَلَمْ يُولَدْ وَلَمْ يَكُنْ لَهُ كُفُوًا أَحَدٌ

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.**

**Әғүҙү бил-ләһи минәш-шәйтанир-ражими үә мин фитнәтиһ. Әмәнтү бил-ләһи үә русүлиһ. Аллаһү әхәд. Аллаһүссамәд. Ләм йәлид үә ләм йүләд. Үә ләм йәкүл-ләһү күфүән әхәд.**

**Мәғәнәһе: “Таш менән атып ләғнәт уҡылған шайтан ҡотҡоһонан, уның бола һәм фетнәләренән ҡасып, Аллаһы Тәғәләгә һыйынам. Мин Аллаһы Тәғәләгә һәм уның илселәренә инандым. Аллаһ — Бер. Ул — мәңгелек, бер кемдән тыуманы һәм бер кемде тыуҙырманы. Уға тиң булырлыҡ бер кем юҡ”.**

# ЙӨҘ ҘӘ БЕР АРҒЫМАҠҠА ТОРОРЛОҠ



**СИБӘР ҠЫҘҘАР КҮРҺӘМ, ҠАУШАП ҠАЛАМ. «МАТУРЛЫҠ ӨРКӨТӨРГӘ ТҮГЕЛ, ҺОҠЛАНДЫРЫРҒА ТЕЙЕШ» ТИП ӘЙТЕР КЕМДЕР. ДӨРӨҪ. КҮҘЕМ ҺӨЙӨНҺӘ ЛӘ, МИН ТӘҮҘӘН ҮК ҺАНДЫҠТЫҢ ЭСЕ ТУРАҺЫНДА УЙЛАЙЫМ. ХОҘАЙ СЕМӘРЛӘП, БӘПЛӘП БАР ҠЫЛҒАН, АТА-ӘСӘҺЕ ҮҘЕНСӘ БИҘӘК ҺАЛҒАН ҺАНДЫҠТЫҢ ЭСЕНДӘ ЗАТЛЫ ҠОМАРТҠЫ КҮРГЕМ КИЛӘ. Ә УЛ БУШ БУЛЫП ҠУЙҺА? ҺОҠЛАНЫУЫМ – ШИКЛӘНЕҮГӘ, ШИКЛӘНЕҮЕМ ҠАУШАУҒА КИЛТЕРӘЛЕР.**

Лилиәне күргәс, нишләптер, ҡаушаманым. «Башҡортостан мисы-2009» гүзәллек бәйгеһе еңеүселәренең береһе бит ул. Уның бер туктауһыҙ нур бөркөлөп торған күҙҙәрендә үҙ-үҙенә булған ышанысын тойҙом, донъяға һөйөнөп баҡҡанын күрҙем. Нимәнелер асырға, төшөнөргә тырышыу ынтылышы, ҡыҙыҡһыныу сағылышы ла төҫмөрләнде. Мәғәнә булғанда ғына күҙҙәр шулай балҡып яныусан, уйсан һәм әсир итеүсән. Йәшел күҙҙәренең төбөндә серлелек тә йәшеренгән кеүек. “Ҡыҙ күңеле – серле һандыҡ, эсе тулы зиннәт кенә, аҫкыстары – йөрәгендә, асам тимә кинәт кенә”, – ти кәләм оҫтаһы ла. Шул серҙе, мәғәнәне табыр, эсендәгеп барлар өсөн һандыҡ аҫҡысына һаҡ ҡына тотонам, Лилиә менән һүҙемде шуға йыраҡтан, бик йыраҡтан башланым:

– Әйҙә, Лилиә, һин миңә тәүҙә берәй әкиәт һөйлә әле, беләһеңдер бит?

Бик наҙлыҡай йә иркә булһа, бала итеп күрмәгеҙсе әле, тип көләр тип көтәм. Шөкөр, һорауымдан төйөр тапманы яңы танышым:

– Беләм. Бала сакта Ҡуғанаҡбашҡа (Стәрлебаш районы), Томансыға (Мәләүез), Мәмбәтҡолға (Көйөргәҙе) өләсәйҙәремә барһам, мотлаҡ уларҙан әкиәт һөйләтә торғайным. Ә үҙем концерт ҡуям. Ҡуян менән төлкө тураһында һөйләйемме?

– Юҡ, мин уны беләм, береһенең өйө боҙҙан, икенсеһенеке ҡабыҡтан... Һин миңә ҡыҙҙар, матурлыҡ йә булмаһа аҡыл тураһында һөйлә.

– Улайһа, иҫкә төшөрәйем.

Беҙҙең һөйләшеүгә һылыуҡайҙың әсәһе ҡушыла. Ул да аралашыуға бигерәк ихлас кеше булып сыҡты. Асыҡ күңелле кеше менән һүҙ ҙә бәйләнеп барыусан шул.

“Тамыры баҡыр ағастың сатыры алтын булмаҫ”. Лилиәнең тамыры баҡыр түгел. Ата-әсәһе тормошта уның өсөн өлгө лә. Бигерәк тә уларҙың тырыш, ауырлыҡ алдында баш эймәй ғорур булыуҙары, зарлана белмәүҙәре, заманса фекерләүҙәре, осҡан ҡошҡа ваҡытында ирек ҡуя белеүҙәре һәм тормошто яратып йәшәүҙәре һоҡландыра ҡыҙҙы. Розалия һәм Урал Яхиндар Өфөлә студент сакта бер-береһен таба. Мәләүез ҡыҙы ул ваҡытта – БДУла филология факультетында, ә Стәрлебаш егете медицина институтында белем ала. Табышалар һәм ҡауышалар. Лилиә тыуа. «Стәрлетамаҡта үҫһәм дә мин баш ҡала ҡыҙы ул!» – тип шаяра бөгөн ҡыҙ. Студенттар ҡулға диплом алғас, йүнәлеш буйынса Стәрлетамаҡҡа барып урынлаша. Ул сакта Лилиәгә ике генә йәш була. Стәрлелә Урал Фәрит улын оҫта белгес буларак бик хөрмәт итәләр. Хәҙер ул – медицина өлкәһендә шәхси эшҡыуар.

– Уҡып бөткәс, аспирантураға ҡалырға димләнеләр. Тик, декабрист ҡатындары кеүек, ир ҡайҙа – муйын да шунда, тигәндәй, уның артынан юлландым. Фән тауына үрләй алмауым бер үкенес булып ҡалырмы, тип борсолғайным да, шөкөр, ваҡыты менән үҙ юлымды таптым, – ти Розалия Шәғәле ҡыҙы. Лилиәнең әсәһе бөгөн фән кандидаты, Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының филология факультетында уҡыта.

– Бәһлеүән кәүҙәле Урал сибәр Розалияны ниндәй егетлеге менән арбаны икән?

– Моңо менән! – Ҡатын ихлас йылмая. – Әйе, ҡулынан һис ҡасан ҡурай һәм тальян төшмәй. Һыҙҙырып уйнап ебәрһә, йөрәк-бауырым өҙөлгәндәй була.

Ысынлап та, Урал ағай моңдо ғүмерлек юлдашы итеп алған. Ҡулы-белеме менән кеше һаулығын нығытһа, моңо-зиһене аша кеше күңелен дауалай ул шулай. Көйҙәр ҙә ижад итә. Үҙҙәренең туйында Розалияһына арнап йыр башҡарыуын, нисә йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, һаман да һағынып иҫкә ала икән туғандары. Шәйехзада Бабич һүҙҙәренә яҙылған «Яҙғы йыр» радио аша йыш ишетелә. Әсәйҙәргә, тыуған яҡҡа арнап яҙылған йырҙарын Лилиә мәктәп йылдарында йыш башҡарған.

– Шулай ҙа халыҡ йырҙары күңелемә нығыраҡ яҡын. Унда башҡорт халҡының даны ла, зары ла асыҡ сағылған. Халыҡ йырын ишетһәм, йөрәгем тулай, атта сапҡан яугирҙар, сәхрәләге аҡ башлы тирмәләр күҙ алдыма баҫа. Үҫеп килеүсе быуынға шул моңдо, шул аһәңде нығыраҡ һеңдерергә ине ул, – ти Урал ағай.

Бына ниндәй баҡсаның гөлө икән ул Лилиә.

Ун ике йәшкә тиклем ҡыҙҙы ата-әсәһе, был моғайын үҫкәс артист булыр, тип уйлай. Йәле, ҡыҙым, йырла йә булмаһа бейе әле, тиһәләр, ҡыҙ һис кемдән оялмай, тартынмай рәхәтләнеп һөнәрен күрһәтә. Уның картатаһы Фәрит тә сәнғәткә ғашиҡ кеше була. Ул ейәнсәренә төрлө халыҡ бейеүҙәрен өйрәтә. Үҙе уның менән еңел генә вальс та әйләнә. «Хәҙерге заман балаһы бар яҡтан да үҫешкән һәм камил булырға тейеш. Ҡайҙа, нимә, ниндәй һөнәргә өйрәнә алаһың, шуға ынтылып, тартылып тор», – тип кәңәш бирә тәжрибәле өлкән кеше. Лилиә күршеләге бала-сағаны фатирға йыя, тәҙрә ҡорғандарын сәхнә таршауы итә лә уларға концерт күрһәтә. Аяғына – әсәнә мамыҡ тултырып әсәһенең туфлийын, өҫтөнә оҙон күлдәген кейеп, ҡайыш быуып килеп сыға «сәхнәгә» йырсы. Унан һуң тамашасыларын тәмләкәстәр менән һыйлай. Ауылға ҡайтһа, оло йәштәге инәйҙәрҙең күңелдәрен күрә.

– Бер Ҡуғанаҡбашҡа ҡайтып өйгә инһәм, хайран ҡалырлыҡ тамашаға тап булдым. Диванды сәхнә итеп эшләп алған да концерт ҡуя был. Ә ҡаршыһына, мейес буйына теҙелеп ҡәйнәм, уның әхирәттәре урын алған. Көләләр, мөкиббән китеп тамаша ҡылалар, хатта минең ингәнде лә һиҙмәй ҡалдылар, – тип көлөп иҫләй әсә кеше.

– Ә нишләп ун ике йәшкә тиклем? – һорамайса булдыра алмайым.

– Ун ике йәшенән ҡапыл олпатланып киттеме инде, һәр нәмәгә етди ҡарай башланы. Ҡыҙыҡһыныуҙары артты. Бер мәл модельер булам тип затлы ғына драп ҡулдәгемдең артын ҡырҡып ҡурсаҡтарын да «кейендерҙе» инде ул. Асыуланманым, сепрәк тип баланың дәртен һүндереп булмай бит инде. Үҙ аллы үҫте, шәп уҡыны, беҙ уның дәрес әҙерләгәнен дә күрмәй ҡала торғайныҡ. Эштән ҡайтыуыбыҙға үҙ мәшәҡәтен бөтөп, бөтөнләй башҡа өлкәләр менән ҡыҙыҡһына торғайны. Бер осор иҡтисад китаптары менән өй тулды, үҫә бирә философияға ҡағылышлы материалдар уҡырға тотондо. Нисектер шулай шөғөл табып үҙенә буш ваҡыт ҡалдырырға ирек бирмәне. Үҙенән биш йәшкә бәләкәй туғаны Динисламды ла тәрбиәләп, ҡарап өлгөрә торғайны. Үҫмер сағынан уҡ тулы тормош менән йәшәне. Өлкән синыфтарҙа теүәл фәндәргә ылыҡты. Һөнәр һайлағанда ла үҙ иркенә ҡуйҙыҡ. Атаһының да, минең дә юлды һайламаны. Математика йүнәлеше буйынса китте. Бик ауыр специальность һайланы, атаһы менән уҡырға инермеюкмы тип борсола биреп тә ҡуйғайныҡ, тырышлығы, алған маҡсатына ынтылышы үҙенекен итте. Уҡырға инде, инженер-программист буласаҡ, Алла бирһә. Афарин, ҡыҙым.

– Ой, әсәй, мине маҡтап бер булаһың инде, – ҡыҙ әсәһенә һыйынып ҡуйҙы.

– Һуң, маҡтарлығың булғас.

– Шунан, әкиәт иҫкә төштөмө? – мин һаман ҡыҙҙың телен астырмаҡсы.

– Төштө, тик оҙон. Миңә өләсәйем үҫә биргәс һөйләгәйне. Яҡынса йөкмәткеһен бәйән итәм, үҙегеҙ килештереп яҙырһығыҙ. Иң мөһиме – мәғәнә бит.

Мин үҙемсә тырышҡан булдым. Бына ул әкиәт. Үҙҙәре баһадир ҙа, һоҡланғыс матур ҙа, бай ҙа ике башҡорт егете, урманда һунар итеп йөрөгәндә матур киң йәйләүгә барып сыға. Йәйләү хужаһының ике ҡыҙы бар, өлкәне – иҫ-аҡыл китерлек сибәр, икенсеһе ҡәҙимге, бик хайран итерлек түгел икән. Егеттең береһе:

– Мин бәхетемде таптым, байҙың ҡыҙына өйләнәм, – тип әйтә икән дуҫына.

– Эйе, өлкәне сибәр ҙә, аҡыллы ла, дөрөҫ эшләйһең, – тигән дуҫы.

– Яңылышаһың, мин кинйәбикәһенә өйләнәм.

– Һин нимә, аҡылдан яҙҙыңмы ни? – тип шик белдерә лә дуҫы үҙ юлы менән ары китә.

Егет байға килеп ҡыҙын кейәүгә биреүен һорай. Йәйләү хужаһы егетте тыңлай ҙа:

– Зауығың бар, егет, ысынлап та, минең өлкән ҡыҙым бик сибәр һәм аҡыллы, шуға ла уның ҡалымы ла бик ҡыйбат тора. Йөҙ арғымаҡ һинән! – тип үҙ шартын белдерә.

– Мин риза. Тик һеҙ яңылышаһығыҙ, бай ағай, мин кинйә ҡыҙығыҙҙың ҡулын һорарға уйлағайным да.

– Һин нимә, шаяраһыңмы? Ул бит ямаҡай, – тип асыуланған бай.

– Юҡ, һис тә шаярмайым.

– Ярай улайһа, ғәҙел бай буларaҡ, кесе ҡыҙым өсөн һинән ни бары утыҙ алаша ғына һорармын.

– Юҡ! – тигән ҡәтғи рәүештә һунарсы егет. – Мин уның өсөн мотлаҡ йөҙ арғымаҡ түләргә теләйем.

Һәм түләй ҙә! Өйләнешәләр, ошо уҡ йәйләүҙә донъя көтәләр.

Бер нисә йылдан һуң егеттең баяғы һунарсы дуҫы тағы был йәйләү яғына килеп сыға. Тирмә эсенә инһә, иҫең-аҡылың китерлек шундай сибәр ҡатынды күреп һушы китә.

– Һин ер ҡыҙымы, әллә күктән төшкән фәрештәме? – тип һорарға көс таба.

– Ер ҡыҙы, һинең дуҫыңдың ҡатыны, – тип сабыр ғына йылмайып яуап бирә ҡатын кеше.

– Ғәфү ит, теге килгәндә ямаҡай ғына ҡыҙ инең дә һуң, ә хәҙер... Нисек шундай сибәргә әйләндең? – тотлоға-тотлоға һорай һунарсы.

– Иремә рәхмәт, ул күҙемде асты. Бер көн мин йөҙ арғымаҡҡа торошло икәнемде аңланым – бөтә сере шунда, – тигән ҡатын йылмайып...

Әкиәт тамам, тынып ҡалдыҡ. Лилиә уйланып тәҙрәгә ҡарап алды. Күҙендәге йылы ҡа-

раш ҡояш нурҙары менән осрашты булыр. «Бөгөн дә көн матур», – тип ҡуйҙы. Күңеленең ниндәйҙер илаһилык кисергәнен аңлайым да, тик һүҙҙе бәйләргә ынтылам.

– Шунан, әкиәттең асылы нимәлә инде?

Ҡыҙ ихлас аптырап миңә бакты. Эй серһеҙ, керһеҙ караш!

– Нисек? Шуны ла аңламаныгыҙмы ни? Баһаһын, ҡәҙерен белһәң, һәр ҡатын-ҡыҙ гүзәл. Шул. – Ана нисек икән ул.

– Һин үҙ баһаңды белдең дә, матурлык бәйгеһендә ҡатнашырға булдың инде, ә?

– Бәлки шулайҙыр ҙа, тормошта талант менән бергә тәүәккәллек тә кәрәк. Кеше үҙен һынай-һынай аса ғына бара бит.

Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһының ғәмәли математика һәм информатика йүнәлеше буйынса белем алған ҡыҙ, уҡыуы бик ауыр булыуға ҡарамаҫтан, ваҡыт табып, үҙен төрлө яктан асырға тырыша. Әйткәндәй, героинябыҙ тик «бишле» билдәләренә генә өлгәшә. Икенсе курста дизайнерлык менән ҡыҙыҡһына башлай. Уның әйтеүенсә, һәр кеше-индивидиум һоро өйөрҙән айырылырға тейеш. Шуға кейеменә, айырым аксессуарҙар өҫтәп, йә фасонын үҙгәртеп, ниндәйҙер үҙенсәлек һалырға ынтыла. Үҙенең идеяларын тегеүселәр менән уртаклаша, уларға заказдар бирә. Моделлек агентлығында ла уҡый, зауыҡын арттыра ҡыҙ.

Орсоҡ кеүек өйрөлгән, ҡайҙа ла өлгөрөргә ашыҡкан ҡыҙҙың тыныс ҡына ултырып, һәлмәк кенә сигеү менән шөғөлләнеүен күҙ алдына килтерә алмайым. Тик Лилиә алдыма күҙҙең яуын алырлык сигелгән һөлгөләр килтереп һалғас, аптырап ҡалдым, һокланыуымды йәшермәй:

– Мөғжизә бит был, – тип ҡуйҙым. – Кемдән өйрәндең?

– Ҡартәсәйем Сәриә Яхинаның ҡулы алтын, ул төшөндөрҙө серенә, – тип йылмая уңған ҡыҙ.

– Өйрәнгәне үҙенә. Ҡыҙ кешегә бирнәһеҙ ҙа булмай бит, – тип мут ҡына йылмая әсәһе. – Бирнәгә тип әҙерләгән һөлгөләрен ҡай саҡ өлкәнерәк әхирәттәренә лә, буласаҡ килендәргә лә бүләк итеп тә, һатып та ебәргеләне инде ул.

Ҡулының бәрәкәтен күргәс, бәхетле инде тип ҡуям.

Лилиә фотосессияларҙа ла йыш ҡатнаша. Билдәле фоторәссам Дмитрий Айсыуаҡов төшөргән үҙенсәлекле эштәрҙе күргән таныштары, бигерәк сибәрһең, уңғанһың, Лилиә, һылыуҡайҙар бәйгеһенә барып ҡара әле, тип фекерен белдерә. Һәм ата-әсәһе менән кәңәшләшә лә тәүәккәлләй ҡыҙ. Мөмкин булған иң һуңғы көндә бәйгегә үҙенең анкетаһын ебәрә. «Үҙем тураһында» тигән графаға ике һүҙ генә яҙа: «Умница, красавица». Үҙенең йөҙ арғымаҡҡа торошло икәнен аңлаған икән ҡыҙ!

Йөҙ ҡыҙ араһынан 13 гүзәл баш ҡалабыҙҙа «Өфө уттары» комплексында Гран-при өсөн көс һынаша. Шуныһы һөйөнөслө, Лилиә үҙенең башҡорт ҡыҙы булыуы менән ғорурланыуын йәшермәй. Киреһенсә, һәр сығышында быға баҫым яһай. Жюриҙы башҡорт ҡыҙы үҙенең зирәклеге, һомғоллоғо һәм һылыулығы менән генә түгел, һайлаған һөнәре менән дә арбай. Хатта бер жюри ағзаһы һокланыуын йәшермәй, шундай нескә һәм күркәм ҡыҙҙың күптәрҙең, хатта башлы егеттәрҙең дә, теше үтмәҫлек һөнәр һайлауы ғына ун балға торошло, тип ҡуя. Ә инде жюри ағзаһы, Чехияла эшләүсе билдәле фотограф, яҡташыбыҙ Тимур Сөләймәнов Лилиәнең күҙҙәренә хайран ҡала: «Башҡорт ҡыҙҙарының шундай гүзәл икәнен белмәй инем. Һеҙҙең милләттә лә йәшел-зәбәрйәт күҙҙәр бар икән». Борон башҡорттар йәшел күҙле булған, тип яуап бирә Лилиә. «Республиканың иң элегант ҡыҙы» тип нарыҡлайҙар уны.

Ҡайтыр сакта йәшел күҙле сибәр ҡыҙға ҡарап, бер нигә өмөт итмәһәм дә, һорап ҡуйҙым:

– Һине әсир итерҙәй һунарсы егет ниндәйерәк булырға тейеш инде?

– Рәми Ғарипов кеүек рухлы, Исаак Ньютон кеүек зирәк, Григорий Фихтенгольц кеүек аңлайышлы һәм, әлбиттә, мине аңлай, ҡәҙерләй, баһалай белгән кеше, – яуап ҡыҫҡа һәм тапҡыр булды. Һуңғыһының кем икәнен белмәһәм дә, аңлайышлы күренер өсөн: «Ә-ә», – тигән булдым. Ауыр математика телен төплө материал һәм төрлө миҫалдар менән аңлайышлы телгә һалыусы күренекле совет математигы икән. Ҡыҙҙарға окшайым тип Фихтенгольцтың да кем икәнен белдем. Дифференциаль һәм интеграль иҫәпләү курсының өс томын да өйрәнһәм...

*Морат ҒАРИФУЛЛИН.*

# ҒАИЛӘ БӘХЕТЕ – ОЖМАХТЫҢ ҮҘЕ

**Киленле йорт ҡотло була, тиҙәр. Егәрле, эшкә тилбер, аш-һыуға оҫта, төҫкә сибәр еңгәләр барында ғаилә нигеҙҙәре ныҡ, ауылдың киләсәге лә өмөтлө.**

**Мин ул ваҡытта мәктәптә генә уҡып йөрөй инем әле. Ғүмәр һәм Ғәлиә Билаловтар ғаиләһенә бик матур итеп, бөтә йолаларын шартына килтереп, Ғәлиәхмәт ауылынан килен төшөрҙөләр. Һыу юлы башлағанда аҡ йөҙлө, зәңгәр күҙле, нескә билле ҡурсаҡ шикелле еңгә кешегә һоҡланып ҡарап, "их, ҡасан ҙурайып, шундай ҡупшы түй күлдәген кейеп кейәүгә сығам инде" тип өнһөҙ генә ҡыҙығып тороуыбыҙ хәтерҙә ҡалған (Хәйер, ул ваҡытта бәләкәс ҡыҙҙар түй күлдәгенә ныҡыраҡ ҡыҙыҡҡандыр инде).**

**Шул мәлдәргә хәҙер тиҫтәнән ашыу ваҡыт үткән. Бөгөн иһә был ғаиләнең ауыл халҡын һоҡландырып татыу йәшәүе, мәҙәни сараларҙа әүҙем ҡатнашыуы, район гәзите биттәрендә улар тураһында мәҡәләләрҙең йыш баҫылыуы миндә лә ҡыҙыҡһыныу уятты. Шулай бер ялға ҡайтҡанымда Наилә һәм Солтан БИЛАЛОВТАРҒА ғаилә бәхете серҙәрен уртаҡлашыу маҡсаты менән сәйгә инеп сыҡтым.**



Был өйҙә сәнғәткә, матурлыҡҡа битараф булмаған кешеләрҙең йәшәгәнлеге шунда уҡ күҙгә бәрелә. Йорт тыштан һырлап биҙәлһә, эсе матур бер баҡсаны хәтерләтә: һәр мөйөштә тиерлек ҙур йәшел гөлдәр, тәҙрәләрҙә ламбрикенлы пәрҙәләр, килешле генә йыһаздар.

Солтан Ғүмәр улы Әбүбәкер урта мәктәбендә директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫар вазифаһын башҡарһа, Наилә Рәхимйән ҡыҙы мәктәптә һыҙма һәм рәсем дәрестәрен уҡыта. Өйҙә береһенән-береһе шаян өс бала ҡанат нығыта.

Шулай өй эсен күҙәткән арала, хужабикә йылмайып сәй табынына саҡыра. Ғаилә башлығы тышта йорт-ҡура тирәһендәге эштәрен бөтөргәнсе еңгә кеше менән серләшеп алабыҙ.

**- Наилә апай, әңгәмәне ҡатын-ҡыҙ бәхете нимәнән ғибәрәт тигән һораүҙан башлайыҡ.**

- Иң тәү сиратта үҙеңдең һайлаған тормош иптәшеңдән уңып, әсә булыуҙалыр, миңә ҡалһа. Был йәһәттән үҙемде бәхетлемен тип әйтә алам. Бәләкәйҙән атай йылыһын тойоп үҫкәнгәлер, буласаҡ тормош иптәшемде лә атайыма хас һыҙаттары буйынса һайларға ынтылдым. Кейәүемде уның кеүек оҫта ҡуллы, килешле буй-һынлы, интеллигент тәбиғәтле кеше итеп күҙ алдына килтерә торғайным. Атайым тракторсы, умартасы булыуҙан тыш, ауыл мәҙәниәт йортонда сәхнә биҙәүсеһе лә ине. Бәхетемә, яҙмыш тап шундай һыҙаттарға яуап биргән кеше менән осраштырҙы. Аллаға шөкөр, Солтан – дуҫ та, якшы ир ҙә, балаларыбыҙға һөйөклө атай ҙа.

Билаловтарҙың танышыу тарихы ҡыҙыҡ ҡына, хатта бер аҙ Мостай Кәримдең ҡатыны Рауза Суфиян ҡыҙы менән осрашыу мәлен дә хәтерләтә. Өләштәренә төшкән көмөштәре шул булғандыр, күрәһең, яҙмыш йәштәрҙе бер нисә тапҡыр осраштыра. Тик бер-береһенә улар бөтөнләй иғтибар итмәй.

Яҙ мәле... Бәләкәйҙән атаһының матур итеп һүрәттәр төшөргәнен күреп үҫкән ҡыҙыкайҙың 9-ҙан һуң Өфөнөң 2-се һанлы педагогия колледжының художество-графика бүлегендә уҡып йөрөгән сағы. Солтан да Өфөгә һеңлеһен уҡырға алып килә. Үҙе педагогия колледжының ятағында йәшәүсе дуҫ егеттәрендә туҡтала. Улар – өҫкө ҡатта, Наиләләр аҫҡы ҡатта йәшәй. Ләкин уларға танышырға насип булмай. Солтан һеңлеһен урынлаштырып, йәһәт кенә эштәренең осона сыға ла ҡайтып китә. Йылдар үткәс, Сибай педагогия колледжын тамамлап, ауылында пионервожатый булып эшләп йөрөгән Солтан район методик берекмәһе ултырышына Әбеш ауылында яңы асылған мәктәпкә килә. Бер егет, бер ҡыҙ парлашып "вожатыйҙар аллеяһы"нда ағас ултырталар. Солтан менән Наилә икеһе бергә тура килә. Ул сакта ла йәштәр бер-береһенә иғтибар итмәй әле. Аҙаҡтан ғына "унда һин булғайныңмы ни?" тип аптырашалар.

Бер ваҡыт Солтан, үҙенең эштәрен тамамлап, район үҙәге Аҡъярҙан ҡайтырға сыкканда автобустан төшөп килгән ҡыҙға төшөргә ярҙамлаша. Егет ҡыҙҙың исемен һорай, тегеһе лә ихлас ҡына яуап бирә. Ошонан һуң йәштәр араһында дуҫлыҡ ҡабына. Кистәрен Таналыҡ йылғаһы яры уларҙың яраткан урынына әүерелә. Егет оҙаҡҡа һуҙмай, бер ай самаһы ғына осрашып йөрөгәс, Ғәлиәхмәткә килеп ата-әсәһенән ҡыҙҙарының ҡулын һорай. Төҫ-башка күркәм, оҫта ҡуллы, етмәһә уҡытыусы кешене беренсе күреүҙән үк окшаткан ата-әсә ризалыҡ бирә. Һөйгәненең әсәһе менән таныштырырға алып ҡайтҡанын да йылмайып хәтерләй Наилә апай.

- Солтан буласаҡ ҡәйнәм менән танышырға алып ҡайтҡас, тәҙрә төптәрендә ултырған ҡыяр-помидор, кәбеҫтә үсентеләренә иғтибар иттем. Егетемдең иптәштәре ҡырға сығырға саҡыра килгәндәр, ә минең был үсентеләр менән булышҡым килә. Шулай бөтә баҡсаны ҡаҙып ташлап, әллә нисә йөҙләгән төп кәбеҫтә, помидор ултыртып сыктыҡ. Эстән генә, үҫеп китһендәр инде, тип көйәләнәм. Күрәһең, ошо үсентеләрҙең тамыр йәйеүен теләп, үҙемдең килен булып төшәсәк йортома берегеүем хаҡында хыялланғанмындыр. Шул йәшелсәләр туйыбыҙға өлгөрөп етте.

Ғаиләлә иркә генә ҡыҙ булып үҫһәм дә ашһыу бешереү кеүек йөкләмәләргә тиҙ өйрәндем. Әбүбәкир ауылы халҡы араһында мине күргәс, "бигерәк ҡала ҡыҙына оҡшап тора, ауылда йәшәй алмаҫ ул" тиеүселәр ҙә булды. Аллаға шөкөр, тормош бөтәһенә лә тиҙ өйрәтте: һыйыр һауырға ла, һалма йәйергә лә... Шуға күрә ҡатын-ҡыҙҙы тормошка алдан әҙерләү зарур, – тип кәңәштәрен бирә миңә.

**- Ҡатын-ҡыҙға юғары белемгә эйә булыу, карьера баҫҡысы буйлап үрләү мотлаҡмы? Янында һине аңлап, матди йәһәттән тәьмин итеп торған ир булғанда, бәлки гүзәл зат ашһыу тәрбиәләп, балаларын ҡарап ҡына өйҙә ултырырға тейештер...**

- Замана ҡатын-ҡыҙы бар яклап үҫешкән булырға тейеш. Ғаиләнде ҡарап, аш-һыу тәрбиәләүҙән тыш, яраткан һөнәрең булыу, татыу коллективта эшләү ул үҙе ҙур бәхет. Йәмғиәткә кәрәкле



кеше икәнеңде таныу һине бар яклап үҫтерә, камиллаштыра. Мин, мәҫәлән, өйҙә ултырып ҡына толка таба алмайым.

Тормош көтөргә бөтә уңайлыктар ҙа булһын тип, Солтан барыһын да эшләргә тырышты. Өйгә эҫе һыу килеп тора, душ кабинаһы һатып алдык, кухняла бөтә нәмәм дә автоматлаштырылған. Шуға күрә үҙемә вакыт та күберәк кала. Эҙләнәм, яңынан-яңы үрҙәргә ынтылам. Дизайн менән ҡыҙыҡһынғас, Магнитогорск дәүләт университетында дизайнер һөнәрен үҙләштерҙем, хәҙер үҙемә кейем һатып алһам, уны мотлак үҙ зауығыма тап килтереп, килешле генә тегеп алам. Өйҙә лә төрлө журналдарҙа донъя күргән кәңәштәргә нигеҙләнеп биҙәйем. Солтан да ошо уҡ университеттың көнкүреш әйберҙәре эшләү сәнғәте бүлеген тамамланы. Йорт-йыһазды үҙе бик матур итеп яһап ҡуя.

**- Балаларығыҙға матур башҡорт исемдәре ҡушҡанһығыҙ: Алмас, Алһыу, Сарьян. Исемдәрҙе кем һайланы?**

- Беренсе балаға бер исемдәр теҙмәһен үҙем төҙөгәйнем. Алмас тип ҡуштыҡ. Ә һеңлеһенә улыбыҙ исемде үҙе һайланы. Уға ул сакта дүрт кенә йәш ине, йөклө сағымда, килеп һырынды ла: “Әсәй, бәпәйҙең колағы ҡайһы ерҙә икән?”– тип һорай. Юрамал ғына төртөп күрһәткәйнем: “Бисмилла-рәхмәни-рәхим. Бәпәй, һинең исемең Алһыу буласак”, – тимәһенме. Бактиһәң, бала телевизорҙан йырсы Алһыуҙы күреп окшатып ҡалған икән. Ә төпсөк улыбыҙға исемде Т. Күсимованың “Башҡорт исемдәре” китабынан ҡарап һайланыҡ. Улым киләсәктә ҙур кеше булыр тип Сарьян тип ҡуштыҡ.

**- Киләсәктә балаларығыҙҙы кем итеп күрергә теләр инегеҙ?**

- Алһыуҙы табип итеп күрергә теләйем, Алмас күберәк рәсем төшөрөргә ярата. Компьютер менән дә ҡыҙыҡһына. Әле V класта ғына уҡыһа ла, дингә ҡарашы ыңғай. “Намаҙ уҡыясаҡмын, тик институтты бөтөп, һөнәр алғас”, – тип яуаплай. “Нишләп аҙак?” тип ҡыҙыҡһынабыҙ, “Һуң, дәрес вакытында намаҙ уҡып ултырып булмай инде”, – ти беҙгә күҙҙәрен ҙурайтып. Ҡурсактарына мәҙ килеп кулдәк һайлаған Алһыу ҙа: “Ә мин үҫкәс әсәйем кеүек матур буласаҡмын”, – ти ихлас ҡына.

- Тормошта бөтә һөнәр ҙә кәрәк, – тип тыштағы эштәрен бөтөрөп ингән ғаилә башлығы сәй табынына ҡушыла. – Бына мин, мәҫәлән, Сибай педагогия колледжының хеҙмәт бүлеген тамамланым. Студент йылдарында ҡурай, бейеү түңәрәктәренә йөрөнөм. Уҡыған сакта ятакта һынлы сәнғәт студияһы эшләй торғайны, шунда ағасты һырлап, семәрләп эшләү серҙәренә лә өйрәндем. Шуныһын әйтә алам, педучилищела өйрәнгәндәремдең файҙаһы ҙур булды. Ысынлап та, хеҙмәт бүлеген тамамлаған ҡыҙҙар-егеттәр береһе лә тормошта юғалып ҡалманы. Һәр кем үҙ урынын тапты. Балаларыма ла шуны теләйем: ниндәй генә һөнәр һайлауҙарына ҡарамаҫтан, кеше булып ҡалһындар.

**- Мөхәббәт ул башта ғына була, йылдар үтә килә һөйөү хистәре һүрелә, тиҙәр...**

- Йәш сакта, ысынлап та, мөхәббәттең барлығына ышанаһың, яҡты хыялдар менән янаһың. Бер-береңә булған һөйөү һүрелмәй ул, йылдар үтеү менән, ихтирам тойғоһона әүерелә. Йәшәй-йәшәй ир менән ҡатынды күренмәҫ ептәр бәйләй. Бына, мәҫәлән, Солтан берәй йомош менән Аҡъярға сығып китә икән, нишләп оҙаҡлай, тип борсола башлаһам, шунда уҡ шылтырата һала, – ти Наилә Рәхимйән ҡыҙы.

- "Мөхәббәт ул утлы йәшен, ҡарап тормай картын, йәшен" тип яҙған бит Рәшит Назаров. Әлбиттә, мөхәббәт бар ул, тик һәр кем уны үҙенсә аңлай. Йәшәй килә мөхәббәт тәрәнәйә, ҡасандыр һөйгән ҡыҙыңды ғүмерлек юлдашың, балаларыңдың әсәһе итеп ярата башлайһың. Уны тойорға, белергә һәм һакларға кәрәктер тип уйлайым, – ти Солтан ағай.

**- Икегеҙ ҙә эш кешеләре. Ғаиләлә балалар тәрбиәләү менән кем күберәк шөғөлләнә?**

- Бер көндө “Пусть говорят” тигән тапшырыуҙа “мәктәп бөтә нәмәгә лә яуап бирергә тейеш” тигән фекер яңғыраны. Тәрбиә бит тап өйҙән, ғаиләнән башлана. Ата-әсәһенең үҙ-ара мөнәсәбәтен, үҙенә булған һөйөүен тойоп үҫкән бала артабан да шул ғаилә этикеты рамкаларынан сыҡмай. Бала тыңлауһыҙ, артыҡ шаян булып үҫмәһен өсөн, унда яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләргә тырышабыҙ. Бөтә эште лә бергәләп эшләйбеҙ. Алмас бәләкәйҙән ҡош-ҡорт, мал ҡарашты, өйҙең иҙәндәрен йыуһам, ул тупһаны йыуып сыға. Атаһы ағас эше менән булышҡанда, бәләкәй генә балтаһын тотоп эргәһендә ярҙамлашып йөрөй. Мин ашарға бешергәндә Алһыу эргәмдә урала. Йәйгеһен түтәлдәргә һыу һибешә. Кинйәбеҙ Сарьян да, йәш ярымлыҡ ҡына булыуына ҡарамаҫтан, бик ҡыҙыҡһыныусан бала, төҫлө һүрәттәр ҡарарға ярата, атаһынан да, минән дә әкиәттәр һөйләтә, – ти Наилә Рәхимйән ҡыҙы.

**- Ғаилә башлығына һорауым: ҡатын-ҡыҙ ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?**

- Ҡатын-ҡыҙҙың төп тәғәйенләнеше – әсәлек. Шуға ла ҡыҙҙар үҙҙәрен бәләкәйҙән әсә булырға әҙерләһендәр, һаулыҡтарын һаҡлаһындар. Аш-һыуҙы оҫта итеп бешерергә өйрәнһендәр. Үҙҙәренә иғтибарҙы юғалтмаһындар. Тормошта һәр ваҡыт матур булһындар. Яһиллыҡ гүзәл затты биҙәмәй.

**- Сираттағы һорауым хужабикәгә: бөгөнгө заман ир-егете ниндәйерәк булырға тейеш?**

- Ир-егет иң беренсе сиратта ҡатын-ҡыҙҙы аңлай белһен, хөрмәт итһен. Аяғында нык баҫып торһон, ғаиләһен, балаларын ҡайғыртһын, насар ғәҙәттәрҙән азат булһын.

**- Тормошта ниндәй проблемалар борсой? Матур йәшәү өсөн ниндәй сифаттар кәрәк?**

- Тормошта социаль проблемалар күп. Ҡайһы ваҡытта уҡыусы балаларҙың ауыҙынан 2012 йылда донъя бөтә, имеш, тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Ошондай хәбәрҙәр балаларҙа, йәштәрҙә өмөтһеҙлек уята. Элекке пионер, комсомол ойошмалары барыбер балаларҙы тәрбиәләгәндә файҙалы булған. Ошондай хата ҡараштарҙы булдырмауҙа дин дә бик ярҙам итә. Күп кенә йәштәрҙең дин юлына баҫыуы һөкландыра мине.

Әлбиттә, тормош аңһат ҡына түгел. Һәр нәмә тырышлыҡ талап итә. Ауылдағы эшҡыуарҙарыбыҙ еңел генә йөрөп аҡса тапмай бит. "Йән биргәнгә – йүн бирә" тиҙәр. Дәүләт тарафынан да ярҙам ҙур. Тик ул мөмкинлектәрҙе ҡуллана ғына белергә кәрәк. Ҡайһы бер ғаиләләрҙең хөкүмәт түләгән балалар аҡсаһын эскегә тотоноуҙары аптыраушта ҡалдыра. Эшһеҙлек, эскелектән сығыу юлдарын, мәсәләнән, мин өмөтһеҙлеккә бирелеүҙә генә күрмәйем. Һәр нәмә кешенең үҙенән тора. Ата-әсә балаларын киләсәк тормошҡа бәләкәйҙән һин – буласаҡ әсә, һин – буласаҡ ата тип әҙерләргә тейеш. Балалар уҡыһын, өҫ-башы етеш, тамағы туҡ булһын тип үҫтерәләр ҙә, алған белемде нисек ҡулланыу, дөрөҫ йәшәү, тормошта үҙ урынын табыу юлдарын күрһәтмәйҙәр.

Ауылдарҙа күпселек ғаиләләрҙең заман ауырлыҡтарына бирешмәй гөрләтеп донъя көтөүҙәре һөкландыра. Бына шуны ишетеп һөйөндөк әле: йәнтештәр "Айыҡ ауыл" тигән акцияға ҡушылғандар. Бына беҙҙең ауылға ла шул акцияға ҡушылыу кәрәк ине, – тип фекерҙәре менән уртаҡлашты Солтан ағай.

**- Ғаиләлә килеп тыуған проблемаларҙы, мәсьәләләрҙе кем күберәк хәл итә?**

- Ғаиләлә үҙ-ара кәңәшләшеп, һөйләшеп эшләү яҡшы. Бына беҙҙә беребеҙ идея бирә, икенсебеҙ шуны күтәреп ала. Йыш ҡына шулай килеп сыға: мин бер нәмә хаҡында уйлаһам, Солтан шуны әйтергә йыйынған була. Ул уйлап, үлсәп эш итә. Ә мин күңелемдәге ниәттәрҙе тиҙерәк әйтә һалам. Ошо ике холоҡтан һәйбәт нәмә килеп сыға. Бер нисә йыл элек шундайы-раҡ һорау килеп тыуғайны. Тәүҙә машина алып ебәрәйекме, әллә өй һалайыҡмы тип икеләнәбеҙ. Солтан, әлбиттә, техникаға ныҡыраҡ ҡыҙыҡҡайны, ә мин машинаға ултырып, унда-бында йөрөгәнсе, өй һалып ғаиләң менән күмәкләп өйҙә ултырыуҙы күҙ уңында тоттом. Ҡәйнәм ул ваҡытта ауырый ине. Инде үҙенә күп ҡалмағанын һиҙенепме икән, тәҙәләп яткан өйгә ҡарап: "Яңы өйөгөҙҙә күрергә насип булмаҫ инде", – тип ҡарап ултырғанын иҫләйем. "Ни эшләп булмаһын, Алла бирһә иң яҡты, иң матур бүлмә һинеке буласаҡ, ҡәйнәм", – тип яуап биргәйнем. Ҡыҙғаныска ҡаршы, уға түргә атлап инергә насип булманы. Әммә беҙгә ҡарап ҡәйнәмдең рухы ҡыуаналыр тип уйлайым. Шөкөр, өйөн дә һалып сыҡтыҡ. Иҫәнлек-һаулыҡ ҡына булһын, ҡалғаны табыла ул.




Наилә һәм Солтан Билаловтар менән һөйләшеүебеҙ ике сәғәткә яҡын һуҙылды. Ошо ваҡыт арауығында тормошҡа ҡараштарым да байтаҡҡа сағыуланып киткәндәй тойолдо. Тос фекерле, булдыҡлы, егәрле ғаиләнең капитанына – Солтан Ғүмәр улына аҙаҡҡы һорауымды бирәм:

**- Ғаиләнең бәхет рецебы?**

- Бер-береңде аңлап, хөрмәт итеп, кәрәк саҡта хуплап, үпкәләшмәй, үҙ-ара дуҫ, татыу йәшәргә. Һәр ғаиләлә гармония булырға тейештер тип уйлайым. Һәр хәлдә беҙҙә шулай, Аллаға шөкөр.

**Сәй табынынан һуң, үҙҙәренең төрлө район, республика кимәлендә үткәрелгән конкурстарҙа ҡатнашып алған ҡаҙаныштарын, грамоталарын йыйып барған Билаловтарҙың ғаилә архивын аҡтарам. "Йәш ғаилә 2009", "Хәйбулла Байығы", "Ғаилә мозаикаһы" һ.б. һәм был ҡаҙаныштарға ысынлап та лайыҡ икәндәренә тағы бер ҡат инанып, ихлас, ҡунаҡсыл хужалар менән хушлашып ҡайтырға сыҡтым. Етмеш төрлө һөнәргә эйә хужа һәм котло ҡуллы килен тыуҙырған ғаилә, шул бәхетте тулыландырып торған һөйкөмлө балаларҙың шат ауазы – Башҡортостандағы бар ғаиләләр ҙә ошолай булһын ине!**

*Милә НУРИМАНОВА.*

Гөлфиә ЮНЫСОВА

# ҺИС БЕР ТАУЫШ-ТЫНҺЫҘ ҒЫНА МОҢ ЯРАЛДЫ



### Ауылым урамында

Тыуған ауылым урамын
Инде күпме урауым:
Кем ҡул һуҙа, кем ҡосаҡлай,
Кем яуҙыра һорауын.

Кем хәтерләй бала сакты,
Кем саҡыра бәлешкә.
Кемдәрҙер эргәмә баҫып,
Бергә төшә кәртешкә...

Зоопарктағы маймылдай,
Түҙәм инде был эшкә.
Нишләр инем, һалышһалар
Бөтөнләй күрмәмешкә?!



Өҫтөндә – затлы кейемдәр,
Муйында – гәүһәр, алтын.
Кәрәк булһа – утҡа инер,
Туктатыр сапкан атын.

Һокландырып, көнләштереп,
Йәшәй ул ҡыҙҙар затын.
Ә ниңә һуң бик йыш ҡына
Мендәр ҡосаҡлап йәш түгә
Төндәрен ошо ҡатын?!

### Моңло этюд

Күк күкрәтеп, ҡойоп яуғас,
Ямғыр тымды.
Күк йөҙөнә аллы-гөллө
Йәйғор ҡунды.

Ете тоҫтә ете нота
Урын алды.
Һис бер тауыш-тынһыҙ ғына
Моң яралды.

Күп тә үтмәй, бар донъяға
Ул таралды.

### Димсе монологы

– Ҡыҙ шәп: еләктәй балланып,
Бешеп еткән сактары.
Төҫ-баш, буй-һын курсак кеүек,
Юк килмәгән яктары.

Бай атаһы йәштәр өсөн
Ныклы терәк инде ул.
Ҡыҙ бер аҙ йүләрерәк тә,
Ҡатын-ҡыҙға аҡыллылыҡ
Ниңә кәрәк инде ул?!

### Ғашиҡтар

Киләсәк хаҡында һөйләй,
Ғашиҡтар тәү осрашҡанда.
Телдәрендә – тик үткәндәр, –
Ташлашҡанда.

### Яңылыҙлыҡ

Эштә – ханбикә. Шәп белә
Үҙ баһаһын, үҙ хаҡын.
Йөрәк түренә яҡын да
Ебәрмәй ир-ат затын.

### Бер һөйләшеүҙән

– Оптимист бул, ҡустым, үрһәләнмә,
Борсоу уйыңды тарат.
Рәхәтләнеп эшләп, йәшә, әйҙә,
Мөмкинлегеңә ҡарап.

– Ихлас кәңәш биргән булаһың да,
Аңламайһың шул һин дә:
Мөмкинлеккә ҡарап йәшәр өсөн
Мөмкинлек юк бит илдә.

### Бер маҡтансыҡҡа

– Бер хата ла яһағаным юк! – тип,
Ауыҙ һыуы корой мактанып,
Хата аҙым яһап буламы ни,
Баҫкан урыныңда тапанып?!

### Шиьырҙарым

Күңелемдә күпме
Бөрөләрҙә килеш
Япрак ярмай кипкән шиғырҙар.
Иҫкә төшкән һайын йән әрнетеп,
Ғүмер буйы улар шығырҙар.

Ҡайһылары яңы шытым булып,
Донъя күрер, бәлки, бер заман.
Шиғырҙарым, ғәфү...
Һеҙҙең алда
Ғәйептәрем арта, их, һаман.

Эштәр сығып тора, бөтәһенә
Вакыт кәрәк, рухи көс кәрәк.
Ихлас көткән, якын иткәндәргә
Барып етәбеҙ шул бик һирәк.

Бына тағы
Имсәк талап иткән сабый кеүек,
Күңелемде тиртә бер бөрө.
Өлгөрөргә кәрәк, ашығырға,
Һулышын да тоям,
Тимәк,
Ул әлегә тере, тере!

### Уйланыу

Яҙ етмәйсә, тамсы булып
Тамдың ни, тамманың ни.
Кеше йәрен «минеке» тип,
Яндың ни, янманың ни.

Бысрак шешәгә таҙа һыу
Һалдың ни, һалманың ни.
Ҡара уйҙы аҡ төҫтәргә
Мандың ни, манманың ни.

### Тиңдәш булһын күңелем

– Күңел һис тә ҡартаймай, – тип,
Әйтеүе генә еңел.
Ысынында иһә был хәл
Башка һыйырлык түгел.

Етмеш биш йәшлек йөрәккә –
Ун ете йәшлек күңел...
Ниҙәр булырын күҙаллап,
Йәш күңелеңдән төңөл!

Бик ҡәҙерле ҡартлығымда,
Бик килешә үҙ йәшем.
Һәр осорҙа күңелем дә
Була күрһен тиңдәшем!

### Бәхетең кем ҡулында?

Ғүмеркәйең зая үтә,
Аһ-зарҙарға төйөләп. –
Кем генә ғәйепле түгел,
Йәшәүеңә көйөнөп?!

Бәхеттәрең, уңыштарың
Көтә һине өйөләп.
Тик аңласы, туғанкайым:
Уларҙы ла дәрт-көс һалып,
Алыу кәрәк эйелеп.

### Сәбәптәр

Ел иҫмәй, томандар
Таралмай.
Аҡ төтөн һөрөмһөҙ
Ҡаралмай.

Дуҫлыкты хыянат
Яралай.
Сәбәпһеҙ дошманлык
Яралмай.



*Гөлгизәр ФӘЙЗИ*



# МИН, АХЫРЫ, БЫЛ ЗАМАНҒА ЯТМЫН...



## ЯРАЛЫ КЕЙЕК

*Ярһыуҙарым яра йәнде,*
*Мин бит яралы кейек.*
*Башҡаға тоҫҡалған уҡ та*
*Тап миңә тейгән кеүек.*
*Бүтәнгә сәселгән ыу ҙа*
*Минең һулышты быуа.*
*...Бәғзе берәү был донъяға*
*Тиреһеҙ-итһеҙ тыуа...*
*Эй, тәңрем!*
*Ғүмеремә нисә ғүмер*
*һыйҙырҙың?*
*һәр әрнегән күңел өсөн*
*Йөрәк ҡылым һыҙырҙың,*
*һәр һыҙлаған яра өсөн*
*Йәнемә һалдың яра...*
*Ошонан һуң шат күңелле,*
*Бәхетле булып ҡара!..*

* * *

*Мин – аҙашҡан йәнмен...*
*Бәндәләрҙе*
*Хаяһыҙлыҡ атлы упҡындың*
*Йотоуҙарын алйып күҙәтәм дә*
*Ҡутәреләм күккә уҡ булып.*

*Минең ише йөҙ, мең бисаралар*
*һыйыныр ер тапмай донъяла,*
*һәр ҡайһыһы йөҙ, мең тарафтарға*
*Илай-һыҡтай китеп юғала.*

*...Сабыйҙарҙың китте ҡәҙерҙәре,*
*Әсәләрҙең бөттө баһаһы.*
*Күңелдәрҙән ҡаскан иман утын*
*Ниндәй ҡитғаларҙан табаһы?!*
*Ҡайһы тарафтарҙан табаһы?!*

## СИТМЕН

*Мин, ахыры, был заманға ятмын...*
*Ситенмендер – шулай уйлайым.*
*Әҙәм күҙлегенән*
*ҡараны – аҡ,*
*Аҡты ҡара тиеп йырлайым.*

*Маташамын һаман төшөнөргә*
*Асылына тәҡдир-яҙмыштың.*
*Ышанмаҫтай ерҙә ышаныуҙан*
*Инде хәҙер күпме яңылыштым.*

*Бәндә тигән ғәжәп йән эйәһе*
*Була бара һаман серлерәк.*

Ошо серҙе сисә алмайынса
Теткеләнеп бөттө был йөрәк.

Мең хатамды мең ҡат аҡлау өсөн
Сәбәбе бар кеүек үҙемсә.
Ниңә мин дә һеҙҙең ише түгел?!
Йәшәй алмайым бит һеҙҙеңсә!

Ятмын, ахыры, үҙем был донъяға...
Ситмен, ахыры, үҙем заманға...
...Минең өсөн әҙәм балалары
Бүленә тик яҡшы – яманға...

### ҒҮМЕР

Ишек асып ябыу ише
Кеше ғүмере...
Бәндә кисергән көндәрҙең
Ҡала күмере.
Уттан алып һыуға һалған
Яҙмыш та тыныс;
Бар нәмәнең ахыры бар –
Уйлау ҡурҡыныс.
Ҡояш ҡалҡып, ҡояш батыу –
Әҙәм ғүмере.
Яҙмыш өткән ул ғүмерҙән
Ҡала күмере.
Мөхәббәт тә яна-дөрләй
Һүнгән-һүрелгән.
Үткәндәргә үрмәксенең
Ауы үрелгән...
Ишек асып ябыу ғына
Бәндә ғүмере.
Әҙәм баҫҡан ерҙә ҡала
Ҡара күмере.
Көлө ҡала...
Үткәндәрҙең
Хәтер усағы...
Ә мин һаман, йәшәйем, тип
Йәйәм ҡосағым.
Ә мин һаман өмөттәрҙән
Төҙәйем ҡәлғә...
Йәнә дуҫым китеп барҙы,
Ут һалып йәнгә.
Ғүмер ҡояшы тәгәрәй –
Туҡтатып ҡара!
Күҙ асып, күҙ йомған миҙгел,
Юҡ шул, юҡ сара...

### ШАҒИР

Ҡара-һоро был донъяла
Шағир – аҙашҡан турғай.
Турғайҙың да тамағы бар,
Турғай ашарға һорай.
Ҡарсығалар, төйләгәндәр
Оялаған мул ергә.
Ҡоҙғон-ҡарға – ҡуштан йәндәр
Шул тирәлә өйөрөлә.

Турғай үләкһә ашамай,
Ауыр шул турғайҙарға.
Исмаһам, бейей ҙә белмәй
Ете ят ҡурайҙарға.

Сырыҡ-сырыҡ һайрай-көйләй
Ем көткән була күктән.
Күктәрҙә турғай ҡайғыһы
Бөткән шул инде күптән.

### ЯҘ, ТИНЕМ

Төн! – тинеләр,
Юҡ, таң! – тинем.
Ҡыш! – тинеләр,
Яҙ! – тинем.
Йәндәремә ҡуш йән булған
Йәрем, тиңһеҙем менән.

Боҙ! – тинеләр,
Юҡ, ут! – тинем.
Унһыҙ йәшәү юҡ! – тинем.
Күҙҙәреңә бер ҡараһам,
Күңелемдә нур менән.

Һаҙ! – тинеләр,
Юҡ, наҙ! – тинем,
Моңло көйлө саз! – тинем.
Йән өшөткөс ҡыштарҙа ла
Йылы бөркөр яҙ! – тинем.



# АШАМАҒАН БАЛАЛАРҒА ӘКИӘТ



Күп балалар ашамай йөҙәтә. Беҙҙең Дә был мәсьәлә менән күҙмә-күҙ ҡалғаныбыҙ бар. БАЛА Бәләкәйерәк сағында китаптағы һүрәтте, йә берәй тәтәй күрһәтеп, шуның менән мауыҡҡан арала ауыҙына аҙыҡ ҡаптырып ебәрәһең. Артынан ҡалаҡ тотоп йүгереп алыу ҙа ят күренеш түгел ине. Шунан оҙаҡ ҡына бер нәмә лә тәҡдим итмәй ҡарайһың. Тик... файҙаһыҙ.

Баланың тән ауырлығы нормала, үҙен тыныс тота икән, борсолоу урынһыҙ. Бары тик баланслы ашатыу булдырырға кәрәк. Көн һайын ярмалар, йәшелсә-емеш, ит, һөт аҙыҡтары менән туҡландырырға тырышыу мөһим. Ошоларҙы әҙләп кенә ашаһа ла еткән — үҙенә күпме кәрәген белә ул. Сабыйҙың ят ризыҡтан баш тартыуы мөмкин. Уны ашамаһа ла, көн һайын өҫтәлгә ҡуйһаң, бүтән ғаилә ағзаларына ҡарап ярата башлауы бар. Иң мөһиме, өгөтләргә, инәлергә, уны ғәйепләргә ярамай. Беҙ ҡыҙыбыҙға "аша" тиһәк, ашамай, "ярай, ашама ла ҡуй" тиһәк — ашай. Туҡланыуҙы бер аҙ уйынға әйләндереп ебәһәң дә отошло. Мәҫәлән, нисә ҡалаҡ ҡапҡанын һанай. Бут-ҡаһын емештәр менән БИҙәһә лә ҡыҙыҡ. Ризыҡтың ниндәй хәрефкә башланғанлығын, ниндәй төҫтә икәнлеген, уның инглизсәһен әйтеп ебәрһә — икеләтә файҙа. Шулай ҙа түбәндәге әкиәт беҙгә ныҡ ярҙам итә. Тик уны төнгөлөккә һөйләмәйбеҙ. Йоҡоһо осоп, ашау теләге уяна. Был әкиәтте әлеге мәсьәләнән сығыуҙың бер юлы тип кенә ҡабул итегеҙ. Һәр кем үҙ бәләкәсенең ҡыҙыҡһыныуҙарына, холҡона, йәшенә ярашлы итеп әкиәтте үҙгәртә, йәки икенсерәк итеп уйлап сығара ала. Геройҙы төлкө, ҡуян, тейен итергә лә мөмкин.

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Гөлнәзирә исемле бер ҡыҙ. Бик сибәр, аҡыллы булған, ти, үҙе. Өс ҡурсағы, ҡәләмдәре, санаһы, конькиҙары бар икән. Шулар менән рәхәтләнеп уйнай ул. Иҫ киткес матур күлдәге, сандалиҙары ла булған. Был кейемдәре менән урамға сыҡһа, бөтәһе лә уны һыуһылыу тип кенә йөрөткән. Әсәһе менән атаһы уны нык яратҡан.

Тик бер заман ҡыҙыҡай ашамай башлаған. Әсәһе картуф бәлеше, аш бешереп алдына ҡуйһа кире этә, кәнфитте генә тәмләп имә, ти. Шуға күрә, ҡыҙҙың ике теше төшкән, сәсе оҙон булып үҫмәгән дә ҡуйған. Был ниндәй ҡурҡыныс ҡыҙ беҙҙә уйната, тип өс ҡурсағы ла ҡасҡан, ә ҡәләмдәре диван аҫтына йәшенгән. Саф һауаға сығайым тиһә, санаһы менән конькиҙарын да таба алмаған. Шулай, тышта ла, өйҙә лә уйнай алмаған Гөлнәзирә. Аптырағас, матур күлдәген кейеп күрше Әҙиләгә ҡунаҡҡа бармаҡ була. Бәй, күлдәге лә ярамай, сандалиҙары ла. Ҡыҙыҡай ашамағас нык ябыҡҡан да, был кейемдәре ҙу-у-ур, ти, үҙенә. Гөлнәзирә ҡабаттан бәләкәсәйә башлаған бит! Эштән ҡайтҡан атаһы: «Бәй, ҡыҙым, ҡустың һымаҡ бәпескә әйләнеп бараһың түгелме?" – тигән.

Гөлнәзирәгә һөт эсә торған шешә һатып алғандар. Бәпестәр ашамай, һөт кенә имә бит, эйеме? Бәпәйгә әйләнгәс, уға йәнһүрәт ҡаратмағандар, ҡупшы муҡсаһы, помадаһы ла булмаған. Һөт имә лә йоҡлай, имә лә йоҡлай, ти.

Бер заман бәпес Гөлнәзирәнең тиҙерәк ҙур үҫкеһе килә башлай. Атаһы һымаҡ! Был теләген әсәһенә әйткән. Әсәһе, мин бешергән витаминлы ризыҡтарҙы ашаһаң – ҙурайырһың, тигән. "Ә нимәләрҙә витамин бар һуң? Тортта бармы?" – тип һораған ҡыҙыҡай. «Юҡ, ҡыҙым. Бәпестәрҙе үҫтерә торған витаминдар иттә, кәбеҫтәлә, кишерҙә, сөгөлдөрҙә, сырҙа, бутҡаларҙа, емештәрҙә бар. Ә татлы тәмлекәстәр теште һыҙлата".

Гөлнәзирә кухняға йүгереп сыҡҡан да "бисмилла" әйтеп, ҡалаҡты уң ҡулы менән генә тотоп "ҡыҙыл аш"ты (борщ) күп итеп ашай. Итен дә ҡалдырмай, ти хатта. Туйғас, өләсәһе кеүек "әлхәмдүлилләһ" тип ҡуя. Рәхмәт, ошондай ризыҡтар булғанға, эйеме? Ҡайһы бер балаларҙың бер бәләкәс кенә икмәге лә юҡ бит.

Бәй, ҡыҙыҡай көҙгөгә ҡараһа, сәсе оҙ-о-он булып үҫкән, ап-аҡ ҡына тештәре лә бар, ти. Ҡапыл ишек шаҡығандар. Барып асһа – өс ҡурсағы етәкләшеп ҡайтҡан. Һағындыҡ ошо матур апайыбыҙҙы, тип ҡосаҡлап алғандар. Ҡәләмдәре лә йүгерешеп килеп сыҡҡан. Күлдәге менән сандалиҙары ла тап-таман, ти, үҙенә. Ҡыҙыҡай туйғансы уйнаған. Кис, атаһы ҡайтҡас, кишерле генә былау, сөгөлдөр салаты ашап алғандар ҙа тышҡа уй-нарға сығып киткәндәр. Туйғансы сана шыуғандар, ә ял көнө һырғалаҡҡа барырға һөйләшкәндәр, ти.

*Гөлсинә БАЙҒУЖИНА.*



# ҺОМҒОЛ КҮРЕНЕҮҘЕҢ ЕҢЕЛ ЫСУЛЫ

**ДОНЪЯЛАҒЫ БАРЛЫҠ ГҮЗӘЛ ЗАТТАР БЕР УРТАҠ ТЕЛӘК МЕНӘН ЯНА. НИНДӘЙ ТИҺЕГЕҘМЕ! БӨТӘ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР АРАҺЫНДА ИҢ МАТУРЫ, ИҢ ҺӨЙКӨМЛӨҺӨ, ИҢ ҺОМҒОЛ БУЙ-ҺЫНЛЫ БУЛЫУ ТЕЛӘГЕ УЛ. ӘММӘ ХЫЯЛДАРЫНА ИРЕШЕР ӨСӨН УЛАРҒА ҮҘҘӘРЕН ТӨРЛӨ ҺЫНАУҘАР МЕНӘН ТАЛСЫҠТЫРЫРҒА ТУРА КИЛӘ: БЕРӘҮҘӘР "ФИГУРАНЫ БОҘОУСЫ" АҘЫҠТАРҘАН БАШ ТАРТА, ҠАТЫ ДИЕТАҒА УЛТЫРА, ИКЕНСЕЛӘР КӨНӨ-ТӨНӨ СПОРТЗАЛДА ЙӘКИ ФИТНЕС КЛУБТА АУЫР КҮНЕКМӘЛӘР ЭШЛӘЙ, БӘҒЗЕЛӘР ТӘМЛЕ ЙОҠОҺОН БҮЛЕП ҺӘР ИРТӘ ҺАЙЫН ЙҮГЕРӘ. ТИК МАТУР БУЛЫУҘЫҢ ЕҢЕЛ ЫСУЛЫ, ЙӘҒНИ БУЙ-ҺЫНДЫ ЗИФАРАҠ КҮРҺӘТЕҮ СЕРҘӘРЕ БАР. УНЫҢ ӨСӨН АРТЫҠ КҮП КӨС САРЫФ ИТЕРГӘ ЛӘ КӘРӘКМӘЙ.**



## ҺОМҒОЛ КҮРЕНЕҮҘЕҢ ДӨЙӨМ ҠАҒИҘӘЛӘРЕ:

**1.** Гардеробығыҙға үҙгәрештәр индерер алдынан эште үҙегеҙҙән, комплектарығыҙҙан арыныуҙан башлағыҙ. Ҡиәфәтегеҙҙе якшыртам тиһәгеҙ, һеҙгә "һуңғарак", "ябыкҡас" кеүек һүҙҙәрҙе онотоп торорға тура килер. Сөнки һеҙ һәр сак күҙ ҡамаштырырлыҡ матурлыкка эйә булырға тейешһегеҙ.

**2.** Үҙегеҙҙең буй-һыныгыҙға ярашлы үлсәмле кейем генә һатып алығыҙ. Гардеробығыҙҙы иркен, киң әйберҙәрҙән таҙартығыҙ. Улар кәүҙәгеҙҙең тулы урындарын "йәшерә" алмай, киреһенсә, үҙенә иғтибарҙы тартып тора. Бәләкәй үлсәмлеләре менән дә шул уҡ хәл күҙәтелә.

**3.** Кәүҙә менән кейем үлсәменең генә түгел, ә аксессуарҙың ҙурлығын да тап килтерергә кәрәк. Мәҫәлән, прическа, күлдәктәге биҙәктең ҙурлығы йәки муйынсактың калынлығы һеҙҙең фигура үлсәменә якын булырға йәки пропорциялар һакланырға тейеш.

**4.** Күлдәк-блузкаларҙы бер вакытта ла юбка, салбарға кыҫтырмағыҙ: ул кәүҙә бөтөнлөгөн "боҙор".

5. Кейемде үҙегеҙҙең кәүҙә үҙенсәлегенән сығып һайлағыҙ. Сөнки кемгәләр килешкән күлдәк йәки костюм һеҙгә бөтөнләй тап килмәүе мөмкин.

## АЯҠ КЕЙЕМЕ – ЗИФАЛЫҠТЫҢ ТӨП КҮРҺӘТКЕСЕ

1. Аяҡ кейеменең тәүге һәм мөһим шарты: мотлаҡ үксәле булыу. Сөнки улар аяҡтарҙы матурыраҡ, оҙонораҡ итә, бигерәк тә “лодочка” формаһындағы нәҙек булмаған бейек үксәле туфли отошло. Тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙҙарға балетканан бөтөнләй баш тартырға тәҡдим ителә.

2. Оҙон ҡуныслы итектәр ҙә аяҡтарҙы тик ыңғай яҡтан һынландырыр. Бигерәк тә шыма, оҙон ҡуныслы күн итектәрҙе күлдәк, итәктәр менән кейеү уңышлы.

## АКСЕССУАРҘАР ИҒТИБАРЛЫҠ ТАЛАП ИТӘ

1. Ҡатын-ҡыҙҙарға аксессуарҙарҙы дөрөҫ ҡуллана белеү зарур. Оҙон муйынсаҡ, сылбыр йәки оҙонса алҡалар битте ябыҡ күрһәтер. Тик уларҙың береһе генә мотлаҡ оҙон булырға тейеш. Ҡыҫҡа һәм эре мәрйендәрҙе һаҡлыҡ менән ҡулланығыҙ, сөнки улар муйынды тағы ла ҡалынайтыр. Киң яурынлы тулы ҡатын-ҡыҙҙарға костюм яғаларына, түшкә брошка йәки декоратив булавка таҡмау хәйерле.

2. Янбашҡа киң ҡайыш йәки пояс таҡһаң, буй оҙонораҡ күренә. Айырыуса ҡара ҡайыш билдә тағы ла нескәрәк итер.

3. Ҡалын, ҙур беләҙектәр тулы ҡулдарға килешмәй. Шуға ла нәҙек һәм йәйпәктәренә өҫтөнлөк бирегеҙ.

4. Күҙлекте мотлаҡ бит формаһына тура килтереп һайлағыҙ. Түңәрәк битле ҡатын-ҡыҙҙарға – йомро, овал йәки мөйөштәре нык беленмәгән шаҡмаҡ, ә ябыҡ битлеләргә тура дүртмөйөш, "бесәй күҙ" формаһындағы күҙлектәр барыр.

5. Эшләпә һайлағанда ла бит төҙөлөшөнә иғтибар итегеҙ: түңәрәк битлеләргә – йоморо түбәле, бөгөлгән тирәсле, еңелсә генә биҙәлгән, ә ябыҡтарға, киреһенсә, ҡалын тауарҙан



эшләнгән тура тирәсле, ҙур сағыу биҙәүес беркетелгән эшләпәләр килешер.

## ТӨҪТӘРҘЕ ДӨРӨҪ ҺАЙЛАУ

1. Ҡара төҫ бер сихри көскә эйә: ул кешене ябығыраҡ һәм оҙонораҡ күрһәтеүсән. Шуға күрә ҡара, ҡара-зәңгәр, шәмәхә (фиолетовый), көрән, ҡара-зәңгәр кейемдәр буй-һынды һомғолораҡ күрһәтә. Тик мода белгестәре ҡара төҫ менән артыҡ мауыҡмай, уны асыҡ төҫтәр менән аралаштырырға кәңәш итә.

2. Бер төҫ икенсеһенә алышҡан кейем кейһәң, буй-һын һомғолораҡ тойола. Был йәһәттән аҡ төҫтән ҡараға күскән кейемдәр айырыуса отошло һанала.

**3.** Тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙҙарға кейемдең ваҡ биҙәклеһен һайларға кәңәш ителәҗ. Сөнки улар күҙҙе алдаштырып, үлсәмдәрҙе бер аҙ “кәметеүгә” булышлыҡ итә.

**4.** Әгәр бүйлы кейем яратаһығыҙ икән, һеҙгә диагональ йәки үтә киң булмаған буй һыҙыҡлыһын кейергә кәрәк.

## ФАСОНДАРҘЫҢ РОЛЕ

**1.** Ғәҙәти булмаған декоратив элемент йәки бөрмә, балитәкле кейем ҡулланыуҙан һаҡланығыҙ.

**2.** Асимметрик, осло итәк буй-һынға еңеллек өҫтәй.

**3.** V рәүешендәге уйым муйынды – оҙонораҡ, ә түште тулыраҡ күрһәтә. Шуға күрә һеҙгә бөрмәле йәки сигелгән йомро йәки шаҡмаҡ уйымлы кейемдән баш тартырға тура килер.

**4.** Классик варианттағы кейемдәргә өҫтөнлөк биреү хуплана, сөнки улар буй-һынға “ауырлыҡ” өҫтәүсе элементтарҙан азат.

**5.** Майканың да ҡыҫҡа еңлеһен кейергә кәңәш ителә, сөнки ул яурындарҙы – тулыраҡ, ә тулы түште бәләкәйерәк итер.

**6.** Бейек билле туника эсте һәм тулы янбашты йәшерә ала. Уларҙы ҡара салбар йәки джинсы менән кейеү урынлы.

**7.** Тулы янбашлы ҡатын-ҡыҙҙарға клеш формаһындағы йәки иркен балаҡлы салбар кейергә кәңәш ителә.

**8.** Бер төймәгә эләктерелгән ҡыҫҡа жакет, кардиган, блейзер иғтибарҙы билгә йәлеп итер, ә оҙон фасонлы пинжәк уны тағы нәҙерәк күрһәтер.

**9.** Тулы билде йәшереү өсөн клеш юбка һайлау иң яҡшыһы.

**10.** Джинсыларҙың ҡара, ҡара-зәңгәр төҫтәгеләрен һайлағыҙ.

**11.** Тубыҡҡа тиклемге итәк оҙонлоғо иң уңышлы һанала, ҡыҫҡалары аяҡтарҙы тулыраҡ күрһәтер, ә оҙондары буйға ҡулəм өҫтәр.

## ДЕТАЛДӘРГӘ АЙЫРЫМ ИҒТИБАР

**1.** Тулы кәүҙәле ҡыҙҙарға ялтыр биҙәкле кейемдәр кейергә кәңәш ителмәй, сөнки улар иғтибарҙы етешһеҙлектәргә тарта.

**2.** Йоҡа трикотаж кейемдәргә өҫтөнлөк бирегеҙ. Тик уларҙың оҙонлоғо янбаштан үтмәҫкә тейеш.

**3.** Сәстәрҙе өҫкә йыйып ҡуйыу, асыҡ муйын буй-һынды һомғол күрһәтә.

**4.** Шарф йәки яулыҡтарҙың ҡойроҡтарын оҙон итеп бәйләгеҙ, сөнки улар буйҙы визуаль һуҙыуға килтерә.

**ГҮЗӘЛ ЗАТТАР ҺОМҒОЛ КҮРЕНЕҮҘЕҢ ТӨРЛӨ ЮЛДАРЫН, СЕРҘӘРЕН БЕЛЕРГӘ ТЕЙЕШ. ӘММӘ ЫСЫН МӘҒӘНӘҺЕНДӘ МАТУР БУЛЫУ ӨСӨН ТЫШҠЫ МАТУРЛЫҠ ҠЫНА ЕТМӘЙ, Ә ИЗГЕ КҮҢЕЛ, ЯҠШЫ КӘЙЕФ, НЫҠЛЫ ҺАУЛЫҠ ТА КӘРӘК. ШУҒА КҮРӘ СПОРТ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНЕҮ, КҮБЕРӘК САФ ҺАУАЛА ЙӨРӨҮ ТУРАҺЫНДА ОНОТМАҒЫҘ. УЛ ҺЕҘҘЕҢ БУЙ-ҺЫНЫҒЫҘҒА ЛА, ҺАУЛЫҒЫҒЫҘҒА ЛА ЫҢҒАЙ ТӘЬҪИР ИТЕР.**

*Филиә БУЛАТОВА әҙерләне.*




**АБОНЕНТ 90.**

Миңә 35 йәш. Район үҙәгендә йәшәйем. Юғары белемлемен, мәктәптә эшләйем. Ҡыҙ һәм ул үҫтерәм. Насар ғәҙәттәре булмаған 30-45 йәштәрҙәге ир-егет менән танышырға теләйем. Телефон номерым редакцияла.

# ТИБЕТ МЕДИЦИНАҺЫ АҠЫЛЫ



**Тибет медицинаһында "ауырыу" (болезнь мәғ.) тигән төшөнсә юҡ. Беҙҙең ауырыу тигәнебеҙҙе ламалар (табиплыҡ итеүсе) организмдың тигеҙлеге юғалыу тип атай. Тигеҙлек булдырыу өсөн, беренсенән, организмда Чи энергияһының дөйөм күләмен арттырыу мөһим, икенсенән, ошо энергияның бөтә организмға таралыуын тәьмин итеү (циркуляцияһын көйләү). "Чи" төшөнсәһе фәлсәфәүи яҡтан ауыр аңлатыла, мистик мәғәнәгә эйә... "Иң дөйөм осраҡта Чи — тын алыу һәм туҡланыу процесында, шулай уҡ йыһан тәьҫиренән алынған энергия. Уның тергеҙелеүе — тибет медицинаһының төп көсө. Чи энергияһы булған кеше сәскә ата, юғалта барыусы — үлә", — ти улар.**

## АУЫРЫУҘЫҢ ДӨЙӨМ СӘБӘПТӘРЕ

Тибет медицинаһына ярашлы, барлыҡ ауырыуҙарҙың һәм яфаларҙың сәбәпсеһе – **мәғлүмәтһеҙлек.** Унан **әҫенеү** (страсть) ҡабына, әҫенеү үҙ сиратында **асыу** тыуҙыра, һөҙөмтәлә **күңелһеҙләнеү** барлыҡҡа килә. Ошо өс (әҫенеү, асыу, күңелһеҙләнеү) төшөнсә "өс ғүмер башланғысы"на – "ел", "үт" һәм "лайла"ға нигеҙ һала.

**"Ел".**

Ҡылыҡһырлама: *"тупаҫ", "еңел", "нәҙек", "ҡаты", "хәрәкәтсән".*

Функцияһы: *тын алыш, тойоу ағзалары һәм хәтер эшмәкәрлеге менән идара итә, аяк-кул хәрәкәтенә көс бирә.*

Кеше тибы: *бәләкәй буй, бөкрәрәк, ябыҡ, куңыр йөҙлө, күп һөйләй, ҡомарлы уйындар, йыр, көрәш ярата, аҡылы тоторокло түгел, уяу йоколо, ғүмере кыҫка һәм ярлы, кылығы буйынса грифка, ҡарғаға йәки төлкөгә окшаған.*

**"Үт".**

Ҡылыҡһырлама: *"эҫе", "кыркыу", "еңел", "йомшак", "майлы", "дымлы", "һаҫык".*

Функцияһы: *аҙык үҙләштереү (асығыу һәм һыуһау тойғоһо) менән идара итә, тән температураһын һаклай, тиренең төҫөн һәм йылыны көйләй, аҡыл ҡыйыулығын бирә, һәр башланғыста ла аң энергияһына тәьҫир итә.*

Кеше тибы: *уртаса буйлы, һөйәге һәм сәсе һарғылт төҫтә, нык тирләй һәм насар еҫ килә, йыш һыуһай, асыға, тапҡыр акыллы, яндырай, ғорур, тормошо һәм етешлеге уртаса, шәрбәтте, кыркыу, һалкынса ашамлыктарҙы*

*өҫтөн күрә, холҡо буйынса юлбарыҫҡа, маймылға оҡшаш.*

**"Лайла".**

Ҡылыҡһырлама: *"майлы", "һалҡынса", "ауыр", "йомшаҡ", "тоторокло", "йәбешкәк".*

Функцияһы: *аңды һәм тәнде сыныҡтыра, йоҡоға булышлыҡ итә, тирене, туҡымаларҙы, сәсте дымландыра, быуындарҙы тоташтырып, нығыта, эске ағзаларҙың һәм тән өлөштәренең йомшаҡлығын тәьмин итә, тәнгә – ныҡлылыҡ, аңға түҙемлек бирә.*

Кеше тибы: *эре һөйәкле, һимереүгә һәүәҫ, быуын һәм һөйәктәр йомро формала, тире төҫө асыҡ йә аҡһыл тонок, һыуһау менән асығыуҙы еңел кисерә, тының аҡыллы, оҙаҡ һәм тәрән йоклай, ғүмере оҙон һәм етеш, әсе, ҡырҡыу, ҡурыштырыусан аҙыҡҡа өҫтөнлөк бирә. Ҡылыҡтары менән арыҫлан йәки буйволға тартым.*

"Ел", "үт" һәм "лайла" кеше организмында бер-береһе менән тигеҙ нисбәттә һәм үҙгәрешһеҙ икән, ауырыу үҙен белдермәй, әммә ошо өсәүҙең береһе өҫтөнлөк ала башлаһа йә урынын алмаштырһа, шунда уҡ үҙенә яраҡлы билдәләр менән тейешле ауырыу барлыҡҡа килә.

## ТЫРНАҠТАР БУЙЫНСА ТИКШЕРЕҮ

Тибет медицинаһында организмдың тигеҙлеген юғалтыуҙың (йәғни ауырыуҙың) 400-ҙән артыҡ осрағы һанала. Уларҙы асыҡлау йәһәтенән ҡырҡтан ашыу диагностика ысулы бар. Боронғо Ҡытайҙа тәүге тикшереүҙе тырнаҡтарҙың торошона ҡарап һәм нөктәләр буйынса үткәргәндәр. Был ысул бөгөн бик популяр, сөнки уны һәр кем үҙ алды башҡара ала.

Иғтибар менән тырнаҡтарығыҙҙың формаһына, үлсәменә, өҫкө һыҙатына күҙ һалығыҙ, һығылмалымы, йомшаҡмы, һыныусанмы йә нескәме икәнен билдәләгеҙ.

Әгәр тырнаҡтар ҡоро, тиҙ һыныусан, кәкре (ырғаҡҡа оҡшаған) булһа, организмда - "ел"; ә йомшаҡ, алһыу булып, бер аҙ ялтырап торһа - "үт"; тырнаҡтар ҡалын, ныҡ, үтә ялтырап торһа, "лайла" өҫтөнлөк итә.

Тырнаҡтағы оҙон һыҙыҡтар аҙыҡтың насар эшкәртелеүен бәйән итә, ә арҡыры улаҡтар алама туҡланыу йә аҙған сир хаҡында һөйләй.

Ҡайһы ваҡыт ҡабарынҡы, алға сығып, һуғанбашҡа (барабан таяҡсаларына) оҡшап торған тырнаҡтар осрай. Был йөрәк һәм үпкәнең насар эшләүен аңғарта.

Тырнаҡтар ҡалаҡ формаһында булып, соҡорайып торһа, организмға тимер етмәй тип аңларға кәрәк.

Аҡ таптар иһә цинк менән кальцийҙың етешмәүен белдерә. Сығанаҡ бармаҡтағы аҡ таптар – бөйөргә, һуҡ бармаҡтағылары үпкәгә кальций ултырыуы тураһында һөйләй.

## ТЫРНАҠ АЙЫНА ҠАРАП ТИКШЕРЕҮ

Хәҙер "айға" (тырнаҡ төбөндәге ярым ай формаһындағы аҡ тап) күҙ һалығыҙ.

Күп тәмәке тартҡан кешеләрҙең һәм үпкә сире менән яфаланғандарҙың тырнаҡ айы ғәҙәттә нәҙек һәм бәләкәй була. Әйткәндәй, көнсығыш медицинаһы буйынса, баш бармаҡта "ай" булмаһа, ул кешенең аҡылы теүәл түгеллеге хаҡында һөйләй. Шулай ҙа күпселектең баш бармағында ай бар. Ә бына бүтәндәре менән хәл нисек?

Һуҡ бармаҡтағы ай йыуан эсәктең хәлен сағылдыра тип иҫәпләнә. Әгәр ай нәҙегәйһә йә бөтөнләй юғалһа, эсәк, бауыр, ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлегенә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Елһенеү процестары, гинекология ауырыуҙары шулай уҡ һуҡ бармаҡта сағылыш таба.

Урта бармаҡ тырнаҡтары ҡан тамырҙары системаһы өсөн яуаплы. Әгәр бында ай булмаһа, тимәк кешенең артериаль ҡан баҫымы, ҡара ҡан тамыры (вена) һәм капиллярҙары менән хәлдәр яҡшы түгел.

Сығанаҡ бармаҡ тырнағының ағы эске секреция биҙҙәре эшмәкәрлеген "һүрәтләй". Айҙың булмауы иһә матдәләр алмашыныуының һәм лимфа системаһының боҙолоуын аңлата.

Сәтәкәй бармаҡ тырнағындағы ай йөрәк һәм нәҙек эсәк хәле өсөн яуаплы. Бына ни өсөн олоғая килә иң тәүҙә сәтәкәйҙәге ай юғала икән. Нәҙек эсәк шлаклана һәм һеҙемтәлә ай юҡҡа сыға. Былар барыһы ла эске секреция эшмәкәрлеген ҡаҡшата (сығанаҡ бармаҡтағы тырнаҡ айы нәҙегәйә), кире үҙгәрештәрҙе йөрәк күтәрә алмай (урта бармаҡ айы юғала), һәм иң аҙаҡта йыуан эсәк бирешә.

Тырнаҡ айының күкһел төҫтә булыуы – бауыр, ҡыҙыл төҫ алыуы йөрәк эшмәкәрлегенең ҡаҡшауына ишара.

## ТЫРНАҠ ТӨҪӨ БУЙЫНСА АУЫРЫУ БИЛДӘЛӘРЕН АСЫҠЛАУ

Һау кешелә алһыу төҫтәге тырнаҡ булһа; һарғылт төҫ – бауыр ауырыуы билдәһе; асыҡ ҡыҙыл төҫ эритмия хаҡында һөйләй; зәңгәр-шәмәхә төҫө тыуыштан йөрәк боҙоғо (порок) булғанда күҙәтелә; тырнаҡтағы аҡ таптар үҙәк нервы системаһы эшмәкәрлегенең боҙолоу ихтималлығын иҫкәртә, ә һарғылт таптар мейе эшенең ҡаҡшау билдәһе булараҡ сығыш яһай; күкһел төҫ йөрәк-ҡан тамырҙары патологияһын белдерә; тонок ялпаҡ тырнаҡтар – аҙ ҡанлылыҡ,




1 - тырнаҡтың ғәҙәти формаһы.
2 - ҡыҫҡа, ялпаҡ тырнаҡ – йөрәктең органик ауырыуҙары.
3 - айҙың ҙур булыуы – тахикардия.
4 - айҙың булмауы – йөрәк неврозы.
5 - нык ҡалҡып торған тырнаҡ – үпкә туберкулезы.
6 - ҙур айлы ҡалҡып торған тырнаҡ – туберкулездың тыумыштан килгән формаһы.
7 - ялпаҡ кәкре тырнаҡ – бронхиаль астма.
8 - торбаға оҡшаш бейек тырнаҡ – онкология ихтималлығы хаҡында хәбәр итә.
9 - булавкаға оҡшаш тырнаҡ фалангаһы – тыумыштан килгән психика ҡаҡшау,ҡатылыҡ, агрессивлыҡ.
10 - эскә кәкрәйгән тырнаҡ – нәҫелдән килгән алкоголизм.
11- ялпыш-тәтәрек (сплющенно-раздробленный) тырнаҡ – паразит селәүсендәр үрсеүе.
12 - өҙәк улаҡтар – известь ултырған.
13 - шлак (тоҙ) ҡатламдары – ашҡаҙан-эсәк юлының кисәкен ауырыуҙары.
14 - оҙонса тырнаҡ – шәкәр диабеты.
15 - сығанаҡ бармаҡ тырнағы ярым ай формаһында – бөйөр ауырыуҙары.
16 - тырнаҡтағы тулҡындар – ревматизм.
17 - кимерелгән тырнаҡ – невроз, гастрит, ҡатын-ҡыҙҙарҙың енес эшмәкәрлеге функцияһы боҙолоуы.
18 - һыҙыҡтар һәм таптар – нәҙек эсәк һәм талаҡ ауырыуҙары.
19 - һыҙыҡтар – эсәк ауырыуҙары.
20 - өсмөйөш тырнаҡ – арҡа мейеһе һәм умыртҡа бағанаһы сирҙәре.
21 - тишекле (дырчатый) тырнаҡ – талаҡ патологияһы билдәһе.

анемия, организмға тимер һәм витаминдар етмәү билдәһе; бөйөр өҫтө биҙенең ҡабығы ҡаҡшағанда тырнаҡтар аҡ төҫкә инеүе мөмкин; тонок алһыу йә үтә күренмәле төҫ анемия, ҡандағы үҙгәрештәр хаҡында хәбәр итә; һарғылт аҡ (молочно-белый) төҫ – бауыр циррозы; ҡара – яурын артерияһының тромбозы һәм диабетик гангрена булғанда күҙәтелә; көлһыу төҫкә тырнаҡтар малярия өйәнәге тотҡанда инә; аҡһыл зәңгәр төҫкә инһә, невропатолог һәм гастроэнтерологҡа күренергә ваҡыт; күкһел тырнаҡтар, ҡанда кислород етмәү сәбәпле, йөрәк һәм үпкә эшмәкәрлеге насарайыуы билдәһе. Хәлһеҙлек һәм тын ҡыҫылыу менән оҙатылып килеүе ихтимал. Тырнаҡ төҫөнөң үҙгәреүе бауыр һәм үт ҡыуығы, инфекция ауырыуҙары менән бәйле булыуы ихтимал, никотиндың йоғонто яһауы ла бар. Баш бармаҡ тырнағы төбөндәге зәңгәрһыу йә йәшкелт төҫ аҙыҡ эшкәртеүҙә ҡыйынлыҡтар барлығына ишара; үтә ҡыҙыл тырнаҡтар ҡандың ҡыҙыл тәнсәләренең артыҡ икәнен аңлата.

Әгәр тырнаҡтар насар үҫһә, эндокринологҡа мөрәжәғәт итеү зарур. Ғәҙәттә бындай үҙгәрештәр ҡалҡан биҙе ауырыуҙары булғанда күҙәтелә.

Тырнаҡтарҙың һыныусанлығы тимер, кальций кеүек минераль матдәләрҙең, B һәм D витаминдарының етешмәүенән килә.

**Күп йыллыҡ тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ниндәй ҙә булһа ауырыуҙың иң тәүге билдәһе тап тырнаҡтарҙа сағыла. Ауырыуҙың билдәләре барлыҡҡа килерҙән күпкә алда улар мөмкин булған сир хаҡында мәғлүмәт еткерә. Шулай ҙа диагностикалауҙың бер генә ысулында туҡталып ҡалырға ярамай, ә бер нисә ысулды сағыштырып ҡарап һығымта яһау мөһим. Был йәһәттән, бит, тел, танау тороштары буйынса тикшереү алымдары менән киләһе һандарҙа таныша алырһығыҙ.**

*Л. ҒӘЙНИТДИНОВА.*

# БОРОН ИРҘӘР БӘЙЛӘМ БӘЙЛӘГӘН



Бәйләмде кем һәм ҡасан уйлап сығарғанын бераү ҙә белмәй, шулай ҙа был мөғжизә беҙҙең эраға тиклем барлыҡҡа килгән. Фирғәүендәрҙең ҡайһылыр ҡәберендә бәйләнгән ойоҡбаш табыла. Уның баш бармаҡтары айырым бәйләнгән була, сөнки ул ваҡытта бөгөн беҙ йөрөткән вьетнамкаға (сланцы) оҡшаш аяҡ кейеме кейгәндәр. Бәйләм V быуатта Көнсығышта киң таралған. Европаға был һөнәр IX быуатта ғына килеп етә, быға тиклем бында ойоҡтарҙы туҡыманан һәм нәҙек күн ептән тегәләр. Европала бәйләнгән ойоҡтарҙы тәүҙә королдәр һәм уларҙың ярандары ғына кейгән. Испанияла бәйләнгән ойоҡтар XVI быуатта ғына танылыу ала һәм был илдән Британия короле Генрих VIII ҡиммәтле бүләк рәүешендә ике пар бәйләнгән ойоҡ ебәрелә.

XVII-XVIII быуаттарҙа сатлама һыуыҡта ирҙәр бер юлы 12 пар бәйләнгән ойоҡ кейгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы: ул заманда бәйләм эшен ҡатын-ҡыҙҙар түгел, ирҙәр башҡарған.

1589 йылда Гальвертон руханиһы Уильям Ли беренсе бәйләү машинаһын уйлап сығара, тик Англия батшабикәһе Елизавета I уға патент бирмәй. Машинала бәйләнгән ойоҡтар ебәктән тегелгәндәренән ҡалыныраҡ булып күренә. Батшабикә Уильямға аҡсаны хәләл көсө менән табырға кәңәш итә. Ли Францияға күсә һәм Руана ҡалаһында донъяла беренсе механик трикотаж оҫтаханаһын булдыра. XVIII быуаттың аҙағында Францияла туҡыманы торба формаһына оҡшаш итеп бәйләгән түңәрәк трикотаж машинаһы уйлап сығаралар. Машина етештергән ойоҡтар ҡул менән бәйләнгән әйберҙәрҙе тиҙ ҡыҫырыҡлап сығара, сөнки улар күпкә арзан тора.

Бик боронғо табыштар бәйләм техникаһының үҫешкәнлеге, ул осорҙа йәшәүселәрҙең оҫта итеп биҙәктәр төҙөүе, төҫ һайлауҙары тураһында һөйләй.

Тикшеренеүселәр беҙҙең эраға ҡәҙәр үк кешеләрҙең бәйләү техникаһын яҡшы белеүҙәрен иҫбатларға маташа. Көнсығыштың төрлө илдәрендә табылған боронғо дәүерҙә бәйләнгән әйберҙәр быға дәлил. Ниневиялағы Сенахериба һарайының емереклектәрендә ойоҡбаш кейгән һуғышсы рельефы табылған. 1867 йылда Вильям Фелкин үҙенең ойоҡбаштар тарихы тураһындағы хеҙмәтендә бәйләмдең Троя һуғышы ваҡытында уҡ булыуын, Гомерҙың “Илиада” менән “Одиссея”һын тыуҙырған заманда тәржемәсе һәм күсереп яҙыусыларҙың хатаһы арҡаһында “бәйләү” һүҙен “тегеү” тип яңылыш теркәүҙәрен иҫбатларға тырыша. Билдәле булыуынса, Пенелопа, Одиссейҙың әйләнеп ҡайтыуын көткәндә, сабырһыҙ ирҙәрҙе туй кейемем әҙер булғас та кейәүгә сығам тигән вәғәҙәһе менән көттөрә. Тик төндә көнө буйы туҡыған әйберен һүтә. Ысынбарлыҡта Пенелопа туҡымаған, ә нәҡ бәйләргә тейеш булған, сөнки бәйләнгән әйберҙе генә һүтеп була.

Былар бары тик археологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә йыш кире ҡағылған йәки шик аҫтына ҡуйылған ҡуҙаллауҙар һәм һиҙемләүҙәр генә. Дөйөм алғанда, борондан беҙгә килеп еткән бәйләнгән әйберҙәр технологияһы буйынса сағыштырмаса ҡатмарлы һәм улар беҙҙең эраның III-V быуаттарына ҡарай.

## АЖУР БИҘӘКТӘР

Мода нисек кенә үҙгәрмәһен, ажур биҙәге (кружевные) менән бәйләнгән селтәрле күлдәктәргә, япмаларға, жакеттарға, шәлдәргә һәм башҡа әйберҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Был биҙәктәрҙең барыһы ла ябай бер принципҡа нигеҙләнгән – кәметелгән күҙ урынына һәр ваҡыт бер күҙ өҫтәлеп бара һәм киреһенсә.

Ажур биҙәктәрҙең төрлөлөгө хайран итә: уларҙың ваҡ йәки эре мотивтарҙан тороуы мөмкин, ябай йәки ҡатмарлы фактуралары менән айырылыуҙары, вертикаль, горизонталь йәки диагональ йүнәлеш алыуҙары ихтимал. Бындай биҙәк менән бәйләнгән әйберҙәр ысын художестволы әҫәр булып танала.

## ВЕРТИКАЛЬ БУЙҘАР КҮРЕНЕШЕНДӘГЕ АЖУР БИҘӘК

Ажур биҙәктәр ҡатын-ҡыҙ кейемдәре өсөн тәғәйенләнгән. Тик полотнола диагональ рәүештә урынлашҡан һәм фактур буйҙар менән булған айырым төркөм биҙәктәрҙе ирҙәр кейем-һалымы өсөн дә ҡулланырға мөмкин.

Епте дөрөҫ һайлау мөһим: ул яҡшы сифатлы, тигеҙ һәм бик үк тоноҡ булырға тейеш түгел. Ә ҡалынлығы төрлө булһа ла ярай.

Ажур биҙәктәр схемаларында йыш ҡулланылған буш шаҡмаҡтарға иғтибар итмәгеҙ. Улар бары тик схеманы аңлайышлы биреү өсөн генә хеҙмәт итә.

*Вәсилә ЗАРИПОВА.*



1




2




3






1а



2а



3а

+ - уң күҙ

• - һул күҙ

○ - элеп (салып) алыу (тиҫкәре яғынан һул менән бәйләргә)

◿ - ике күҙҙе уң яҡҡа ҡарай ыңғай бәйләргә

◺ - ике күҙҙе һул яҡҡа ҡарай ыңғай бәйләргә (1-се һәм 2-се күҙҙәрҙе уң итеп бәйләгәндәге кеүек сисеп алырға)

△ - күҙҙе ыңғай бәйләгәндәге кеүек сисеп алырға, ҡалған икәүҙе бергә уң менән бәйләргә һәм барлыҡҡа килгән күҙҙе сиселгән күҙ аша үткәрергә

◿4 - уңға ҡарай 4 уң күҙҙе бергә бәйләргә

◺4 - һулға ҡарай 4 уң күҙҙе бергә бәйләргә (3 күҙҙе ыңғай бәйләгәндәге кеүек сисеп алырға, дүртенсе күҙҙе уң менән бәйләп, өс сиселгән күҙ аша үткәрергә)

(+ +)+ - өс күҙҙе ыңғай бәйләргә, аҙаҡ беренсе күҙҙе ике күҙ аша ташларға

# АҠҺАҠ ТИМЕР

**АҠҺАҠ ТИМЕР – СЫҢҒЫҘХАН КЕҮЕК ЯРТЫ ДОНЪЯНЫ ДЕР ҺЕЛКЕТКӘН, НИСӘМӘ ДӘҮЛӘТТЕ ҠЫЙРАТКАН ИЛБАҪАРҘАРҘЫҢ БЕРЕҺЕ. УЛ БАШҠОРТ ТАРИХЫНДА ЛА ҠАНЛЫ ЭҘ ҠАЛДЫРҒАН ШӘХЕС. УНЫҢ ХАҠЫНДАҒЫ ХАЛЫҠ ХӘТЕРЕНДӘГЕ ИҪТӘЛЕКТӘР РИУӘЙӘТ, ЛЕГЕНДА РӘҮЕШЕНДӘ БЕҘҘЕҢ КӨНДӘРГӘ ТИКЛЕМ ҺАҠЛАНЫП КИЛЕП ЕТКӘН. КЕМ БУЛҒАН ҺУҢ АҠҺАҠ ТИМЕР? НИНДӘЙ СИФАТТАРЫ АРҠАҺЫНДА УЛ КҮП ИЛДӘРҘЕ ТЕҘ СҮКТЕРӘ АЛҒАН?**

Тимер 1336 йылдың 9 апрелендә Кеш ҡалаһынан (хәҙерге исеме Шахрисабз, Үзбәкстанға ҡарай) йыраҡ түгел Хужа-Ильгар ауылында Тарағай исемле бейҙең ғаиләһендә тыуа.

Тимер бәләкәй булғанда Урта Азия монголдарҙың Сығатай улусына ҡарай. 1346 йылда, Ғазан хан үлтерелгәндән һуң, хакимлыҡ төрки әмире Ҡазағандың ҡулына күсә. Аҡһаҡ Тимер Ҡазаған әмирҙең ағаһы – Кеш ҡалаһының хужаһы, Барлас ырыуы башлығы Хажи Барласка хеҙмәткә күсә. 1360 йылда Сығатайҙың нәҫеле Тоғлуҡ Тимер хан илде баҫып ала. Күптәр, шул иҫәптән Аҡһаҡ Тимерҙең хужаһы Хажи Барлас та, Хөрәсән ҡалаһына ҡаса. Аҡһаҡ Тимер ҡасырға йыйынмай. Яңы хан менән һөйләшеп-килешеп, Кеш ҡалаһы һәм өлкәһенең хужаһы итеп раҫлана. Үҙенең ханлығында фетнә сығыу сәбәпле, Тоғлуҡ Тимер Сығатай илендә үҙенең улы Ильяс Хажиҙы ҡалдырып ҡайтып китә. Ильяс Хажи Аҡһаҡ Тимерҙе өнәп бөтмәй, һәм үҙенең әмирҙәре менән уны үлтерергә ниәтләй. Аҡһаҡ Тимер ҡасып, Ильяс Хажиҙың дошманы Ҡазаған әмирҙең ҡустыһы Хөсәйен әмиргә барып ҡушыла. Улар бәләкәй ғәскәр менән Хорезм яғына юллана. Хиуа ҡалаһының хужаһы Тәүәккәла-Ҡуңғрат менән яуҙа ҡыйратылып, ҡалған яугирҙары менән сүллеккә ҡаса. Мәхмүт тигән ауылға барып сыккаҫ, былар ошо ерҙәрҙең хужаһы Әлимбәк Йәнеҡорбандың кешеләре тарафынан ҡулға алынып, 62 көн төрмәлә ята. Әлимбәк уларҙы Иран сауҙагәрҙәренә ҡоллоҡҡа һатып ебәрергә уйлай. Әммә ошо осорҙа, тотҡондарҙың бәхетенә күрә, бер каруан да үтмәй. Тиҙҙән уларҙы Әлимбәктең ағаһы Мөхәммәтбәк әмир ҡотҡарып ҡала.

1361-1364 йылдарҙа Аҡһаҡ Тимер менән Хөсәйен әмир Амударъя йылғаһы буйында йәшәй. Монголдарға ҡаршы партизан һуғышы алып бара. 1362 йылдың көҙөндә бер алышта уң ҡулының ике бармағын юғалта һәм уң аяғы ауыр яралана. Ошонан алып ул аҡһай башлай, һәм халыҡта Аҡһаҡ Тимер ҡушаматын ала (иран телендәге Аҡһаҡ Тимер һүҙе "Тимур-е ланг" Европаға Тамерлан булып инеп китә).



1370 йылда Аҡһаҡ Тимер менән Хөсәйенбәк, Ильяс Хажиҙы Сығатай иленән ҡыуып сығарғас, үҙ-ара власҡа талаша башлай. Хөсәйен әмир Сыңғыҙхан нәҫеленән булмаһа ла, бөйөк әмир титулына эйә булып, хакимлыҡ итергә ниәтләй. Ә йола буйынса борон-борондан бөйөк әмир титулын монголдарҙың Барлас ырыуы вәкилдәре генә йөрөткән. Аҡһаҡ Тимерҙең ата-бабалары төркиләшкән Барлас ырыуынан була. Икеһе лә яуға әҙерләнә башлай. Һуғыш алдынан Аҡһаҡ Тимер ҡоролтай йыйып, хан итеп Сыңғыҙхандың нәҫеленән булған Һөйәрғәтмеш исемле кешене һайлап ҡуя.

1370 йылдың 10 апрелендә Тимер Балх ҡалаһын баҫып алып, Хөсәйен әмирҙе үлтерә. Ҡоролтай йыйып, бөтөн сардарҙарҙан ант ала. Быға тиклемге әмирҙәр кеүек үҙенә хан исемен алмай, ә "бөйөк әмир" дәрәжәһендә генә йөрөй. Әммә ысын хакимлыҡ уның ҡулында була. Ул идара иткән осорҙа Сығатай улусында рәсми рәүештә Сыңғыҙхан нәҫеленән булған хандар тора: Һөйәрғәтмеш (1370-1388), уның улы Мәхмүт (1388-1398) һәм Сатуҡ хан (1398-1405). Ошо рәүешле Аҡһаҡ Тимер әкренләп илде берләштереүгә өлгәшә.

Әммә Сығатай улусына ҡараған ҡайһы бер өлкәләр, Хорезм һәм Шибирған ҡалалары Аҡһаҡ Тимер ҡуйған Һөйәрғәтмеш хандың хакимлығын танымай. Көньяҡтан – Моголистан һәм төньяҡтан Аҡ Урҙа (Жучи улусы) яу менән янай.

Аҡһаҡ Тимер илде нығытыу, баш бирмәҫ өлкәләрҙе буйһондороу эшенә тотона. 1370 йылда Балх менән Ташкент ҡалалары бөйөк әмиргә баш һала. Ә Хорезм ҡалаһы 1388 йылға тиклем буйһонмаҫҡа маташа, Тимер әмир был ҡалаға биш тапҡыр поход яһай һәм, ниһайәт, һуңында уны буйһондора. Ил эсендәге өлкәләрҙе яулап алғас, Тимер Аҡ Урҙаны ауыҙлыҡларға һәм көньяҡтағы Моголистанды үҙ дәүләтенә ҡушырға ниәт итә башлай. Моголистан хужаһы әмир Камаретдин да шул уҡ уйҙар менән яна. Һәр ваҡыт Тимерҙең иленә сапҡын яһап тора. 1370–1372 йылдарҙа һәм 1376 йылдарҙа Ташкент һәм Андижан ҡалаларын баҫып алып, илде туҙҙыра. Шуға күрә лә тәүҙә Аҡһаҡ Тимер Моголистан проблемаһын хәл итеүгә күсә. 1371 йылдан алып 1390 йылдарға тиклем ул ете тапҡыр Моголистанға походҡа бара һәм һуңғыһында Камаретдин әмирҙе тулыһынса ҡыйрата. Камаретдин әмир ҡасып ҡотола, әммә һуңынан һыу сәсәгенән үлеп ҡала.

Аҡ Урҙаның ханы Ырыҫ хан Жучи улусын (Аҡ Урҙа менән Алтын Урҙаны) берләштерергә уйлай. Быға Аҡһаҡ Тимер нисек тә булһа ҡамасауларға тырыша. Ошо мәлдә Тимер янына Туҡтамыш килә. Ул Аҡ Урҙалағы билдәле бей Туй Хужаның улы була. Туй Хужа Ырыҫ хандың Алтын Урҙа эштәренә ҡыҫылыуына ҡаршы төшә. Ошо арҡала ханы уны һәләкәт итә. Улы Туҡтамыш атаһы өсөн ҡон ҡайтарыу маҡсатында 1376 йылда Ырыҫ хандың дошманы Тимергә барып баш һала. Тимер уны хан кеүек ҡабул итә. Аҡһаҡ Тимер Туҡтамышты үҙ файҙаһына ҡулланырға ниәтләй. Уға ғәскәр биреп, Аҡ Урҙаны баҫып алырға ебәрә. Әммә Туҡтамыш тулыһынса ҡыйратыла. Тиҙҙән Аҡһаҡ Тимер үҙе походҡа сыға. Ырыҫ хандың үлеп ҡалыуы мәсьәләне хәл итә: уның урынына Тимер Туҡтамышты тәғәйенләп, ҡайтып китә. Туҡтамыш Ырыҫ хандың берләштереү сәйәсәтен дауам итә һәм Алтын Урҙаны баҫып ала. Шунан ул 1382 йылда барып Мәскәү ҡалаһын туҙҙыра. Артабан Туҡтамыш хан ҡарашын Кавказ менән Урта Азия яғына ташлай. 1386 йылда Әзербайжанды баҫып алып, талап ҡайта. Икенсе йылына Тимер ғәскәре менән Туҡтамышты ҡаршы ала, алыш Тимер файҙаһына күсә башлағас, Алтын Урҙа



ханы армияһын кирегә борорға мәжбүр була. Әммә уларҙың һуғышы быны менән генә тамамланмай. Аҡһаҡ Тимер Туҡтамыш хан башҡа яуға сығырға баҙнат итмәҫ тигән уй менән Иранға һуғышҡа китә. Ошоно ғына көткән Туҡтамыш Аҡ Урҙаның көньяғына, Ырыҫ хан үлгәндән һуң Тимерҙең ҡулына күскән ерҙәргә баҫып инә. Әммә Бохара, Сәмәрҡәнд, Сабран ҡалалары ишеген асмай, ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә. Ошо арала Ирандан Аҡһаҡ Тимер ғәскәрҙәре килеп етә һәм Туҡтамышҡа кире боролорға тура килә.

Туҡтамыш ҡайтып тиҙ арала ғәскәр туплап, 1388 йылда Аҡһаҡ Тимергә ҡаршы тағы яуға сыға. 1390 йылдың аҙағына тиклем һуғышта еңеүсе булмай. Аҡһаҡ Тимер был осорҙа генераль һөжүмгә әҙерлек алып барған булғандыр, күрәһең. 1391 йылдың башында Тимер үҙенең армияһы менән Ташкент аша Алтын Урҙаға походҡа юллана. Быны ишетеп Туҡтамыш үҙенең илселәрен ебәрә. Ул Тимергә баш һалыуын белдерә. Әммә бөйөк әмир уның һүҙҙәренә ышанмай һәм юлын дауам итә. Туҡтамыштан ҡасып килгән сардары Иҙеүкәй (башҡорт халҡында уның турала "Иҙеүкәй менән Мораҙым" дастаны бар) Тимерҙең ғәскәренә юл күрһәтеүсе ролен үтәй.

Тимер Туҡтамыш ғәскәрен ҡыуып килеп, Тубыл йылғаһы аша үтә һәм 1391 йылдың яҙ аҙағына Яйыҡ башына килеп сыға. Бында ул Туҡтамыш армияһының эҙен юғалта. Тарихсылар иҫәпләүенсә, Туҡтамыш үҙенең ғәскәрендә хеҙмәт иткән башҡорттар ярҙамында тура юлдан, Инйәр, Еҙем йылғалары, Урал тауҙары аша үтә. Аҡһаҡ Тимер Уралды көньяҡтан, дала буйлап урай һәм Ыҡ йылғаһы (Башҡортостандың көнбайышы) буйында Туҡтамыш ғәскәрен ҡыуып етә. Ошонда Туҡтамыш ҡапыл һөжүм итеп, һуғыш булып ала. Тимерҙең Иҡу Тимер исемле бер әмире һәләк була. Әйткәндәй, бөгөнгө Шишмә районында урынлашҡан Хөсәйенбәк кәшәнәһен Аҡһаҡ Тимер төҙөткән, тигән риүәйәт бар. Уның ҡәбер ташын 12 үгеҙ егеп килтергәндәр, имеш. Шулай уҡ был риүәйәт буйынса, Аҡһаҡ Тимер кәшәнә эргәһендәге Аҡзыяратта үҙенең яуҙа һәләк булған тағы алты әмирен ерләгән, имеш.

1391 йылдың 18 июнендә Ҡондорса йылғаһы буйында ике ғәскәр араһында ҙур алыш була. Туҡтамыштың ғәскәре күберәк булыуға ҡарамаҫтан, ҡыйратыла. Тимер дошманының байраҡсыларын үҙ яғына ҡаратҡан, тиҙәр. Алыштың иң ҡыҙған мәлендә сигнал биреп тороусы байраҡсылар байраҡтарын төшөрөп, ғәскәрҙә паника тыуҙыра. Ошо арҡала Туҡтамыштың яугирҙары яу яланын ташлап ҡаса башлай. Был һуғыштан Туҡтамыш үҙенең әҙ генә көстәре менән көнбайышҡа, Оло Иҙел (Волга) арьяғына ҡасып ҡотола.

Аҡһаҡ Тимер ғәскәре ҡайтып киткәндән һуң, Туҡтамыш хан тағы ла көс туплай башлай һәм 1394 йылдың көҙөндә Әзербайжанға баҫып инә. Был мәлдә Әзербайжандың көньяғында, Шеки ҡалаһында торған Тимер Туҡтамышҡа атлыға. 1395 йылдың 15 апрелендә Терек йылғаһы буйында уның ғәскәрен тағы ҡыйратып ташлай. Туҡтамыш Дон, Днепр йылғалары аша Волга буйына ҡаса.

Аҡһаҡ Тимер был юлы Оло Иҙел буйындағы сәскә атҡан Алтын Урҙа ҡалаларын туҙҙырып сыға. Туҡтамышты ҡыуып Дон, Днепр аша Ҡырымға барып етә. 1397 йылдың яҙында арыған ғәскәрен ҡайтыу юлына бора. Аҡһаҡ Тимер үткәндән һуң, Алтын Урҙаның иҡтисады тамам бөлә һәм дәүләт артабан бөтөүгә, тарҡалыуға дусар була.

1398-1399 йылдарҙа Аҡһаҡ Тимер Һиндостанды ҡыйратып үтә. 1402 йылда Ғосман империяһына (Төркиә) баҫып инә һәм 28 июлдә Анкара янындағы алышта Баязит I солтандың армияһын ҡыйратып, үҙен әсиргә ала. Аҡһаҡ Тимер Баязит солтанды күргәс, көлөп ебәргән. Баязит: "Бәхетһеҙлеккә тарыған кешенән көлөү яҡшы эш түгел", – тип әйткән, имеш. Быға яуап итеп Аҡһаҡ Тимер: "Яҙмыш хакимлыкты юғары баһа тип һанамайҙыр, күрәһең. Һинең һымаҡ бөкрө һәм минең кеүек аҡһаҡ, ғәрип кешеләргә хакимлыкты биргәс..." – тигән.

Баязитты ҡыйратҡас, Аҡһаҡ Тимер Ҡытайҙы баҫып алыу уйы менән яна башлай. 200 меңлек ғәскәр туплап, 1404 йылдың 27 ноябрендә походҡа сыға. 1405 йылдың ғинуарында Отрар ҡалаһына килеп туҡтай. Ошонда ул ауырып китеп 18 февралдә донъя ҡуя. Уның кәүҙәһен бальзамлап, Сәмәрҡәндкә алып килеп, Гүр Әмир кәшәнәһендә ерләйҙәр.

Аҡһаҡ Тимерҙең ҡәберен асҡан осраҡта донъяла оло һуғыш башланыр, тигән риүәйәт йәшәп килгән була. 1941 йылдың июнендә СССР фәндәр академияһынан Тимерҙең ҡәберен асырға экспедиция килә. Бер көн сәйхәнала ошо экспедицияла кинооператор булып йөрөгән Мәлик Ҡайүмовҡа өс ҡарт боронғо китап күрһәтә. "Аҡһаҡ Тимерҙең ҡәберен ҡутарһаң, илдә быға тиклем булмаған һуғыш башланыр, тип яҙылған был китапта", – ти теге ҡарттар.

Мәлик ҡайтып башҡаларға һөйләй. Әммә тегеләре уның һүҙҙәрен көлкөгә әйләндерә. Ул осрашыу 1941 йылдың 20 июнендә була. 22 июнь көнө экспедиция Тимерҙең ҡәберен аса һәм ошо көндә Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә. Ҡайүмов фронтта, 1942 йылдың октябрендә, Жуков менән осрашып, хәлде аңлатып бирә. Аҡһаҡ Тимерҙең һөйәктәрен ҡабаттан ерләргә кәрәклеген әйтә. 1942 йылдың 19-20 ноябрендә, Сталинград алышында Совет ғәскәрҙәре өсөн һынылыш осорҙа, Аҡһаҡ Тимерҙең һөйәктәре ҡайтанан ерләнә.

*Азат ЮЛАН.*

# Һорауҙарға юрист Гөлсәсәк ТУКТАМЫШЕВА яуап бирә



**Һорау: Айырылышыу өсөн суд ҡарары булыуы йәки ул мөлкәт бүлгән осраҡта ғына кәрәкме?**

**Яуап:** Рәсәй Федерацияһының Ғаилә кодексының 19-сы статьяһының 1-се пунктына ярашлы, ир менән ҡатындың икеһенең дә никахты тарҡатыуға ризалығы булһа, һәм уларҙың 18 йәше тулмаған уртаҡ балалары юҡ икән, айырылышыу мәсьәләһе граждандарлыҡ хәле акттарын теркәү органдары тарафынан хәл ителә.

Никахты өҙөү түбәндәге осраҡтарҙа суд тәртибендә үткәрелә: 1) Рәсәй Федерацияһының Ғаилә кодексының 21-се статьяһының 1-се пунктына ярашлы, әгәр ир менән ҡатындың уртаҡ бәлиғ булмаған балалары булһа, йәки уларҙың береһе никахты өҙөүгә ризалыҡ бирмәһә; 2) Рәсәй Федерацияһының Ғаилә кодексының 21-се статьяһының 2-се пунктына ярашлы, әгәр ир менән ҡатындың береһе никахты өҙөүгә ҡаршы килмәһә лә, граждандарлыҡ хәле акттарын теркәү органында никахты өҙөүҙән ситләшһә (ғариза биреүҙән баш тартһа, никахты өҙөү тураһында дәүләт теркәүенә килмәһә һ.б.).

Шулай уҡ РФ ҒК 20-се статьяһына ярашлы, ир менән ҡатын араһында уртаҡ мөлкәтте бүлешеү тураһындағы, мохтажлыҡ кисергән хеҙмәткә яраҡһыҙ иптәшен тәьмин итеү, шулай уҡ балаларға бәйле низағтар килеп тыуһа, ир менән ҡатындың береһе суд тарафынан хеҙмәткә яраҡһыҙ тип танылһа йәки енәйәт ҡылғаны өсөн 3 йылдан артыҡ срокка ирекле мәхрүм ителһә, никахты өҙөү граждандарлыҡ хәле акттарын теркәү органдарында үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, суд тәртибендә ҡарала.

**Һорау: Ағайым 2 аҙна элек эшкә урынлашты, ләкин уның менән хеҙмәт килешеүе төҙөлмәгән. Был дөрөҫмө? Нисек булырға тейеш?**

**Яуап:** Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексының 67-се статьяһы буйынса хеҙмәт килешеүе яҙма рәүештә ике данала төҙөлә, икеһенә лә эшкә урынлашыусының һәм эш биреүсенең ҡулы ҡуйыла. Хеҙмәт килешеүе яҙма рәүештә төҙөлмәйенсә, эшкә урынлашыусы эш биреүсе йәки уның вәкиле тарафынан йөкмәтелгән эште башҡарһа, ул (хеҙмәт килешеүе) төҙөлгән тип иҫәпләнә. Яңы хеҙмәткәр эш башлағандан алып 3 эш көнө эсендә эш биреүсе уның менән яҙма рәүештә хеҙмәт килешеүе төҙөргә тейеш.

**Һорау: Тәүге юғары белем алғанда предприятие сессия ваҡыты өсөн түләргә тейешме?**

**Яуап:** «Юғары һәм юғары уҡыу йортонан һуңғы профессиональ белем тураһында» Федераль закондың 17-се статьяһының 1-се пунктына һәм Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексының 173-сө статьяһына ярашлы, дәүләт аккредитацияһы булған юғары уҡыу йорттарында, уларҙың ойошторолоу-хоҡуҡи формаһына ҡарамаҫтан, ситтән тороп йәки киске бүлектә уңышлы уҡып йөрөүселәргә аттестация үтеү, сығарылыш-квалификация эшен яҙыу һәм яҡлау, дәүләт имтихандарын тапшырыу өсөн уларҙың эш урынынан уртаса эш хаҡы һаҡланып ҡалған өҫтәмә ял бирелә.

**Һорау: ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре туҡтатып, иҫерек хәлдә булыуҙы асыҡлау өсөн медицина тикшереүе үтеүҙе һоранылар. Мин баш тарттым. Быны өсөн нимә булыуы мөмкин?**

**Яуап:** Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекстың 12.26-сы статьяһының 1-се пунктына ярашлы, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең иҫерек хәлдә булыу/булмауҙы асыҡлау өсөн медицина тикшереүе үтеү тураһындағы законлы талабын үтәмәгән өсөн һеҙҙе йыл ярымдан алып ике йылға тиклем транспорт менән идара итеү хоҡуғынан мәхрүм итеүсе административ яуаплылыҡҡа тарттырыуҙары мөмкин.

# АПРЕЛЬ АЙЫНА ЙОНДОҘНАМӘ

## ҠУҘЫ



Бөтә өлкәлә лә эштәрегеҙ көйлә генә барыр. Әммә үҙегеҙгә артыҡ мәшәҡәт тыуҙырмаҫ өсөн хис-тойғоларығыҙҙы йүгәнләргә тәҡдим ителә. Киләсәккә пландар ҡорған сакта яҡын кешеләрегеҙҙең кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу ҡамасауламаҫ. Дуҫтарығыҙ араһында ла ярҙам ҡулы һуҙырға теләүселәр табылып торор.

## ҠЫҪАЛА



Апрель айында мәшәҡәттәрегеҙ бермә-бер артыр, ахыры. Бурыстарығыҙҙың осона сығыу барлыҡ иғтибарығыҙҙы ла, ваҡытығыҙҙы ла алыр. Әммә ҡаршылыҡтар һеҙҙе ҡурҡытмаһын: яҡындарығыҙҙың ярҙамы менән барыһын да уңышлы йырып сығырһығыҙ.

## БУҒА



Был айҙа аралашыу даирәгеҙ ҡырҡа үҙгәреүе ихтимал. Таныштарығыҙҙың күбеһе һеҙгә үҙ фекерҙәрен тағырға маташыр. Шуға күрә һаҡ булырға тырышығыҙ. Әммә бындай бәйләнештәрҙән байтаҡ файҙалы мәғлүмәт алыу мөмкинлеге лә бар.

## АРЫҪЛАН



Был ай үҙгәрештәр осоро булараҡ хәтерегеҙҙә ҡалыр. Айырыуса мөхәббәт өлкәһенә яңылыҡ инер. Һөйгән кешегеҙ менән бер мөһим мәсьәләне хәл итерһегеҙ. Киләсәккә пландар ҡороу – етди эш, шуға ла ҡарарҙарға иғтибарлы булығыҙ.

## ИГЕҘӘКТӘР



Был ай күп кенә яңы перспективалы пландар һәм мөмкинлектәр килтерер. Ваҡытығыҙҙы бушҡа уҙғармай, уларҙы файҙалы ҡулланыу тураһында ныҡлы уйланығыҙ. Сөнки бындай уңыш һәр саҡ йылмаймай. Финанс мәсьәләлә лә борсолорлоҡ түгел: мул ғына аҡса төшөүе көтөлә.

## ҠЫҘ



Ҡыҙҙар был осорҙа мәсьәләләрҙе теләге буйынса түгел, ә хәл-торошҡа таянып хәл итергә мәжбүр. Шуға ла улар пландарынан бер аҙ тайпылыр. Тик ваҡыт үтеү менән һәр нәмә үҙ урынына ҡайтыр. Йондоҙҙар һеҙгә сабыр булырға кәңәш итә.

ОЙОШТОРОУСЫҺЫ - БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ЭЛЕМТӘ ҺӘМ КИҢ КОММУНИКАЦИЯЛАР МИНИСТРЛЫҒЫ.
УЧРЕДИТЕЛЬ – МИНИСТЕРСТВО СВЯЗИ И МАССОВЫХ КОММУНИКАЦИЙ РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН.

директор-баш мөхәррир
**АЗАМАТ ЮЛДАШБАЕВ**
директор-главный редактор

МӨХӘРРИРИӘТ:
**Гөлнур ҠОЛҺАРИНА**
**Заһир ҠОТЛОСУРИН**
**Рәсүл СӘҒИТОВ**
**Зәки ӘЛИБАЕВ**
**Фирҙәүес ӘХМӘТЙӘНОВА**

www.shonkar.ru.

РЕДАКЦИЯ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ:
**Илшат ЗАРИПОВ** – баш мөхәррир урынбаҫары
**Гөлнара МОСТАФИНА** – яуаплы сәркәтип
**Гөлшат ҠАҺАРМАНОВА** – бүлек мөхәррире
**Ләйсән ШӘРИПОВА** – өлкән мөхәррир
**Шамил ЯУБАҪАРОВ** – өлкән мөхәррир
**Байрас ҠЫУАНДЫҠОВ** – биҙәлеш мөхәррире
**Гүзәл НОҒМАНОВА** – верстка буйынса оператор
**Милә БИЛАЛОВА** – корректор
**Филүзә СӘЛИХОВА** – йыйыу буйынса оператор

**Алина ЗӘЙҘУЛЛИНА** – баш бухгалтер
**Айрат ИСМӘҒИЛЕВ** – водитель

**БЕҘҘЕҢ АДРЕС:**
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, “Шоңҡар” журналы редакцияһы.
**НАШ АДРЕС:**
450001, Республика Башкортостан, город Уфа, проспект Октября, 2.
Редакция журнала “Шонкар”.
**ТЕЛЕФОНДАР:**
27-77-992 – баш мөхәррир,
29-27-763,
27-77-995 – бүлектәр,
29-27-762 – бухгалтерия.
E-mail: Shonkar@ufanet.ru.



## ҮЛСӘҮ



Апрелдә һеҙҙең төп таяныс һәм ышанысығыҙ – ғаиләгеҙ һәм туғандарығыҙ. Уларға мөмкин тиклем күберәк иғтибар бүлергә тырышығыҙ. Һеҙҙең ярҙамығыҙға мохтаж булғандарға ярҙам ҡулы һуҙығыҙ. Буш ваҡытығыҙҙы төрлө файҙалы фәндәр өйрәнеүгә бағышлағыҙ.

## СAЯН



Был ай һеҙгә финанс өлкәһендә ҙур ғына үҙгәреш вәғәҙә итә. Кредит юллау, яңы фатир алыу мәсьәләһе лә, ниндәйҙер яңы бизнесҡа нигеҙ һалыу мөмкинлеге булыуы ла ихтимал. Аҡса һәм ҡағыҙҙар менән эш иткәндә һаҡ булығыҙ, белгестәрҙең кәңәштәрен тыңлау зыян итмәҫ.

## УҠСЫ



Был ай Уҡсыларҙы әүҙем эш алып барырға һәм һаулыҡ тураһында хәстәрлек күрергә өйрәтер. Йәшерен һәләттәрегеҙ асылыуы, йәғни төрлө ҡыҙыҡһыныуығыҙ артыуы ихтимал. Уларҙы үҫтерергә тырышығыҙ. Ай урталарында алыҫтан ҡыҙыҡлы ғына тәкдим ҡабул итеүегеҙ бар.

## ЫЛАҠ



Ғаилә ағзалары менән араларығыҙ киҫкенләшеп китеүе ихтимал. Көтөлмәгән бәхәстәр, мөнәсәбәт асыҡлауҙар, ығы-зығылар тыуып торор. Әүҙем эшмәкәрлек итеү, хеҙмәттәштәрегеҙҙең кәңәштәре был "көрсөк"тө үткәрергә ярҙам итер. Күптән хыялланған ерҙә ял итеп, эшкә көс-көүәт туплап ҡайтыу файҙалы булыр.

## ҺЫУҒОЯР



Әгәр үткән айҙа финанс яҡтан ҡытлыҡ кисерһәгеҙ, апрелдә хәлегеҙ яйланыр. Әммә аҡса муллығына алданып, уны юҡҡа тотонмағыҙ, бәлки уларҙы мөһимерәк әйберҙәргә ҡулланырға кәрәктер? Эш өлкәһендә лә маҡсаттарығыҙға еңел өлгәшерһегеҙ.

## БАЛЫҠ



Балыҡтар өсөн апрель айы – тыныслыҡ мәле. Барлыҡ мәшәҡәттәрегеҙҙе, эштәрегеҙҙе ситкә ҡуйып, ваҡытығыҙҙы үҙегеҙгә бағышлағыҙ. Күптән ниәтләгән планығыҙҙы тормошҡа ашырырға мөмкинлек асылыр.


**БЕҘҘЕҢ РЕКВИЗИТТАР. НАШИ РЕКВИЗИТЫ:**
КП РБ Редакция журнала "Шонкар"
Р/с 40602810600010000123 в Филиале ОАО "УралСиб" в г. Уфа,
БИК 048073770,
К/С 30101810600000000770, ИНН 0278123157,
ОКОНХ 87100, ОКПО 32060535

*Башкортостан Республикаһының "Өфө полиграфия комбинаты" дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.*
*Адресы: 450001, Башкортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.*

*Йыйырға бирелде 01.03.11. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15.03.11.*
*Ҡағыҙ форматы 60х84 1/8. Офсет ысулы менән баҫылды.*
*Шартлы баҫма табаҡ 10. Учетн.-изд. таб. 12. Тиражы 7530 дана.*
*Заказ 2.0034.11.*
*Һатыуҙа хаҡы ирекле.*
*Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан теркәлгән.*
*Теркәү номеры: ПИ № ФС 77-30609.*



**Материалдарҙы ҡулланғанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ.**


*Авторҙарыбыҙға гонорар түләү өсөн түбәндәге мәғлүмәттәр кәрәк:*

*– авторҙың тулы фамилияһы, исеме, атаһының исеме;*
*– почта индексы һәм тулы адресы;*
*– паспорт серияһы, номеры, кем тарафынан һәм ҡасан бирелгән;*
*– тыуған йылы, айы һәм көнө;*
*– социаль номеры;*
*– Дәүләт пенсия фондының страховка таныҡлығы номеры.*

*Әгәр ошо мәғлүмәттәр күрһәтелмәһә, авторҙарға гонорар түләнмәй.*

*Редакцияға тапшырылған материалдарға һәм ҡульяҙмаларға рецензия бирелмәй, улар авторға кире ҡайтарылмай. Башҡа баҫмаларҙа донъя күргән йәки уларға тапшырылған материалдар ҡабул ителмәй.*


Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# ЙӘШЕРЕН ТЕЛ

СОВЕТ ОСОРОНДА КЕШЕГӘ ҠЫЛЫҠҺЫРЛАМА ЯҘЫУ БАР ИНЕ. ТӘҮ ҠАРАШҠА УЛАР БАРЫҺЫ ЛА БЕР ТӨРЛӨ ҺҮҘҘӘРҘӘН ТӨҘӨЛГӘН КЕҮЕК ТОЙОЛА. ӘММӘ УНЫ ЯҘЫУСЫЛАР ҺӘМ ҠАБУЛ ИТЕП АЛЫУСЫЛАР УЛ ҺҮҘҘӘРҘӘН БӨТӨНЛӘЙ ИКЕНСЕ МӘҒӘНӘ ТАПҠАН. БЫНА ҠАЙҺЫ БЕРҘӘРЕ:

"БАР КӨСӨН ҺАЛЫП ЭШЛӘНЕ", ЙӘҒНИ ТЫРЫШТЫ, ӘММӘ ҺӘЛӘТЕ ЮҠ.

"ЕТӘКСЕЛЕК УНЫҢ ЭШЕНӘН ҠӘНӘҒӘТ ИНЕ" – ЭШ ҺӨҘӨМТӘҺЕ УРТАСА ҒЫНА.

"ҺӘР ҠУШЫЛҒАН ЭШКӘ БАР КӨСӨН ҺАЛДЫ" – ЭШЕНЕҢ ҺӨҘӨМТӘҺЕ БУЛМАНЫ.

"ҺӨНӘРИ БЕЛЕМЕ БАР, ҮҘ-ҮҘЕНӘ НЫҠ ЫШАНА" – БЕЛЕМЕ ЮҠ, ӘММӘ ТАУЫШЫ КҮП.

"БЕҘ УНЫҢ ТЫРЫШЛЫҠТАРЫН ЮҒАРЫ БАҺАЛАНЫҠ" – КАРЬЕРА АРТЫНАН ҠЫУҘЫ.

"ЕТӘКСЕЛЕК МЕНӘН ЯҠШЫ МӨНӘСӘБӘТ БУЛДЫРЫРҒА ТЫРЫШТЫ" – ЯЛАҒАЙ ИНЕ.

"АРАЛАШЫУСАН, ХЕҘМӘТТӘШТӘРЕНЕҢ ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ БУЛДЫ" – ЭСКЕСЕ, ЭШ ВАҠЫТЫНДА ЮҠ-БАР ҺӨЙЛӘП, ЛӘСТИТ ҺАТЫП ЙӨРӨНӨ.

"ИКЕ ЯҠТЫҢ ДА РИЗАЛЫҒЫ МЕНӘН КИТӘ" – БЕҘ УНЫ ЭШТӘН ҠЫУҘЫҠ.




шоңкар

* * *

Универсаль әйберҙәр күрһәтеү буйынса халык-ара конкурс бара.

Американдар үҙҙәренең борсактарын тәкдим итә: "Генетик яктан камиллаштырылған был үсемлектән беҙ теләһә нәмә яһай алабыҙ: ит, икмәк, тәм-том..."

Японлар суперполимерҙарын күрһәтә: "Был полимерҙан беҙ теләһә нәмә яһай алабыҙ: тукыма, ағас, корос, керамика..."

Урыҫтар өҫтәлгә бер шешә аракы сығарып куя.

- Һеҙ бынан нимә яһайһығыҙ?

- Бынан берәй нәмә килтереп сығарыу икеле, әммә беҙ уның үҙен теләһә нәмәнән яһайбыҙ.

* * *

Укытыусы балаларға ғибрәт һөйләй:

- Бер малай тәртипһеҙләнгән, ата-әсәһенең һүҙен тыңламаған. Хоҙай уға шуның өсөн яза ебәргән: ул һукырайған. Унан поезд аҫтына эләккән һәм ике аяғын өҙҙәргән. Шуның менән уның ғазапланыуҙары бөткән тиһегеҙме? Юк! Уны әрмегә алып киткәндәр!

* * *

- Ҡулынан бер ниндәй ҙә эш килмәгән катын-кыҙ фәхишәлек юлынан китә.

Ҡулынан бер ниндәй ҙә эш килмәгән ир-ат карауылсы булып урынлаша.

- Ә ни эшләп?

- Сөнки был ике һөнәрҙең дә асылы йоклаған өсөн акса алыуға кайтып кала.

* * *

Ике йәһүд балык ашап ултыра. Береһе үҙенә ҙур кисәкте ала, ә иптәшенә бәләкәйерәкте һала. Тегеһе үпкәләп:

- Һинең урынында булһам, мин һиңә – ҙур кисәкте, ә үҙемә бәләкәйерәген һалыр инем.

- Бәй! Күҙеңде асыбырак кара – бәләкәйерәк кисәк бит инде алдыңда!

# СКАНВОРД


1

Мал шалканы

Йылҡы малының тук эсәге

Йәрәхәтләнеү күрһәткесе

Синтетик туҡыма


2

Түбырсыҡлы урман

Дәүер

А. Саврасов ҡошо

Йорт бөжәге

Һауыт

Ҡәҙер

3

Ҡолаҡ алыу

Аттың тимер «тырнағы»

Сәй ҡалағы

Һаран ...нан туймаҫ

Сәсәләр

4

Айғыр менән ишәк балаһы

2

1

2

5

Һөт аҙығы

1 апрель – Халыҡ-ара ҡоштар көнө


3

«Шоңҡар» №2, 54-се бит

5

Сәскә, исем

«Урал батыр»

Ҡараптар һөйрәгән ау

Мөйөштө ҡап ур-талай бүлгән һыҙыҡ

Дыуан районындағы ауыл

Бүлмә гөлө

Ҡарашын үҙгәртеп дошман яғына сығыусы

Ауыҙлыҡһыҙ йүгән

Һандуғас ҡунған ағас

Ҡесе медицина хеҙмәткәре

Оҙон мөгөҙлө антилопа

Ергә хаҙып эшләнгән мал оҙаһы

Майлы үҫемлек

Орден

Нәсеңдән күсә килгән ерҙән хужаһы

Инерт газ

Небоскреб машинаһы

Төшәнә тары инә

Ҡултамға

Яҙа-һалым

Йәнлек

Хәрби хеҙмәткәрҙең рәсми яҙмаһы

1

Ауылдан ситтә торған хужалыҡ

Һөт эсемлеге

Затлы тире-ле йәнлек

... ҡубыу - пыр туҙҙырыу

4

4

Ньютондың авторҙаш емеше

«Һуңғы адрес»

Тайм


4

Туҙ майы

3 (инәһе)

Музыкаль интервал

Муйындың артҡы өлөшө

Ағас

Тәртип

Ҡуяндың өйөн ҡай-тарып биреүсе

Дипломаттың дипломаты


5

Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

## ҮТКӘН ҺАНДАҒЫ СКАНВОРД ЯУАПТАРЫ:

**Горизонталь буйынса:** Гладиатор. Стереометрия. Хәнйәр. Әпсен. Мейес. Равиоли. Самбо. Дәүләкән. Чукча. Гастроном. Мамба. Янғантау. Оро. Аҡын. Рәт. Арматура. Кинотеатр. Оҫкон. Аквариум. Чабан. Дәрт. Люстра. Рикошет. Латвия. Яҙыусы. Ҡатырға. Бирт. Абдуллин. Эклер. Бамбук. Йыназа. Европа. Руль.

**Вертикаль буйынса:** Омск. Ресторан. Тоткон. Икона. Дары. Ҡура. Саха. Мичман. Ранет. Орбакайте. Герой. Татар. Рәссам. Дума. Бала. Әләм. Алабуға. Метр. Терисихора. Трал. Ниндзя. Астма. Никель. Негр. Көньяк. Мотив. Луанда. Асбет. Тамыр. Тату. Ихтыяр. Ургант. Медуза.

шоңқар

Индексы 73867
ISSN 2220-8437
9 772220 843026

